# Ағиҙел

**Өфө,**
**декабрь**
**2013**

**12(1088)**

ӘҘӘБИ-НӘФИСҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева,Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 04.12. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 012 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0195.13.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2013 (12,1088)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Рауил Бикбаев.** Минең быуын. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................5
**Мәхмүт Һибәт.** Сағыу балҡыш йәки актер. Ш и ғ ы р ҙ а р . ............10
**Сәлмән Яҡупов.** Мисәт. Ш и ғ ы р ҙ а р . ...........................................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Әлнисә Алдырханова.** Ҡойон. П о в е с т ь . ...................................27
**Мәүлиҙә Әхмәтйәнова.** Аяҡһыҙ ҡартҡа аҡ эшләпә. Х и к ә й ә . ......71

*Башҡортостандың халыҡ шағиры **Рауил БИКБАЕВҠА** – 75 йәш*

ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Наил Ғәйетбай.** Өҙөк-йолҡоҡ хәтирәләр. *Дауамы.* .......................107

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Зәки Әлибаев.** Ҡырҡтытау йәшмәләренең балҡышы. ..................134
**Миңлегөл Тайсина.** Башҡорт шиғриәтендә әйтеш. .......................138

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Фәнил Күзбәков.** Мөхәмәтша Буранғолов драматургияһында милли фәлсәфә *(тыуыуына 125 йыл тулыуға ҡарата).* ...............141

ПУБЛИЦИСТИКА

**Салауат Хөсәйенов.** Егәрле публицист *(Мәхмүт Хужин ижады хаҡында).* ................................................148

*“Ағиҙел” ҡунағы*

**Хәбир Дауытов, Вәли Байморатов.** Киләсәкте яҡшыға юрайыҡ! *(Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Ф. М. Мусин менән әңгәмә.)* ..........................................................................................157

ШИШМӘЛӘР

**Ҡарлуғас Ишемғолова.** Ҡырағай йән. Ш и ғ ы р ҙ а р . .................161
**Әлфидә Ҡансурина.** Шағир-иҫәр. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................163
**Зимфира Әбушахманова.** Ҡайтыу. Ш и ғ ы р ҙ а р . .......................166

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Әсғәт Нуретдинов.** Әсә күңеле. Ш и ғ ы р ҙ а р . .............................171

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

“АҒИҘЕЛ” ЖУРНАЛЫНЫҢ 2013 ЙЫЛҒЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

“АҒИҘЕЛ” ЖУРНАЛЫНЫҢ 2013 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Р. Бикбаев, Махмут Хибат, С. Якупов.** *Стихи.*

ПРОЗА

**А. Алдырханова.** Смерчь. Повесть.
**М. Ахметьянова.** Шляпа хромого старика. *Рассказ.*

*75 лет народному поэту Башкортостана **Равилю БИКБАЕВУ***

ЭТО — СУДЬБА

**Наиль Гаитбай.** Отрывки из воспоминаний. *Продолжение.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**З. Алибаев**. Сияние яшм гор Краки.
**М. Тайсина.** Состязание сэсенов в башкирской литературе.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Ф. Кузбеков.** Национальная философия в драматургии
Мухаметши Бурангулова *(к 125-летию со дня рождения).*

ПУБЛИЦИСТИКА

**С. Хусаинов.** Плодотворный публицист
*(о творчестве Махмута Хужина).*

ГОСТЬ «АГИДЕЛИ»

**Х. Даутов, В. Баймуратов.** С надеждой на будущее
*(беседа с главой администрации Кугарчинского района Ф. М. Мусиным).*

РОДНИКИ

**К. Ишемгулова, А. Кансурина, З. Абушахманова.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**А. Нуретдинов.** Светлая душа матери. *Стихи.*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛАУРЕАТЫ ЖУРНАЛА «АГИДЕЛЬ» 2013 ГОДА

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Рауил
БИКБАЕВ

## *Минең быуын*

*Яҙмыш мине күпме ымһындырҙы.*
*Өмөт-хыялымды һындырҙы.*
*Сабый саҡтан асҡа ҡаҡланы ла*
*Йәшлек юлдарымда туңдырҙы.*

*Еңелме ни донъяң емерелеү*
*Әле яңы ҡанат киргәндә?*
*Шул саҡтарҙа, беҙ — алданған быуын,*
*Беҙ — юғалған быуын, тигәндәр.*

*Тиҫтерҙәрем менән бәләкәстән*
*Күпте күрҙек. Башты эймәнек.*
*Һис ҡасан да, беҙ — алданған быуын,*
*Беҙ — юғалған быуын, тимәнек.*

*Нисәмә ҡат ҡанат ҡайырылды.*
*Нисәмә ҡат ирек быуылды.*
*Тик әйтмәнек:*
*«Беҙ — алданған быуын».*
*Тик әйтмәнек:*
*«Беҙ — юғалған быуын...»*
*Хурландырыр, ғәрләндерер ине*
*Бындай һүҙҙәр минең быуынды.*

*Һынауҙарҙы үттек.*
*Бер кемдән дә*
*Кәм булманыҡ, өҫтөн булманыҡ.*
*Ярлы булдыҡ, әммә йырлы булдыҡ.*
*Етем булдыҡ, меҫкен булманыҡ.*

*Күп алдандыҡ, үҙебеҙ алдаманыҡ.*
*Тормош беҙҙе шулай үҫтерҙе.*
*Күп юғалттыҡ, үҙебеҙ юғалманыҡ.*
*Тамғаһы бар минең тиҫтерҙең!*

*Беҙ китербеҙ.*
*Вариҫ рухташтарым,*
*Эштәрегеҙ ҡот өҫтәһен йортҡа.*
*Гөрләп үтһен байрам-туйығыҙ.*
*Ҡулыбыҙҙың йылыһы барып етмәҫ,*
*Барып етһен ине үйыбыҙ.*

***

*Һиҫкәндермәсе, һары көҙ,*
*Ғүмер бара, тип, үҙып.*
*Миңә ерҙең һәр миҙгелен*
*Ҡыҙырыуҙары ҡыҙыҡ.*

*Шауҙырлап ҡойола япраҡ.*
*Донъяның кәмей йәме.*
*Бошонма!*
*Шау япраҡ булып*
*Шаулар урмандар йәйен.*

*Һәр мәлдең үҙ балҡыштары*
*Яңы йәм өҫтәй ергә.*
*Рәхмәт, Аллам,*
*Ошо йәмде*
*Насип иттең күрергә.*

***

*Бәхет менән бәхетһеҙлек шундай —*
*Килеп инә бикле ишектән.*
*Уларҙы бит күҙһеҙҙәр ҙә күрә,*
*Һаңғырау ҙа хатта ишетә.*

*Кеше еңеп сыҡмаҫ даръялар юҡ,*
*Ҡаялар юҡ менеп етмәҫлек.*

*Бәхет янда ъына —*
*Яҙмаъастын*
*Асыҡ ишектән дә үтмәҫлек.*

***

*Миңә яҙъан тормош карабымда*
*Юлыҡманым ниндәй мәлдәргә!*
*Үтте карап ҡара дауылдарҙы,*
*Иркәләнде наҙлы елдәргә.*

*Елкәндәрем берсә ҡанат була,*
*Берсә шартлап өҙөлә. Йән өшөй!*
*Күпме ҡабырсаҡтар арта бара,*
*Борттарыма һөмһөҙ йәбешеп.*

*Йәшәү рәүештәре шул булһа ла,*
*Бигерәк артыҡ йөк был ҡабырсаҡ*
*Бәлә-ъәйбәт һаман тыуҙырасаҡ.*
*Борттарымдан барыһын һелкеп ташлап,*
*Килерме бер тынъы табыр саҡ?*

*Аулаҡ порттар әле эҙләмәйем.*
*Офоҡтарҙа һаман өмөтөм.*
*Ҡабырсаҡтар йәбешер...*
*Ни ҡылаһың?*
*Уларъа ла кәрәк көн итеү.*

***

*Ғүмеремдә мин беренсе тапҡыр*
*Уяндым был серле доъаъа.*
*Истамбулда таң һыҙылып килә,*
*Һауаларъа тулып моң аъа.*

*Аҙан ауазынан башланъан көн*
*Ғүмеремдә әле тәүгеһе.*
*Береһе янда ъына тауыш бирә,*
*Алыҫтарҙан килә тегеһе.*

*Саҡыралар күпме манаралар!*
*Таң нурына аҙан моң сиккән.*
*Бар ҡаланы сорнап арбар ауаз*
*Аъыла нисәмә мең мәсеттән.*

*Был илаһи мәлдә иман моңон*
*Хайран ҡалып тыңлап торғаным.*
*Сәйер донъя.*
*Ерҙең һәр тарафы*
*Үҙ яйына тормош ҡорғаны.*

*Юлдар үттем.*
*Байтаҡ илдәр күрҙем —*
*Күп оҡшашлыҡ.*
*Күп айырмаһы.*
*Истамбулда — мәсет манараһы.*
*Өфөләрҙә — завод торбаһы.*

*Башҡортостан күгенә генә түгел,*
*Ағыу һеңде рухҡа, иманға.*
*Ҡоромланған, ләкин ҡоромаған.*
*Иманына халҡым инанған.*

*Динебеҙ ҡайта.*
*Манаралар ҡалҡа,*
*Булмаһа ла бик үк бейектән.*
*Нисек төҙөлһә лә,*
*Мәсеттәрҙең*
*Маҡсаттары уртаҡ, бөйөктәр.*

*Истамбулдың меңәр манараһы,*
*Мәғрур мәсеттәре Шәреҡтең!*
*Һоҡланып та һеҙгә, табынып та*
*Күпме илдә күпме юл үттем.*

*Тик барыбер ғәзизерәк миңә*
*Ауылымдың кескәй генә мәсете.*
*Саҡ-саҡ ҡалҡып торған манара.*
*Изге йортҡа бында тәү ҡат инер*
*Өмөтөбөҙ — сабый балалар.*

***

*Йылдың сәскә атҡан мәле,*
*Ҡыштарҙың ҡауышҡаны,*
*Һайрауҙары өтөп алмай,*
*Ят булғас тауыштары.*
*Исемдәрен дә белмәгәс,*

*Ҡылыҡын аңламаҡас,*
*Сәйер бында ҡыуаҡтар ҙа.*
*Сит-ят һымаҡ алмаҡас.*

*Ярһып һайраҡан һандуҡас*
*Йөрәгемде елкетмәй.*
*Ташалыр төрөк һаҡышы,*
*Тик башҡорт моңо етмәй.*

*Ят яҡтарҙы аңлау өсөн,*
*Күрәһең, кәрәк белеү*
*Милләт телен генә түгел,*
*Тәбиғәтенең телен.*

***

*Күпме йәшәлде. Бөгөн дә*
*Самаҡа килмәй самам:*
*Кешеләр ныҡыраҡ алдай,*
*Ә мин һаман ышанам.*

***

*Бәрәүҙәргә иң изгеһе — ғибәҙәттер.*
*Икенсегә ғәйбәт сәйнәү төп ғәҙәттер.*

***

*Тыуым менән үлем сиктәрендә*
*Бирелгәндер беҙгә был ваҡыт.*
*Тыуымдарҙы көсләп туҡтатһаң да,*
*Үлемдәрҙе булмай туҡтатып.*

***

*Һин белеп ҡуй шуны мәгәр:*
*Ғәйбәт — радиоактив хәбәр.*

***

*Аҡыллы үҙен аҡыллы тимәҫ,*
*Иҫәр үҙен иҫәрмен тимәҫ.*

***

*Һин тыуҡанда барыһы ҡыуанды,*
*Һин үлгәндә барыһы ҡайҡырһын.*



**Мәхмүт**
**ҺИБӘТ**

## *Сағыу балҡыш йәки актер*

Хәмит Шәмсетдиновҡа

*Сәме Асылыкүлгә,*
*Йәне-ҡаны Мәрҙәнгә,*
*Сая Заятүләккә*
*Оҡшап тыуған бала ул,*
*Хисе уның, ғәйрәте,*
*Зауҡы — үҙе бағауыл:*
*Ил таңы имеңлегеҙ,*
*Көн иңе үрен-йәмен*
*Һаҡлап баҫҡан бағауыл,*
*Тойғо уғы, ана, ул,*
*Офоҡтағы сер мәле,*
*Йәшен тубы, ана, ул!..*

*Ошо — бер көс түгелме,*
*Дер һелкеткес түгелме?*
*Ғәмһеҙ, ғәфләт йоҡоһон,*

---

*Мәхмүт Һибәттең (1936) лирик-философик шиғырҙарын, поэмаларын, «Бәндәбикә менән Ерәнсә», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Тәфтиләү», «Тәңре төнө», «Яңғыҙ ҡояш» ише трагедия һәм драмаларын, «Алпамыша» дастанын әҙәбиәт һөйөүселәр ятып ҡабул итте. Һайланма әҫәрҙәренең беренсе томы донъя күрҙе. Ул — байтаҡ хикәйәләр, әҙәби һәм публицистик мәҡәләләр авторы ла.*

*Ямандың сит саткыһын,*
*Ялғандың ят яктыһын?*

*Асылыкүл асылы,*
*Заятүләктәр юлы*
*Юйылмаған изге ер*
*Тыуҙырғанға был бала —*
*Ил ғәмендәй таң, ана,*
*Сәхнә балҡыған, ана,*
*Ҡөҙрәт, хис туйы — алда.*

## Иңләгән ғаләмем

*Хис бөркөр һүҙҙе мин канатым,*
*Ҡанатым итергә теләнем.*
*Шуға ла үрҙәргә йыш калктым,*
*Ил иңе булды тик ғаләмем.*

*Ил эсе ҡайнатты үҙендә,*
*Ҡайнатты хисенең үрендә.*
*Үрҙә юк ҡанатһыҙ бер ни ҙә,*
*Урын юк үрткә ил түрендә.*

*Ек-урын юк үрҙә ялғанға,*
*Упҡындар ғына үҙ йыланға.*
*Һәр һүҙгә мин ҡанат эҙләнем,*
*Ил булды иңләгән ғаләмем.*

## Ир йөрәге

Йәркәй Ғәбделхәй улы Теләүбирҙинға

*Йәркәй тигән исемде һиң баҙығайттың*
*Йәшәүеңдең нуры менән. Аҙаҡ ҡайттың*
*Ата-баба зыяратына. — Аҡһарыҡтың*
*Тулҡыны һин, юҡтыр көнөң ҡәберҙәге.*

*Теләк үлмәй: йүн-яҡшылыҡ, ҡот-йәм теләү,*
*Йәмең кеүек ҡырмыҫҡалар ҡорған иләү,*
*Тере тупраҡ ҡатламында бара түлләү, —*
*Бешкән, ана, ҡәбереңдә ер еләге.*

*Һинең кеүек үре ҡалмай шул тарлыҡтың,*
*Аҡһарыҡтан килгән моңдай, һин — барлыҡһың.*
*Бешкән, ана, ҡәбереңдә ер еләге,*
*Мин бит, ти ул, өҫкә ҡалҡҡан ир йөрәге.*

* * *

*Аҡҡондоҙҙан Йылайырға табан үтәм. Зыярат:*
*Бәсен аса унда ла мәл үре, бармай ҡыйрап.*
*Йәшәүебеҙҙәй, унда бер ни ҙә түгел ялған.*
*Ғаләмшә инәйем дә ошо ғаләмдә йәшәп,*
*Үҙенә әжәл язаһын түгел, сер тынлығын,*
*Шунда һеңгәндәрҙең нурлы ризалығын алған.*

## Мәңгелеккә китеп барам

Йырсы Әлфис Ҡыямовҡа

*Офоҡтарҙан, шуҡтарҙан йыраҡая бара арам,*
*Ҡурылғандай һыҙлай ярам.*
*Үлмәйенсә, аумай ҡалырға минең юҡтыр сарам,*
*Йондоҙ менән кәңәш ҡорам.*

*Төнгө йондоҙ, һинең кеүегерәк бейектә янып*
*Ҡала алырмы йырҙарым?*
*Ваҡыт ҡуйыр миңә бына-быйна офоҡто ябып,*
*Булманы уға зарым.*

*Ысынды йәшәнем мин, һинең кеүек тик ысынды,*
*Ана, метеорит янды,*
*Ул ваҡыт-мәл, йәшәү-яныу серенән ысҡынды,*
*Үле ҡаршыларға таңды.*

*Донъяла йәнем гел булды сәмдәй, ҡанатлы аттай,*
*Сәм-ҡанатҡа таң да хайран!*
*Балтик таңынан Етегәнгә осҡан Салауаттай,*
*Мәңгелеккә китеп барам.*

*Йәшәлгәнде барлаһам да, уйыма, хискә йыйнап,*
*Ул — ут, сәсрәгән, юҡ сарам.*
*Мин бер һөйөү йырын йырлап, ил хаҡында уйлап,*
*Мәңгелеккә китеп барам.*

*Ошо һуңғы юлымдың да офоғон быуып, һытып,*
*Һыҙлай ярам. Сыҙау — сарам.*
*Мин бар заман зарын йотоп, иблистәргә ләғнәт уҡып,*
*Мәңгелеккә китеп барам...*

## *Хәким туғанға*

*Ҡарабаштың ҡара ерек үҫкән*
*Яҡты тупрағында тыуҙыңмы?*
*Шулайҙыр, тим! «Көҙҙәребеҙ еткән,*
*Күр, туғанҡай», — тип ҡул һуҙҙыңмы?*

*Йәнеңдәге сабыр хистәреңде*
*Бүләк иттең көнгә, миңә лә.*
*Йылдарыңда шуға хәстәр еңде,*
*Ир хәстәре илгә тиңәлә.*

*Йәшәү йөгөн, отоп ер ташынан,*
*Күтәреүсе булдың гел-гел һин.*
*Бергә атлар йәнкәй-юлдашыңдан*
*Иртә мәхрүм ҡалып, бөлдөң һин.*

*«Ҡара ерektәрем, йә, теүәлме?*
*Һәр ырыҫы ерҙең именме?» —*
*Тиһең кеүек. Ейәнсәрең йәлме,*
*Әрнеп көйрәгәндә еңелме?*

*Оло һорауҙарҙы үҙ-үҙеңә*
*Ниңә хәҙер ҡат-ҡат бирәһең?*
*Эстән хайран ҡалам түҙемеңә,*
*Йәнең мираҫы шул, күрәһең.*

* * *

*Тып-тын ғына талғын ҡарҙар яуа,*
*Ҡарҙар яуа тауҙар илендә.*
*Сафлыҡ аҡлығы ул, тумалалыр*
*Ошо тын тантана мәлендә.*

*Донъяға ул, күркен бүләк итеп,*
*Һибә моңон, хискә — сағыулыҡ.*
*Сиккә еткән, ҡатҡан, һыҡҡан мәлдәр*
*Язаһылыр — үткән шау түңлыҡ.*

*Мәл ҡөҙрәте — күктән, ерҙән йәнә,*
*Беҙҙән дә ул, хистәр йәменән.*
*Аҡ хисебеҙ саф ҡар булып яуа*
*Күк үренең ғәшиҡ мәленән.*

*Һинең мәлең, минең мәлем бергә,*
*Бергә ҡауышҡан был ололоҡ.*
*Ер иңенең ризалығын алып,*
*Сергә сер ҡушҡан был тулылыҡ.*

*Йөҙө уның — көләс, ғәләмебеҙ*
*Һөйкөмлөлөр шуға, имлелер.*
*Ғашиҡ яҡтыртҡан күк — үр-илебеҙ,*
*Был аҡ серҙәр мәлен ни еңер?!*

## Һине һөйөү

*Йәнем хистәренең көсө ҡатмай,*
*Һине һөйөр үрем — мең төҫлө.*
*Ҡырыҫ ғорурлығың иҫ юғалтмай,*
*Сер-мөғжизә менән тиң көслө.*

*Асылыма минең һин һеңгәнһең,*
*Беҙ — бер бөтөн, шулай тоямын.*
*Ят наҙ ғәләмендә илергәнмен*
*Сәскәң ҡойғанынса ҡыяғын.*

*Тик һәр таңың һинең — үҙе балҡыу*
*Таж шикелле, тиңһеҙ арбауҙыр.*
*Һине һөйөү — ерҙән үргә ҡалҡыу,*
*Ти был йәнем. Үр, һин — аяуҙыр.*

*Аяу ғына теләйме ни күңел,*
*Үҙем тат-дәрт булам тип янам*
*Йәнеңдәге һинең. Эй, һөйөклөм,*
*Ошо яныу утын ит Аллаң.*

## Мин йырлайым

*Ерҙә яралған йәнемде*
*Бөйөк киңлек — Йыһан тартты.*
*Ғашиҡ түгелдәр йәл инде:*
*Хәтерләтте хәлһеҙ ҡартты.*

*Ерҙә яралған йәнемде*
*Мөхәббәтем итте нурҙай:*
*Ҡанатлылыр һәр мәл инде,*
*Сәмем түгел юйылырҙай.*

Ерҙә яралған йәнемде
Гүргә нисек һыйҙырайым?!
Ғашиҡ түгелдәр йәл инде,
Ти  таңым да. Мин йырлайым.

Мин йырлайым, берләшкәндәй,
Таң менән, ғәләм менән
Бер үк йырҙы. Сер үҫкәндәй,
Йыр ҙа сар арбай белгән!

* * *

Мин ҡалдырған ғәләм иңендә
Таңдар мөғжизәһе һүрелһә,
Эңерҙәрҙең сихри өнөндә
Тыуыр нур тынлыҡҡа күмелһә, –

Минең йөрәгемдән ағылған
Ғашиҡ уты етмәй, белегеҙ.
Ғашиҡ уты – моң ул яғылған
Һәр йәнгә лә. Һөйһөн йәнегеҙ.

Һөйөп йәшәү – үлмәй йәшәүҙер,
Баҙыҡ таңдар, серҙәр шикелле.
Ер, Күк, Ғашиҡ – улар өсәүҙер,
Бер-беренә оҡшаш, иш йөҙлө.

Ер, Күк, Ғашиҡ. Ғашиҡ етмәһә,
Ғәләм тоноҡланып, тарайыр.
Ян, йөрәгем, янып, һип йәнә
Ғашиҡ утын. Үрҙәр һорай йыр.

## Ҡояшһыҙ йәндәр

Мәлдәрем – шөбһә, һыҙлана
Хисем нурҙары туңып.
Ерҙе упҡынға ҡыҫтаны,
Ҡояшһыҙ йәндәр тулып.

Ҡояшһыҙ йән – сыуаҡһыҙ сәм,
Йыһанымды ла ҡура,
Һәр һулышыма әжәл дә
Ҡыла алмаҫты ҡыла.

*Үр бөгөлдө, сер төңөлдө,*
*Һәр ни шөбһәле, тып-тын.*
*Һәр эңер — бөткән ғүмерҙәй,*
*Һәр төн — офоҡһоҙ упҡын.*

*Таң һыҙлана, тик ҡуҙлана,*
*Ҡуҙлана йәнен ҡурып.*
*Ерҙе упҡынға ҡыҫтаны,*
*Ҡояшһыҙ йәндәр тулып.*

* * *

*Ғәйепһеҙгә ғазап яуа,*
*Күктән бәргән шикелле.*
*Мин йәшәгән донъя — ғауға,*
*Ғибрәтле төш шикелле.*

*Ғәйепһеҙгә ғазап яуа,*
*Ғазап тейеш гонаһҡа.*
*Аҡ нурҙарҙан тыуған хисем*
*Сүгә алмай гел аҫҡа.*

* * *

*Көн дә үлем өҫкә сыҡһа,*
*Йәне илдең өңөлә.*
*Өңөлмә, йәнем, төңөлмә,*
*Яҙаларҙан еңелмә.*

*«Йәшәйһе бар хис, һүҙ нурын*
*Ғаләмдәргә еткереп», —*
*Шулай тиеп ян һин, йырым,*
*Аумай бит моң, хис сереп.*

## ***Йәшәүсе – һиндер, ғашиҡ***

*Донъя ғүмерен оҙайтып*
*Йәшәүсе — һиндер, ғашиҡ.*
*Офоҡ аҫҡа ауып бара,*
*Үренә мендер, ғашиҡ.*

*Тулҡын моңо туңып бара,*
*Ҡайнар нур балҡыт, ғашиҡ.*
*Кешеләрҙе күтәреүсе*
*Ерҙә бул таң-ут, ғашиҡ.*

*Үҙемә мин шулай тимен,*
*Өлкәнлек, сиген, тимен.*
*Ынтылыш, хис йәштәме ни,*
*Йәш дәрт ҡалдырыр түлмен.*

* * *

Гөлсөм Хәбибуллинаға

*Балыҡ кеүек тулап, һин һыу индең,*
*Димеңдә лә шулай йөҙҙөңмө?*
*Тулҡындарҙың наҙлы йомшаҡлығын*
*Бөтә йәнең менән һиҙҙеңме?*

*О, Салауат булһа ошо мәлдә,*
*Ғашиҡ булыр ине ул янып,*
*Эргәңә ул ҡуҙҙай сумыр ине,*
*Һәм һыу ҡайнар ине алланып!*

*Тик мин генә инем бары ярҙа,*
*Ниндәй хисмендер мин йәнеңә?..*
*Ағиҙелдең алыҫ яры инең,*
*Һәм алыҫы моң инем йәйеңә.*

*Алтын балыҡ сере арбайҙармы, —*
*Һыуһылыуҙай, төшкә керһәң.*
*Аҡ тулҡынға ҡарап йырла йырҙы,*
*Аһәң үрелер бит йөрәгең!..*

## *Инсур Йәһүҙиндең миңә өндәшкәне*

*Баҙал өҫтөнән бер осоп*
*Үтәйем, тине, йәнем.*
*Күремен, тине, һағынған*
*Күл урамының йәмен.*

*Ул йәм — беҙҙең шишмәбеҙ ҙә*
*Йәшәү илһамы ине.*
*Йәшәүебеҙ, Баҙал һымаҡ,*
*Ҙур моң донъяһы ине.*

*Йәшәүебеҙ ҡаяларҙа*
*Тыуған таң нуры ине.*
*Хисебеҙҙе ғаләм иткән*
*Сихри һүҙ ҡуры ине.*

Шундай ҙурлыҡ ғаләмен дә
Ҡалдырып бит киткәнбеҙ.
Хәйер, донъя кемдән ҡалмай,
Ергә, сергә күскәнбеҙ.

Шулдыр, бәлки, олуғ донъя
Ҡабул итмәҫ ҙур ҡаза?
Ҡул урамым, йәшәрә бар,
Бит беҙ — баҙал, ур таҙа.

Һеҙҙе лә күк бейегендә
Ихлас күңелеҙ күтһөн,
Төндә, йондоҙ бейегәндә,
Ғашиҡ хисегеҙ етһен.

Ғашиҡ хисе биҙәй генә,
Йәшәмәнек күс менән.
Шишмәм миңә моңон һона,
Бөркөт нур һона урҙән!

* * *

Йылдарым — яза ғазабы,
Юҡмы уның аҙағы?
Шулай иңрәп төбәлгәнмен
Тын шәүләңә Айҙағы.

Ғазабымдың сере бит — һин,
Тамуғымдың төбө лә,
Йәмем урена һин бикһең,
Тере көйө күмеләм.

Язасыны мин һөйәмме
Ғүмерем буйы түҙеп?
Ҡуптарылған мин һөйәнме,
Тамырынан уҡ өҙөп?

Тамуҡ өҫтөн ай биҙәмәҫ,
Төшөрәм уны онтап! —
Ожмах төҙөрбөҙ һин килгәс,
Йәшәмәм бүтән һыҡтап.

* * *

*Атайҙың ике ғүмерен*
*Йәшәргә яҙған миңә.*
*Беләм: ваҡыт — бик өлгөрөм,*
*Сослоғоң ғына еңә.*

*Хәстәрең генә — тәрәгең.*
*Ғүмер башҡаса — буш сер.*
*Атайҙың ике ғүмере —*
*Ғүмерем. Йән ул — хис-үр.*

## Өлкәр

*Өлкәрҙең бер йондоҙо,*
*Бер йондоҙо атылды.*
*Юғалттым тотош йоҡомдо,*
*Төнгө сарҙай татымды.*

*Күрке кәмене Өлкәрҙең.*
*Һүтелде, ғүмер, елкәнең.*
*Ҡалған йондоҙҙар тетрәне,*
*Тойманы ҡылған ел тәмен.*

*Тыуғайны Ерҙә... үле таң.*
*Тетелде, эңер, сер-үрең.*
*Мин, — гүйә, шәүләмен осҡан,*
*Ауһам, эҙһеҙ серермен.*

*Өлкәр, һинең кителеүең —*
*Кителеүе ғаләмдең.*
*Кителеүе ғүмеремдең*
*Һәм сәсрәүе... үләндең.*

*Өлкәр, Өлкәр... Һинме тетрәр,*
*Тоноҡланыр бейеклек,*
*Шомо һыҙыр үр донъяһы?*
*Ҡалырмы алда тере күк?*



**Сәлмән**
**ЯҠУПОВ**

## *Мисәт*

*Ҡуйылған мисәт музейҙа:*
*Бәләкәй. Матур ғына.*
*Һоҡланғыс бер тәтәй кеүек,*
*Йөҙ-башы ялтыр ғына.*

*Шаярышып үтә йәштәр,*
*Өлкәндәр — оҙаҡ тора.*
*Үҙ танышын тапҡан кеүек,*
*Инәйҙәр — илап тора...*

*Заманында ошо тәтәй*
*Батша булды баштарға.*
*Бапаҡ булды, ҡапаҡ булды,*
*Таш та булды аштарға.*

*Әйтмәне һүҙ, өндәшмәне,*
*Бер шапылдау — хаҡ булды.*
*Ятты тимер сейфтарҙа,*
*Һаҡ өҫтөндә һаҡ булды.*

*Ҡала, төрмәләр төҙөттө,*
*Емертте булғандарын.*

---

*Сәлмән Якупов (1951) Мәләүез районының Түбәнге Таш ауылында тыуған. Нөгөш урта мәктәбенән һуң Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлап, театр һәм кино актеры һөнәренә эйә була. Мәләүез мәҙәниәт йорто директоры, аҙаҡ халыҡ театры режиссеры вазифаларын башҡара. 1990 йылдан мәктәптә уҡытыу эшендә.*

*Арыманы, талманы ул,*
*Кем belə булған зарын.*

*Кире борҙо йылғаларҙы,*
*Шартлатты бомбаларҙы.*
*Бер таҡтанан атлатты ул*
*Тыумаған балаларҙы.*

*Йыһандарға юл астыртты,*
*Борхотто афғандарҙы.*
*Нефть, газ менән һыйланы,*
*Фуршетлап, ҡалғандарҙы.*

*...Шаярышып үтә йәштәр,*
*Өлкәндәр — үйға сумған.*
*Күңел арбар ошо тәтәй*
*Ни ҡәҙәре сер йомған!*

*Тынысланған. Бәп-бәләкәс.*
*(Ут уйнай әммә ҡанда!)*
*Ни булаһын кемдәр белә,*
*Әле ул — хаҡлы ялда.*

## Кәнис

*Бөтөп килә тиҙәр, ана,*
*Себерҙә оҙон аҡса.*
*Кәнис, тиҙәр, малис, тиҙәр,*
*Ҡараштыр, тиҙәр, баҡса.*
*Вакансия бөттө, тиҙәр,*
*Эрзинкә түгел һөргөн.*
*Фил хаҡына төшә, тиҙәр,*
*Тотоуы һеҙҙе бер көн.*
*Нефть бөтә, газы бөтә,*
*Боло бөтә Себерҙең.*
*Ата йорто — сит ҡулдарҙа,*
*Баҡсаһы юҡ бер кемдең.*

## Импортта йәшәйештәр

*Импорттарҙа күпсей йәшәйештәр, —*
*Ҡайҙа баҡма, ҡайҙа ҡарама.*
*Йәшәүебеҙ шулай үтә шәпме,*
*Эшләүебеҙ әллә алама?*
*Машиналар импорт, кейем-һалым —*
*Нигә теймә, нигә ҡағылма.*

*Баҙар тулы, кибет тулы импорт,*
*Ауыҙ тулған импорт һағыҙға.*
*Йылдар буйы импорт кино ҡарап,*
*Сыға алмай уның осона,*
*Хыялланып, илап бер булабыҙ...*
*Беҙҙекеләр — сүптә соҡона.*
*Сит илдәнең кеүек урамдарҙа,*
*Менюларға баҡһаң — аптырап!*
*Суртым белһен нимә ашайһың һин:*
*Шытырлаҡ та бары ялтыраҡ.*
*Ул «импорт»тар үҙҙәре лә килде,*
*Һәр тишектә мезләй күҙҙәре.*
*Суртым белһен нимә һөйләгәнен,*
*Саф импортса инде һүҙҙәре.*
*Ниҙәр генә юҡ бит, бары — импорт,*
*Суртым белһен: ҡайҙан, кемдеке...*
*Импорт ҡына ашап йәшәйбеҙ беҙ,*
*Түәлите генә беҙҙеке.*

## Мохтажлыҡ

*Һайлау етһә, Яҡлаусылар*
*(Йәшенеп кенә ятҡандай)*
*Бәшмәктәй ҡалҡып сыға.*
*Ҡояштай балҡып сыға.*
*Тик шуныһы аңлашылмай:*
*Кемде кемдән яҡлайҙар һуң?..*
*Майҙанда — ялҡын сыға.*
*Ялҡындар — ярһын сыға.*
*Һайлау үткәс, Яҡлаусылар*
*(Ҡырау һуҡҡан төҫлө генә)*
*Юғала, тынысланa.*
*Кипрға юл башлана.*
*Алйыған һайлаусыларға,*
*Яҡлап ҡул болғаусыларға —*
*Йүнәтә... тишек сана.*
*Улар йыйған аҡсаға.*

## Теймәһен тымау ғына

(М. Ғафуриса)

*Өс аҙым алға баҫам да*
*Әйләнәм мин артыма.*
*Ни самалы, хәле нисек? —*
*Күҙ һаламын халҡыма.*
*Баҫҡан һайын артҡа барам,*
*Заманы — «ямау» ғына.*

*Ҡәк нибүт тә бирешмәбеҙ,*
*Теймәһен тымау ғына.*

## Тертләп китәм

*Хан заманғы инде был эйәр ҙә,*
*Нисә быуын тора эленеп.*
*Ә ҡасандыр кемдер ҡанат кireп*
*Йөрөгәндер уйнаҡ ат менеп.*

*Яу спҡандыр, бәлки. Йә көтөүҙә,*
*Бәйгеләрҙә, бәлки, булғандыр.*
*Ҡашҡайына, бәлки, һунарҙарҙа*
*Ыласындар килеп ҡунғандыр...*

*Хан заманы. Телһеҙ был ҡомартҡы*
*Ишаралыр, бәлки, үҙемә?*
*«Ат бирегеҙ миңә! Ат бирегеҙ!*
*Атһыҙ башҡорт ниндәй башҡорт була,*
*Нисек йәшәйһегеҙ түҙемдә?!»*
*Тертләп китәм ҡайсаҡ үҙем дә.*

## Балалык

*— Бына минең тәтәй күлдәк!*
*— Минең туфлиҙәр матур!*
*— Мәрйенем дә тәтәй генә!*
*— Еҙнәм миңә бәке бирҙе,*
*Кү-үп асмалы, яп-ялтыр!*

*— Өләсәйем ҡоймаҡ ҡойҙо!*
*— Бәлеш бешерҙе апай!*
*— Беҙҙең Шарик ям-ман үсал!*
*— Беҙҙең үгеҙҙе күрҙеңме?*
*Ҡотора, иҙә, тапай! —*

*Ҡартайһаҡ та китмәй беҙҙән*
*Балалыҡ ҡыланышы.*
*Донъя малдарын йыйыуҙар,*
*Маһайышыу, маймылланыу —*
*Йәшәйеш ағылышы.*

## Һаҙлыкта

*Яҙғы ташҡындан һуң был Һаҙлыҡҡа*
*Хужа булып алды ят тәлмәрйен.*
*Яңы закон, яңы тәртип китте,*
*Ҡаты тотто Хужа үҙ телмәрен:*

«Дөрөҫ йәшәү бында булмаған һис,
Ҡаранығыҙ ҡайҙа һеҙ, баҡалар?!
Яңы тормош бүләк итәм һеҙгә,
Табынығыҙ миңә, собакалар!

Булыр бында һеҙгә һәммәһе лә,
Башҡа һаҙлыктарҙы күрерһегеҙ.
Шундай тормош булыр, үлһәгеҙ ҙә
Тик шатлыктан ғына үлерһегеҙ!»

...Тирә-яҡтан өн-тауышһыҙ ғына
Шыуышалар бында бар йыландар.
Төкөрмәй ҙә улар законыңа!..
Ниндәй «күҙҙәр» менән ҡарағандар?

## Һандыҡ

Был һандыҡҡа, күрәм, быуат һыйған,
Ингәс, сыҡҡан күпме шатлыҡтар.
Улар менән бергә ҡуша ятҡан
Биш быуатҡа етер ҡайғы, зар.

Күпме түйҙың биҙәк, ниғмәттәре
Иң тәү сыҡҡан ошо һандыҡтан.
Һәр сабыйҙың биләү, йүргәктәре
Көтөп ятҡан ошо һандыҡта.

Байрамдарға кейер затлы кейем,
Таралырға тейеш хәйерҙәр,
Бары, бары һыйған шул һандыҡҡа...
Кәфенлектәр хатта әҙерҙәр.

Эҙе яҡкан күпме бармаҡтарҙың,
Еле һуҡкан күпме йылдарҙың.
Үҙ эсендә нимә тулғаҡланған —
Һандыҡ ҡына белә уларҙы.

## Заманса осрашыуҙар

Осраштылар бер туғандар,
Һағынышып күрештеләр.
Күҙ йәштәрен һөртә-һөртә,
Ҡосаҡлашып үбештеләр...

*Табын ҡороп киң урамда,*
*Ризыҡланып, сөкөштөләр,*
*Бала саҡты иҫкә алып,*
*Ҡыҙыҡ табып көлөштөләр...*

*Юҡтан ғына, сәбәп табып,*
*Аҡырышып  һөҙөштөләр.*
*Ҡуҙ-маңлайҙы тыҫҡылдатып,*
*Йоҙроҡтары төкөштөләр...*

*Таралышты бер туғандар,*
*Хайран ҡалды күршеләре...*
*Ҡай донъяла йәшәй икән*
*Был замана кешеләре?*

*Ҡантуғандар, ҡарындаштар,*
*Бер атанан яралмыштар?!*

## Атай малы түгел

*Ах... Шайтанғыр... Был төпһәне*
*Ҡем ҡалдырған... юрамалмы?*
*Аҙым һайын башты бәрһәң...*
*Һин һөйләгән... шул урманмы?*

*Шайтан түйы үткән дәһә,*
*Ята ағас әүеш-тәүеш.*
*Аңла, ҡустым, ҡот оҫҡос был!*
*Тәбиғәттә тәртип тейеш.*

*Ә-ә, ишетәм.. урман геүләй...*
*Балта-бысҡы тынғы белмәй...*
*Эйе, ҡустым, шулай инде,*
*Урмандарға кемдәр килмәй.*

*Шәхси урман? Нисек шәхси?*
*Урман хәҙер... мәскәүский?..*
*Бөтә байлыҡ — Мәскәү китә,*
*Төпһә-ҡалдыҡ — башкирский?*

*Башҡорт үҙе ҡайҙа булған?*
*Һәм, ғөмүмән, ҡайҙа һуң ул?*
*Ҡамчаткала? Ни суртыма?*
*Тыуған ерҙең яҙаһы шул?!.*

Ер һатыла, ил һатыла,
Атай малы түгел — урман.
Ҡола ялан ҡара урман...
Ерен һата башҡорт һаман.
... һаман!
... һаман!

***

Нөгөш буйы. Шешлек еҫе.
Һыу инәләр. Ашаналар.
Ҡайҙа баҡма — шау-шыу, халыҡ...
Ҡайҙа баҡма — машиналар...

Төрлөһө бар кешеләрҙең.
Нәҙек, оҙон, йыуандары...
Аҡыллыһы, аҡылһыҙы...
Мәс иҫерек ҡалъандары.

Йәй буйына шулай бында.
Ашаналар... Һыу инәләр...
Тейәнешеп йәһәннәмдән,
Тамуҡтарҙан уҡ киләләр.

Ығы-зығы көнө-төнө.
Тау-тау мәхшәр, сүп-сар ҡала.
Етмәҫ ине урын бында
Мамай хәтле мамайға ла!

***

Күҙҙе йомһаң, һаташтыра инде...
Был — ҡартлыҡтың, ахры, бәләһе.
Еләм, имеш, импорт машинала...
Ҡайҙа икән быного «әлә...»һе?
Руле юҡ, тормозы юҡ быныӊ,
Ҡойроҡ сәнсеп ҡыуа тиҙлекте...
Сүп хәтле лә күрмәй тау, урманды,
(Уйлау ҡайҙа соҡор, тиҙлекте!)
Һаташтыра шулай. Күҙҙе йомһаң.
Был — ҡартлыҡтың түгел бәләһе.
Заман оса шулай таманына,
Ҡайҙа көтә икән «әлә!..»һе?



Әлнисә
АЛДЫРХАНОВА

# ҠОЙОН

## Тарихи-документаль повесть

– Тор, Ҡәйүм, тор!

Ҡәйүм бойороусан тауышҡа ғәжәпләнеп килеп уянды. Башына эҫе ҡапҡанмылыр, ни аралалыр Ташөй һалҡынлығында ойоп та бара.

– Туҡта, кем уятты икән? Ғәлләм ағайымдың тауышына оҡшамаған. Муйылүҙәк яғына еләккә киткәйне лә, әллә кире боролоп, мине ул уятамы икән?

– Ағай, һинме? Йә, еләгеңде тәмләйем дә көтөүҙе ҡарар кәрәк.

Ҡәйүм, беренсенән, янында бер кем дә юҡлыҡҡа аптыраны, икенсенән, көтөүе әллә ҡайҙа олаҡҡан. Абына-һөрләгә, ыш та ыш килеп, тау башына менеп ҡараны. Туҡал һыйыр артынан бөтә көтөү Муйылүҙәккә етеп барыуын абайлап, олатаһына оҡшатып һуҡранып алды ла, ситкә сырт итеп төкөргәндән һуң, өҫтәп ҡуйҙы:

– Бер бысраҡ һыйыр бөтә көтөүҙе буяй, – ти торғайны олотайым, мына инде, шул холоҡһоҙ Туҡал! Ах, был Туҡалды!

Сыбыртҡыһын шартлатып, йән-фарман тау-таш араһынан йүгерҙе, артынан этен дә эйәртте.

– Ҡотҡармаҫ, Ҡотҡармаҫ, маһ-маһ!

Теге остан эт өргәне ишетелде, Ғәлләм ағаһы ҡаршы сыҡҡан икән. Көтмәгәндә ваҡ мал тегеләй-былай сабыша башланы. Араларында ялбыр-йолбор иҫке кейемле ят әҙәмдәр бер һарыҡты сәлдерергә лә өлгөрҙө.

– Теймәгеҙ һарыҡҡа, теймәгеҙ! Ҡотҡармаҫ, Ҡотҡармаҫ, һөс,һөс!

Береһенә ырылдап барып ташланған эттең сыйылдауы ғына ишетелде.

Ҡәйүм башына ниҙер эләгеүҙән гөрһөлдәп ергә ауҙы.

– Ҡәйүм, тор! Тор-р!

---

*Кәримова-Алдырханова Әлнисә (1963) Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәй һәм Башҡортостан журналистар союзы ағзаһы. Сибай ҡалаһында үҙе эшләгән гимназияла, ҡалала ла халыҡ йолаларын күрһәтеүҙә, саралар, байрамдар ойоштороуҙа ҙур өлөш индерә. «Өләсәйем һандығы», «Салауат батыр — ил күрке» тигән китаптар авторы.*

– Ғәлләм ағай… Бә-әй?

... Ҡәйүм күҙҙәрен асып, тирә-яғына ҡаранды, ҡояш нурҙары ғына шаярып маташҡан, ахыры, эргәлә бер кем юҡ, тып-тын. Ул торорға уйлағайны ла, күҙ алдары ҡараңғыланып, йәнә упҡынға осто.

– Әсәй, әсәй, атай! Ишетәһегеҙме? Һеҙҙе ер аҫтына күмделәр, ти, Ғәлләм ағайым. Ул йәшенеп кенә ҡарап торған. Һуңынан соҡоп сығарайыҡ, тип ағайым менән шул ерҙе ҡаҙый башлағайныҡ, олатайым күреп ҡалған да беҙҙе был эштән тыйҙы. Ата-әсәң, ауырыйҙар, Ер-бабаң дауалап һауыҡтырғас, үҙҙәре һеҙҙе килеп алып ҡайталар, тик улай башҡаса ҡамасаулап йөрөмәгеҙ, юғиһә, асыуланырҙар ҙа бөтөнләйгә ташлап китерҙәр. Сабыр итегеҙ, сабыйҙар… тине. Ыһ… ыһ… башым ауырта, миңә ҡыйын. Ер-бабай, ата-әсәм янына ал да, улар эргәһендә дауала әле. Ай-й-й, башым..

Ҡанаттары ҡайырылып, ергә йығылған меҫкен ҡошсоҡтай, Ҡәйүмдең хәлһеҙләнгән ҡулдары ла ерҙе ҡосто. Күк йөҙөнән ямғыр тамсылары тамғандай, уның түңәрәк кенә зәп-зәңгәр күҙҙәренән йәш бөрсөктәре эркелде.

***

Бай Илбаҡ тоҡомонан бер туған Ҡотлогилде менән Әхмәтшәрифтән күптәр көнләште. Бер-берeһен ҡунаҡтан ҡалдырмай, ҡайғыһын да, шатлығын да бүлешеп, ағай-эне, эй, татыу булдылар. Икеһе лә алтын ҡуллы, барса эште лә еренә еткереп атҡара, ҡатындары аш-һыуын телеңде йоторлоҡ итеп әҙерләй, донъяларын гөрләтеп көтә. Өй эсен йыр-моң, уйын-көлкө менән, йорт-ҡураһын малтыуар, ҡош-ҡорт менән тултырып, шулай май өҫтөндә йөҙөп йәшәнеләр. Бер ҡыуаныстың – бер михнәте, тигәндәй, Ҡотлогилде ун дүртенсе йылдағы Герман һуғышында һәләк булды. Ул мәлдә ауылды сир баҫып, күптәр вабанан ҡырылды. Был ауырыу Ҡотлогилденең ике ҡыҙын – Фәғилә менән Нәзифәне, һуңынан ҡатыны Рабиғаны ла яҡты донъянан алып китте. Әхмәтшәриф менән Фариза туғандарының кәртә тулы йылҡы, мал-тыуарын үҙҙәренә күсерҙе һәм улдары дүрт йәшлек Ғәлләм менән ике йәшлек Ҡәйүмде малайлыҡҡа алды. Өйҙә Хәммәт, Фәруҡ улдары, Мәғәфүрә ҡыҙҙары янына ике малай өҫтәлде, хәҙер инде улар биш балаға күҙ-ҡолаҡ. Ҡәйүм менән Ғәлләм ипле, әҙәплеләр, береһе өсөн береһе өҙөлөп тора. Аталары мәрхүмдеке кеүек, ҡулдары эшкә оҫта, етеҙҙәр, ниндәй йомош ҡушһалар ҙа, «һә» тигәнсе атҡарып та ҡуялар. Тик бына ике матур төймәләй түңәрәк күҙҙәрен генә моңһоулыҡ пәрҙәһе ҡаплаған. Етемлектең ни икәнен тоймаһалар ҙа, сит йортҡа, икенсе ғаиләгә күсенеүҙән һуң болоҡһоуландылар.

Хәммәт менән Фәруҡ икеһе ике төрлө холоҡло: береһе – тыныс, икенсеһе – ут. Ут тигәне Фәруҡ. Икәү эләгешеп кенә баралар. Әлдә Мәғәфүрә һеңлеләре аралырында бутала, юғиһә күптән ҡойон уйнатырҙар ине.

«Урыҫҡойон» ҡушаматын тиккә таҡмағандар уға. Урыҫ тигәндәй, уның да үҙенә күрә тарихы бар. Хәлит ҡартатаһы һөйләүенсә, борон ҡартатаһының ҡартатаһы Татлыбай урман буйында «мам-мама» тип ярһып илаған урыҫ балаһын табып алып ҡайта. Аҙашҡанмы, әллә берәйһе ташлап киткәнме, бер Хоҙайға мәғлүм. Тирә-йүндә осраған кешеләрҙән сабый хаҡында ниндәй ҙә булһа мәғлүмәт эҙләп ҡарауҙары бушҡа ғына була. Етен сәсле, күк йөҙөндәй зәп-зәңгәр ҙур күҙле баҫалҡы малай саҡ-саҡ ҡына урыҫса тәтелдәһә, Татлыбай сабыйҙы башҡортсаға өйрәтә. Уны аҫрай һәм, үҙенең фамилияһын биреп, «Әйҙә Ырыҫбай Илбаҡов булһын, итәк-итәк башҡорт балалары менән ауыл тултырһын, ил баҡһын, ер баҡһын», – тип урман буйында өй һалып бирә. Ырыҫбайҙың әрһеҙлегенә ауылдаштары бәләкәй сағында иҫе-аҡылы китһә, олоғая килә көнсөл ҡараш

менән ситләтеп кенә уҙалар. Сөнки хәләл көсө менән нығынып, уңғанлығы менән байыға, уландарын һәр ҡайһыһын өйлө итә. Урыҫ байыны, тип, Ырыҫбай нигеҙ һалған ауылды Ырыҫбай, һуңынан Урыҫбай исеме менән йөрөтә башлайҙар.

Ырыҫбай ҡойон ҡупҡандай ҡыҙып-туҙып алһа ла, ҡойон үткәндәй, тынып ҡалған, шуға ла «Урыҫҡойон» тигән ҡушамат тағылғандыр.

Малайҙар ҡыҙып-туҙып китһә, «урыҫҡойон» тип, ете быуын бабаларын хәтерләтеп, Әхмәтшәриф улдары тирәләй артыш төтәтеп ыҫлай, йәнәһе лә енен ҡыуалап ала. Балаларға уҡыу эләкмәй. Донъя тулы мал: йөҙләп баш йылҡы, һыйыр, ваҡ мал. Фәруҡ менән Хәммәт күбеһенсә өй алдында эш менән мәшғүл, ә Ҡәйүм менән Ғәлләм иртәндән ҡара кискә саҡлы көтөүҙә…

***

… Ана, көтөү мәлендә нindәй хәлгә тарығып ята бит Ҡәйүм. Тәҡәтһеҙ ауыртҡан башынан көтмәгәндә кемдеңдер йомшаҡ ҡулдары һыйпап үткәндәй булды. Олатаһының гел ендәр хаҡында һөйләүен иҫкә төшөрөп шөрләне. Имеш, пәрейҙәр күҙгә күренмәй, яҡын кешең ҡиәфәтенә инеп, сихырлы ҡулдары менән бер ҡағылһа, һин насар кешегә әүереләһең дә ҡуяһың.

– Ә һуң бая Ташөй эсендә кем мине уятты әле ? Ен-пәрей түгелме икән? Ғәлләм ағайым ҡайҙа? Әллә еннәр урланымы?

Ҡаршыһында ултырыусыға «Енме, әллә инәйемме», тип малай баҙап ҡалды.

– Әй, баламды, нишләттеләр яуыздар?

Тауышы ла, төҫ-башы ла, кейемдәре лә Фариза инәмдеке, моғайын, яңылышмам, тип ҡурҡа-ҡурҡа уға һүҙ ҡушты:

– Кемдәр улар?

– Бурҙар, балам. Йот йылы бит. Аслыҡ ҡанһыҙлыҡҡа этәрә әҙәмнәрҙе. Малы барҙың ҡулы уйнай, малы юҡтың күҙе уйнай, тигәндәй, халыҡтың малы ла, аҙығы ла юҡ, шуға урлаша. Бер һарыҡ өсөн баланы зәғифлә сәле, ҡуйһаңсы… – ауыр көрһөнөп, инәһе малайҙың башы аҫтына камзулын бөкләп һалды.

– Ғәлләм ағайым ҡайҙа?

– Көтөү артынан китте. Этебеҙгә бысаҡ ҡаҙағандар, ҡороп ҡына киткерләре, – Фариза һөйләнә-һөйләнә Ҡәйүмдең ҡанаған башын, битен һөрттө лә кеҫәһенән баҡыр тәңкә сығарып, маңлайындағы шешеккә ҡапланы. Маңлайына тарттырып яулыҡ бәйләне һәм атҡа ултыртып, ҡайтыр юлға сыҡты.

Был хәл, яман төштәй, Ҡәйүмдең күңелендә төйөр булып төйнәлде. Яралары тиҙ уңалһа ла, башына эләккән таштың эҙе иҫтәлеккә ҡалды, ә үлтерелгән эт урынына йәнә Ҡотҡармаҫ исемле эт эйәләштереп, көтөүгә йөрөй башланы. Уның ҡушаматының да бер ғилләһе бар. Олатаһы һөйләүенсә, гел урлашып йөрөгән бурҙы ҡотҡармаған. Шуға күрә эткә Ҡотҡармаҫ исеме бирелгән. Ҡараҡты ҡотҡармаҫ, үҙебеҙҙең ҡотто ситкә ебәрмәҫ, тип ырымлағандар.

Ысынлап та, ас кешенең асыуы бүренән көслө тигәндәй, әҙәмдәр урлашыу яйын ғына эҙләне. Шуға Әхмәтшәриф, берҙән, балаларҙы ҡурсалаһа, йәнә малы кәмеүҙән дә шикләнеп, үҙе лә йышыраҡ көтөү янында уралды. Олатаһы хәбәрҙәрен тыңларға яратҡан малайҙар әй һөйөндөләр. Әхмәтшәриф телгә оҫта, эсе тулы боронғо ҡомартҡы, йыр-моң, дөрөҫөрәге, үҙе бер хазина инде. Ҡайҙа аяҡ баҫһа ла шуға бәйле йыр, таҡмаҡ йәки легендаһын һөйләй һала.

Бөгөн ваҡ малды Ғәлләм көтә, Ҡәйүм олатаһы менән йылҡы янында. Ваҡ мал ғына баш баҫып ашай-ашай тирә-йүнгә һибелә, аҙым һайын ҡайырып ҡына торорға кәрәк. Ә йылҡыны көтөүе еңелерәк.

Әле лә ял итеп алған арала Әхмәтшәриф ҡыҫыҡ күҙен ҡыҫа бирә лә,

мыйыҡтарын һыпыра-һыпыра, Ҡәйүмде ауыҙына ҡаратып, яйлап- майлап һүҙ башлай. Улы онотолоп тыңлай. Уның менән күңелле, әллә күпме ҡыҙыҡтар һөйләй. Малай бөгөн күбеһенсә аттар менән ҡыҙыҡһынды. Олатаһы әллә күпме ат исемдәрен әйтеп, йә уға ҡарата йырын, йә таҡмағын, йә булмаһа ҡыҙыҡтарын һөйләп ала.

– Олатай, һәр бер атҡа исемде ҡайҙан табып бөттөң?

Олатаһы мут йылмайып, йылҡы көтөүенә ҡарашын төбәй ҙә, бармағы менән һәр йылҡыға төртөп күрһәтеп, ихлас аңлатырға тотона.

– Исемдәрҙе мин уйлап тапманым, аттың төҫө үк уның исемен әйтеп тора. Ана, иғтибарлап ҡара әле: Ҡарат, Буҙат, Аҡбуҙат, Йондоҙ ҡашҡа, Ерән ҡашҡа, Турат, Һарат, Һорат, Күк ат, Сыбай ҡашҡа, Ерәнсәй, Турысай…

Һәр береһен күҙәтеп кенә өлгөр, әллә күпме төҫкә исемдәрҙе олатаһы теҙә бирҙе.

*Аҡъял ъына саптар, сапма юръа,*
*Һөйөп кенә менгән толпарым.*
*Алыҫларҙан күҙен һалып килә*
*Ҡарап ҡайҙа тоъро юл барын,*

– тип йырын да һуҙып ебәрҙе.

– Мал-тыуар, ҡош-ҡорт ҡарай-ҡарай, ҡышын өйҙә, йәйен тирмөйҙә үтте инде ғүмер тигәнең. Ҡайҙа ғына барһам да, юлдашым – атым. Ат яратмаған ир, ир түгел ул, улым, хәтереңдә тот. Ир ҡанаты – ат була, тип бушҡа йырламайлар.

– Олатай, мин дә атларҙы яратам, улар тураһында һөйләсәле.

– Һай-һай, бигерәк ҡыҙыҡ та, үҙенсәлекле хайуаннар инде. Йылҡы малының да кешенеке кеүек һәр беренең холҡо, үҙенә күрә сифаты бар. Ана, ситтәрәк торған ерән бейәгә иғтибарлап ҡара әле, ул күбә тарттырыуға шәп, бесән мәлендә тоғро хеҙмәтсе. Уның янындағы Көрән юрға ла егәрле, тыңлаусан, шәп дөлдөлдәй баҫып йөрөй. Урталараҡ Саптар, Ҡаратты күрәһеңме, улар бик үк юрта алмай, һикертеп кенә бара.

– Их, елдәй елеп кенә һыбай сабырға ине, олатай.

– Алайһа, белеп ҡуй, сабыш атларын сабыштырып сағыштыралар, яҡшы бик йүгерек аттар күберәк ерән, ҡола, ҡоба, күк, бурыл төҫтә була, ундайлар беҙҙең өйөрҙә лә бар, йәле, улым, табып ҡара.

– Барҙыр ҙа ул, төҫләрен айырыңҡырамайым бит әле, олатай, – тине Ҡәйүм оялсан ҡараштарын аҫҡа йәшереп.

Олатаһы шуны ғына көткәндәй, өйөр араһындағы йылҡыларҙың һәр береһен төртөп күрһәтә-күрһәтә, төҫтәре менән таныштырып сыҡты.

– Турат ҡыҙыу, ярһыу, ҡыҫҡа юлға ҡоштай осорға була. Кинәт йомош-фәлән килеп сыға ҡалһа, иғтибарлап йөрө әле, мин ней йәһәт кенә ҡайһыһы яйлы, шуны менеп елдерәм.

– Ҡара әле, олатай, холоҡлары һәр саҡ шулай тура киләме?

– Әллә-әллә, төрлө саҡтары булғылай. Мына, мәҫәлән, юрға күберәк бүртә менән ҡара, һоро аттар, ала аттар ҡай саҡ насар, ҡайһы саҡ бик шәп. Нимәгә кәрәклектән сығып, һайлай белеү – үҙе бер һөнәр.

– Яҡшы атмы икәнен ҡайҙан беләһең?

– Улым, иң элек ҡылдарына ҡара: эре ҡыллы ат – ялҡау, нәҙек ҡыллыһы егәрле булыр. Шунан килә, аттың тешен дә абайла, әгәр ҙә аҫҡы теше – артҡа, өҫкөһө – алда булһа, теше һары булһа, мал ашауға ла яҡшы, шәп, арымтал булмай. Һыу эскәндә, ауыҙынан шаптырлатып, кире ҡойолтоп торһа, ашағаны эсенә йоҡмаҫ, барымһыҙ ул, ә китеп барғанда туҡтауһыҙ ярау итһә, файҙаһыҙ. «Атың иренле, ҡатының моронло булһын» тигән һынауҙы юҡҡа әйтмәгән боронғолар.

– Оһо-һо-һо, олатай, ҡалай күп нәмәләр беләһең, быларҙы миңә лә хәтер янсығыма йыйыр кәрәк, – тип малай башын һелкеп ҡуйҙы.

Ҡарт әле һүҙем бөтмәне тигәндәй, тамаҡ ҡырып алды:

– Ул ғына түгел, ат тәбиәләүгә лә иғтибар бүлергә онотмаҫҡа кәрәк: һыу буйына ебәрергә, ҡоро һоло, бесән ашатырға, ялларын дегәнәкләрҙән таҙартып торорға кәрәк. Ана, ҡара әле дүрт йәшлек байталларҙың ҡойроғон мөнтәп киҫеп бөттөм, күрәһеңме? Мына шулай күҙәтеүсәнлек талап итенә. Маллар ҙа кеше кеүек ауырып китә, уларҙы дауалау серләре лә бар. Күп кенә сирҙән, кешегә лә, атҡа ла андыҙ ярҙам итә. Андыҙ барҙа, ат үлмәҫ, ирәүән барҙа, ир үлмәҫ, тейләр. Ләкин уны йолҡоп алып, дауалай башламайһың, ҡулланыр алдынан инә андыҙмы, ата андыҙмы белергә кәрәк.

– Ә һин беләһеңме?

– Олатаңдың белмәгәне юҡ, әүлиә бит олатаң, ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә, үәт. Беҙ андыҙҙы бейандыҙ, айғырандыҙ тибеҙ. «Айғыр» тарбағыраҡ булып үҫә, сәскә ата, «бейә» – бер йыллыҡ, тамыры ыуағыраҡ, сәскә атмай. Ашҡаҙан, тире, йүтәл, шеш ауырыуҙарына дауа. Ат – һоло, шифалы үлән генә ашай. Һоло ярмаһы ла, буҙаһы ла файҙалы, шуға күрә лә аттың ите, майы, ҡаҙыһы, һөтө, ҡымыҙы ла шифалы. Һау-сәләмәт, оҙон ғүмер итәйек, тип шунлыҡтан шунсама йылҡы аҫырайбыҙ бит. Аслыҡтан күпме кеше ҡырыла. Юҡлыҡҡа сабыр итәм, барына шөкөр итәм, тип бирешмәйбеҙ бит әле.

– Ә ат нисә йыл йәшәй?

– Улар ней, 15 йәш тирәһе инде.

Уҡый-яҙа белмәһә лә, Ҡәйүм олатаһынан ишеткән тарих, изге доғаларҙы отоп алырға тырышты. Бармаҡтарын ыуғылап, ыуаланып ултырған Ҡәйүмдең уйын олатаһы белергә теләне:

– Нимә тыпырсынаһың, әйтер һүҙеңде тура әйтеп тә өйрән. Оялған – өйһөҙ ҡалған.

– Өй әле кәрәкмәй ҙә, олатай, беҙ Ғәлләм ағайым менән берәр ат һайлап алһаҡ буламы?

Әхмәтшәриф һыны ҡатып көлдө:

– Бер түгел, хет бер өйөр алығыҙ, был маллар һеҙҙеке ләһә.

Кисен йондоҙҙарға ҡарап хыялланырға ярата, шуға ул эстән генә Йондоҙ ҡашҡа минеке, тип билдәләп ҡуйҙы. Ата-әсәһен һағынып, үкһеп илағанда йыуаныстылсым һүҙҙәре менән йыуатҡан, арыған саҡта йөкмәп йөрөткән, яратҡан Мәғәфүрә апаһының да маңлай уртаһында йондоҙҙай миңе бар бит әле тип тә уйлап алды.

– Йондоҙ ҡашҡа – минеке.

– Һай, ҡойон, – тип йәнә кеткелдәп көлдө олатаһы – Шунан тоҡом тоҡомға тартмаҫ тип, кем әйтер. Урыҫбай олатаң мәрхүм дә йондоҙ юл күрһәтә, Йондоҙ ҡашҡам – юлдашым тигән. Уға оҡшап, оҫта һайланың, Ғәлләм ағайыңа ла өлөш сығар, бер туғанһығыҙ бит, уланнарым. Ни генә тиһәң дә, улым, һеҙ бейә имсәгеләй ике бөртөк кенә, бер-берегеҙҙе ҡәҙерләп йәшәгеҙ, – тине лә һүҙҙе икенсегә борҙо. – Анауы йылҡы өйөрөнә ҡара әле, һәр өйөрҙә 20-ләп ҡолон, өйөр айғыры бар. Күрәһеңме, өйөр айғыры үҙе ашап йөрөй, шул арала һәр ҡайһыһын күҙәтеп тә өлгөрә. Саҡ ҡына береһе сыҡты ниһә, сабып барып тешләй ҙә урынына индереп ҡуя. Еллеғаяла ныҡ ел булғанда, бәләкәйләре өшөмәһен өсөн, уртаға өйә, ситкә өлкәндәрен ҡаплап ҡуя. Әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ, кешенән яман ҡурсалай ул үҙ өйөрөн. Меҫкен ҡолонсаҡлары ҡылдан ишкән нуҡтаға тәүҙә өйрәнә алмайлар, ана, тегеләй ҙә былай ҙа муйынннарын борғослап йүгерешәләр.

– Олатай, ә нимәгә кәрәк ул нуҡта?

– Бейә һауғанда бағанаға, йә ситән буйына ҡолондо бәйләп ҡуйыр өсөн. Был ыр ҡолон бәйҙә уйнай, тип ҡолондоң киләсәген күреп була, улым. Йә,Ҡәйүм, йылҡы сыҙамай башланы, эҫелә күгәүен, серәкәй талайҙыр, ҡараштырайыҡ. Аттар тураһында тағы һөйләшербеҙ әле, – тип Әхмәтшәриф тураяя биреп, билен ыуғыланы, ҡулын маңлайына терәне, шунан, тырпайып торған ҡуйы ҡаштарын төйөп, аттарҙы барланы.

– Мал теүәлме икәнен ҡайҙан белергә?

– Тартуғай исемле ҙур туғай бар, йылҡының төнәй торған урыны булған, шуның эсе тулы йылҡы малы, ат һыймай торһа, туғай тулып торһа, мал теүәл тип иҫәпләнгән, Илбаҡ тархандың иҫәбе шулай, йәғни малдың иҫәп-хисабы юҡ. Был иһә быуындан-быуынға күсә килә.

– Улым, әйҙәле, яннарына барайыҡ, уларҙың да һүҙен тыңлайыҡ, улар кеше телен аңлай, әҙәмдән дә аҡыллылар...

Юл ыңғайында малай төнәге эсен көтөрләтеп торған нәмә тураһында олатаһының фекерен ишетеү өсөн, ҡылын сиртеп ҡарамаҡсы булды:

– Өләкөгөн Ташөйҙә йоҡлап киткәнмен дә берәү ҡолағыма ниҙер шыбырлап уятты. Һикереп торһам, янымда бер кем юҡ, көтөүем әллә ҡайҙа китеп бара ине. Анауы кешеләр башымды яра һуҡҡас, йәнә шул тауыш ишетелде. Кешегә ен эйәләй, тигәйнең... теге ней...

Әхмәтшәриф улының тел төбөн шәйләне, ғәҙәтенсә, рәхәтләнеп көлдө лә Ҡәйүмдең һиҙҙермәйсә биленә төрттө. Малай ҡурҡышынан олатаһының аяғына йәбеште.

– Һай, ҡуян йөрәк, мин дә баһа…

– Ә тегеһе кем? Күренмәгән енме?

– Әй, Ҡәйүм, Ҡәйүм. Ике яурыныңда ултырған фәрештәләрең кәрәк саҡта уята. Ҡурҡма, ҡыуан ғына, Ҡәйүм, фәрештәләрең гелән һаҡлаясаҡлар, абай бул. Юҡһа башың бауланып йоҡлай ҙа китәһең бит, йоҡосо малай, ҡара һин уны серҙе һандыҡҡа ете йоҙаҡҡа биклә.

– Нисек? Ниндәй һандыҡҡа?

– Һы, һандыҡҡа тийеүем, үҙеңдең фәрештәле булыуың хаҡындағы серҙе асма тип әйтеүем инде.

– Ә-ә-ә, белдем. Биллаһи-валлаһи, серҙе белмәҫләр, тик шайтан ҡолағы ғына һаңрау булһын, олатай. Ә фәрештәләр яурыныма ултырһа, ауыр булмаймы? Кеше күреп көлһә?

– Берәү ҙә күрмәй, хатта үҙең дә. Ләм-мим, ҡолағыңа һалып ҡуй, атыу ярҙам итмәҫләр. Кеше-маҙар һиҙә ҡалһа, ҡойон тоҡомонан бит һин, ҡойоном ҡоткара тиген, аңнашылдымы?

– Аңнашылды-ы... Иртәгә атлар тураһында Ғәлләм ағайыма ла һөйләйһеңме?

– Әлләсе... Ул ней ҡайҙа туҡтаһаң, шул ерҙең исемнәрен һорай ҙа ништәп шулай ҙа ништәп былай исемле, тип ҡыҙыҡһына ла йөрөй торған.

– Минең дә ишеткем килә, олатай, әйҙә ваҡ малды иртәгә Фәруҡ ағайым көтөп торһон, – тип ялынды Ҡәйүм, танауын мыш-мыш тартып.

– Һы, ышан Ҡойонға. Көтөүҙе ендәре елгә осорор. Шул ҡәҙәре шуҡ бит. Шыйыҡ сыбыҡ та эләккеләй, барыбер ыжламай, бөтә нәмәне үҙенсә эшләй ҙә йөрөй бит, хәрәм, – тип уфтанып ҡуйҙы.

– Олатай, әйҙә йылҡы менән ваҡ малларҙы бергә көтәйек, – тип ныҡышып, ҡаршыһына баҫты ла күҙҙәрен мөлдөрәтеп яуап көттө.

– Кем белә, бәлки ямғыр яуһа, бер тирәләрәк тоторбоҙ. Ямғыр Хоҙай ҡулында. Йә, бытырлаҡ, көн кисләй, йылҡыларҙы мин хәстәрләйем, һин инәңә талғыр йыуаһы, әтмәкәй йыя тор, осраһа, кәзә һаҡалын да ал, инәң ярата ул.

Ҡәйүмдең аяғы ергә теймәй, текә ҡаянан тау битләүенә ҡыр кәзәһеләй еңелсә һикергеләй-һикергеләй, моҡсайға йыуалар йыйҙы.

Киске аштан һуң, өй эштәрендә булышырға яратҡан Хәммәт эстән мыңғырҙап, ниҙер көйләй-көйләй, әсәһенә ярҙамлашты.

Көнө буйы эҫелә йөрөгән көтөүселәр йоҡларға ятты. Инәһе гөбөр-гөбөр һөт һауғанда Ҡәйүм тупылдап тамған тамсыларҙы күҙ алдына килтереп, ямғыр тураһында уйланды. «Нисек ямғыр яуҙырырға? Әй, Аллам, бер йәтим баланың ете төн уртаһында теләгән теләген ҡабул итһәңсе». Әхмәтшәриф олатаһы шикелле доғалар уҡыны. Ҡатыҡты күп итеп эскәнгәмелер, малай ойоп әүен баҙарына юлланды.

***

Ҡәйүм көндәгегә ҡарағанда иртәрәк уянды, сөнки ҡыҙыҡ ҡына төш күргәйне. Йәнәһе, һыу буйына ҡаҙанды төшөрөп, уның тирәләй балалар күмәкләп һыу һибешеп уйнайҙар. Нәҡ ошо төш малайға таң һарыһынан тороп, хәтәр эш ҡылырға мәжбүр итте. Ул тиҙ генә торҙо ла ауыл осонда йәшәгән Рәхимә әбейҙең ситән утъяҡҡысына ашыҡты. Бәләкәй генә ҡаҙанын саҡ һөйрәтеп алып төштө лә, суйын ҡаҙанды түңкәреп, йылғаға ҡаплап, теләк теләне. Сөнки теге төштән һуң бер мәл олатаһы ошолай ямғыр яуҙырыуҙарын һөйләгәнен хәтерләгәйне.

*Ямғырым, яу, яу,*
*Бер ҡаҙан ит бирермен,*
*Ҡымыҙын да эсерермен,*
*Бына һиңә бер ҡаҙан,*
*Әйтермен изге аҙан.*

Ҡурҡышынан доғаларын тотлоға-тотлоға ҡабатлап, кеше күрмәгәндә ситән буйынан өйгә йүгерҙе. Ул олатаһы хикәйәттәрен тыңлау өсөн бөгөн әллә ниҙәр эшләргә әҙер ине, тик теләктәре генә ҡабул булһын. Теләге Хоҙай Тәғәләнең амин тигән сағына тура килде һәм төшкә табан ямғыр ҡойоп яуҙы.Ҡәйүмдең түбәһе күккә тейҙе, Аллаға ҡат-ҡат рәхмәттәрен уҡыны. Шул арала көтөүҙәрҙе яҡынлаштырып, Ғәлләм ағаһы, олатаһы Ташөйгә ыңғайланылар...

– Олатай, маллар ашап туйған, урманға ышыҡланып көйшәһеннәр, ямғыр бит, ә һин тағы ла ҡыҙыҡлар һөйлә әле.

Ҡарт мыйығын һыпырғылап:

– Алайһа, Фариза инәң ебәргән төргәктән ризыҡларҙы сығарып, тамаҡ ялғап алайыҡ, шунда әңгәмәләшеп тә ултырырбыҙ. Эш тигәндә мин бармам, аш тигәндә йән фарман, тип ризыҡ янында олатағыҙ ҡарт иң элек урын алды бит, – тип серле генә йылмайҙы һәм өйҙә яҫтыҡҡа ҡулын терәп, ҡырын ятҡандай, йоморо ташҡа һөйәлде.

– Атың барҙа ер таны, атаң барҙа ир таны, тигән боронғолар, үҙем иҫән саҡта атам мәрхүмдең хәтирәләрен һеҙгә еткерәм, балаларығыҙға минең кеүек һөйләрһегеҙ. Беҙ көтөү көткән ер, сабынлыҡлар исеме – бөтәһе лә тере бер тарих. Мынауы, Еллеғаяны ғына алайыҡ: буран сығырҙан, ел-дауыл ҡубырҙан, ямғыр яуырҙан 2-3 көн элек ҡая геүләй, урман шаулай, елгә ҡушылып тау һыҙғыра, олой башлай. Шуға ла «Еллеғая» тигәннәр. Элек беҙҙең яҡларҙа ҡаҙаҡлар күп йөрөгән. Ҡалым түләүҙән ҡасып, башҡорт һылыуларын кәләшлеккә урлар булғаннар. Ҡаҙаҡларҙың шундай мәкерле уйларын һиҙеп, бер батыр ҡыҙларҙы Ташөйгә йәшергән. Ошо мәлдә ялағай, яһиллар инде ҡыуанышып ҡаҙаҡтарға ярҙам ҡулы һуҙған. Ташөй тәңгәленә ыңғайлаған әфисәр Аҡҡүҙҙе батыр бер атыуҙа үлтергән. Ул тәгәрәп барып төшкән туғайҙы «Аҡҡүҙ туғайы» тейләр. Икенсе әфисәр ҡаҙаҡ һөрәнләй:

– Кеше үлтереп кенә батырмын, тиһеңме, башҡа яҡтан да етеҙлегеңде күрәйек. Мәргән булһаң, минең ҡамсының һабына ат!
Егет ҡамсының һабын өҙә атып ебәрә.
– Эйәремдең ҡашына ат!
Эйәренең ҡашы ла ырғып китә.
– Бармағымды ат! – тип йән асыуына екерә ҡаҙаҡ.
Йәшен тиҙлеге менән уҡ баш бармағын айырып алған.
– Был башҡорт бөтәбеҙҙе лә ҡырып ташлаясаҡ, – тип, ҡалғаннарын эйәртеп, ҡаҙаҡлар ҡаса.
Олатаһы һөйләүҙән туҡтап ҡуймаһын тигәндәй:
– Анауындағы соҡорҙоң да исеме бармы? – тип ҡабаланып һорай һалды Ғәлләм.
Әхмәтшәриф һөйәлләнеп бөткән бармағы менән алда күренгән тауға ымлап хикәйәтен дауам итте.
– Баҡай исемле ҡаҙаҡ башҡорт йылҡыһын урларға килгән. Тау аша һаҡ ҡына бара һәм алда томан араһындағы йылҡылар бышҡырыуын ишетеп:
– Әһә, башҡорт йылҡыларын хәҙер ҡыуып алып ҡайтам, – тип алға сапҡан һәм томанда ике тау араһындағы ҡабыранан осоп үлгән. Шуға «Баҡай ҡабыраһы» тиҙәр. Әүәле ҡаҙаҡтар менән атыштар күп булды, һәр береһенең исеме тарих һаҡлай. Анауы, үлектәр ҡанына оҡшаш ҡара янып ятҡан тау – Яутүбә. Элек Яутүбә башы ырыулар нөктәһе булған. Шунда йыйын, ҡор йыйып, аҡһаҡаллар, сәсәннәр кәңәшләшер булған. Дошман баҫып инеүен һиҙһәләр, ошо түбәлә берберенә ут яндырып аңғартҡаннар. Анауы бейек үләнле туғай «Ситәй туғайы», арғырағы «Тәпәнбар туғайы» – барыһы ла һәләк булған ҡаҙаҡ исемнәре.
Ауыҙ асып тыңлаған Ҡәйүм яйлап ҡына бәүелеп ҡырынайҙы, кемдер уны тертләтте.
– Тор, Ҡәй-ү-ү-үм, тор!
Әхмәтшәрифтең тылсымлы тауышынанмы, әллә ямғыр һалҡынынанмы бөрөшөп кенә ултырған килеш ойоп бара икән.
– Олатай һин өндәштеңме? Нимәгә йәһәтерәк тор, тиһең? – тип аптыраулы ҡарашын төбәп, Ҡәйүм уның оҙон еңле кәзәкәйенән тартҡыланы.
– Йоҡо сүлмәге, әллә йоҡлап та киткән инде?
– Олатай, һин уяттыңмы? Ғәлләм ағай, әллә һинме?
– Юҡсы, – яурындарын һелкеп, аптыраулы ҡараш менән һөҙөп ҡарап ҡуйҙы Ғәлләм.
– Һай, тауыҡ хәтер! Серҙе онотторға ярамай Ҡойононҙоң ене ҡағылғандыр. – тип олатаһы Ҡәйүмгә күҙ ҡыҫты һәм һүҙҙе йәһәт кенә икенсегә борорға уйлағайны ла баҡырышҡан мал тауышы уны туҡтатты.
– Ай, әттәгенәһе, йүгерегеҙ, малайлар! Һарыҡлар Олотауға етеп бара, ҡайырып алып килегеҙ. Ҡойма ямғырҙа тик кенә ятмай, һай, аңра һарыҡлар!
Сыбыртҡыларын шартлатып йүгергән малайҙар артынан, өрә-өрә, Ҡотҡармаҫ та ҡалышманы. Малдарҙы ҡайырып алып килгәс, олатаһының әңгәмәһен тыңларға ултырғайнылар, ул йыр һуҙып ебәрмәһенме. Ә тауышы балалар йөрәген ялмап алды.
Олатаһының йырын тау-таш, ялан, туғайҙар, урман, хатта ҡоштар ҙа тын ҡалып тыңлай, уға ямғыр ҙа ҡушыла:

*Һаҙҙа ғына йылан, ай, һыҙғыра,*
*Һаҙҙа ла ғына һары баҡы(а) өсөн.*
*Аталарҙан ҡалған йәтимнәрҙе*
*Аһырайыҡ Алла хаҡы өсөн.*

– Олатай, атай тип йырланың, ә беҙҙең атай ҡасан килә? Ауырып бөткәс тә, тигәйнең, теге Ер-бабай һаман ебәрмәйме? Атай менән әсәйем тиҙерәк ҡайтһыннар ине.

Ҡәйүмдең төпһөҙ зәңгәр күлдәй уйсан күҙҙәренән тупылдап йәштәр тәгәрәне. Ғәлләм дә еүешләнгән күҙҙәрен олатаһына төбәне.

– Сабыр итегеҙ, балалар, Алла хаҡына һорайым, әҙерәк кенә көтөгөҙ... – тине – Әхмәтшәриф, үҙен эстән әрләй ине. – Был йыры ҡайҙан телемә килгән...

– Тиҙҙәнме?

– Эйе.

Ҡәйүм, һулҡ-һулҡ типкән йөрәген тынысландырырға теләгәндәй, ҡыуанысынан олатаһына һыйынды.

– Ағай, ишетәһеңме, әсәй менән атай беҙҙе килеп ала, үәт.

Әхмәтшәрифтең дә күңеле кителде. «Йә, Хоҙай, әҙерәк кенә үҫһеннәр ине, исмаһам, аңларлар ине бахырлар. Сабырлыҡ, тәүфиҡ бир, юлларында Хызыр Ильяс ҡына юлдаш булһын», – тип эстән генә теләк теләп, доғаларын уҡыны.

– Ҡайтайыҡлар, күктең төбө тишелгәндер, биҙрәләп ҡоя ғына, был ямғыр тыммаҫ ул!

– Аллаға рәхмәт, ямғыр ебәрҙе, – Ҡәйүм эстән генә һөйөндө.

Көн дә малдарҙы ашатыу өсөн өс урынды урап: Батҡаҡҡа алып барып, Ҡырын-йортҡа төшөп, Еллеғая тармағынан өйгә алып ҡайта торғайнылар, бөгөн йөрөү эләкмәне.

Ямғырҙа лыс һыу булып күшегеп, дер-дер ҡалтырап ҡайтып ингәс, Фариза инәләре кейемдәрен алыштыра һалды ла, Мәғәфүрә ҡыҙы менән һәр береһенә ҡорот һыулап эсерҙе, дебет шәлгә урап ултыртты. Иртәгеһен Ҡәйүм берсә янып, берсә ҡалтырап ныҡ ауырыны. Фариза инәһенең өй эштәре күп булғанлыҡтан, күберәк Мәғәфүрә апаһы уның янында булды.

– Ҡарағат менән мәтрүшкә сәйе эсһәң, һә тигәнсе төҙәлерһең. Төштән һуң әсәйем, япраҡҡа һалырмын, – тине. Ҡәйүмдең йөрәге һыҙланы, болоҡһоуланды.

Уны-быны аңламаған Мәғәфүрә күҙҙәрен осҡонландырып, ҡулдарын йәйеп, үҙ эшен башҡарҙы.

– Усларыма һаулыҡ нурҙары йыйҙым, хәҙер уларҙы һиңә ебәрәм.

Йәнәһе, тирмә ярығына төшкән ҡояш нурҙарын усына йыя ла,Ҡәйүмдең маңлайынан, битенән һыйпай.

– Ҡустым йәһәтерәк аяҡҡа баҫһын, әпсен-төпсөн, зәхмәттәр үлһен! Һауыҡһын да ҡустым уйынға йүгерһен!

– Ә ниндәй уйын? Гөр-гөр, гөр әтәс, ике тауыҡ бер әтәсме? – тип көлдө Ҡәйүм, бәләкәй саҡтарын иҫләп.

– Эй, һаман шуны онотмай бит әле. Юҡ, бер тауыҡ ике әтәс, тип Хәммәт ағайым мине үсектергәйне әле.

– Эйе.

Гөргөлдәк уйнағандарын иҫләп, рәхәтләнеп көлөштөләр. Ҡәйүм хатта һыҙланыуын да онотто.

Ул арала инәһе, ике күршеһе менән әллә күпме һөттән ҡаймағын айырып, ҡатыҡ ойотто, элекке ҡатыҡтан эркет ҡайнатып, ҡорот һарҡытырға ҡуйҙы. Ҙур ҡаҙанда ҡашыяҡтарҙы йыуғас, ҡаҙанға төшкөләккә йәнә аш һалды. Күршенең береһе быҙауҙарҙы ҡыуып ҡарарға китте, икенсеһе өй мәшәҡәттәрендә булышты. Улар көн дә шулай ярҙамлашып, тамаҡлыҡ ризыҡ алалар.

Фариза, бушағас, ышыҡ ерҙә ут яҡты, ерҙе йылытып, төрлө үлән, сәскә, япраҡ һалып, малайҙы шунда күмде.

Инәһенең тылсымымы, әллә Мәғәфүрәнең өшкөрөүе килештеме, ул тиҙ һауыҡты.

Бесән ваҡыты, иң ҡыҙыу мәлендә, Әлекәй йәйләүендә тирмә ҡороп, Ҡәйүм ҡырҙа йәшәүҙәрен ярата ине. Икмәк юҡ. Ҡаҙан тултырғанса ит бешереп ашайҙар ҙа, ҡымыҙ, ҡатыҡ эсәләр. Донъя тулы малға бесәне лә байтаҡ кәрәк. Йәй буйы Әлекәй, Йәркәй ере, Аҡъюл, Ҡорған яландарын таҡырайталар. Ҡәйүм сабырға эшкинмәгәс, ул көтөү көтә, тик бөгөн, әҙерәк һауыҡһын тип, ит бешерергә ҡалдырҙылар. Фариза инәһе әҙерләп китә, утын ғына өҫтәп, ҡарауылларға кәрәк. Яҡындағы урмандан әҙерәк утын йөкмәп килгәнсә, күрше Аҡъюл станынан итте урлай ҙа китәләр. Ҡәйүм күҙ йәштәре түгә-түгә, илап барыу менәнме ни, рәхәтләнеп туйып, ауыҙынан шайығы ҡойола-ҡойола майлы бармаҡтарын ялап ултыралар. Ул йән-фарман олатаһы янына йүгерҙе. Булған хәлде һөйләп:

– Утын йыйғанда, «Ҡәйүм, йүгер, Ҡәйүм йәһәтерәк!» тигән тауыш ишетелгәнгә йүгереп усаҡ янына килгәйнем, һуңлағанмын, – тип аҡланырға уйлағайны, олатаһы бүлдерҙе.

– Ҡәйүм улым. Өйөгөҙҙән күсенгәс, өй эйәһе һиңә яурыныңа фәрештә булып күскәндер, тип һөйләнем бит, онотма. Уны ғына тыңла, ул ҡушҡанса эшлә, – тип эстән ниҙер уҡып, улының башынан, ҡулынан өс ҡат уратып һыпырҙы ла, ситкә ҡулын һелкеп, өс тапҡыр төкөрөп, өшкөрөп алды, юғиһә малай ҡурҡышынан ҡойолған да төшкән.

– Үҙ тәҡдирең. Алла ҡушмай, бүре ашамай.

Шунан алып уны үҙенә «Фәрештәле Ҡәйүм», ә кеше араһында «Ҡойонурыҫ» тип йөрөттө олатаһы, серен икеһе генә белде.

Бер мәл шулай ауылға Исмәғил исемле уҡытыусы килә. Ғәрәп уҡытыуынан һуң латинса йәки ысулса уҡытыу килә. Шул ысулса уҡытыуҙың татар уҡытыусыһы өйрәткән бер нисә һүҙе генә Ҡәйүмдең хәтерендә ҡала:

*теш-атыш, як-аяк,*
*озон-кыска, бейек-тәбәнәк,*
*бәләкәй бала, безгә бара,*
*сезгә бара,*
*кабык-әрйә.*

Ошоларҙы отоп алған да көйләп тик йөрөй. Үҙҙәрендә ятыуға ҡарамаҫтан, Әхмәтшәрифтең балаларына уҡыу эләкмәй. Иҫәбе-һанына сыҡҡыһыҙ мал көтәләр, йәй буйы бесән сабалар, буш ваҡытта, исмаһам, әҙ булһа ла балаларына уҡырға өйрәтер тиһә, был татар уҡытыусының бер тин файҙаһын күрмәй. Түлкә баҙарға йөрөй, бал, май, утын һата, бармағы үҙенә кәкре, шуға күрә лә уға был өйҙө бушатырға тура килде уға.

Уҡыу-яҙыу тәтемәһә лә, Әхмәтшәрифтең балалары донъя көтөү өсөн тәғәйен эштәрҙе үҙләштерә барҙы. Бәләкәй генә саҡтан Ҡәйүмде гел генә умарта янына йөрөттө, сөнки араларында иң ҡыйыуы, иң сыҙамы, бал ҡорттарын ҡарауға иң әүәҫе ул ғына ине.

Йылыға йылан эйәләй, тигәндәй, бер саҡ уларға Михул татары эйәләште. Сөсөлдәп, матур һөйләп, Әхмәтшәрифтең күңелен биләне лә кәрәкле йомошона күсте. Балдың ҡаҙағы ике тәңкә, ә теге хәйләкәр татар ботлап бал ала ла Михул баҙарында ҡыйбатҡа һата икән. Тайҙың хаҡы етмеш-һикһән тәңкә, бал һатыу кәсебе менән тай алырлыҡ аҡса эшләгән. Унынһын ишетеүгә Әхмәтшәриф ҡыуанды ғына, исмаһам, берәүгә файҙам тейҙе, тип. Икенсенән, теге татар балға ҡомалаҡ өҫтәп шаң-шоң бал ҡоя ла өмә эшләтә икән, уныһы ла хуп, тик шул тилерткес балын һатып, әллә күпме ирҙәрҙе болартып, өйҙә ҡаңғырышып йөрөүҙәрен, хатта ҡатындарын туҡмап, айырылышыу сигенә еткәндәрен ишетеп, Әхмәтшәриф башҡаса теге татарҙы тупһаһына яҡын да юлатманы.

***

Көтмәгәндә донъялар боларып китте. Ауылға бер ҡараһаң, ҡамсы һелтәп, атлы казактар килеп тула, ике-өс көн дә үтмәй, мылтыҡ аҫҡан аҡтар даулаша.

Аңҡы-тиңке килгән халыҡ кем ҡайҙа етте, шунда ҡасып боҫа.

– Олатай, кемнәр, нимә өсөн һуғышалар? – тип ҡыҙыҡһына, күпте белергә, төпсөнөргә яратҡан Ҡәйүм.

– Казакларҙы баҫып, Ленин әрмийәһе килде. Ленин ҡарт Эрәсәйҙе алам ти, казачийлар бирмәйбеҙ тип талаша.

Яҡында ғына атыша башлағас, Әхмәтшәриф эргәһендәге балаларҙы ҡурсалап:

– Боһоғоҙ! Мейескә теймәй, тейһә лә үтмәй ул! – тип ҙур мейестәргә йәшерҙе.

Шулай бер мәл малайҙарҙы аҡтар яман ғәҙәткә өйрәтеп китеүенә Әхмәтшәриф үртәләнде. Өй мөйөшөндәге мүкте төрөп, баланут сәйен тарттылар. Күпме шелтәләп, шыйыҡ сыбыҡ менән ҡурҡытып ҡарамаһын, Фәруҡ йәшерен-батырын тартыуын дауам итте. Тәүҙә ҡыҙыҡ күрҙе, һуңынан ғәҙәткә инде. Бала саҡта Фәруҡ өсәүһенән: Хәммәт, Ғәлләм, Ҡәйүмдән тырам-тырағай йөрһә лә, уның этлек, мутлыҡтарын Мәғәфүрә көйләргә тырышты.

Шул тиклем аҡыллы, зиһенле, тәүфиҡлы ҡыҙ. Бер ваҡытта ла сырайын һытмай, йөҙөндә гел йылмайыу. Шуныһы ҡыҙыҡ – айыу ашарҙай булып үртәләнеп йөрөгән сағында уға осраһаң, бөтә асыуҙарың елгә оса ла ҡуя. Бер ғилләһе бар, ахыры. Аҙ һөйләй, наҙлы һөйләй, эш һынашмай, күп эшләй. Ағалары, ҡустыларына күҙ-ҡолаҡ, үҙе йомоҡ-йоҙаҡ, саҡ ҡына ҡырын яҡтарын тойҙомо, һә тигәнсе яйлау әмәлен таба. Ауылда ла боҙолошҡан кешеләрҙе яраштыра, дошмандарҙы дуҫлаштыра. Оло эш башҡарғандай, ҡайын ағасына һөйәлгән килеш ҡулдарын баш осона ҡуя ла, тора бирә, йәнәһе күктән һәм ҡайындан тылсым көсө йыя. Атаһынан уларға: Мәғәфүрәгә – «Әүлиә», Ғәлләмгә – «Шомбай», Хәммәткә «Әртис» ҡушаматтары тағылды. Ауыл халҡына ла холоҡтарына ҡарап исем бирергә яратты. Үҙе гел шулай мәрәкәсел, ғауға яратмай, бөтә шөғөлө – мал-тыуарын, йорт-ҡураһын бағыу, балаларына аҡыл-фәтеүә биреү. Был йәһәттән ҡатыны Фаризаһы – уң ҡулы. Икеһе бер ауыҙ, бер һүҙҙән аңлаша. Икмәк етмәһә лә, ите, майы, эремсеге, ҡатығы, ыҫланған ҡымыҙы менән шөкөр итеп донъя көттөләр.

Уйламағанда илдә ҡурҡыныс сир таралды. Ауылдан күптәр аслыҡтан, йә булмаһа сирҙән ҡырылды. Урамда ла хәҙер кеше һирәк-һаяҡ ҡына күренә. Тамаҡ һорап килеүселәрҙе йомарт ҡуллы Әхмәтшәриф буш сығарманы, юҡсылыҡ ваҡытта бәләкәй генә ауыл уға ҡарап ҡалды. Мал-тыуар һуйһа, тиреһен дә таратыр, һарыҡ йөнөн ҡырҡышһалар ҙа өлөш сығарыр ине, сөнки халыҡ ас, яланғас.

Ул һырма салбарын ҡыш буйы төшөрмәй кейә лә, тиртун эләктереп, үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә ҡыптырҙай ҙа йөрөй.

– Биргән тирене эшкәртергә йыбана бит халыҡ, тамам хәйерсегә әйләнде. Күктән бер тамсы ямғыр төшһәсе… Йылғала һыу ҡороған, балыҡ күп, сөмбәйҙә ҡамалып бөткән. Балыҡ тотоп ашамай, салғы тотам тигән кеше юҡ. Һаман мосафирлап, һоранып ашап тик йөрөйләр, башларын алйотҡа һалалар ҙа хәйерселәп йөрөүҙе ғәҙәткә индерҙеләр.

– Үәт ялҡау, алама әҙәм, – тип йөрөгән кешеләргә ҡай саҡ көйөнөп тә алды.

Әхмәтшәриф иренмәне, мал тиреләрен эшкәртте, тиртун, кәзекәй, толоп текте. Бик мохтаждарға бүләк итеп тә ебәрҙе. Ҡыш көндәре малайҙар өйҙә олатайҙарынан төрлө һөнәргә өйрәнде. Аттың бот тиреһенән ыҫлап эшкәртелгән күндән һауыттар ҙа тектеләр.

Әхмәтшәриф менән Фариза табип урынына йөрөнөләр, ауырыуҙарҙың ҡайһы берҙәрен им-том, төрлө дарыу үләндәре менән ҡотҡарып алып ҡалдылар, кемдәрелер кинәт кенә донъя ҡуйҙы. Иң йөрәкте тетрәткәне – ауылда башланған

ваба ауырыуынан, моңло тауышлы «әртис» Хәммәт тә үҙ йәшендә генә әрәм булды. Көтөлмәгән әжәл һәр кемде ҡурҡытты – күңелле йырҙар, мәрәкә һүҙҙәр, шат йөҙҙәр бер аҙға тынып торҙо, өйҙө шомлоҡ баҫты.

Совет власы ярҙамы тип ярлыларға,ҡарт-ҡаңҡыға икмәк ебәрәләр. Шулай ҙа ауыр йот йылында аслыҡтан, яман ауырыуҙарҙан үлгән кешенең иҫәбе юҡ, утын киҫеп ташлаған кеүек, зыяратҡа өйә бирҙеләр. Ҡот оҫҡос хәл – бөгөн сығып торған берәү иртәгеһен гүр эйәһе.

Аръяҡ урамдан Хәҙисә менән Миңлебайға был йыл уңалмаҫлыҡ яра һалды. Туғыҙ балаларының дүртеһе бер-бер артлы донъя ҡуйҙы. Кинйәкәүҙәре бишенсе мәйет булып өйҙән сыҡҡас, ауыл халҡы улар йортон урап үтте. «Ҡартайһаң да, Хоҙай биргән ғүмерҙе һаҡлағы килә», тигәндәй, йәнен ҡурсалап, ут күршеһе Мөслимә лә бәләкәй генә иҫке өйөнән сыҡманы. Мәйет булған өйҙәрҙән сирҙәре йоға, тип кеше сирҡанып, шикләнеп ҡараны.

Әүәлге шау-гөр килгән халыҡ, күпмелер ваҡыт өркөп-боҫоп ятҡандан һуң, анда-бында ҡалҡып сыҡҡан үҫентеләрҙәй, һирәк-һаяҡ өйҙәренән морон төрттөләр.

– Сикәнгәнгә йоға, иҫең китмәй генә, Хоҙайға тапшырып, доғалар ҡылһаң, сир-зәхмәттәр ҡағылмай, – тине Әхмәтшәриф ҡатынына һынсыл ҡарап.

– Тел төбөңдө аңлап торам. Миңлебайҙарҙың хәлен белергә ниәтең, шулаймы?

– Шулай. Алыҫ булһа ла туғанлыҡлары бар бит.

– Изгелек менән тулышҡан күңелең үҙенә урын тапмағанын һиҙеп торам. Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәгәс. Йә, әйҙә булмаһа, барып урайыҡ.

Уларға Ҡәйүм дә эйәрҙе. Өйҙәге мәхшәр йөрәктәрен өшөттө. Миңлебай менән Хәҙисәнең йөҙҙәре һурыҡҡан. Өҫ-баштары ла керләнеп ҡатҡан. Уртансы улы иҫәнләште лә уңайһыҙланыпмылыр, йәһәт кенә табанын ялтыратты. Ҡалған бәләкәйерәк өс ҡыҙ моңһоу күҙҙәрен мөлдөрәтеп, һораулы ҡараштарын килеп инеүселәргә йүнәлттеләр.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, бер аҙ әңгәмәләшеп алғас, хужа менән хужабикәнең сырайы яҡтырып киткәндәй булды. Фариза һөттән эшләнелгән ризыҡтар, бер сеүәтә бешкән итте өҫтәлгә ҡуйҙы. Ас балалар рөхсәт һорағандай, әсәләренә төбәлде.

– Еңгәй, ҡайҙа үҙем генә ҡояйым.

Фариза балаларға ҡатыҡ эсерҙе. Бит-ҡулдары сәбертеп бөткән, яңаҡтары эскә батҡан, аяҡтары тал сыбыҡтай ғына ҡалған ҡыҙҙар, тамаҡтарын туйҙырып алғас, шыпырт ҡына урамға сыҡты.

– Еңгәй, балаларҙы нимәлер тешләгән шикелле, тәндәре сәберткән.

– Ошо өйҙө һыларға ла ҡул теймәй бит, мүк араһы ҡандала менән тулған, төнө буйы йоҡо юҡ, – тип үртәлгәнде Хәҙисә.

Шуны ғына көткәндәй Әхмәтшәриф өмә үткәрмәксе булды. Утъяҡҡыста Миңлебай менән ҙур ҡаҙанда һыу ҡайнатып мүк араларын бешекләнеләр, һуңынан Ҡәйүмгә артыш тотторҙо ла ыҫлап сығырға ҡушты. Малай ҡот-оҫҡос күренештәрҙән һуң Хоҙайҙан барса халыҡҡа ла тыныслыҡ, тигеҙлек, етеш тормош һорап, теләктәр теләне. Фариза йыйылған керҙәрен ҡайнатып, сайҡатып элде. Нәҡ шундай мәлдә йонсоған ҡыҙҙарҙың оҙон ҡуйы толомдарын йәмһеҙләп, бет үрсеп өлгөргән. Фариза уларға ла сараһын тапты. Кәрәсин һөртөп, бер аҙ томалап тотто ла ҡара мунса эҫеһендә ҡара тирҙәре сыҡҡансы сабындырҙы. Ҡыҙҙарҙың ыһылдауҙарын ишетмәмешкә һалышты. Иртәгеһен, һөйәк тараҡ менән тарап, сәстәрен ярып ҡарап сыҡты. Тын алып ҡалған ҡыҙҙарҙың олоһо, дәртләнеп, ҡырып иҙән йыуҙы, кесеһе әремдән һепертке яһаны. Еҫе сыҡһын, тип, сүп булмаһа ла, һеперҙе.

– Эй, Фариза һылыуым, ҡом бурыслы булдым инде һиңә. Тормош ҡорғанын ябып, ҡараңғыға бикләнгәйнек, ҡорғанды асып, ҡояш бүләк иттең. Мең йәшә, балаларың, Әхмәтшәриф менән татыу булығыҙ! Изгелегегеҙ үҙегеҙҙе изгеләктәргә күмһен!

Ҡыуанысынан теләктәрен бер-бер артлы теҙҙе. Миңлебай тәүҙә килененә, Ҡәйүмгә рәхмәттәрен яуҙырып, шунан Әхмәтшәрифтең ҡулын ҡыҫып, арҡаһынан балаларса һөйөп алды.

– Рәхмәт, ҡусты. Ауыр саҡта таяныр таянысыбыҙ булдығыҙ. Кешегә эшләгән яҡшылыҡ үрсеп үҙеңә ҡайтасаҡ, Хоҙай Тәғәлә икеләтә рәхмәтен яуҙырыр.

Фариза менән Әхмәтшәриф иңдәренән ауыр йөк ташлағандай, ҡәнәғәт төҫ менән өйгә ҡайттылар. Ҡайғыһы баҫылһын, тип Хәҙисәне көн дә үҙенә саҡырҙы. Эш араһында онотолдо. Аҙаҡ тамағын да биреп ебәреп торҙо.

Аслыҡ үҙәктәренә үтеп, ауырыуҙан йонсоған ауылдаштарын Илбаҡовтар ҡайғы ярына сығарып ташламаны. Күпме ауырлыҡтарҙы иңдәрендә бергә татыны. Бер көн шулай, яҡты киләсәк өсөн ауыл халҡына ҡорбанға йылҡы салып, бағымсы, яман сир-зәхмәттәрҙе ҡыуҙырыу йолаһын атҡарғандан һуң, халыҡтың күңеле асылды. Урыҫ та булдымы кеше йәки урыҫҡа көнөң ҡалмаһын, тип көнләшеп, мыҫҡыллы көлөп йөрөүселәр иһә Илбаҡтарға оло ихтирам менән ҡарай башланылар.

***

Ҡәйүм иһә күп ваҡытын көтөүҙә уҙғарҙы, ялан-ҡырҙарҙы яңғыратып боронғо йырҙар һуҙҙы, тәбиғәт менән һөйләшеп-серләшеп күңелен баҫты. Бигерәк отҡор шул, олатаһының бөтә йырҙарын да, доғаларын да яттан белә. Кәүҙәгә бәләкәйлегенә һис зарланмайса, «алтын ҙур булмай ул» тип, ҡулдарын бөйөрөнә таяна ла, маһайырға ярата. Ер-һыу атамаларын да, тарихын да олатаһы кеүек килештереп һөйләй.

Ҡәйүмдең хәтере шәп. Әллә күпме малды олатаһы ҡушҡан исемдәре менән саҡыра, һәр береһенең ҡылығын белеп бөткән. Йәй көнө, емеш-еләк ваҡытында кеше-маҙар өлгөргәнсә, Ҡәйүм моҙғаға (туҙҙан эшләнгән силәк) емеш тирҙе. Ҡоштар менән һөйләшә, сиңерткәләр, күбәләктәр менән ярыша, нәфис сәскәләр менән серләшә, туҙҙырылған ҡырмыҫҡа иләүҙәрен өйөп ҡуя ла, егәрле ҡырмыҫҡаларҙы күҙәтә. Ҡырмыҫҡа иләүендә файҙалы майы бик һирәк кенә күтәрелә, ти, олатаһы, тик Ҡәйүмгә бер ҙә осраманы. «Күреп ҡалһам, бирге яҡтағы Хәнифә инәйҙең аяҡтарына һөртөр инем, бахырҡай, аяҡтары йөрөмәй, өйҙә тик ята, хатта ғына йәлләйем шул инәйҙе», – тип иләү янында уралды. Арып китһә, әүлиә Мәғәфүрәләй ҡайын ағасына терәлә, ҡулдарын өҫкә күтәреп, һауа менән бәйләнешкә инә. Тәбиғәттең һәр күҙәнәге лә тере кеүек. Сыуаҡ көндәрҙә йәшел туғайҙары түшәм булһа, ел-дауыл, яуымдарҙа ышыҡ Ташөйө бар. Эҫелә шишмәгә төшөп, һыуһын ҡанғансы һалҡын һыу эсә лә, сирҡана-сирҡана ҡойона. Селтер-селтер хәбәр һүтә-һүтә үтеп китеүсе йылғаға ҡарап, тәрән уйға сума.

Һиҫкәндереп кемдер ҡулдары менән күҙен ҡапланы.

– Ай-яй, яй! Кемнәр ул?

– Еннәр ул.

Мәғәфүрә эсе ҡатып көлдө.

– Бесәйгә көлкө, сысҡанға үлем.

– Ҡуйсәле, үлемде һөйләмә, былай ҙа Хәммәт ағайымды онотоп булмай, ишшу һин яраға тоҙ һалаһың.

– Апай, гел иҫләйем уны, йырҙары ҡолаҡта сыңлай.

Мәғәфүрә ауыр һуланы ла, ҡулын Ҡәйүмдең яурынынан ҡосаҡлап:

– Ҡустым, Хәммәт ағайымдың яраткан мөнәжәтен йырласәле, – тип үтенде.

Инәлтергә яратмаған Ҡәйүм, иркен тын алды ла, мөнәжәт әйтте:

*Ошбу көн уар мыш иҫем*
*Хайран өсөн сәхрә тараф.*
*Күп гүзәл ул мыш себенләр*
*Лә һүзәр ул мыш сараф.*
*Ҡазлар ҡарар итмәк ҡасар,*
*Торналар тормас осар.*
*Былбыл диуаналар*
*Гөлләр өсөн яшен сәсәр.*
*Үлән өстөндә сикерткә*
*Төрлө ауазын салыр.*
*Серкәйе лә сүре себен.*
*Тызлайыпма заң алыр.*
*Суфи турғалар да мадам*
*Күкләрҙә яуҙан иҙәр*
*Аһидәрсәм, уаһидәрсәм.*
*Үтте ғүмерем ғәфләтиҙә*
*Янүмәрдү ләрсәни.*

– Ыстағафирулла тәүбә, тас Хәммәт ағайым кеүек әртисһең дә баһа. Ғүмерҙәре генә ҡыҫҡа булды, мәрхүмдең. Мин уны белдем, белдем...

– Ҡайҙан?

– Айҙан.

– Шаярмай ғына, ысынын әйт әле, ҡайҙан белдең? – тип төпсөндө Ҡәйүм.

– Төпсөнөп төбөнә тоҙ һалаһыңмы, төпсөк?

Мәғәфүрә йәнә рәхәтләнеп көлдө. «Ысынлап та, әүлиәләр» тип уйланы Ҡәйүм. Көтмәгәндә ағастар араһынан түбәнге ос малайы Тимерйән килеп сыҡты ла:

– Урыҫ тоҡомо, башҡортса йырлай ҙа белмәй бит әле, – тип ҡысҡырып ебәрмәһенме.

–Аңра, был ысын башҡорт йыры ла баһа! – тип иреште Ҡәйүм.

– Алдама, әллә ниндәй урыҫ һүҙҙәрен ишеттемсе, – тип үҙһүҙләнде Тимерйән.

– Боронғо башҡорт йырын олатайым ҡомартҡы итеп ҡалдырған, Хәммәт ағайым, йырлап йөрө, онотма, был мөнәжәтте бер кем белмәй, тип өйрәткәйне. Башҡортмон тип ҡупырынған булаһың, үҙең боронғо йырҙы ла айырмайһың.

– Мөжәт, мөжәнәт, ни бысағыма хәжәт. Бына йыр ҙа сыҡты, был, исмаһам, йыр, – тип үҙенсә ниҙер мыңғырланы ла, еңә алмаған, телен күрһәтеп күҙҙән юғалды. Өнһөҙ генә тыңлап ултырған Мәғәфүрә аяғүрә баҫты ла, япмалы күлдәген елберләтеп ҡаҡҡыланы, йәнәһе сырышмаған микән. Уның һайын камзулындағы көмөш тәңкәләр сыңы яңы бер моң тыуҙырҙы. Мәғәфүрә кинәт кенә ике тәңкәне өҙөп алды.

– Ҡустым, мә быныһы һиңә, икенсеһе миңә. Атайым, йылғаға тәңкә ташлаһаң, теләктәрең ҡабул була, ти, әйҙә, һыуға ташлайыҡ. Тик эстән генә теләк теләргә кәрәк.

– Тәңкә өсөн инәйем асыуланмаҫмы?

– Ҡуйсәле. Тәңкәләрем күп-үп минең. Тик был турала Фәрүҡ ағайыма әйтә күрмә! Ул былай ҙа һине күралмай, атайҙы көнләшәсе, беләһең дә инде. Ғәҙәт китһә лә, холоҡ китмәй. Боҙоҡлоғон ҡуймай. Бер тылсымымды эшләп ҡарайым әле, килешһә – шәп булыр ине.

Икәүләп тәңкә ташлайҙар.

– Теләгең ҡабул булһа, йылғаға килеп рәхмәт әйтергә онотма. Ә-ә-ә, иҫемә төштө, әсәйең ауырып ятҡанда, әсәйемә бер нәмә ҡалдырған, үҫә төшкәс, һиңә бирергә тип. Бөгөн һорайыҡ әле.

– Ярай. Хәҙер әүлиә апайым, әйтсәле, мин күпме йәшәйем?

– Кәкүк түгелмен бит ғүмер һанарға?

– Йә инде…

– Йөҙгә бер-ике тулмай, ха-ха-ха.

Кисен көтөүҙән ҡайтҡас та Ҡәйүм инәһенән Мәғәфүрә әйткән нәмә хаҡында һораны.

– Балам, бер үк кисер мине. Мынау сама донъя мәшәҡәттәренә сумғанмын, хәтерҙән сыҡҡан. Бөркәнсекле тыуғанһың, ошо бетеү – бөркәнсегеңдә бер ҡасан да юғалтмай үҙеңдә йөрөтһәң, уңырһың да, бәлә-ҡазаларҙан да йыраҡ булырһың – әсәйеңдең васыяты шул.

– Рәхмәт, инәй.

Бетеүҙе усына алыу менән тәне буйлап йылылыҡ йүгерҙе, эсендә иркенлек, тыныслыҡ тойҙо. «Әсәйемдең ҡулдары теккән бетеү…әсәйем ҡулдары…» Ҡәйүм элекке кеүек ата-әсәһен саҡырыуҙан туҡтаны, сөнки күптән танауына еҫ керҙе. Етмәһә, олатаһы менән инәһе икеһен дә үҙ балалары кеүек ҡарағас, йәтимлекте тойманылар. Ысынлап та, бөркәнсекле бала булғанғамы, әллә фәрештәләре һаҡлағанғамы Ҡәйүмдең уйлағаны алдына килеп кенә торҙо. Инәһе, олатаһы менән һүҙгә килешмәне, хатта Фәруҡ аҙым һайын унан көнләшеүҙән аяҡ салһа ла, ирешмәне-талашманы. Олатаһының «өндәшмәгән өйҙәй бәләнән ҡотолған» тигәнен хәтерләй ҙә, бер ни булмағандай йөрөй бирҙе. Бер мәл әсәһе ҡалдырған бөркәнсеге тегелгән бетеүен юғалтты. Мәғәфүрә апаһы менән күпме эҙләһәләр ҙә эҙенә төшә алманылар.

– Борсолма, ҡустым, ҡайҙа ла фәрештәләрең һаҡлаясаҡ, – тип башынан, яурынынан еңелсә генә ҡулын йөрөттө.

– Әллә, ысынлап та, әүлиә инде! Тәнем буйлап зымбырлатҡансы нимәлер йүгерҙесе!

Былай ҙа тумалаҡ күҙҙәрен һупайта ҡараны ла кәүҙәһен һелкетеп алды.

– Ҡәйүм! Һуғышҡа әҙерлән!

Ялан кәртә яғынан килгән Ғәлләм ағаһы, яр һалып, Ҡәйүмде елтерәтте.

– Нимә булды?!

– ?..

Ҡәйүм менән Мәғәфүрә бер юлы Ғәлләмгә һорау менән ябырылды.

– Йондоҙ ҡашҡаңды утлыҡҡа бикләгән дә, Фәруҡ уйынға әүрәп, көнө буйы атты ас тотҡан, имеш, онотҡан. Асыуымдан үҙем дә һиҙмәҫтән әҙерәк йоҙроҡ еҫкәткәйнем…

– Йөрөгәне менән бер болғаҡ! – тип үртәләнде Мәғәфүрә. – Ҡайҙа һуң үҙе?

– Кәзәһе эргәһендә йөрөй бит, ҡылтайып сығып йүгерҙе.

– Әйҙә, бесәнлек башынан ҡарайыҡ әле.

Ҡәйүм Ғәлләм ағаһына ымлап, кәртә яғына күрһәтте. Әтәсләнгән ҡустылары эште ҙурға ебәрмәһен тигәндәй, Мәғәфүрә араларында буталды. Күҙ асып йомғансы бейек кәртә башынан Ҡәйүм йығылып төштө. Ауыҙҙарын турһайтҡан, ҡып-ҡыҙыл битле, йыуантыҡ Фәруҡ ҡәнәғәт төҫ менән өҫтә эсен кәпәйткән. Эргәһендә әлеге лә баяғы Ҡыҫтыбый-Тимерйән тора.

– Йә, әрәмтамаҡ, етем башмаҡтар! Фәруҡты ситләтеп, ата-әсәһенә ярамһаҡланып йәшәүегеҙ етмәй, инде килеп аттарына хужа булырға уйлайһығыҙмы? Бына һеҙгә! – тип ҡарлыҡҡан тауыш менән йоҙроҡ төйнәп күрһәтте.

– Бауылдама! Шул ҡәҙәре боҙоҡһоң, кәрәгеңде биргәндә көтәһеңдер! Нимә етмәй һиңә?

Ҡустыһы өсөн үс алырға йыйынған Ғәлләмде ярҙамға саҡырҙы ла Мәғәфүрә әсәһенә йүгерҙе.

– Әсәй! Тиҙерәк кил! Ҡәйүм ҡустым үлә инде.

– Ҡыҙым, әсәкәйем, Аллаҡайым тип - кәй, - ҡайҙы ҡушып әйтмә, иблис исеме ул, ул, ана, мине изге кешеләргә лә, Аллаға ла ҡушып әйтәләр, шуны ишеттем, тип шатлана, ти. Йә, ни булды, балам?

Булған хәлде аңғартҡас, улар Ҡәйүм янына киләләр.

Йөҙтүбән төшкәс, бите ҡарарлыҡ түгел, етмәһә, тимерме, ташмы маңлайына эләккән.

Аңына килгәндә, барыһы ла Ҡәйүм янында урала ине.

– Һеңкәне ҡоротто бит был кейәнке Тимерйән. Бәйел аҙмай, башҡа бәлә килмәй, бәйеле аҙҙы баланың. Ҡара башына булғыры. Балаларҙы болғап йөрөүең етәр, хәҙер үк табаныңды ялтырат, ҡабат бында эҙең дә күренмәһен. Юғиһә, алама эшләреңде шәйләп, Алла бабай башыңа һуғыр!

Фариза, һуҡрана-һуҡрана, Ҡәйүмдең маңлайынан баҡыр тәңкәне алды ла һыулы таҫтамал баҫты.

– Инәй, ул маҡтансыҡ әйтә лә онота, Тимерйәндең зыяны юҡ, ә мин кәртә башынан яңылыш ҡына үҙем йығылдым, – Ҡәйүм малайҙы яҡлашып маташһа ла, инәһе ҡырт киҫте.

– Яҡшатланма! Ҡасан ҡарама ҡулын кеҫәһенә тығып һәптәндәүҙән башҡа эше юҡ. Беҙгә килһә, хатта эткә лә көн күрһәтмәй, икмәккә ымһындырып, үсектереп ырылдата ла йөрөй.

Һыҙлауға сыҙамай,Ҡәйүм ыңғырашты.

Инәһе ҡулының быуынынан сыҡҡанын һиҙеп ҡалды ла, йәһәт кенә үҙ белдеге менән төшөрөргә тотондо.

– Мейең дә һелкенгәндер, әле эңер төштө, иртәгә мейеңде ҡағырмын. Олатайыңа иҫкәртергә кәрәк: Тимерйәнгә эйәреп Фәруҡ аҙып китмәҫ элек, өйҙә тыныслыҡ, татыулыҡҡа мал инселәргә кәрәк, юғиһә өйҙөң ҡото китте.

– Инәй, Ғәлләм ағайым менән өйөбөҙгә ҡайтайыҡ, үҙебеҙҙе ҡарай алабыҙ.

– Бушты һөйләмә! Һеҙ бер туғаннар кеүек татыу йәшәргә тейешһегеҙ. Фәруҡ та теге ос малайы менән йөрөмәҫ, юҡһа, һеҙгә көн юҡ. Татыулыҡҡа берәй әмәле табылыр, сабырлыҡ кәрәк.

Мейе һелкенһә, күңел болғана торған, тип Мәғәфүрәнән ҡорот һыулатып, Ҡәйүмгә эсерҙе.

Әхмәтшәриф менән Фариза балаларҙы дуҫлаштырыу өсөн яйын таптылар.

– Балаларым, алтыннарым минең. Татыулыҡҡа тау ҙа ҡыҙыҡҡан, тигәндәй, кешене ҡыҙыҡтырып, татыу йәшәргә кәрәк: биш бармаҡтай, биш инегеҙ, хәҙер дүртәү, ҡайһы бармағымды тешләһәм дә, ауырта. Ҡолағығыҙға кертеп ҡуйығыҙ: һәр берегеҙҙе яратабыҙ. Тик тормошта кеше кешелеклек сифатын юғалтырға тейеш түгел, Хоҙай Тәғәлә барса насарлыҡтарҙы күреп тора, һаҡ булығыҙ. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: бер аҙна эсендә кем нимәгә оҫта берәй әйбер эшләргә, – тип балаларға берәм-берәм ҡарап сыҡты.

– Йома көндө инселәгән малды һуябыҙ, ғаилә байрамы ойошторабыҙ. Иң яҡшы эштәргә бүләк тә буласаҡ.

Фаризаны балалар бүлдерҙе:

– Ниндәй бүләк?

– Шәп бүләктәр. Тик иң матур, иң кәрәкле әйбергә генә.

Шул көндән балалар йәшерен-батырын үҙ һөнәрҙәренә тотондо. Әхмәтшәриф менән Фаризаны иң ҡыҙыҡһындырғаны: Фәруҡ ни эшләр икән?

Көтөп алған байрам етте. Бүләктәр менән серле төргәк урындыҡ түрен алды.

Фариза өйҙө байрамса биҙәне: аҫалы балаҫтар элде, сигеүле яҫтыҡ тыштарын кейҙерҙе, урындыҡ ситенә селтәрҙәр ҡуйҙы. Бер кем дә башларға баҙнат итмәгәс, Мәғәфүрә алға сыҡты.

– Атамдың янсығы туҙған, бына һиңә янсыҡ, әсәмә алъяпҡыс сиктем.

– Һай, афарин!

Ғәлләм:

– Олатамдың да, инәмдең дә аяҡ ҡулы һыҙлауһыҙ булһын, – тип оҫта итеп тегелгән күн аяҡ кейеме бүләк итте.

– Бик мәслихәт! – тине Әхмәтшәриф, аяҡ кейемен кейеп ҡарап. – Ҙурыраҡ та, нисауа, бындай әле ауылда түгел Эрәсәйҙә юҡтыр, шулай бит, Фариза.

Фариза ла улының күнгә тимерҙән семәрҙәр ҡуйып, оҫта эшләүенә хайран ҡалды.

– Шулай булмаған ҡайҙа ул.

– Эй, мин ней ағайым кеүек шәп нәмә эшләй алманым. Тал сыбыҡ тота ла йөрөй, шуға күрә олатама көтөүгә сыбыртҡы иштем. Инәмә ижау юнып эшләнем. Сынйыры ла бар.

– Хуп, хуп! Бына сынйыр тигәндәй, элек батырҙарҙы сынйыр, бығау менән тотҡандар, язалағандар. Ә Ҡәйүмдең ижауҙағы сынйыры, дуҫлыҡ сынйыры, бергә етәкләшеп татыу йәшәргә, бергә ҡунаҡлашып йәшәргә, тигән мәғәнә һалғандыр, моғайын, – тип олатаһы аңлатма бирергә тотондо.

– Эйе, олатай, башымда нәҡ шундай уй ине. Сынйыры ла етәү бит. Хәммәт ағайым эргәлә булмаһа ла, ғаиләлә ете кеше тип иҫәпләнем, ул беҙҙең күңелдә. Ете сылбыр, ете төҫлө йәйғор. Ә йәйғор кеүек етебеҙ ете төҫтә булһаҡ та, бер төрлө балҡыйыҡ, тип уйланым.

Олатаһы менән инәһе Ҡәйүмдең татлы теленә һоҡланды.

Фәруҡ ҡапыл сығып киткәс, бөтәһе лә шомланғайны, кире ишек асылыуға тынысландылар.

– Атай, мин оҙаҡ уйланым. Һин гел генә тал сыбыҡ менән һыҙырҙың. Ә тал сыбыҡ – туҡмау, аҡыл ултыртыу ҡоралы ғынамы ни? Юҡ, тал кәрәкле ағас, – тип талдан үрелгән ҡаҙ ояһы, тауыҡ ояһы индерҙе.

– Ҡарасы, атаһы, тауыҡтарҙың ояһы туҙғас, йоморткаларын ергә һалып, һайыҫҡан алып китеп ҡаҡшатҡайны. Һай, улым шәп иткәнһең дә инде, юҡһа атаңдың ҡулы теймәй киткәйне, – тип Фариза улын маҡтарға тотондо.

– Кәртә таҙартҡаның юҡ, ҡайҙан күрҙең һуң? – атаһы ғәжәпләнде.

– Атай теге мәл мине сыбыҡ менән һыҙырғас, кәртәгә йәшенгәйнем. Шунда күрҙем.

– Йә, ярай, балалар, барығыҙ ҙа бөгөн матур, оҫта. Рәхмәт яуһын үҙегеҙгә. Хәҙер, әйҙәгеҙ, тәмлекәсләр менән сәй эсербеҙ, аш ашарбыҙ, – тип төргәктән тәмлекәстәр сығарҙы.

– Ә бүләктәр, – тине балалар бер юлы һөйләшкән кеүек.

– Ял көнө баҙарға барабыҙ, кем нимә һорай, теләгәнегеҙ бүләк булыр.

Инселәнгән мал ашын ауыҙ итеп, тәүге тапҡыр ғаилә менән ихлас һөйләшеп, кәңәшләшеп, ғаилә табынында ултырҙылар.

***

Фариза – Ырымбур яғынан хәлле байҙың ҡыҙы, ауылда хөрмәтле кеше. Егәрленең ҡулы етәү тигәндәй, ҡулынан килмәгән эше юҡ. Атта ла һыбай саба, кәрәкһә, йәйәү ҙә йөрөргә иренмәй. Сөнки тирә-яҡ ауылдағылар уның шөғөлөн күптән белә: ат ҡолонлай алмаһа, ҡатын-ҡыҙ бәпәйләй алмаһа, бәпәйләтеү серҙәрен белә, им-томдары яфаланыусыларға килешә, тиҙәр. Ырымбур ҡыҙҙарына

ғына хас матурлыҡ: икенән үрелгән ҡуйы ҡара толомдары, түңәрәк йөҙө, шоморт күҙе, ҡыйғас ҡаштары, битендәге яғымлы миңе, иркә соҡоро – барыһы ла үҙенә килешә.

Бөгөн килеп тылсымын ғаиләлә һынап ҡарамаҡсы булды. Юғиһә, Фәруғы насар юлға китеүе ихтимал, ә Ҡотлоғилде ҡәйнешенең балаларын Хәммәт үлгәндән һуң тағы ла яҡыныраҡ күрҙе. Өйҙә тыныслыҡ хөкөм һөрәсәгенә сикһеҙ ышанды. Күп тә үтмәй барыһы ла яйға һалынды.

Ул хәл былай булды. Тимерйән ҡотҡоһо менән Фәруҡ йылға буйына бара.

– Бында эт тә юҡ, ҡурҡма. Рәхәтләнеп бер көйрәтеп алайыҡ әле, – тип Тимерйән кеҫәһенән төргәк сығара ла унан һарғайып бөткән ҡағыҙға кипкән үлән төрә. Фәруҡҡа тоттора һәм йәнә үҙенә шулай эшләй ҙә тоҡандырып, тәмләп бер һурыуға ҡайҙандыр Мәғәфүрә менән Ҡәйүм пәйҙә була.

– Әһә, ҡаптыңмы, майлы бесәй. Юхалап, һырпалап һаман да ағайымды тура юлдан яҙлыҡтырмаҡсыһыңмы? Ҡара уйың килеп сыҡмаҫ. Йә, ағай, аҫтыңа нимә йәшерҙең.

Мәғәфүрә, уның яуабын да тыңламайса, аяғүрә баҫтырып, кеҫәһен тентей башланы. Шул арала сая Ҡәйүм ситтә ятҡан тәмәкене табып алды ла апаһына һондо.

Тегеләй ҙә былай ҙа әйләндереп ҡарағас:

– Ҡөрьән китабының биттәре лә баһа. Тимерйән бисмилла итеп тәмәкеңде ташла, атыу анау һауала торған Алла олатай изге доғаны яндырғас, үҙеңде лә ғазап утында бешерер, ишетһен ҡолағың, – тип киҫәтеүгә, малай бошонмай ғына:

– Һы, әйтте бер һүҙ, уныһы ла йүнһеҙ, әүлиәмен тигәс тә кешене Алла менән ҡурҡытырғамы әллә. Иҫем китте, ти, иҫке сәкмәнгә, – тип эре генә тартыуын дауам итте.

– Апайым – ысын әүлиә, һин ауыҙыңды үлсәберәк ас, – тип Ҡәйүм Мәғәфүрәне яҡлашты.

– Ҡыҫтырылма, Ҡойонурыҫ, атыу ҡыҫтырылып үлеп ҡалырһың.

– Мин үлмәҫмен дә ул, һинең ғүмерең йәл бит әле. Теге мәл нәҡ ошо Үрембәт йылғаһы буйында ҡурҡыныс хәлде һөйләһәм, йөрәгең табанға төшәр.

Тимерйән күҙҙәрен секерәйтеп, мыҫҡыллы ҡарашын Ҡәйүмгә йүнәлтте лә:

– Тағы ниндәй өләпсәңдең әкиәтен тыҡымаҡсы булаһың, ә?

Ҡәйүм иҫе китмәй генә уйсан күҙҙәрен йылғаға төбәп, булған хәлде бәйән итте:

– Олатам менән балыҡҡа килгәйнек, инәм дә йылғала аҫмалы балаҫты йыуып ҡайтайым тип беҙҙең менән юлланды. Мин, ғәҙәттәгесә, арып әүен баҙарына киткәнмен. Уларҙың хәбәрҙәренә уянғайным, ололар һүҙен тыңларға ярамаһа ла, үҙ өҫтөмә гонаһ алып, шым ғына ҡолаҡ һалдым. Исем-шәрифтәре иҫтә ҡалманы, шулай ҙа күрше ауылдан бер ағай инде һылыу кәләшен һанға һуҡмай, икенсе ҡатын менән сыуалған. Теге һылыуҡай ире баяғы ҡатын менән ҡайҙалыр осрашырға киткәнен ишетеп ҡалған да, ғәрләнеп, Хоҙайға ялбарып илаған. Шул ваҡытта был икәү ошо тирәлә балыҡ тотоп, ял иткәндә ҡойоп ямғыр яуған һәм йәшен икеһен дә атҡан, ти. Ошонан сығып: олатайым инәйемә һәр гонаһ эште Хоҙай күрә һәм яҙаһын бирә, насар ҡылыҡтарҙан йыраҡ булырға кәрәк тине, белдеш?

– Юҡты лығырҙап, башты ҡатырма. Һарғайып бөткән бер ҡағыҙ өсөн йөҙ һүҙгә еттең. Ҡойоноңдо уйнатып ултырма әле.

Йән тартмаһа ла ҡан тарта, тигәндәй, Фәруҡ туғандарын йәлләне, Тимерйәндең улар тоҡомона ҡағылыуы оҡшап етмәне.

– Әй-әй, ауыҙыңдан сыҡҡанды ҡолағың ишетмәйме, күрһәтермен мин һиңә урыҫ нисек икәнен, – тип туҙынып малайға ынтылғайны, Мәғәфүрә уны тотоп алып тыйҙы:

– Эт менән эт булма. Хоҙай Тәғәлә үҙе күрә, үҙе тигеҙләр.

Өсәүләп ике-өс аҙым да атлап өлгөрмәнеләр, ҡайҙандыр бер ҡап-ҡара болот киҫәге ҡабарынды ла баш осонда ғына утлы ҡылысын һелтәп ебәрҙе, күҙ асып йомған арала ялтыр шар Тимерйәнгә табан атылды.

– Ай, харап ҡына булды ла баһа, бына Хоҙайҙың ҡөҙрәте. Нимә ҡатып ҡалдығыҙ, аяҡ тирәләренә услап тупраҡ һибә тороғоҙ, мин ауылға ярҙам һорарға остом, – тине лә йүгерҙе.

Ауыл халҡы уны терелтте, ләкин зәғиферәк ҡалды. Шунан һуң Тимерйән Илбаҡтың ҡойоно һуҡты тип Илбаҡтар өйөн урап үтте, яйы сыҡҡанда үсен алыу ниәте менән сағып та алғыланы.

* * *

Ғүмер тигән йылға үҙ ағышын дауам итә. Кешене үҙ өйрөлтмәгенә ала ла ҡалғаны һинең тәҡдир, теләһәң ни эшлә, тигәндәй, яҙмыш ҡосағына ташлай. Был серле өйрөлтмәк эсендә кем ни ҡыланғанын үҙе генә аңлай, күрәһең, үҙ ҡойонында урала.

Әхмәтшәриф менән Фариза донъя ҡуйғас, Мәғәфүрә шәп урынға килен булып төшә, уны кеше, әүлиә булғас ни, кешене үтә күреп, шәп кейәүҙе һайлап барған, тип һөйләп маташтылар. Бай тоҡомон ҡыуған Фәруҡ, колхозға инмәйсә Фатимаһы менән дүрт бала тәрбиәләйҙәр. Ғаилә менән иген сәсәләр, уны көрәк менән елгәреп, иләк менән иләп эшкәртеү еңелдән түгеллеген үҙҙәре генә аңлай. Ауыл кешеләре менән аралашып йәшәһә лә, артыҡ асылып китмәне. Күрше Байғол ауылынан Ванька менән ут күршеләй ихлас ҡатыштылар. Бергә һунарға йөрөнөләр. Фәруҡ оҫта һунарсы, һә тигәнсе ҡуян атып ала. Быҙдай табышҡа өйрәнеп бөткән Фатима йәһәт кенә суйын тултырып быҡтыра һала. Ванька менән Марусяның маҡтап-маҡтап ашауҙары, күңел майҙарын иретә. Бөркөт кеүек осоп ҡына елгән аты менән ызнакумдарын Байғолға оҙатып, эсе тулып ҡайта.

– Исмаһам, ауылда ҡатышырлыҡ бер башҡорт юҡ бит, нишләп шул тиклем беҙҙе күрәалмайҙар икән. Бай булһаҡ, уларҙы таламайбыҙ, үҙебеҙ тир түгеп эшләп ашайбыҙ, берәүгә лә бер тинлек зыяныбыҙ тейгәне юҡ. Урыҫтарҙы яратмаһалар ҙа, улар ғәҙел, егәрле. Аллаға шөкөр, әлдә Ванька дуҫ бар. Ана, атыма ла ҡандай шәп исем бирҙе. Орлик – бөркөт, һай-һай, шәп.

– Ярай улар Орлик тиһә, беҙ ни үҙебеҙсә, Бөркөт тийербеҙ, юҡһа күрше-тирә урыҫ урыҫҡа эйәләй инде, – тип былай ҙа булышалар.

Фатима сәй урынын йыйыштырған арала, Фәруҡ урыҫ ызнакумдары менән тәүге йыл сәсеп йыйған мул уңыш – эре кәбеҫтәләрҙе урынлаштыра торҙо. Бөгөн мал-тыуарын ҡараштырып, йәһәтләп эште бөтөп, иртәрәк ятырға уйланы, сөнки берсә һунарҙа арыһа, икенсенән баҡсалағы эштәр ҙә йонсотто. Тик төндә тәмле йоҡо буленде. Өс ир килеп инеп Фәруҡты өнһөҙ генә алып сығып китәләр. Ауылдан бер туған Кәли менән Ғатау (ошо ауыл һөйләшендә исемде ҡыҫҡартып әйтәләр: Кәли – Кәлимулла, Ғатау – Ғатаулла, Сәфәр – Сәфәрғәле, Әғләм – Әғләметдин һ.б). Һәм Фәруҡ – өсәүһен кемдәрҙер атҡа ултыртып, елдереп алып сығып китәләр. «Халыҡ дошманы» исеме аҫтында өс ғаилә ҡыҫымға дусар була. Шул төндә Фатиманың үле кәүҙәһен өйҙән табалар.

Бер мәл Ванька менән Маруся Фәруҡты иҫләп, барып хәлен белергә тип кәңәшләшеп кенә ултырғанда, ҡапҡа алдында ат күренә. Башҡорт дуҫын ҡаршыларға сыҡҡан Иван ярһып кешнәп торған яңғыҙ атты күреп, ҡурҡып ҡала. Шундуҡ ул ниндәйҙер бәлә килеүен тойоп, дуҫының ауылына һыбай саба. Фәруҡтың өйө буп-буш, күршеләрҙән һорашырға туктаһа, тегеләре ҡапҡаларын бикләп, асмай ҙа ҡуялар. Ахырҙа ҡайтыр юлға сыға. Бәхетенә күрә бер ҡарт осрай.

Урыҫса белмәгән ҡарт үҙенсә арлы-бирле һупалап, ҡайһыһын ҡул менән ишаралап, хәлде аңлатты.

– Фәруҡ Севергә – төрмә, Фатима, малайкалар – нету, умирайт, кызымка туда пошла, – тип күрше ауылды күрһәтте. Иван ауылдан Фәруҡтың һеңлеһен табып, бөтәһен дә аңлай. Өс малайҙың үлемен хәлһеҙләнеп инеп йығылған Рәхимәнән белеүен әйтә. Мәғәфүрә Иванға башҡаса күренеп йөрөмәүен үтенә, бола баҫылмайынса Ғәлләм менән Ҡәйүмгә лә бармауын һорай, уларға ла дошман еле ҡағылыуҙан шөрләңкерәй. Фәруҡтың атын бер үк күрһәтмәй, йәшереп һаҡлап алып ҡалыуын аңғарта. Ивандың тәненән бер ерен киҫеп алдылармы ни? Һыҙланып ҡайтып китә.

***

Инәһе, бәләкәйҙән илаҡ булдың, йырсы булырһың, балам, тигәйне, йырлай-йырлай буй еткәнен дә һиҙмәй ҡалған Ҡәйүм.

Ана, һыу һөләгөндәй һылыу, ҡашыҡҡа һалып ҡына йоторлоҡ Үлмәҫбикә менән үҙе кеүек сибәр ҡыҙ үҫтерәләр.

– Их, донъяһы ла донъяһы, кәкре-бөкөрө мөрйәһе! – тип көрһөндө Ҡәйүм, көтмәгәндә һуғыш башланыуын ишеткәс.

Үрембәт йылғаһына серен систе лә услап һыуын эсте.

– Моңло шишмәм, сылтырауыҡлы йырларыңды күңелемә һалдың, һыуһағанда ла, һағынғанда ла һыуларың моң булып туйындырыр. Көт мине, Үрембәт!

Мәғәфүрә әйтмешләй, теләк теләне лә һыуға көмөш тәңкә ташланы.

***

Офоҡ ситенән таң ҡыҙара. Тау артынан боҫоп ҡына ҡояш ҡалҡына. Тауға ышыҡланған да, әйтерһең дә, ҡояш та дошмандарҙы күҙәтә. Тынлыҡ. Иртәнге һалҡынлыҡта дерелдәгән һалдаттарҙы йылытыу, нур, көс биреү минең бурыс, тигәндәй, ҡояш ең һыҙғанып эшенә тотондо. Йонсоған һалдаттар теләр-теләмәҫ кенә күҙҙәрен ҡыҫып ҡына ҡарайҙар ҙа: «Аллаға шөкөр, бөгөнгө таңды ла күрергә насип булды»,– тип ҡыуаналар. Көндөң изге йома булыуы ла күңелдәренә ышаныс өҫтәй.

Аяҡтарын ишеп, ҡулын тубығына терәгән килеш ултырып йоҡларға күнеккән Ҡәйүмдең күҙҙәрендә әле йоҡо әҫәре юҡ. Эт күрмәгәнде күреп, ҡоторған бурандарҙа ла, ҡойма ямғырҙа ла меҫкен һалдаттар ҡайҙа етте, шунда йоҡлай. Ҡәйүм ултырған көйө серем итергә өйрәнде. Тәне семерҙәһә, быуындары ҡалтырай башлаһа, һикереп тора ла, хәрәкәтләнергә тотона, тәүге һуғыш көндәрен күҙ алдынан үткәрә лә, үҙен тынысландыра.

...1941 йыл ауылдан аттарҙы Сараға ебәрәләр, һуңынан бер төркөм ираттарҙы һуғышҡа оҙаталар. Ғәлләм дә,Ҡәйүм дә шул иҫәптә булһалар, аҙаҡ бербереһен юғалта улар. Ҡәйүмдәр төркөмөн Дим стансаһында Шайморатов тигән атлы ҡаршы ала, һәр береһен иләктән үткәрә-үткәрә һайлай, ә инде бай, кулак балаларын кире ҡайтара. 1942 йылдың февралендә яңынан саҡырталар ҙа, Алкино станцияһы аша Бугурусланға, шунан Мәскәү янындағы эшсе ҡасабаға неместәр менән тәүге бәрелешкә алып китәләр. Барыһына һуғыш йүнәлештәрен, маҡсатын аңлатҡандан һуң, капитан Воложанов Сталиндың бойороғон иҫкәртте: «Бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә, алға, тик алға! Дисциплинаны үтәмәгәндәр, ҡурҡаҡтар, һатлыҡ йәндәрҙе урынында атып үлтерергә! Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: һин атмаһаң, дошман һине үлтерә. Йә һин, йә ул – кем сос, шул тере ҡала, ҡурҡаҡтарға – үлем!» – тип өҫтәп тә ҡуя.

Мәскәү янында дошманды ҡыйратҡандан һуң, һалдаттар траншея,

окоптарҙан уларҙың боеприпастарын йыйып алды, дер-дер ҡалтыраған, туңған һалдаттар немец одеялдарын алып бөркәнде. Ҡәйүм кеҫәһенән йәтеш кенә бысағын сығарҙы ла, одеялды киҫкеләне һәм күкрәксә, ыҡсым ғына аяҡтарына силғау эшләне. Үрмәксенән күрмәксе, тигәндәй, ҡайһы берәүҙәр уның аҡыллы башын, йүнселлеген маҡтап, Ҡәйүмгә ҡарап үҙҙәренә йылы кейем әҙерләнеләр. Ике ай ҡар аҫтында тапанғандан һуң, дошманды ҡыуа-ҡыуа Холмикка индерәләр.

Тәүге һынау үткән егеттәр «Великие Луки» ла ысын алышҡа юлыҡтылар. Кем кемгә тоҫҡап өлгөрә, абайҙар иҫән ҡала, ә һағыраҡ ҡыланмаһаң, үлемеңде көт тә тор. Оҙаҡҡа һуҙылған бәрелеш бер кемде лә аяманы. Күпме юғалтыу, күпме яралылар ыңғыраша. Ҡып-ҡыҙыл ут эсендә ҡанға батҡан һанһыҙ мәйеттәрҙе ғәзиз тупраҡ үҙ ҡосағына алды. Бер ай ҡамауҙа булалар. Көндөҙ шомло тынлыҡ, кис еттеме, төндә уянған өкө кеүек дошмандар өҫкә ташлана.

Ҡамауға эләккән һалдаттарҙың ҡайһы берҙәре төшөнкөлөккә бирелеп, канау буйлап йүгереште, кемдәрелер, бесәйҙән ҡасҡан сысҡан кеүек, шыпырт, тынысҡына мөйөшкә һырынды. Бер ай ҡан-ҡойош хәтһеҙ ваҡыт кеүек тойолдо.

Төндә дошмандарҙан ҡасып, артҡа сигенгәндә, һалдаттар тырым-тырағай бүрәнәләр кеүек теҙелеп яталар. Атлап үткәндә, «һин мине нишләп тапайһың, баҫаһың», тип бер кем дә әйтмәй. Туҡтауһыҙ шартлаған бомбалар, снарядтар тауышы ҡолаҡты томалай, күҙ алдында бары тик күкһел томан. Иртәнсәк, тирә-яҡ бер аҙ тынысланғас, Ҡәйүм һуғыш яланын байҡаны. Бүрәнә кеүек теҙелеп ятҡан һалдаттарҙың мәйеттәр икәнен күреп, бына ни өсөн төндә уларға яңылыш баҫҡанда тауыш бирмәгәндәр икән, тип йөрәге һыҙланы.

Ҡамау йырылып, дошман тырнағынан ҡотолған егеттәр байраҡты эҙләнеләр.

– Китегеҙ, килмәгеҙ ҡәбәхәттәр! – тип ҡысҡырған кеше янына барһалар, унда байраҡты һаҡлаусы егет ине.

Һәләк булған командир урынына ярҙамсыһы:

– Флаг! Где наш флаг? – тип етди һорауға, тегеһе:

– Дошман ҡулына эләкмәҫ! Беҙҙең маяғыбыҙ – байрағыбыҙҙы йәә-ше-е-р-ҙем.

Һүҙҙәре өҙөлдө, үҙе яҡты донъя менән хушлашты.

– Дә, күпме ер-һыу үтеп килгән байраҡ та, батыр ҙа сит ерҙә ятып ҡала бит. Һуғыш, һуғыш инде. Бәхил бул, тыуған илең батырын онотмаҫ.

Ҡәйүм уның күҙҙәрен йомдорҙо.

Ҡаты яраланған Ҡәйүм дошманға булған асыуын йырға һалды. Мәсхәрәләнгән, вәхшиҙәрсә язалап үлтерелгән һалдаттарҙы күрә лә, йөрәге әрней, неместәрҙе ҡәһәрләп йыр һуҙа, йыр ҙа түгел, әрнеү, ҡарғыш аша һыҡтау ине. «Великие Луки» азат ителгәс, таҡмаҡ әйтеп, бейеп тә алды. Башҡорттар ихлас ҡушылды, хатта Ҡәйүмдең дәртле таҡмағына урыҫтар ҙа бейергә төштө. Һыңар аяғы ҡаты яраланып аҡсап йөрөгән Дәүләкән егете Сәлихйән дә ҡайһылай еңел, оҫта тыпырҙай. Хатта сатан икәне лә һиҙелмәй. Ситтән ҡараһаң, мәҙәк тә, ҡыуаныс та. Бөтә милләт һалдаттарын һикертерлек көй уйлап тапты ла баһа!

*Әй, Виликәлүк, Виликәлүк,*
*Һине яҡланы күңел.*
*Дошмандарҙы дөмбәҫләгәс,*
*Тын алыуҙары еңел.*
*Һай ли, ләритәм*
*Тәрҙә-ритә-ләритәм.*
*Ҡасып-боҫоп ятмайым,*
*Неместәрҙе юҡ итәм.*
*Әй, Виликәлүк, Виликәлүк!*

*Уңыш телә, һин беҙгә.*
*Дошман ояһын туҙҙырып,*
*Иҫән ҡайтайыҡ илгә.*

Кемдәрҙер төртмә таҡмаҡтары менән ҡушылды, хатта яралылар ҙа ҡалҡынып ҡуйҙы, тик хәл генәләре мөшкөл шул, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, йәшәүгә өмөтләнеп яталар бахырҡайҙар…

Кисәге шатлыҡтан йырлап-бейеүҙәре ҡабатланмаҫ бер мәл генә, төш кенә кеүек булды.

Йүнләп ял итеп тә өлгөрмәгән капитан Воложанов эре аҙымдар менән һалдаттар янына ашыҡты. Ялдың нимә икәнен дә белмәйҙер, сөнки көн-төн юғарынан бирелгән бойороҡтар, дошманға бирелмәҫкә, нисек тә ғәскәрҙе һаҡлап ҡалыу, хәйләле юлдар эҙләү, ғөмүмән, башы тулы мәшәҡәттәр менән ниндәй ял тапһын уның тынысһыҙ йөрәге!?

Һалдаттар күнегеп бөткән, ҡабалана икән, тимәк, яҡшыға түгел!

– Великие Луки беҙгә великие муки булды. Әммә бик күп юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, 15-се һәм 3-сө һөжүм армияһының һуңғы көсөнә тиклем аяуһыҙ алышыуын иҫәпкә алып, Башглавнокомандующий һеҙҙе орден, миҙалдар менән бүләкләргә, тип шылтыратты.

Капитан Воложанов старшина Голосков менән сержант Дедковты ситкәрәк алып китте лә, ҡыҙыу-ҡыҙыу ниҙер аңлатты. Башҡалар күрҙеме, юҡмы, Ҡәйүм үҙе «ура» ҡысҡыра, бер күҙе менән тегеләрҙе күҙәтә.

– Ур- ра! Ур-ра-а-а!

Арыуҙарын да онотоп, һалдаттар берен-бере ҡосаҡлап, «Ур-ра» һөрәнләп күктең етенсе ҡатында инеләр. Ҡыуаныслы хәбәрҙән яралыларҙың күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондары балҡыны, тик ҡуҙғалырға форсат теймәй.

Гел етди ҡиәфәттә, ҡаты ҡарашлы көр, яңғырау тауышлы старшина Голосковтың йөҙөн тиҙ генә уҫаллыҡ пәрҙәһе ҡапланы.

– Егеттәр! Бөркөттәр! Был ерҙә оҙаҡ тапанырға ярамай! Башглавнокомандующийҙың икенсе бойороғо: Новосокольники, Идрица, Опочка, Резекне, Даугавпилс, Эргли, Мадона, Гостине ҡалаларын азат итеү, шунан Латвияның баш ҡалаһы Риганы алыу – төп бурыс, – тине һәм ҡапыл һөйләүҙән тығылған тамағын ҡырып алды ла дауам итте. – Прибалтика фронты йүнәлешендә иң тәүҙә Резекне, Даугавпилсты дошмандан таҙартырға тейешбеҙ, ҡалғанын күҙ күрер.

– Иптәш старшина, ә боеприпасты ҡайҙан алырға? Аҙыҡ запастары ла аҙ, һалдаттар хәлһеҙ алға ынтылырмы? – бәләкәйҙән барыһын да барлай ҙа, теүәлләй ҙә белгән Ҡәйүм йәһәт кенә һорауҙар яуҙырҙы.

– Борсолма, Илбаҡов! Барыһы ла ҡаралған. Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Балтик флоты төрлө ауырлыҡтар, һауа шарттары ҡурҡыныстар янауға ҡарамаҫтан, флот караптары менән 44 мең кеше, 600 орудие, танктар, артиллерия установкалары, бронемашина, автомашина, мең тонна боеприпас һәм башҡа, һәм башҡалар… ебәргән, – тип ҡағыҙҙан әллә күпме нәмәләрҙе һанай башланы.

– Эй, Илбаҡ, миңә машина бар, ә һиңә ат та ебәрмәгәндәр, әй, – тип шаяртты Әхмәт Ҡәйүм дуҫын.

– Нисауа, ике аяҡ, ике ҡул иҫән булһа, дүрт тояҡты мынамын алыштыра. Шулай бит, иптәш старшина?

– Так точно!

– Их, ниместәрҙе генә дөмбәҫләйек әле, иҫән-һау ҡайтһаҡ, миңә килегеҙ: берәр ат бүләк итәм үҙегеҙгә, һай, минең өйөр-өйөр йылҡыларым! Иҫән генә булһын малҡайҙар, иҫән генә булһын башҡайҙар.

– Йә, Илбаҡ, етәр хыялланырға, етәр байлығың менән маһайырға. Һуғыш икәнен онотма, аттарыңдан күптән елдәр иҫкәндер әле, – Әхмәт менән Ҡәйүмдең һүҙ ҡабартыуы ҡуйыра барған мәлдә лейтенант Шевченко йәһәт кенә һалдаттарға бойороҡ бирҙе.

– Теҙелергә! Бер, ике, өс, беҙҙә генә көс! Көсөбөҙҙө Ригаға йүнәлтәбеҙ!

– Алға, Ригаға!

– Ригаға! Ур-р-а-а!

Лейтенант бойороғона егеттәрҙең дәррәү ҡушылыуы үҙе бер байрам төҫө алды. Сөнки нисә тапҡыр ҡаты бәрелештәр оло һынау ҡуйһа ла, ҡот осҡос ҡамауҙа ҡалған мәлдәрҙә лә Совет Армияһы ваҡытында ярҙам күрһәтте, шуға күрә был юлы ла улар һис шикһеҙ еңеүгә ышана ине. Старшина ла Совнарком председателенең 1-се урынбаҫары В.М. Молотовтың һүҙҙәрен ҡеүәтләй, аҙым һайын дәрт биреп кенә торҙо: «Беҙҙең ниәтебеҙ изге, эшебеҙ уң һәм ышаныҡыҙ: еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ!»

Эйе, әлбиттә, һалдаттар ҙур ышаныс менән дошманға ташланһа ла, көтөлмәгән үлемдең һағалап йөрөүен яҡшы аңлай. Йөрәкте өйкәгән ошо төйөр дошманға асыу, нәфрәт ыуын сәсә.

Июлдең эҫе мәлдәре.Ҡояш йылы нурҙарын йәлләмәй. Гүйә, «ҡыш туңған тәндәрегеҙҙе дауалайым, йылымды бөркәм, изге нурҙарым аша дәрт, ҡеүәт, көс ебәрәм», тигән төҫлө, ҡыҙҙыра ла ҡыҙҙыра ғына. Берҙән эҫелек хәлһерәтһә, икенсенән, ҡатҡан итектәр икеләтә ауырлыҡ өҫтәй. Шыбыр тиргә батҡан егеттәр, бысраҡ еңдәре менән биттәрен һөртә-һөртә, алға ынтылды. Алда урман, исмаһам, һалҡынса булһа, атлауы ла еңелгә төшөр, тип өмөтләнделәр, әммә ҡыуаныуҙары юҡҡа булған. Әҙәм үлемесле батҡаҡлыҡ аша үтеү ҡурҡынысын тойһалар ҙа, башҡаса әмәл юҡ, юл ябыҡ. Етмәһә, тирә-яҡтан дошман уратыуын белгәс, туҡтап ҡалдылар. Һаҙлыҡта бата-сума барыу бер ыҙа инде, эре-эре ас серәкәйҙәрҙең йәнде әсетеп ҡан һурыуҙары маҙаларына тейҙе. Шап та шоп серәкәй үлтереүселәр араһында кемдер эстән көйөнһә, ҡайһы берҙәр яман итеп һүгенеп тә ебәрҙе. Шешенеп бөткән егеттәргә йырып сыҡҡыһыҙ шырлыҡ, үтә алмаҫлыҡ һаҙлыҡ, батҡаҡ, йә асыҡлыҡты ҡамаған томан сикһеҙ ҡамасауланы. Шуны ғына көткәндәй, ҡараңғынан яңылыш ҡына яҡтыға сыҡҡанды һағалаған бесәйҙәй, фашистар уңайлы мәлде көтөп кенә торҙолар.

Дошмандың көслө ҡаршылығы айҡанлы Башглавнокомандующийҙың байтаҡ күрһәтмәләре үтәлмәне.

– Нимисларҙың әллә күпме дивизия, төркөм-төркөм артиллерия, 200-ҙән ашыу самолетлары төрлө яҡлап ябырылһын әле! Был һиңә серәкәй ҡамауы ғына түгел, аждаһалар, ысын дейеүләр ут бөркә бит, ай-һай, бик ажар! – тине Ҡәйүм ярым шаярыу ҡатыш.

– Нисә нимес икәнен ҡайҙан белдең, ул һиңә көтөүеңдәге аттар түгел дәһә?!

Әхмәт кеткелдәп көлөргә тотондо.

– Ҡуйсәле, бәйләнмә! Былай ҙа һағыныуҙан саҡ сыҙап йөрөйөм. Шайморатов дивизияһынан кире ҡайтармаһалар, Йондоҙ ҡашҡам менән фашистарҙы иҙгесләй-иҙгесләй, ҡылыс менән сапҡылай-сапҡылай, күптән Берлинға етер инем, валлаһи.

*Их, Йондоҙ ҡашҡа атҡайым!*
*Һине һағына башҡайым,*

– тип көйләй-көйләй түмәргә барып ултырҙы.

Шул арала Голосковтың йәнә бойороғо яңғыраны:

– Дүрт партизан бригадаһы ярҙамға килә, яңы операцияға ентекле әҙерлек

алып барырға кәрәк. Сөнки планды үтәүгә йүнәлдерелгән һуғыш хәрәкәттәренә беҙҙең туҡталыу аяҡ саласаҡ. Үҙебеҙгә генә дошман оборона һыҙығын өҙөү ауырға тура килә, көс етерлек түгел… Айырыуса артиллерияға иғтибар бүлергә! Бер-ике тәмәке көйрәтегеҙ ҙә яңы һөжүмгә әҙерләнә башларға!

Йомошҡа әрһеҙ Ҡәйүмгә командир Никитинды табырға ҡушты.

– Никитин! Никитин! – тип ҡысҡыра, ә ул ҡысҡырған һайын һалдаттар тәгәрәп ятып көлә. Баҡтиһәң, ул баҫымды башҡортса әйткән кеүек иң аҙҙаҡҡа ҡуйып әйтә икән. Теге урыҫты командирға ебәргәс, үҙе Антон янына килде.

Мәрәкәсел Ҡәйүм менән урыҫ егеттәре лә шаярырға ярата, урыҫса белмәгәс, ҡайһы саҡ шундай ҡыҙыҡ нәмәләр ысҡындыра, башҡалар иһә эстәре ҡатып көлә, әле лә Антон уның янына, имән төбөндәге түңгәккә, ултырҙы ла тәмәке көйрәтә-көйрәтә гәп һатырға тотондо. Икмәк-тоҙлоҡ ҡына русса һупалаған Ҡәйүм бының менән башҡортсалап бәхәскә керҙе. Тегеһе башҡортто еңә алмағас, мыҫҡыллы көлөп:

– Башҡурт – баран, татар – тиран, ә русский… – тиеүгә Ҡәйүм ҡыҙҙы ла китте:

– Күрһәтермен мин һиңә баранды, урыҫ – дурак! Мына һиңә мукалашка! – йоҙроғон төйнәп Антонға бер-ике аҡыл ултыртырға уйлағайны ла ҡапыл олатаһының һүҙҙәре иҫкә төштө. – «Эт менән эт булма, аҡылһыҙҙы тыштан маҡта ла, эстән үҙеңә һоҡлан», тигәйне бит, әй, урыҫ брат, һин крепко воеват, шуға ғына дурак, былай нисауа баһадир, брат!

Антондың арҡаһынан ҡаҡҡыланы ла ҡулын бирҙе. Аңлар-аңламаҫ көйө егет Ҡәйүмгә йәнә ниҙер мыңғырҙаны ла, ашыға-ашыға, тәмәкеһен һурҙы.

– Ҡәйүм, тор! Тор! – тигән ауаз ишетелеүгә күршеһенә төрттө.

– Марш, брат, марш! – тип ашығып тегене этеп ебәрҙе лә үҙе ситкә 5-6 аҙым һикерҙе.

Башҡорт һуғышырға уйлай тинеме бахырың, еңен төргөләй башланы. Көтмәгәндә шул урында ғына снаряд шартлап тирә-яҡты томаланы. Рус егетенә ярсығы эләгеп йәнен өҙҙө.

– Их, аңра! Марш тигәнде аңламаны бит, шайтан алғыры!

Был хәлдән баҙап ҡалған һалдаттар, Ҡәйүмгә һораулы ҡарашын төбәне. «Фәрештәле Ҡәйүм» тип йөрөтөүҙәрен бер кемгә лә ләм-мим, шуға күрә иптәштәренә яурын һелкеп кенә яуапланы. Фәрештәнең тағы ла ярҙамы тейҙе. Ә бына урыҫ әрәм булды: ҡарар ере юҡ. Ҡанға, тупраҡҡа мансылған егет янына медсестра йүгереп килде, әммә ул йән биргән ине инде.

Ҡәйүм яралыларҙы баҡҡан йәш кенә ҡыҙҙарҙы ла йәлләне:

– Һуғышыу – ҡыҙ-ҡырҡын эшеме ни?!

*Их, донъяһы ла донъяһы,*
*Кәкре-бөкөрө мөрйәһе…*

Һалдаттар Советтар Союзы маршалы Говоров ставкаларын иҫәптә тотто һәм көнөнә 10-14 саҡрым ер үтеп, ҡырағайҙарса атышҡан дошман менән аяуһыҙ көрәште.

Ә һауала самолеттар көнө-төнө себен шикелле осто. Дошман дзоттары туғыҙ башлы аждаһалай ут бөркә, ер йөрәген ярырҙай көслө миналар, снарядтар, гөрһөлдәп ярылған бомбалар... Емтек эҙләгәндәй, күктә ҡоҙғон-самолеттар, ерҙә – ҡара ҡарғалай фашистар һағаланы. Ҡот осҡос мәл тарих битенә яҙыла. Үлемең аяҡ аҫтында. «Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән Хоҙай Тәғәлә», олатаһының ошо һүҙҙәрен иҫләй, көн-төн Ҡәйүм доғалар уҡый. Аҡ һөт эсереп оҙатҡан инәһен, апаҡ йөҙлө, зәңгәр күҙле ҡыҙын ҡосаҡлаған Үлмәҫбикәһен, «иҫән-һау ҡайтаһың, тик үҙеңә генә ышан» тигән әүлиә Мәғәфүрә апаһын һағынды, төштәрендә

күрҙе. Тыуған яғын, көтөү-көтөү малдарын, үҙенең Йондоҙ ҡашҡаһын юҡһынды. Апаһының маңлайындағы йондоҙ – миңен еңеү йондоҙо тип күҙ алдына килтерҙе.

– Түҙергә, сыҙарға! Ер тартмаһа, һыу тарта, тиҙәр, көн дә төшөмдә аҡ таҫмалай, Үрембәт йылғаһы сылтыр-сылтыр йыры менән саҡыра.

Ҡәйүм әсенеп тирә-йүнгә күҙ һалды. Үртәлгән, көлгә ҡалған ауылдар, мәсхәрәләнгән мәйеттәр совет һалдаттарына әсе нәфрәт менән алға ынтылырға мәжбүр итте. Резекне ҡалаһын дошмандан тар-мар итеү бик ауырға тура килде. Старшина Голосков биноклдән ҡарай ҙа дошман танкыларын иҫәпләй:

– Дырылдаҡ тракторҙар күренде: берәү, икәү, өсәү… Етәү… Туғыҙ… Һай, дуңғыҙ! Тәк, егеттәр, команданы тыңлағыҙ!

Алыш ҡыҙған һайын дошман ҡотора, уның һайын беҙҙекеләр ҙә, үсектергәндәй, ҡоро ҡалмай.

– Илбаҡов, йәһәт кенә әҙерлекте тикшереп сыҡ! Урынлаштыр!

– Есть, товарищ старшина!

«Әһә, һиҙә белеү һәләтемә ышана, дошманға ҡайҙан һөжүм итеү урынын миңә билдәләргә ҡуша!» – тип эстән генә ҡыуанды. Ошоға тиклем һиҙгерлеге бер ҙә һынатманы.

Барыһы, ҡорбанын көткән бүреләй, алға төбәлгән дә команда көтә. Әхмәт пушка төбөндә.

– Килегеҙ әле! Яҡыныраҡ килегеҙ, ас ҡарғалар! Хәҙер ут менән туйҙырам!

– Әҙерләнергә!

Старшинаның ишараһынан һуң сержант Дедков һөрән һалды:

– Башланыҡ! Йә, бөркөттәр, алға, тик алға!

– Их, нимес, сволочь! Еребеҙҙән көләһегеҙме әле? Мә, күстәнәс, ал! – Әхмәт йән асыуына ата башланы. Күпме ваҡыт үтеүен дә абайламаны һалдаттар. Бер саҡ шартлауҙар тымды.Ҡап-ҡара һөрөм. Ауыр тынлыҡ. Туптар шартлауынан ер иҫһеҙ йығылғандай, тып-тыныс. Уны ҡосҡан һалдаттар, әйтерһең, һаҡ ҡына ер йөрәген тыңлай. Юҡ, юҡ, ер, киреһенсә, батырҙарының тынын тикшерә төҫлө.

Траншеяларҙан берәм-һәрәм һалдаттар баш ҡалҡытты. Шуны ғына көткәндәй, урман ситенән кинәт кенә бер танк ут асып ебәрҙе. Кенжебай, оҙаҡ уйлап тормай, йәшен тиҙлеге менән граната бәйләмен ҡулына алды ла, һөрәнләп ебәрҙе:

– Ҡуш этимез, байғослар! Һа-һа-һа! – Зәһәр көлөп, бәйләмде ырғытып та өлгөрҙө, теге оста танк гөлтләп тоҡанды, был яҡта Хәбиржанов бәүелеп ергә ауҙы.

Йылҡы ите, ҡаҙы, ҡурҙаҡ, ҡымыҙ менән туҡланған олпат кәүҙәле, таҙа, алпамышалай егет «пуля минең майымдан үтә алмай» тигәйне лә… – харап ҡына булды бит егет!

Ҡап-ҡара төтөн сығарып янған танкынан һикерешкән ниместәргә Ҡәйүм ут асты.

– Хәбиржанов өсөн! Еребеҙ өсөн! Кенжебай… – дошман пуляһы һүҙен өҙҙө.

Ҡәйүм аңына килгәндә, башы бәйләнгән ине. Медсестра ниҙер еҫкәтеп маташа.

– Рәхмәт, фәрештәләрем, иҫәнмен икән.

– Фәрештәгә тиңләүеңә рәхмәт!

Медсестра шаян күҙҙәрен осҡонландырып, серле генә йылмайҙы, үҙен фәрештә менән тиңләй тип уйланы булһа кәрәк.

Ул арала лейтенант Шевченко:

– Маладис, Илбаҡов, – тип ҡулын ҡыҫты.

– Мин ни бер генә аттым, Хәбиржанов – ысын батыр, их, жәлке бит егет…

Хәбиржановты ғәзиз ер үҙ ҡосағына алды.

«Мәржән жаныйм менән дастархан жәйәмез, нан таштаймыз, шәй эшәмез, кэсэ тотырмай ҡоямыз, домбра уйнамыз, жырлап отарамыз, сол инде ғой», тип һөйләгән ҡаҙаҡ дуҫы Кенжебай Хәбиржановтан иҫтәлектәре генә ҡалды.

– Йәл. Үкендереп китте.

Һуңғы һөйләшеүҙәрен иҫләне Ҡәйүм.

– Ҡәйүмбей ( шулай өндәшә ине) ҡаҙаҡ бей жумарт, нимәһен маҡтаең да ғой, бүләк итә лә ҡоя сул.

– Ҡыҙҙарын маҡтаһаң?

Тынлыкты ярып көлдө лә:

– Ҡәйүмбей жаныйға ҡарармыз, – тине.

Үлгән дуҫы янында һыҡтап мөнәжәтен әйтте:

*Мөнәжәтем – бу жер бәнем,*
*Әлем дә ҡалманы хәлем.*
*Әлемдән сыҡһа йәнем,*
*Кем әйткәй бу сәләмем.*

Ҡәйүм менән Әхмәттең көтмәгәндә ҡаҙаҡ дуҫтарын күҙ алдында юғалтыуҙары йөрәктәрен өттө. Хәйер, үлем артынан үлем өҫтәлеп кенә торҙо.

– Беҙҙе лә теге донъяла сират күпере көтә, ахыры, – тип Әхмәт үҙенең шикшөбһәһен уратып-суратып Ҡәйүмгә еткермәксе булғайны ла, тегеһе:

– Ашыҡма! Алла бирһә, беҙ һис шикһеҙ тыуған яҡҡа иҫән ҡайтасаҡбыҙ. Тик һин генә кирегә һаплама! Ятҡанда ла, торғанда ла Хоҙайҙан һора! – тип ҡырт киҫте.

Шунан һуң һүҙ ялғанманы.

***

1944 йыл, октябрь. Ҡалаға яҡынлашыу юлында үҙенең урынын тотоп, дошман артиллерияһы ҡырағайҙарса атышты. Үтә алмаҫлыҡ юлдарҙан, һуҡыр сысҡандай, тегенән-бынан ҡаҙылған окоптарҙа атыша-атыша 10 көн буйы 60 км эскә үтеп һәм йылға буйлап Мадона Гостине ҡалаларын Прибалтика фронты алһа, 2-се Прибалтика фронты Ригаға емергес һөжүм яһаны.

Туҡтауһыҙ туптары менән дошманды «һыйлаған» 13-сө, 14-се һауа армиялары, йәғни авиация флоты, Балтик диңгеҙе флоты хәрби көстәре ҙур өлөш индереүҙәренә һәр кем шаһит.

Октябрь урталарында азат ителгән Риганың емеректәре етәрлек.

Көнбайыш Двинаны аша сыҡҡан күперҙе, телефон һәм электр станцияһы селтәрҙәре, электр техника заводы, һыуүткәргестәр, төрлө мәҙәни йорттар дошман тарафынан сафтан сығарылғанлығы хаҡында үҙәк майҙанда уҙған митингта һөйләнеләр. 100 меңдән артыҡ эшсе, һалдат йөҙөнән берсә шатлыҡ осҡондары һибелһә, икенсенән, күңелһеҙлектәр ҙә сағылды.

– Рига ирекле! Йәнә бер аҙым ынтылһаҡ, ниместең баш йорто көлгә осасаҡ! Йәшәһен Совет һалдаттары!

– Ура! Ура! Ура!

Һалдаттар кәпәстәрен күккә сөйҙө, бер-берен ҡосаҡлашты.

Ике тапҡыр яраланған, өс мәртәбә контузия алған Ҡәйүмдең ҡолағы шаулауына, гөр килгән тауыштар шауҡымы ҡушылып, әллә ниндәй көй тыуҙы. Һүҙҙәрен еткерә алмаһа ла, ят көйҙө Әхмәт дуҫына ишеттерҙе.

– Һай, шәпһең дә инде. Йырҙарың менән фашистарға ҡаршы ут бөрктөң.

– Аллаға шөкөр, халҡым моңо көрәшкә әйҙәһә, фәрештәләрем… – тип Ҡәйүм онотолоп китеп саҡ серен ысҡындырманы, – Урыҫҡойон бирешмәй.

Ярай ҙа тегеһе абайламай, ғәҙәтенсә, ауыҙына инә яҙып, ярһый-ярһый телмәр тотоусыны тыңланы. Дуҫы менән ғорурлана Ҡәйүм. Теленән дә, ҡулынан да килә. Уйнап торған күҙҙәре, һиҙгер йөрәге, бөтә кеше менән дә йәһәт кенә уртаҡ тел табыуы, аҡыллы кәңәштәре – һәммәһе лә уға ылыҡтыра ғына. Русса белмәгән Ҡәйүмгә лә ике-өс йылда арыуыҡ өйрәтте. Минометчик, капитан Воложанов, старшина Голосков, сержант Дедков, лейтенант Шевченколар Украина, Белоруссия, Литва, Латвия ерҙәренәсә ҡыйыу барҙы, ҡаты яраланғанда ла яу ҡырын ташламаны.

– Ҡаты морондар, ҡаты яраланһа ла, ятып ҡалмай, алға бара һәм беҙгә лә ҡалышмаҫҡа! – Әхмәт менән Ҡәйүм һыр бирмәҫкә тырышты.

Күптәр ошондай һөйөнөстән мәхрүм, сөнки улар яу ҡырында һәләк булды: дошман пуляһынан, аслыҡтан, һыуыҡтан һ.б. Ә Ҡәйүм үҙен баға, һаҡлай, йәнен ҡурсалай. Ҡайҙа туҡтаһалар, шунда бәләкәй усаҡ тоҡандыра ла, аяҡ кейемен киптерә.

Төндә тубыҡланып ултыра, йоҡоға уяу. Байтаҡ яугирҙар ҡалын боҙ ҡатҡан аяҡ кейемендә йығылған килеш йоҡоға сумалар ҙа, үҙҙәре һиҙмәҫтән туңыуҙан бөтөнләй уянмайҙар. Күптәр шешенеп ятып үлде. Ас йөрөп, үлгән аттарҙы ҡапыл туйғансы ашауҙан байтаҡтарҙың эсе күбеп, һимеҙ булып, ялтырап ятып яҡты донъя менән хушлаштылар. Ҡәйүм менән Әхмәт үлгән кеше кейемен дә сикәнмәй кейҙе, йән биргән аттарҙы ла тунап ашауҙан баш тартманы, эстә ас бүреләр олоғанда хатта изге тупраҡты ҡапҡылаған саҡтары ла булды.

– Их, Әхмәт! Беҙҙең күргәндәр үҙе бер тарих. Имен-һау ҡайтһаҡ, халыҡҡа килештереп һөйләп булырмы икән? – тип Ҡәйүм күҙен ҡыҫа биреп, кеткелдәп көлөп ҡуйҙы.

– Әллә инде… Иң мөһим алыш дошмандың баш йортонда бит әле. Шул донъяны юҡ итһәк, бар хыялдарыбыҙҙы ла тормошҡа ашырырбыҙ, имен ҡайтһаҡ, һөйләүе бүстәк ул.

Эйе, төп йорт Берлин көтә, һәр һалдат дошман өйөн пыр-туҙҙырыу ниәте менән яна.

Әммә хыялдары селпәрәмә килә. Тимер юлы үткән күперҙән ярға сығып өлгөрмәйҙәр, дошман ҡулына эләгәләр. Фашистар совет һалдаттарын эткеләп-төрткөләп күптәрен пароходтарға тейәп оҙатҡанда бомба шартлай һәм ике пароход совет һалдаттары менән Балтик диңгеҙе төбөнә китә.

***

– Руссиш капут! Һенде хох! Шнел, шнел, руссиш! – тип эткеләй-төрткөләй тере ҡалғандарын эшелонға тейәйҙәр. Былай ҙа йонсоған һалдаттар тынсыу ҡыҫыҡ урында хәлһеҙләнде. Ашарға юҡ, сығып инергә уйлаһаң, тимер көрөшкәләр бирәләр, шунда эшеңде бөтөрөргә һәм кесе яраузы көлә-көлә эсергә ҡушалар.

Гамбургҡа килеп еткәнсе насарланған яралыларҙы юлда атып, ырғытып киттеләр.

Иҫән ҡалғандарына 202–се заводта снаряд эшләргә ҡуштылар. Әхмәт менән йәнә бергә булыуҙарына Ҡәйүм һөйөндө. Тәүге көндән бер төркөм йыйылдылар ҙа, заводты нисек юҡ итеү планын ҡорҙолар. Ниместәр ҡоторғандан-ҡоторҙо, үҙҙәренән былай эттәре ырылдай-ырылдай һикерҙе. Һәр аҙымың күҙәтеүле. Вәхшиҙәрсә язалауҙарына бер Алла шаһит. Арыһа, йығылырға ярамай, эт һөсләттеләр, бетләмәһен өсөн газлы мунсанан үткәрҙеләр: ҡаршылашһаң, атып үлтерҙеләр. Сүс ептән, ҡылдан тегелгән кейемдәре, ағас табансылар йәндәрен ҡыйҙы. Етмәһә, нимес ҡыҙҙарын рус ҡыҙҙары кеүек кейендереп, белер-белмәҫ русса ҡысҡыртып, ҡотҡо һалдылар: йәнәһе, Русия еңелде, һатылығыҙ! Улар ырғытҡан листовкалар аҡ ҡар кеүек һибелде.

Аҡ ҡағыҙҙар аҡ ҡоштарҙы иҫкә төшөрҙө. Их, тыуған ер! Моңло һандуғас тауыштары, аһәңле ҡурай моңдары, рәхәтләнеп һөйләгән дә, көйләгән дә башҡорт һылыуҙары... Сит ерҙең ҡыҙҙары ла һөмһөҙ, күгендә ҡоштары ла юҡ, һауаһынан тын ҡурыла. Йәнгә ауыр, күңелдә бушлыҡ. Һәр эт үҙ ояһында көслө, тигәндәй, фашистар беҙҙекеләрҙе йәберһетеп кенә күңел таптылар.

Оҙаҡ баш вата торғас, әсирҙәр заводты шартлатыу әмәлен уйлап тапты. Шартлатҡыстар әҙер, Ҡәйүм төнгө һунарға сығырға тейеш ине. Көтмәгәндә Ҡәйүмде эттән талата-талата майҙанға сығарҙылар. Арала һатлыҡ йән булыуы йөрәктәрҙе әрнетте, шик һалды.

– Кем дә кем беҙгә буйһонмай, бына күрегеҙ, ошондай яза көтә!

Бөтәһен ҡаратып ҡуйҙылар ҙа типкеләй башланылар. Тәүҙә ялтыр-йолтор ҡара итектәр күренһә, аҙаҡ ҡаты, үҙәк өҙгөс ауыртыуҙар ғына тойҙо.

Ҡәйүм һуңғы көсөнә:

– Бирешмәгеҙ, ағай-эне! Бөгөн улар беҙҙе типкеләй, иртәгә беҙҙең кавалерия уларҙы тапаясаҡ. Ышанығыҙ! – тип һөрәнләне лә йыр һуҙҙы:

*Хыял атым, Йондоҙ ҡашҡам, ай-һай,*
*Ел яныма, алтын тояҡҡайым.*
*Дошман ерендә үлгәнсе, ай-вай,*
*Ҡосһа ине тыуған төйәккәйем.*

Тулҡын-тулҡын йыр өҙөлдө, ҡан һауғандай йөрәктәргә һибелде.

– Нихт арбайт….гут-гут…

… Фашистар Ҡәйүмдең йырынан мыҫҡыллап көлөшә-көлөшә үле кәүҙәне һөйрәтеп алып сыҡтылар.

***

Һуғыш йылдарында Үлмәҫбикә һарыҡ көтөүен көттө.Ҡыҙы Нәзирәне ауылда өйҙән өйгә, ҡулдан ҡулға йөрөттөләр. Бигерәк һөймәлекле: зәп-зәңгәр күҙле, оҙон керпекле ҡурсаҡтай матур кәүҙәле, айҙай балҡып торған алсаҡ йөҙлө. «Икегеҙгә лә оҡшамаған, ҡайҙан таптың был баланы?» тип, ҡыҙыҡһыналар. «Айҙан», тип яуаплай Үлмәҫбикә.

Ҡәйүм һуғышҡа киткәс, ҡыҙы – йыуанысы менән йәм табып йәшәгәйне лә, тик берҙән-бер терәгенән көтмәгәндә уны айырҙылар. Аҙна буйы аҡъяуынға әйләнгән ямғырҙа ташҡын менән ферманың бер-ике һарығы йөҙөп китеү сәбәпле, Үлмәҫбикәне Сталин ҡуштандары төрмәгә япты. Бер яҡлашыр кешеһе юҡ: Ғәләм ҡайнағаһы һуғышта, ҡатыны Ғилмиә ошондай осраҡты көтөп кенә йөрөй ине. Берҙән, Үлмәҫбикәнән ирен көнләшһә, икенсенән, ҡурҡыныс янаған ҡулға алыуҙарҙан шөрләп, өндәшмәй ҡалды.

Ҡәйүмгә оҡшаған зәңгәр генә күҙле, һары ҡылғандай, тулҡынланып үҫкән бөҙрә сәсле Нәзирәне Ҡадаев тигән ҡарт атҡа ултыртып, балалар йортона оҙатыуын күргәндәр, ләкин һуңынан ул бала эҙһеҙ юғала.

***

Төрмә михнәттәренән ҡоро һөйәккә ҡалған Үлмәҫбикә иреккә сыҡты. Элек күңелсәк, йор һүҙле, баҫҡан ерендә ут сығарған ярһыу Үлмәҫбикә бөтөнләй үҙгәреп ҡайтҡан, шымып, үҙ эсенә бикләнгән. Ауыр уйҙарға баҫылып, берсә төрмәлә ултырыуынан уңайһыҙланып, берсә төрлө ҡараштарҙан шикләнеп, кеше күҙенә күренмәҫ өсөн кәртә артынан атланы. Бәлки, Ҡәйүм ҡайтҡандыр, тигән өмөт менән өйгә ашыҡһа ла, тәҙрәләре ҡапланған, урамы бейек-бейек алабута, кесерткәндәр менән тулған ҡотһоҙ, бәләкәсәйеп ҡалған өй генә ҡаршыланы.

Уның ҡайтыу хәбәре тиҙ таралды. Имеш, төрмәнән сыҡкан кеше йүнле

буламы, тигәндәй, кемдәрелер шикләнеп ҡараһа ла, күрше-тирә, әхирәттәре хәл белеште, мөмкин тиклем ярҙам иттеләр. Кем кейемен бүлешә, кемдер бөртөкләп-киҫәкләп ризығын өләшә. Өйөн рәткә һалыу менән балалар йортона ҡыҙын юллап китте. Үкенескә ҡаршы, ҡыҙын белеүсе булманы. Бөтөнләй кәйефһеҙләнеп ҡайтып инеүгә, йәнә бер шомло хәбәр көткән.

Ҡара ҡағыҙ… «Ҡыҙым, күҙ нурым,Ҡәйүмем, йөрәгем, нишләп кенә мине яңғыҙымды ташлап киттегеҙ!? Их, һуғыш, бәғерһеҙ һуғыш! Ниңә миңә ҡаныҡтың?! Ҡайҙа ғәҙеллек?! Төрмә… Балам юғалды… Ирем үлде… Аһ!? Юҡ, ышанмайым. Түҙергә, сыҙарға. Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар, ә мин иламайым. Теш ҡыҫып түҙәм. Ҡәйүм ҡайтасаҡ, барыбер ҡайтасаҡ һәм беҙ Нәзирәне табырбыҙ. Ер аҫтын аҡтарырбыҙ, барыбер табырбыҙ».

Үлмәҫбикәнең йәшләнгән күҙҙәре моңһоуланды һәм түгелеп иларға әҙер ине, тик бәғере ҡатты.

Эңерҙә шәм яҡтыһында уйға талды. Шәм ҡараңғы донъяны яҡтырта, ялҡыны менән кеше йөрәктәрен йылыта, йылыта ғына түгел, хатта өмөт осҡондарын һибә.

«Их, шәмем, яҙмышымды тоҡандыр, ялҡындарың көсәйһен. Бер үк һүрелмә. Өйөмә яҡтылыҡ, нур өләш, ялҡының әллә ҡайҙарға маяҡ булып Ҡәйүм күңелен иретһен дә, юлына нурҙарыңды йәйеп, алып ҡайтсы өйөмә. Шәмем, шәмем, яҡтылығың менән саҡыр Ҡәйүмде!»

Ишек шаҡыуға саҡ йөрәге ярылманы. Һаҡ ҡына ишек асылды һәм Ғәләм ҡайнағаһы пәйҙә булды.

– Йә, раббым! Өнөммө, төшөммө? Һаташыуымдыр, ахыры.

Йонсоған, ябыҡҡан, ҡобараһы осҡан Үлмәҫбикәне Ғәләм бер ҡулы менән ҡосаҡланы.

– Килен, был мин Ғәләм ҡайнағаң. Йә, иҫәнгенәме?

Ысынлап та, Үлмәҫбикәнең күңеле ташҡа әйләнгән ахыры, ҡатты ла ҡалды, илай ҙа алмай, һүҙ ҙә ҡушмай.

– Хәлдәреңде аңлайым, килен. Ишеттем дә, өйҙә оҙаҡ та туҡталмай, үҙеңә ашыҡтым.

– Рәхмәт, ҡайнаға.

Һандыҡтан ҡара ҡағыҙҙы сығарҙы.

– Быға ышанмайым, Ҡәйүм тере, шулай бит, ҡайнаға!?

Ғәләм уң ҡулы менән ҡағыҙға үрелде.

– Аптырама, Үлмәҫбикә, яуыз дошман һул ҡулды өҙөп алып ҡалды. Нисауа, бирешмәбеҙ. Ә Ҡәйүмдең тере икәнлегенә ышан, мин дә ышанам. Әхмәтшәриф олатам: «Һеҙ бейә имсәгеләй икәү генәһегеҙ»,– тигәйне, бейәнең бер елене ҡырҡылмаҫ. Анау сама аслыҡта, етемлектә үлмәгәнде, хәҙер… Юҡ, тере ул.

Ғәләм ҡайнағаһы иртәгә кис туған-тыумасаларҙы йыйырын иҫкәртте һәм Үлмәҫбикәгә лә ҡалмаҫҡа ҡушты.

Бөгөн тәүге тапҡыр ҡараңғы өйҙөң ҡорғаны асылғандай, яҡтылыҡ йүгерҙе. Туғандары араһында кейерлек кейемем дә юҡ, тип борсолоп ултырғанда әхирәте килеп инде.

– Әлдә һин бар әле донъяла! Юғиһә теге мәлдәге әбей кеүек булырмынмы икән, тип тора инем.

– Ниндәй әбей? – әхирәте баҙап ҡалды.

– Һуң теге ней, бер ҡарт әбейенең туйға кейеп барырға күлдәге булмағас, үҙе генә киткән. Аңғансы булмай, артынса «Алдын артҡа кейҙем, ҡарт. Мин дә туйға килдем, ҡарт» тип күлдәгенең алама яғын артҡа кейеп, әбейе пәйҙә булған бит, – тип һыңҡылдап көлдө.

– Нимә, әллә һин дә шулай ҡунаҡҡа барырға йыйынғайныңмы?

– Юҡсы. Аптыраған көндән әйтәм.

– Аптыраған өйрәк күлгә арты менән сумған.

Икәүләп туйғансы көлөштөләр. Шунан әхирәте йәһәт кенә ҡайтып, төргәген тотоп килеп тә инде. Күлдәген, аяҡ кейемен, ҙур шәлъяулығын биреп торҙо. Юғиһә, үҙе төрмәлә саҡта оҙон ҡулдармы, әллә күрә алмағандарҙың эшеме донъяһын аҫтын-өҫкә әйләндереп тентегәндәр, затлы кейем, кәрәк-яраҡтарҙан елдәр иҫкән.

Яҡшы әйбергә өйрәнмәгән Үлмәҫбикә уңайһыҙланыуҙан кире сисергә лә уйлағайны, әхирәте ай-вайына ҡуймай кейҙерҙе, хатта Ғәлләмдәргә ҡәҙәр оҙата барҙы. Һуғыш барыһының да йөрәген ҡуҙғатҡан, бер-берен тәү күргәндәй ҡосаҡлашып илашып та алдылар. Ғәлләм һуғыш тураһында һөйләгәндә күңелдәрҙе шом баҫты.

– Фәруҡ та, Ҡәйүм дә юҡ, ҡот осҡос хәл. Бер ҙә күңелем ышанмай, тип Фәруҡтың ҡыҙы Рәхимәне ҡосағына алды. Тегеһе ҡабаланып төндә күргән төшөн һөйләй һалды:

– Өлөкөгөн яман төш күрҙем. Ҡанатлы ап-аҡ кеше баш осомда өйөрөлә, муйынымды ҡыл йыланы быуған төҫлө быуып, бетеү ебен өҙөп алды ла осоп та китте. Теге әҙәм ҡанаттары менән елпенде лә Ҡәйүм ағайымдарҙың ҡыйығына барып ултырҙы. Шул бетеүҙе атайым миңә таҡҡайны, – Рәхимә ҡулындағы әйберҙе инәһенә бирҙе.

Мәғәфүрә ҡасандыр юғалған Ҡәйүмдең бөркәнсек төрөлгән бетеүен таныны. Ата-әсәһенең «бөркәнсекле Ҡәйүм бәхетле буласаҡ» тип юрауынан эсе көтөрҙәнеме, әллә сәмләнепме Фәруҡ был бетеүҙе алғандыр». Ғәлләм уйға сумған һеңлеһенә:

– Әүлиә һылыуым, берәй әмәлен тап, өшкөр, бәлки, Ҡәйүмгә ярҙам кәрәктер, бушал  юҡҡа төшөнә кермәгәндер – тине хафаланып.

– Белмәйем, һуңғы осоро минең төшләр ҙә бутала. Ниҙер булғаны көндәй асыҡ, ә үлеменә ышанмайым, йөрәгем алдамай торғайны. Әй, Хоҙайым, имен-һау ғына булһын инде. Сталин ҡуштаннары атларҙы тартып алып китһә лә, Йондоҙон һаҡлағайным, улайһа, ҡолонсағын ҡалдырып, үҙен Ҡәйүмгә ҡорбан итеп салдырайыҡ.

Туғандар бер фекергә килде.

– Бөркәнсек, тигәндәй, ҡәҙерле туғаннар, төнә мал һуйғас, иң яҡшы ерен ҡарын эсенә һалып, бөркәнсек эшләгәйнем, шуны тәмләрһегеҙ, ашымды ҡутарып индерәйем. – Һүҙгә ҡушылмай ултырған Ғилмиә телгә килде, йәнәһе, был өйҙә мин хужабикә икәнде онотмағыҙ әле, тимәксе.

Үлмәҫбикә ярҙам итергә сыҡты, тик тегеһе тырт-мырт йөрөнө. Ғилмиәнең был ҡылығы бер бөгөн түгел, шуға Үлмәҫбикә уға артыҡ иғтибар бирмәне...

– Үлмәҫбикәнең аш сеүәтәһе бәләкәй, яраҡкан киленебеҙгә көс йыяһы бар, һуғышта бирешмәгәнде, мин ир бирешмәм, ә һин ир-ҡатын булып йәшәйһең, – тип ҙур сеүәтәһен Ғәлләм килененә ҡарай етеҙ хәрәкәттәр менән шылдыра һалды.

Аш, ысынлап та, тәмле ине. Барыһы ла ашты маҡтап ашаны, тик Ғәлләм берике ҡапты ла, әсе күҙ йәштәрен йотҡандай булды. Ашауҙан туктап, ҡунаҡ һыйланы.

Ғилмиә ҡәҙерле ҡунаҡтар өсөн әҙерләгән бөркәнсеген, тултырмаһын өләште, ҡаҙыларҙы бәләкәй киҫәкләп һәр кемгә һоғондороп сыҡты.

Ғилмиә ҡымыҙ килтерер өсөн аш бүлмәһенә юлланғас, ире лә тамағын ҡыра-ҡыра артынан эйәрҙе.

– Тоҙҙоң самаһын оноттоңмо әллә, шул ҡәҙәре тондормаһаң! Әҙәпле ҡунаҡтар

маҡтай-маҡтай ашап ҡуйған булдылар. Тәмләп ҡараһаң ни була? Ғүмере ҡылманғанды кеше алдында оятҡа ҡалдырҙың бит.

– Атаҡ-атаҡ, ашҡа тоҙҙо самалап һалғайнымсы! Ай, суҡынғыры, ул сеүәтә һиңә эләктеме? – тине лә уртын тешләне. Ләкин ауыҙҙан һүҙ ысҡынып өлгөрҙө.

– Ҙур ҡунаҡ мәлендә ҡуйһаңсы шаяртыуыңды! – тип, ҡымыҙ һемерә-һемерә, Ғәлләм ҡунаҡтар янына ыңғайланы.

Аш мәлендә мәжлес моңға күмелде, ләкин Ҡәйүмдең генә оҙон көйҙәре, шаян таҡмаҡтары етмәй ине.

***

– Немецтәр мине иҙгесләгәнсе типкесләгәннәр ҙә, тыным сыҡмағас, мәйет соҡорона таштағаннар. Аңыма килгәндә ҡараңғы тапшан аҫтында ята инем. Үле кәүҙәмде әҙәмсә күмәйек, тип Әхмәт дуҫым бер ҡаҙаҡ менән килеп ҡараһалар, мин тере буғанмын. Хоҙай Тәғәлә аралап ҡалғандыр инде. Ҡабырғалар һынған, яралар ауыр, әҙәм төҫөнә ингәнсе Әхмәт урындыҡ аҫтында аһырай. Аңғансы Англия һалдатлары заводтың көлөн күккә осорҙо ла беҙҙе ил сигенә һаҡҡа ҡуйҙы, – тип маңлайын һыпырып, «Алла-а-а һаҡлаһын» тигән һүҙҙе һуҙып әйтеп, тәрән уйға сумды.

Ҡәйүмдең бәхетенә күрә, күп тә үтмәй, Америка вәкиллеге әсирҙәрҙе ҡотҡара. Дрезденда һаман да нимес ҡалдыҡтары, Гамбургтан да ҡат-ҡат тентеп, саҡ үткәреп ебәрәләр.

Дрездендан 7 октябрҙә юлға сыҡҡан Ҡәйүм 7 ноябрҙә көскә ғәзиз еренә аяҡ баҫа.

Аҙым һайын тегендә-бында бәйләнеүселәргә йәне көйҙө. Ҡалдыҡ-боҫтоҡ ашау, хәйерселәү, ҡайҙа етте шунда төн уҙғарыу, инәлеү-ялбарыуҙар – барыһы ла түҙә алмаҫлыҡ хәсрәт һалһалар ҙа, тыуған яғына ашҡыныу уның ҡайғыларын баҫты. Ә бер хәлде ғүмерҙә лә онотмаҫ.

Төндә ас, хәлһеҙ көйө бер һарайға инеп барғанда, ишекте ябып та өлгөрә, артынса тишек-тошоҡ таҡталар араһына һәнәк осо килеп ҡаҙала. Кәртәнән мал урлаусы тип, нимес һәнәк менән киҙәнгән. Ә Ҡәйүмде был юлы ла фәрештәләре һаҡлап алып ҡала. Немескә ымлап та, төртөп күрһәтеп тә аңлатып маташа, тегеһе өйҙән бәләкәй төргәк сығара ла уны этеп-төртөп ҡыуып ебәрә. Төргәктә ҡабымлыҡ ризыҡтар…

***

– Әй, Үрембәт,Үрембәт! Һау ғынаһыңмы, мине онотманыңмы, – тип йылғаға устарын йәйеп уҡталғайны, ниндәйҙер шом Ҡәйүмде туҡтап ҡалырға мәжбүр итте.

– Йә, ҡайттыңмы, һатлыҡйән?!

Ҡарлыҡҡан тауыш менән мыңғырҙай-мыңғырҙай ерәнес йөҙлө Тимерйән уның яғаһына йәбеште.

– Имеш, ордендар тағып ҡайтҡан булған. Шунан, кемде үлтереп миҙалдарын таланың, әллә берәйһенекен сәлдерҙеңме, хаин?

– Беренсенән, һаумы, ауылдаш, икенсенән, бысраҡ, гонаһлы ҡулларың, яуыз телең менән ҡағылмайса ғына юлымды бушатһаңсы!

Ҡәйүм атларға уйлағайны ла, тегеһе арҡыры баҫты!

– Һине эт тә көтмәй ауылда. Ҡайтаһың икән, ҡойоноңда өйөрөлөп, ҡайҙа осҡаныңды ла һиҙмәҫһең, үәт.

Ҡәйүм аяғын аҫҡай биреп, алға ынтылды:

– Минең кәңәшемде онотма, кешегә соҡор ҡаҙыма, юғиһә…

***

Күпме ғазаплы йылдар үтте. Тыуған яғын, Үлмәҫбикәһен, Нәзирә ҡыҙын, туғандарын, ауылдаштарын һағына-һағына, бәхетле тормош тураһында хыяллана-хыяллана ҡайтҡайны ла, яҙмыш тигәнең үҙ яғына борҙо ла ҡуйҙы.

Яҙмыш… Ғаилә ебен икенселәй бәйләне лә ҡуйҙы… Ғәжәп тә был яҙмыш тигәнең…

***

Ана, Ырыҫбикәһе балалар менән сыр-сыу килеп ғауғалаша.

– Тағы ниндәй эш боҙған, күбәйгерләр! – тип көләмһөрәне әрләшә белмәгән Ҡәйүм.

– Ҡыҙың Тимерйән малайы менән һуғышҡан.

– Йә, нимә бүлешә алманығыҙ? – Мәмдүҙә ауыҙын ослайтып, ярһый-ярһый һүҙгә кереште.

– Һәр ваҡыт нимес балаһы тип үсекләй, шуларға әйт әле, һин нимес түгел дә инде, ивет, атай!

– Хәйбуллала ғүмер иткән, нимесләрҙе дер һелкеткән башҡорт батыры Ҡәйүм Илбаҡовтың үҙе булам! – тип кәүҙәһен турайтты ла, һалдаттарса честь биргәндәй, ҡул осон сикәһенә терәне.

– Нимесләргә һатылған, һуғыш бөткәс, ҡайтырға ҡурҡып ятҡан, тип мыҫҡыллай теге ташбашлар.

Ырыҫбикә башҡа балалары менән Мәмдүҙә менән Ҡәйүмдең әңгәмәһен тын да алмай тыңлай. Ҡәйүмдең йөҙөн һағыш ҡапланы, түңәрәк күҙҙәре төпкә батҡандай, тәрән уйға сумды.

– Бер хаин башыма етте шул.

– Их, анау хаун-ҡауынмы булмаһа, тиҙ ҡайтыр инең ивет, атай?

– Хаун түгел, хаин, яуыз, һатлыҡйән тигәнде аңлата. Шулай шул, ҡыҙым. Ундайлар беҙҙең арала ла етәрлек. Ә һеҙ тәртипле, әҙәпле булығыҙ.

– Атай, ҡара әле, теге Тимерҙең Зәхмәте ишу, етмәһә, урыҫ балаһы, тисе.

Ҡәйүм ғәҙәттәгесә кеткелдәп көлдө.

– Ҡыҙым, кешегә исем тағыу иң алама нәмә, үсекләшмә. Атаһы заманында беҙҙең менән булашып ҡараны, үсен ала алмағайны. Шуның һүҙен һөйләйҙер. Аллаға шөкөр, олатайым баҡҡан урыҫ малайы Ырыҫбай ауылына нигеҙ һалып, ирәйеп донъя көткән бынамын тигән башҡорт балаларын үҫтереп, ауылдың абруйлы ҙур кешеһе булған тип маһайып тик йөрө. Тимерйән ағай, ә улын Мирзәхмәт тип, тултырып әйт. Ҡаты күңелле булма, матур һөйләгән һайын Хоҙай телеңә ҡөҙрәт, тылсым өҫтәр. «Яман еңдем, яҡшы ҡуйҙым, тиер», ҡуйығыҙ, булышмағыҙ! – тип Мәмдүҙәне арҡаһынан тупылдатып һөйөп алғас, тегеһе иркәләнде лә ҡәнәғәт төҫ менән сөм-ҡара күҙҙәрен тултырып ҡарап, йәнә бытылдай башланы.

– Ыһы, һиңә! Унан да былай ишшу уҡытыусы апай ҡыҙлар, малайлар алдында мине оятҡа ҡалдырҙы.

– Ҡайһылайтып,ҡыҙым.

– Химия дәресендә апай мине баҫтырҙы ла «Илбаҡова, яуап бир әле, атаң еккән үгеҙе арбаһының артында эленеп барған күнәккә ҡаҙау менән тишә һуҡһаң, ниндәй химия була – органикмы, неорганикмы» тисе. Үәт бит, атай, ул һинән дә, үгеҙебеҙҙән дә көләме?

Ҡәйүм мут ҡына йылмайҙы ла уҫалланып киткән Мәмдүҙәнең сәсенән һыйпап яратты

– И-и-и, минең йәннәтемде, юҡ-барға асыуын сәсә бит. Был урында уҡытыусыға

рәхмәт кенә уҡырға тейешһең. Бер ҙә әллә кемдең атын миҫалға килтермәгән дә, ә беҙҙең егәрле үгеҙҙе әйткән, шәп тәһә!

– Эйе шул, ә минең шуға ла башым етмәгән. Үгеҙебеҙҙе миҫалға килтерерлек тә, атыбыҙ бер күбә бесән тартҡансы, үгеҙебеҙ өс-дүртте ташый. Ҡыҙыҡ инде, үҙенә бер юл һалып ала ла, төкөһә төкөй, шул юлдан тайпылмайса бара ла бара.

– Атай, мине лә дәрестә үсекләнеләр, – тип ҡыҫтырылды Ишморат.

– Юҡҡа ғына аралар ҡыҙыл ыштан түгелдер, былай ошаҡлашып йөрөһәгеҙ, әсәгеҙ ысынында ҡыҙыл ыштан тегеп тә кейҙерер, – һыны ҡатып көлдө аталары.

– Биллаһи-валлаһи, алдамайым. Туған әҙәбиәте дәресендә бер әҫәр уҡығайныҡ, шунда Салауат батырҙың урыҫ улы булыуы яҙылған. Балалар миңә төртөп «ана, урыҫ тоҡомо, моғайын, шул Салауаттың урыҫ балаһынан ҡалғандыр әле» тип үҙ-ара шыбырлаштылар. Ғәрлеге ни тора! – Төйнәлгән йоҙроғонда бына-бына һытылып сығырға әҙер торған ҡан тамырҙарын күреп, күҙҙәрендәге зәһәр утлы осҡондарға иғтибар итеп, атаһы улының бик ҡыҙыу, сәмле егет булып үҫәсәген шәйләне.

– Эһе-һей, балалар. Яу, һуғышлар беҙҙең яҡта ла булған. Беҙҙә лә урмандан табып алып ҡайтҡан урыҫ балаһы нәҫеленән, тиҙәр, кем белә, бәлки китаптағы Роман-Һеләүһеннәр беҙҙең тоҡомға ла барып тоташалыр. Шулай булһа, Салауат батыр тоҡомонан булыу – үҙе бер ғорурлыҡ, улым. Ошо дөрөҫкә сыға ҡалһа, балаларым, төпсөнөп, төбөнә тоҙ һалығыҙ әле, үәт әкәмәт соҡоп сығарҙы Ишморат улым, һай-һай!

***

Ауылдың әсе теллеләре, йә үҙенә, йә балаларына сәнскеле һүҙҙәрен ҡаҙап ҡына торҙолар, һәр яңылыштан ҙур ғауға сығарырға маташтылар, ләкин Ҡәйүм аҡыл менән эш итте, йәберһетеүҙәргә теш ҡыҫып түҙҙе. Ғәҙелһеҙлеккә эсендә күпме асыу ыуы ҡайнаһа ла, уны башҡаларға һирпмәне. Күңел көрлөгө – күңел тыныслығы, тип ауыр мәлдәрҙә лә ғаиләһе алдында һыр бирмәйсә уйын-көлкөгә һабыштырып, һүҙҙе икенсегә бороп ебәрҙе, кеше яманлап, кеше менән булышып ултырманы. Һуғыш яралары борсоһа ла, түҙҙе, уфтанманы.

Неместәр иҙгесләгән ҡабырғаларын табиптар ҡарап, ҡыйыш-мыйыш уңалыуын иҫкәрттеләр, һыҙлана, тик белдертмәй, уның сыҙамлығына туғандары хайран ҡала. Башын снаряд ярсығы ярып үтеп киткән ерҙә сәсе юҡ, юлаҡ-юлаҡ булып тора. Теүәтәйен системе, балалары шуны күрә һалып «атамдың сәсе кеүек сәс бер кемдә лә юҡ әле» тип уны ҡупыртып, дәртләндереп ебәрәләр, «атай ҙа атай» тип йүгерешеп эргәһендә йөрөгән балалары, Ырыҫбикәһе һуғыш яраларын уңалтыуға тылсым көсө өҫтәп кенә торҙолар. Ҡатыны уны яҡшы аңлай.

– Аҡъярға саҡырттылар ҙа гел теләһә нәмә һорап ҡаҡшаттылар. 65 саҡрым йәйәү барып ҡайтсәле, етмәһә, прокурор Буранов аҙым һайын эҙәрләгәндәй, һорашып-белешеп кенә торҙо. Хөсөтсөләрҙең ҡара эше икәнен белә Ырыҫбикә. Әлдә шәп кенә бауайым, – тип эстән генә маҡтап ала.

Бер мәл Ғәлләм менән Ҡәйүм Татыр Үҙәккә трактор курсына уҡырға баралар ҙа ялан сәкмән, урман өй тип оҡшатмай, ҡайтып инәләр. Ырыҫбикә:

– Яланда өйһөҙ, сәкмән менән генә булмай шул, ел ыжғырып өрә, һыйынырға минең ышыҡ ҡуйыным да юҡ, – тип шаяртып алды.

Ауылда халыҡ үҙгәрә, берен-бере батҡаҡҡа һалып буяй, нахаҡ һүҙ һөйләүселәр ҙә күбәйә. Ҡәйүм үҙ эшен эшләй бирә.

Күңеле иркен уның, шуға ла ситтән килгән эшселәрҙе гел уға йәшәргә ебәрәләр. Бер көн йәш кенә агрономды персиҙәтел алып килгән.

– Берәү ҙә алмай, һиңә әпкилдем. Асығып, йонсоп бөткән – бүккән, түккән

ризыҡтарың етерлектер, икмәк яуы булмаҫ әле, – тип йыумаланы ла, яуап та көтмәй, сығып та китте.

Теге егетте бик үҙ итәләр, унынһы төп эшендә лә ең һыҙғанып эшләй, өйҙә лә ихлас ярҙамлаша.

– Олатай, бына персиҙәтел бойҙай яҙҙы, – тип бер ҡағыҙ тоттороуға Ҡәйүм иртәгеһен үк баҫыуға ашыға.

– Ништәп йөрөйһөң, олатай, бар ҡайт та өйҙә генә ултыр.

Агроном улының был һүҙҙәрен әйтеп бөтмәйсә китеүенең ғилләһе шунда икән. Ауыл халҡына бойҙай яҙғандар, ә Ҡәйүмгә бойҙай урынына отход яҙғандар. Ғәҙелһеҙлекте күреп, сәмле егет үҙе йәшәгән өйгә лә ауыл халҡына бүлгән кеүек тигеҙ бүлде. Шуның өсөн дәртләнеп эшләй башлаған егеттең ҡанатын һындырып, төрлө ялған сәбәптәр менән эшенән бушатырға маташтылар. Ул Ҡәйүмгә ҡарата булған көнсөл мөнәсәбәтте шулай һәр ваҡыт тигеҙләргә тырышты, иҫе китмәйсә генә һәүетемсә эшләне һәм бер аҙҙан армияға китте. Ата ялҡауҙар емерек өйҙә йәшәй, ә Ҡәйүмгә Ғәлләм ағаһы ла, Байғолдан Фәруҡтың ызнакумы Иван да килделәр ҙә ыһ та итмәй өмә яһап, ҡарағастан ҡандай өй ултырттылар. Ул көндө Ырыҫбикәнең ҡымыҙын эскәндән һуң, был өсәү ҡыҙмасаланып туғайға аттарын алырға бара. Туғай буйлап өс ат кешнәй-кешнәй сабып йөрөй, бер-береһенә һыйынып, һөйөнөшөп туймағандай, баш сайҡап серләшәләр кеүек.

– Күҙ һалығыҙсы беҙҙең аттарға. Һис ятһынмай, урыҫ аты тимәй берләшкәндәр, әллә ниндәй уртаҡ серҙәре бар бит әле, күбәйгерҙәрҙең, –тип Ҡәйүм уларға ҡарап ғәжәпләнде. Нисә йылдар үткәс, осрашҡанға күрә, Ванькаға асылып китеп һөйләүе ауыр ине, шулай ҙа уңайһыҙланып ҡына һүҙ башланы:

– Мои дорогие Галям, Каюмка, они действительно родственники, это – Орлик, лошадка Фарука, – тине лә туҡтап ҡалды, әйтерһең дә, кемдер кинәт тымыҙҙы уны.

Ғәлләм менән Ҡәйүмгә был атты ҡалдырып китәсәген әйткәс, ике бер туған ҡырт киҫтеләр.

– Ызнакумыңдың памяты итеп һаҡла, – тип Ванькаҡы ҡыуандырып ҡайтарҙылар. Яңы өй шатлығы күпкә булманы, иртәгеһен әлеге лә баяғы оҙон телдәр силсәүиткә ошаҡлашты, ахыры: йәнә Аҡъярға саҡырттылар. Икһеҙ-сикһеҙ яландар кеүек Ҡәйүмдең дә уйҙарының осо-ҡырыйы юҡ. Сәс туҙғытып елдәр менән шаярышҡан ҡылғандарҙай, уның да донъяһын онотоп иркендә, ироктә йәшәүҙән йәм табып, ләззәтләнеп көн иткеһе килде. Тик ошо ошаҡсылар ғына ҡаҡшатты инде. Йәнәһе, «нимес» урлашып йорт һала, хәләл көскә йәшәүсегә усаҡлыҡҡа ла бүрәнә табып булмай, имеш. «Бай тормош ҡанға һеңгәнме, бай тоҡомо! Бурлыҡ менән булышаһың икән, ҡулыңды ҡыҫҡартырбыҙ. Ғәлләм ағайың кеүек ҡулһыҙ йөрөрһөң!» Йән өшөткөс боҙло һүҙҙәр, мыҫҡыллауҙар йөрәген әрнетә ине. Тикшеренеү, эҙәрлекләү, саҡыртыуҙар… Тотҡонда булғандарҙың күбеһе, Аҡъярға саҡыртылып, кире әйләнеп ҡайтманы. Күрәһең, төрлө ваҡытта төрлө яуап биргәндәрҙер. Тәфтишселәр ҙә хәйләкәр: бер нәмәне урата ла һорайҙар, урата ла һорайҙар, ә Ҡәйүмдең хәтере шәп, нисәмә килгәндә лә гел бер төрлө яуап бирә, бәлки, шуға ла тынысланғандыр прокурор. Ҡәйүменең башынан үткәндәрен Ырыҫбикәһе генә белә. Эйәреп килгән Миңнур ҡыҙына ла һүҙ тигеҙмәй, бала йәнле шул.

Ошоғаса Ырыҫбикәнең дә яҙмышы татлы булмай. Һаҡтауҙан Хәкимйәнгә кейәүгә бирәләр, унынһы һуғышта үлеп ҡала. Ҡәҙерша ауылында йәшәп ятҡан Ырыҫбикә һыуыҡ тейеүҙән, аслыҡ-яланғаслыҡтан ҡаты ауырып китә. Сәйетғәле ҡарт ҡыҙының ауыр хәлен күреп, Миңнур ҡыҙы менән алып ҡайта. Оҙаҡ йылдар ныҡ сирләгәс, уны Баймаҡ районында йәшәүсе атаҡлы Мөжәүир хәҙрәткә алып

баралар. Мулла өшкөргәндән һуң Ырыҫбикә аяҡҡа баҫа. «Исемең Ырыҫ бит, һылыу, борсолма, тиҙ арала ирендең туғаны ырыҫлы донъяға саҡырыр» тигән һүҙҙәренә аптырай. Ҡайтып күп тә үтмәй, Хәкимйәндең апаһы Шәрифә тол ҡалған Ырыҫбикә киленен ҡунаҡҡа саҡыра. Уның сәбәбе – осрашыу ғына түгел, килененең ғүмере заяға уҙмаһын тип, һуғыштан ҡайтҡан күршеһе Ҡәйүмгә димләү булған.

Ғәлиәхмәттә бәләкәй генә өй һалып, яңғыҙ ыҙа сигеп йәшәгән Ҡәйүмде лә, киленен дә йәлләй. Ул саҡ төндә :

– Ҡәйүм, тор, тор! – тип кемдер уны тертләтеп уятыуға торһа, өйҙә бер кем юҡ. Ул ырғып тороп ҡараһа, мейес башына киптерергә ҡуйған быймаһының көйә башлағанын күрә.

– Былай булмай, яңғыҙлыҡ бер Аллаға килешһен, йәшәргә иптәш кәрәк, – шулай уйланып йөрөгән мәлендә Шәрифә уны Ырыҫбикә менән осраштыра ла инде. Аҙаҡ тормоштоң үҙ ағышына гөрләтеп йәшәп алды ла киттеләр. Мәғәфүрә һаҡлаған Йондоҙ ҡашҡаның ҡолондары үрсене, баҡсаһында олатанан ҡалған ҡомартҡы бал ҡорттары гөжләй генә. Умартаға ата-баба тамғалары аҫтына Ҡәйүм үҙ тамғаһын уйған. Алла бирһә, ауылда торған өй көтә торған уланына күсер был ҡомартҡы. Икеһе лә ярҙамсыл. Үҙҙәре йомарт булғанға, уларға Хоҙай уңдан да, һулдан да ризығын биреп кенә тора. Бер мәл шулай балалар тышта уйнай, ауыл осонан үтеп барыусы атлы һыбайлыларҙы күреп, ике-өс йәшлек Ишморат:

– Ағайҙар, туҡтағыҙ әле, һеҙ кемдәр булаһығыҙ, һөйләп китегеҙ әле, – ти.

– Ҡайһылай алсаҡ, кем балаһы, күреп китәйек, – тип уны ултыртып, өйҙәренә барып, ата-әсәһе менән танышып, сәй эсеп китәләр.

Ҡәйүм менән Ырыҫбикә һәр саҡ кешелеклеге менән ауыл халҡын таң ҡалдыралар. Бер мәл шулай кесе улы Ишморат ниндәйҙер ят тауыштар ишетелгәс, тышҡа сыға. Татарҙар картуф алырға килгәндәр, әсәһе менән тубырлатып картуф тултыралар.

– Ни чаклы бирим, өч тәнкәгә килешәбезме? – тип һорай татар.

Һатыулашып өйрәнмәгән Ырыҫбикә, башҡа ерҙә биш һум икәнен белһә лә, уңайһыҙланып, ҡыҙарып китә:

– Юҡ, юҡ, күп була, бер һум да етә.

Ҡәйүм ҡайтып инә лә:

– Эй-й-й, былар мосафирҙыр. Картуф беҙҙә күп ул, – тип тегеләрҙе өйгә индереп, сәй эсереп, картуфты бушлай биреп ебәрә.

«Хоҙай Тәғәлә бер беҙрә урынына йөҙ беҙрә бирер, ул ҡөҙрәтле, күреп тора, биреп тора, шөкөр итәйек», – тип доғаларын уҡып ала. Йәнә шулай ауылға ситтән эшселәр килеүен ишетеп ҡала ла, баҙҙан бер батман май, бал алып, арбаға ҡырҡылған утын тейәп сығып барғанда, Ырыҫбикә аптырап ҡала.

– Шулай тейәнеп ҡайҙа юлландың?

– Мосфирларҙы ашатам, эшкә килгәннәр, тамаҡтары астыр, бешерергә утыннары ла юҡтыр, – ти.

– Эй, ыштанһыҙ, кеше өсөн йәнен бирергә әҙерһең инде.

– Улай тимә, тормош бит бер алдын, бер артын күрһәтә, ул көн һәр кемгә килеүе бар. Йә, ярай, барып киләйем дә Ишморатыма әйт: әҙер торһон, Йылайырға Карпов ызнакумға барып, балауыҙ алып ҡайтырбыҙ. Ҡәйүм, берҙән, эшселәрҙе ҡыуандырһа, икенсенән, Йылайырҙа туңдырма күреп ҡала, балалары бит уны ашағаны юҡ, уларҙы ҡыуандырайым әле, тип, Ишморат менән туңдырмалар алалар ҙа, ыҡсым бетонға һалып, бесән өҫтөнә ултырып ҡайталар.

Ишморат, атҡа атланғандай, һажлап килеп инә:

– Күстәнәс алып ҡайттым, маружнай алып ҡайттым!

Асып ҡараһалар, бетонда – һөт, өҫтөндә ҡағыҙ һәм йоҡа таяҡсалар ғына йөҙөп йөрөй .

– Алғанда былай түгел ине лә инде! – тип Ишморат илар сиккә етә.

Тәмләп ҡарайҙар ҙа, шәкәрле һөт икәнен беләләр.

– Ҡустым, аптырама, ҡыш еткәс, уны үҙебеҙ ҙә эшләрбеҙ, – апалары малайҙы шулай йыуата.

... Ҡыш еткәс, онотмай, балалар туңдырма яһарға булалар. Ҙур көрөшкәгә һөт һалып, шәкәр болғап, тышҡа солан тәҙрәһенә сығарып ултырталар. Иртәгеһен сығып ҡараһалар, һөт ныҡ ҡатҡан, көрөшкәнең уртаһы сурайып сыҡҡан, ашай алмағас, көрөшкәне түңкәреп, бороп сығаралар, ялап ҡарайҙар.Тик Сәйҙә генә яламай.

– Ялап ҡара, тәмле генә, – тиҙәр барыһы ла.

– Ыһы, бөтә нәмәне лә миңә ярарға тимәгән бит. Ҡыҙыҡ күреп, эҫе ваҡытта самауырҙы ялап ҡараным, сатнама һыуыҡта селлә ваҡытында соландағы келәне ялап, телемдең биҙәге тороп ҡалды. Хәҙер миңә аҡыл ултырҙы, – тип һаман ситтән генә ҡарап тора ҡыҙыҡай.

Ул көндә аталары балаларын ҡыуандырып радиолы проигрователь алып ҡайта, балалар мәж килеп уны тыңлай, тик шатлыҡтары оҙаҡҡа бармай.

Фото эшләгән Ислам ағалары өйҙә юҡты файҙаланып, Ишморат менән Мәмдүҙә фото яһап ҡарарға булалар. Ҡыҙыл ут, фарҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптыраналар, шунан бер ергә тоташтырғас, ут яна, былар ҡыуанып эшкә тотоналар.

– Ай-яй-й, өйҙә ниндәй төтөн, еҫ тулған? – тип өтәләнеп Ислам ағаһы, артынса әсәләре килеп инә.

Ислам ҡараштыра ла:

– Их, һеҙ, эшкинмәгәндәр, яңылыш тоташтырып, өр-яңы радионы боҙғанһығыҙ бит, мына хәҙер әсәмдән эләгә инде һеҙгә! – тип әсәһенә ҡарашын йүнәлтә, ә әсәһе серле генә йылмая:

– Ярай, яңы ғына тип ней, миңә радио түгел, балаларым ҡәҙерле, уны ней, һаулыҡ булһа, тағы алырбыҙ, ә был хәлде үҫкәс, бер мәҙәк итеп иҫләрһегеҙ әле.

Ул әрләмәй, балалары барыбер һабаҡ ала.

– Йә, балалар, эңер төштө, сығып инегеҙ ҙә йоҡларға ятығыҙ, йоҡлар алдынан ирешергә ярамай, – тип Ырыҫбикә балаларҙы тышҡа сығара. Шул саҡ дөмҡараңғы төндә усаҡлыҡ балҡып китә лә, барыһы ла ҡурҡып, һажлап инеп, ишекте бикләйҙәр. Улар артынса ғына ҡаты итеп ишектә шаҡыу яңғырай. Тышта берәү эй ҡысҡыра, ишек туҡмай, илай, балалар, мәскәй әбей тип уны индермәйҙәр. Тауышҡа Ҡәйүм килеп сыға.

– Атай, тышта беҙҙе мәскәй әбей баҫтырҙы, ана, ул шаҡылдай, – тип балалар берен-бере уҙҙырып һөйләнә.

– Үҙегеҙ теүәлме?

Вәсилә иҫәпләне – берәү тулмай.

– Мәүлиҙә юҡ та инде…

Ҡәйүм ишекте аса ла:

– Кәфәкә, – тип, илап, ҡурҡышынан ишек мөйөшөнә йәшенеп торған ҡыҙын етәкләп алып инә.

– Атай, тәүҙә усаҡлыҡ башы балҡыны, унан былар мине ҡалдырып киткәс, йәнә бер ҙур лампочка шикелле нәмә, ҡойроғо елпелдәп, осоп бара ине. Мин шуны күрҙем дә ҡатып ҡалдым.

– Ҡыҙым, дөрөҫ эшләгәнһең, осоп йөрөгән уттар күренһә, йүгерергә ярамай, уға киҙәнергә ярамай, үҙе шулай юғала. Тәбиғәт менән беҙҙең бәйләнеш бит ул.

Беҙҙең донъя менән йәнәш донъя бар, шуға күрә унан ҡурҡырға ярамай. Йә, ятығыҙ, бер хәл һөйләйем әле. Элек инәйләр, апайлар ҡул эштәрен тотоп, кис ултырыуға йыйылғандар. Улар йыйылып бөтөүгә, яндарына беҙҙең ҡатындарҙан айырмалы рәүештә, ҙур бер ҡатын килеп инә лә, бер ни өндәшмәйсә, ул да эшен башлай.

Орсоғо ла ҙур, ә орсоҡ төбөндәге ташы тирмән ташындай икән. Икенсе яҡтан икәнен белһәләр ҙә, уға насарлыҡ эшләргә ярамағанлығын аңлайҙар.

Бер аҙ ултырғандан һуң:

– Еллеғая яғында бала тауышы ишетеләме? – тип һорай.

– Эйе...

Шунан ул сығып китә икән.

Улар килеп китергә тейеш һәм кеше улар менән ҡатышып йәшәгән. Борондан...

Тәбиғәт нисек бар шулай ҡабул итергә кәрәк. Ана, тәҙрә тапҡырында ғына етегән йондоҙҙо күрәһегеҙме, Етегән йондоҙҙо ете ҡабат әйтһәң, сауап була, тигәндәр, йәгеҙ әле, ете ҡабат әйтеп, сауап алып, тәмле төштәр күрергә насип әйләһен – тип балаларҙың юрғандарын рәтләп ябып, һөйөп-һөйөп китә.

Күңелһеҙ булып китһә, Мәмдүҙә гармун уйнаған Вәсилә апаһына бара. Ул Мәмдүҙәне йырларға өйрәтә, һәр бер районға таҡмаҡтар сығара ла шуны ҡабатлап йырлата: «Баймаҡ, Баймаҡ, ашағаны ҡаймаҡ; Мәсетле, Мәсетле – йәшәйҙәр бик бәхетле; Дүртөйлө, Дүртөйлө – эштәре бигерәк көйлө; Хәйбулла, Хәйбулла беҙҙең яҡтар бай була» һ.б. Улар күмәкләп ауылда ла концерт ҡуялар. Ә Ишморат ауылда концерт булһа, Рәйеф тигән малайҙы эйәртеп ала ла сәхнәгә сығып йырлайҙар.

*Ҡояш, ҡояш*
*Мәңге балҡый*
*Мәңге нур һибә,*
*Ҡояш ғүмере теләйем,*
*Әсәйем, һиңә.*

Баҡсала йөрөргә ярата Ҡәйүм. Йүкә сәскәләренең хуш еҫен еҫкәй-еҫкәй, алмағастар янына бара, һәр бер үҫемлеккә шаярып һөйләшә-һөйләшә, баҡсаны байҡап сыға.

– Бал ҡорттары кеүек бер ауыл кешеләре, һәр ғаилә татыу йәшәһеннәр ине. Туҡта, татыу тигәндән Фәруҡ менән дуҫлаштырыу өсөн олатаһы менән инәһе ҡандай шәп ғаилә байрамы ойошторғайны. Йәтимлек күрһәтмәгән, ата-әсәмде алыштырып оло тәрбиә биргән Әхмәтшәриф олатам менән Фариза инәм рухына аҡ ҡорбан салайым, мәрхүмнәрҙең йәннәре тыныс булһын! – тип умарталар янына килде. Бигерәк тә бал ҡорттарының бала айырғас – безелдәп осҡаны, уйындарын күҙәтергә ярата. Әле әкрен генә туҙҙан яһалған һоҫҡоһо менән ҡорт күсен һоҫоп ала ла:

– Һай, күбәйгерләрем, Аллаға шөкөр, һуңғы осоро буйтым бал бирә башланылар, – тип йыр һуҙырға уйлағайны ла иҫнәп ҡуйҙы. – Был ни ғәжәп, ауырайып торамсы, йоҡо баҫып ҡунаҡ килә, ахыры.

Үҙ алдына һөйләнгән бабайы янына өтә баҫып Ырыҫбикәһе килде.

– Йә, бауайым, шатлыҡ уртаҡлашмаҡсымын. Һөйөнсө!

– Яҡшы хәбәр булһа, бер күлмәк!

– Ишморат һурәсәһе Үлмәҫбикәне ҡаршыларға китте, ауыл осонда күргән.

– Ашың бешкәндер, моғайын, – тип өтәлэнде Ҡәйүм.

– Бешмәйсе. Әйҙә, табын ҡороп ебәрәйек. Оҙаҡ юғалып торҙо, үҙен һағынып та бөттөк.

Ырыҫбикә Ҡәйүмде ашыҡтырҙы.

Көлөшә-көлөшә баҡсанан сыҡҡан Ырыҫбикә менән Ҡәйүмде күреп Үлмәҫбикә:

– Һай, пар күгәрсендәр, һау ғыналармы? Көлкө ҡапсығы бушаманымы әле? – тип йылмая-йылмая ҡосаҡлап күреште.

– Шөкөр, шөкөр… Ҡапсыҡта үлгәнсе етәрлек запас бар.

Ул арала йылға буйынан сабып килгән ҡыҙҙар, малайҙар һурәсәһен уратып алды.

– Иҫән генәләрме? Ҡандай һағындым үҙегеҙҙе!

– Йә, кубәйгерләр, әсәйегеҙгә ярҙам итегеҙ, тиҙ генә табын әҙерләйек. Әвей, ашың да бар, әллә Ғәлләм ағайҙарға ла әйтәйекме?

– Икмәгем уңманы, әйтәгүр, бысый булып бешгте, анауы берсидәтел бисәһе маҡтай-маҡтай бер икмәк алып торғайны, әллә күҙе тейҙе инде, кейәңке.

– Әллә икмәгең дә юҡмы?

– Көлгә күмеп сөсикмәк бешергәйнем.

Үлмәҫбикәнең күҙ йәштәренә быуыла-быуыла ошо ауылды ташлап киткәне әле булһа ла күҙ алдында.

… Күҙ асҡыһыҙ буранда йәше лә тулмаған баланы санаға ултыртып Үлмәҫбикә Ырымбур яғына юл тота. Покровкала туҡтала, ләкин сатлама һыуыҡтың касафаты: үпкә ауырыуынан саҡ йәше тулған Флүрәһе яҡты донъя менән хушлашҡас, Аҡъярға күсә. Больницала кер йыуа. Ҡыҙын юғалтыуҙы ауыр кисерә, әммә икенсегә ауырлы икәнен белеүе уға йәшәү көсө бирә.

Ҡараһыуға һауынсы булып килә. Күмәк кешегә бер һыйыр, ҡаҙ ояһындағылай баракта мыжғып йәшәйҙәр. Ҡыҙы тыуғас, документ алып маташмай, Флүрәһенең исемен ҡалдыра.

Үҫә килә атаһы менән ҡыҙыҡһына башлағас, бер һалдат һүрәтен бирә лә, «Атайың командир, һуғышта батырҙарса һәләк булды» ти.

Бер көн шулай күршеһе инә лә, Флүрә өйҙә юҡтыр, тип аулаҡлап сер сисә.

– Иртәгә ирең йәшәгән ауыл яғына утынға барабыҙ. Баланы атаһына ебәрһәңсе?

– Ҡуйсы. Белмәгәс, белмәһен. Унда барып, йә Ырыҫбикәһе менән араһы буталыр. Үҙемде болғанырлар, мин кеше араһына төшмәйем, – тип Үлмәҫбикә ҡырҡа ҡаршы төшә.

Шаршау артында тыңлаған ҡыҙ, иртүк төйөнсөгөн әҙерләй ҙә, әсәһенә өндәшмәй генә күршеләрен ҡарауыллай башлай. Өндәшһә, әсәһе ебәрмәүҙән шөрләй.

Арбаға килеп ултырған баланы күршеләре Ғәлиәхмәткә төшөргәс, яҡынса өйөн өйрәтәләр. Утындан ҡайтҡас ҡына Үлмәҫбикәгә әйтәләр ҙә: «Бала күңеле булғансы йөрөһөн, атаһы алып килер, борсолма!» тип йыуаталар…

Ана шул көндән башлап, ике ғаилә туғанлашты, Ҡәйүм балаларына Үлмәҫбикәне һүрәсәй тип таныштырҙы.

Үҙҙәрендә һыу булыуға ҡарамаҫтан, ҡоҙоҡҡа бөтә ауыл һыуға йөрөй. Сәйҙә лә шунда юлланды. Балалары «Әсәм ҡоҙоғо» тиҙәр (бөгөнгө көндә уны «Ырыҫ ҡоҙоғо» тип йөрөтәләр). Уның тарихы былай.

… Ырыҫбикә ҡайҙан һыу сығырын белә, шулай бер нисә урынды билдәләй, шул урындарҙа йырғанаҡтар бар. Ә бына ауылға килеп ингән ерҙә ике шишмә, береһе мәктәп яғынан, икенсеһе Айраһаҙҙан сығып, улар икеһе Ҡомйылғаға ҡушыла. Бойҙай һаҡлағыстан арыраҡ түң аҫтында таштың ярығынан ғына ваҡ таштарҙы алып, Ырыҫбикә бер аҙ соҡор яһағас, унан сылтыр-сылтыр һыу сыға. Эргәһендә генә ҡайын, ерек, уҫаҡ – бик матур урында ул ҡоҙоҡ. Кеше бысратып китһә, таш араһын йүкә йыуғысы менән ҡырып йыуа, унда юшҡыны ла, ләме лә булмай, ә һыуы бигерәк тәмле. Ул изге теләктәрен теләп:

*Һыу инәһе, риза булып ҡал,*
*Минең биргәнемде ал,*
*Шифа һыуың миңә һал,*
*Тәнем булыр имен-һау,*

– тип һамаҡлай ҙа һыуға тәңкә ташлай, балаларына аңлатыуынса, йәнәһе, һыу инәһен ризалата. Сәйҙә лә әсәһенә оҡшатып һамаҡлап теләктәрен теләне лә, күнәгенә һыу тултырып, ҡайтыу юлына төштө.

Тәмле һыуҙы самауырға ҡоя һалып, торонбаш төшөрҙө.

Һә тигәнсә күмәкләп табын ҡороп ебәрҙеләр. Ҡунаҡта һәр кем үҙ урынын алды. Балаларға ла йәшел үләнгә ашъяулыҡ йәйелде.

Эйе, атаһы ойошторған мәжлес балаларҙың күңеленә ныҡ һеңгән. Ҡунаҡтар моңло йыр башлайҙар. Ҡурайсылар инде береһе туҡтауға, икенсеһе әҙер. Ул мәрәкә һүҙҙәр, таҡмаҡтар, ҡыҙып китеп шыбыр тиргә батҡансы бейеүҙәр – балалар өсөн ҙур байрам. Ҡәйүм ҡарт инде рәхәтләнеп үҙе таҡмаҡ сығара.

*Бейек тауҙың баштарында*
*Турғай һалған әҙҙәр бар, иха-хай.*
*Беҙ үҙебеҙ әлхәмдулилла,*
*Беҙҙән тәүфиҡһыҙҙар бар, иха-хай.*

Ялтыр башын һыпырып ҡуя ла, әбейенең бөйөрөнә төртөп, дауам итә.

*Бейек итеп ситән үрҙем*
*Быйыл үҫкән тал менән, иха-ха-хай.*
*Кемдәр ғүмер итә икән*
*Беҙҙән ҡалған йәр менән, иха-ха-хай.*

Ҡунаҡтар ҡыҙған мәлдә Ҡәйүм балаларына өндәшә:

– Атайығыҙҙы немескә һатылған тиһәләр ҙә, ошо ҡулдарым менән һуғыштым. Минең йырҙарым дошманды үлтерһә, һеҙҙең йырҙар ауылда ғәйбәтселәр ауыҙын ябыр, ә ҡунаҡтарҙың күңелен табыр. Йә, күбәйгерләр, кем элек?

Шуны ғына көткәндәй, Вәсилә өҙҙөрөп гармун тартыуға Мәүлиҙә бейергә төшә, Ишморат менән Ислам ҡурайҙа һыҙҙыра.

– Күрсе, урыҫ ҡойондарҙы, ҡойондай өйөрөлөп, дәртләнеп бейеп тә алалар, күбәйгерҙәр!

Сәйҙә оҫта итеп һөйләй, Мәмдүҙә оҙон көй һуҙып маташа.

*Буҙәнәкәй тигән, һай, аҫыл ҡош*
*Йүгергеләп килә лә юл менән.*

Уны атаһы күтәреп ала, икәүләп ослап ҡуялар:

*Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты*
*Һыпырып ташлап булмай ҙа ҡул менән.*

– Ҡарасәле, был ҡыҙым йырсы булыр, ай-һай, тип юрағаным юш килде түгелме?! Ҡорбан байрамында тыуғас, Ҡорбанбикә тип исем ҡушырға булдыҡ, аҙна буйы тыммай иланы ла ҡуйҙы бит, ахырҙа йома көн ине – Йомабикәне һайлаһаҡ та, Йәннәт тиһәк тә туҡтаманы, Мәмдүҙәне генә хуш күрҙе, илаҡ булғанға йырсы булыр тинем шул. Һай, тауышҡынаһы! –тип Ҡәйүм ҡарт һоҡланып ҡыҙының арҡаһынан һөйә. Шул мәл Ишморат та йыр башлай:

*– Ленин һөйөклө атабыҙ,*
*Ул һәр көн беҙҙең менән*
*Беҙ уның рәсемен биҙәйбеҙ*
*Гөл аҫыл сәскә менән.*

Малай йырлап та бөтә, атаһы шуны ғына көткәндәй, урынынан һикереп тора ла:
– Ленин бабай ул һиңә ниндәй һөйөклө атай булһын, бына мин бит һинең һөйөклө атаң, – тиеүгә барыһы ла геү килеп көлөшә.
– Үҙем ҡартайһам да, йөрәк йәш шул. Минһеҙ мәжлес – муйынһыҙ көлкө ҡапсығы, ә көлкөнөң тамыры кем һуң?
– Һин инде, ҡустым, – тине Ғәлләм.
– Ата-әсәмде алыштырған Әхмәтшәриф олатам менән Фариза инәм тәрбиәһе. Уларға гелән рәхмәт уҡып, үҙем дә Илбаҡ тоҡомона, балаларыма иҫәнлек, изгелек, йомартлыҡ, сабырлыҡ кеүек төшөнсәләрҙе олатам, инәм кеүек матур итеп аңлатырға тырышам инде.
Билмән ашап ултырғанда Ғәлләм ҡысҡырып ебәрҙе:
– Килен борос билмәне ашатмаҡсы булдыңмы? Ҡайнаған үпкәләр бит.
– Үпкәләһәң, үпкәһе лә бар ит араһында, хәҙер һоғондорорбыҙ – тине Ҡәйүм.
– Мин кемдең әсе телле икәнен белер өсөн билмән эшләгәндә борос һалғайным, Ғәлләм олатам икән дәһә, – Ишморат бер ҡатлылыҡ менән һөрән һалды.
Был Ишморат йәнә бер мутлыҡ һалмаһын, тип билмәнде һаҡ ҡына ашанылар. Ырыҫбикәнең тәмле аштарын маҡтап, Ҡәйүмдең оҫта һыйлауын телгә алдылар.
– Эйе ләһә. Ул йырсы, ул мәрәкәсе, ул донъя тотҡаһы, мынау сама миҙал, ордендар кемдең түшендә? Минең бауайым – алтыным, батырым. Әйҙәгеҙ, Ҡәйүм батыр хөрмәтенә күтәреп ҡуяйыҡ, – тип Ырыҫбикә бал ҡойоп сыҡты.
– Ана бит, вис минең йырлаған йырларҙы йырлай бит минең баллар. Күпме генә нимес тип, нимес баллары тип рәнйетмәһеннәр, Аллаға шөкөр. Башҡорт тәрбиәһе бирҙем, рух бөрктөм. Минең ҡомартҡыларым мөнәжәт, таҡмаҡ, йырларымды киләсәк быуынға тапшырып, башҡорт ерен данлап халыҡты ҡыуандырырлар, тип ышанам. Әвейемә рәхмәт, балларға рәхмәт, мине әҙәмгә һанап килгән туғаннар, дуҫ-ишләр, һеҙгә рәхмәт.

*Беҙ урамдан үткән саҡта*
*Асыуланма, хәҙерәт.*
*Асыуланһаң да, хәҙерәт,*
*Күңел асам әҙерәк,*

– тип йырлай ҙа көр тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы. – Бай тоҡомонан булһаҡ та, шөкөр, халыҡ менән бергә йәшәнек. Олатам урмандан табып алып ҡайтҡан, уллыҡҡа алған урыҫ малайы – Ырыҫбай ҙа тамыр йәйеп, башҡортларҙы үрсетте, илбаҡларҙы ишәйтте. Бер изге йөрәгебеҙгә ике милләт рухы һыйышып, халыҡ араһында дуҫ һәм татыу булырға тырыштыҡ.
– Их, шундай тыныс тормош! Өҫтәл тулы ризыҡ. Кенжебайҙың дастархандары иҫкә төшә шул. Их, ҡәһәрле һуғыш! Күпме ғүмерҙе өҙҙө, күпме яҙмышты бутаны, – тип, Кенжебайҙы, Әхмәтте, дуҫтарын иҫләп, Ҡәйүмдең йөрәге һыҙланы.
Ярай ҙа Әхмәтте ҡунаҡҡа саҡырып, вәғәҙә биргән атын бүләк итеп, ҡыуандырып ҡайтарғайны, күп тә үтмәй һуғыш яраларынан вафат булған. Ҡайғыны ауыр кисерҙе, ни тиһәң дә һуғыштан иҫән ҡалып та рәхәтләнеп йәшәп тә өлгөрмәне.

***

Ҡәйүм ҡарттың бөгөн кәйефе шәп. Өс көн өйҙә булманымы әле? Эйе, өс-дүрт көн буйы яҡын-тирәләге ауылдарға туған-тыумасаларының хәл-әхүәлен белеп, күңеле булғансы һыйланып йөрөп ҡайтып килә. Йыл һайын шулай, «экскурсияға киттем» ти ҙә туғандарын барлап сыға. Өйөндә Ырыҫбикәһе өйрәнеп тә бөткән. Бер көн ҡайтманымы, өсөнсө көнөнә ҡаҙан тултырып аш һала.

Ҡәйүм ҡарт та ҡарсығы өсөн борсолмай. Боронғо йыр һуҙа-һуҙа урман араһындағы тар һуҡмаҡтан аҡланға килеп сыҡты. Был хәтфәгә төрөнгән гүзәллеккә күмелгән аҡланда туҡтамайынса китеү яҙыҡ булыр. Сабынлығын йәлләмәй бесәндең күмелеп үҫкән еренә һуҙылып төшөп ятты. Бөгөн уға рәхәт, тамағы туҡ, өҫтө бөтөн, ғаиләһе етеш. Ә ҡасандыр ошо, нәҡ ошо ерҙә аунап ятып илаған саҡтары ла булды ла баһа...

Баҫма аша үткәндә, Ғәлләм ағаһы менән сәмләнеп балыҡ тотҡан саҡтағы мажараларын иҫләп, кеткелдәп көлә-көлә килә ине.

– Бәй, ни булды? Ятам. Ниндәй соҡор һуң? Әй, әттәгенәһе, был бит ауыл осондағы балсыҡлы соҡор ҙа баһа. Күҙем тонғанмы икән, уйланып килеп осҡанмын. Ярҙам һорамайынса сығырһың да сыҡмай бынан – Эһе-һе-һе-һей! Ислам! Вәсилә! Ишморат! Тауыш-тын юҡ. – Балаларын теҙеп ҡысҡыра, әбейен саҡыра. – Борсолма, Ҡәйүм, ҡыуан ғына. Ил тыныс, өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ, йомшаҡ балсыҡта ятаһың, Аллаға шөкөр! Ә барыбер бөркәнсекле, фәрештәле Ҡәйүм бәхетле... Беҙ күргәнде, дошманыма ла теләмәйем, Аллам һаҡлаһын! Әле һөйөнәм генә: файҙалы балсыҡ соҡорондамын. Эһе-һе-һей! Мин ҡысҡырам, мин ҡыуанам. Сөнки ил тыныс!

Шыйғаҡтан үрмәләй-үрмәләй, тырнаҡтарын йән көсөнә балсыҡҡа батырҙы ла соҡорҙан сыҡты, әбейе юҡҡа уны ҡаратырыш тимәй.

Ҡаратырыш та бит, тик бына һыу һөлөгөләй һылыу, зәңгәр күҙ Нәзирәһен эҙләргә батырсылыҡ итмәне. Балалары телевизор ҡараған һайын «Көт мине» тапшырыуына яҙайыҡ, тиҙәр ҙә бит, үҙемде ыҙалатҡан кеүек Нәзирәне лә эҙәрлекләп ҡаҡшатырҙар, тип шөрләй ине, ә үҙе шундай ҡыҙын юҡһына, күрешкеһе килә. Әрнегән күңелен баҫырға, бысранған ҡулдарын йыуырға шишмәгә йүнәлһәм...

... Бөтә ергә хужа булырға теләп, ауылдағы бер нисә кешенең бесәнлеген колхозға тартып ала. Беҙ ҡапсыҡта ятмай, тигәндәй, бер мәл халыҡтың күбәләре, кәбәндәре бесәнлектәре күрше ауыл урыҫтарына һатылғанлығы беленә. Ике-өс өйҙәге ир-ат, асыуына сыҙамай, Тимерйәндең ете бабаһын танытып, ете ҡат тиреһен тунағандар. Нәҡ шул мәлдә Ҡәйүм эҙәрлекләүҙәр буйынса Аҡъярҙан ҡайтып килгән була.

– Бына һиңә шул кәрәк, туҡ бөйөр!

– Иртәгә үк бесәндәрҙе кире ҡайтармаһаң, үлемеңде көт тә тор, яуыз!

– Кешенең күҙ йәше, ҡарғышынан ҡурҡыр инең...

Ҡурҡыныс тауыштарҙы ишетеп, туҡтап ҡолаҡ һала.

– Һеҙ…һеҙ нимә? Имеш, ҡарғыш? Бына мин, етем баланың ҡарғышы төшәсәк, исмаһам, – Тимерйәндең екеренгән тауышын ишетеп, Ҡәйүм ғауғалашҡан кешеләр янына ашыҡты. Ҡаҡса кәүҙәле генә булһа ла, туҡ бөйөр Тимерйәнде тегеләрҙән айырып алды. Баҫырлыҡ та хәле булмағас, уны йөкмәп тә ҡараны, яурынынан тотоп атлатырға тырышты, көс хәлгә шишмә янына еткерҙе.

– Ыҙалама, Ҡәйүм,ташла ла кит. Күпме зыяным тейҙе, бер үк ғәфү ит, –тине лә иҫен юғалтты.

– Кешегә соҡор ҡаҙыма,үҙең төшөрһөң, тип нисәмә аңлаттым, тыңламаның шул, – Ҡәйүм һөйләнә-һөйләнә Тимерйәндең ҡанын шишмәнән һыу алып йыуҙы.

Нәҡ ошо урында Тимерйән Ҡәйүмде һатлыҡйән, халыҡ дошманы тип рәнйеткәйне, шишмәкәй барыбер ғәҙел, аҡылға ултыртып, ғәфү үтендерҙе лә бит, тик Хоҙай Тәғәлә уға ҡаты яза ебәргән шул.

Ул мәлде ауыл кешеләре бик ныҡ иҫтәрендә ҡалдырҙы. Тимерйәндең уртансы улы Айса үтә лә аҡыллы, кешелекле – Мирзәхмәт ағаһының киреһе. Юҡ-бар бәхәсле эштәргә тығылмай, атаһының ҡара этлектәрен һиҙеп ҡалһа, йәшертен

генә ҡаза күрер кешене ҡотҡарып алып ҡалыр ине. Бына бит ғаилә лә балаларҙың алаһы ла була, ҡолаһы ла була тигәндәре шулдыр, күрәһең. Һоҡланғыс егетте ниндәй яҙмыш көткән бит. Йәйләүҙән ап-аҡ матур атта ауылға елеп ҡайтып килгәндә, аты нимәнәндер өркөп ҡаса. Көтөлмәгән хәлдән Айса баҙап ҡала, ни аралалыр башы ҡаты нәмәгә бәрелеүҙән иҫен юғалта. Эйе, аяғы өҙәңгенән ысҡынмай, кәүҙәһе ергә ауып, аты егетте өйөнә ҡәҙәр һөйрәтеп алып килә. Ауыл халҡының күргәндәре иҫ-аҡылы китеп һөйләй, күрмәгәндәре ауыҙ асып тыңлай. Баҡсаһында ҡымыҙ эсеп ултырған Тимерйәндең йөрәген ҡуҙғытып ат кешнәп ебәрһә, атта һәленеп торған, башы онталып, ҡанға туҙған Айсаны күреүгә айыуҙай кәүҙәһе менән лап итеп ергә ауа. Ул йән биргәндә күктә ҡабарған дөм-ҡара болоттарҙы кинәт күбектәй күпереп торған аҡ болоттар алыштырыуын күргән халыҡ күңеленә әйтеп аңлатҡыһыҙ бер сер йәшенде.

Күҙ асып йомған арала йыйылған халыҡ өнһөҙ ҡалды. Ҡәйүмдең күршеһендә йәшәгән ҡарт бөксәйгән кәүҙәһен турайта биреп:

– Кемдә-ҡайғы, ҡайғыһын уртаҡлашам, ә миндә шатлыҡ – былтыр юғалған аҡ атым табылды, – тип ат янына барып, уның ялының бер осона ҡушып үрелгән ялтыр таҫма – үҙе һалған тамғаны һыйпап, атын алып сығып китте. Күршеһе Мәфтуха әбей ҙә, күҙ йәштәрен һөртөп, доға ҡылды, Хоҙайҙан ярлыҡауын һораны. Үткән аҙнала ғына ауыл халҡы еләккә йөрөгәс, ул да саҡ-саҡ туйтаңлап, исмаһам, һуңғы тапҡыр булһа ла үҙ ҡулдарым менән еләк өҙөп ашайым, тигән уй менән яҡыныраҡ аҡланға барғайны. Тимерйән ҡайҙандыр килеп сығып, яу һалды:

– Ах, ҡороҡҡостар! Күҙегеҙ тонғанмы, бесәнемде тапап бөткәнһегеҙ ҙә баһа?!

– Туҡта әле, Тимерйән улым, мин иҫ белгәне бирле бында ғүмерҙә лә бесән сапҡан кеше булманы, – Мәфтуха телгә килеүгә, теге тағы ла ярһыны ла китте.

– Һин ҡыһылма, ҡарсыҡ! Үлер мәлең еткән, өйҙә генә тик ят!

Тимерйән бала-саға, ҡарт-ҡороно эттең бетенә һүгеп ҡыуалай башланы.

Шул саҡ Мәфтуха асыуынан: «Йөрәгең ярылғыры!» тип ысҡындырғайны, Хоҙайҙың амин тигән мәленә тап килгәндер күрәһең…

– Тимерйән улым, мин бит ысын күңелдән ҡарғаманым, ҡайҙан сыҡҡандыр инде ул һүҙ! Берүк, кисер Аллам, аламалыҡтарын ярлыҡа, урыны йәннәттә булһын!

Мәфтуха әбей эстән генә мөңгөрләп, кеше араһынан артҡа сигенде.

Ҡәйүм дә уның ошаҡлашыуҙары, аяҡ салыуҙары арҡаһында һанап бөткөһөҙ ғазап кисереүҙәрен күҙ алдынан үткәрҙе.

– Урланған мал йүнлегә илтмәй шул. Башҡортмон тип күкрәк ҡағып, кемдәрҙелер рәнйетеп, Хоҙайҙы үпкәләтте. Бына бит, баш та булды, ҡәҙерен белмәгәс, хәҙер ер ҡорто инде. Тәңренең яҙаһы гонаһһыҙ сабыйға төшөүе бик аяныслы….

– Көн төшкә ауышып бара, ә мин һаман ҡайтып етә алмайым, – тип үҙен әрләй-әрләй шишмәгә үрелде. – Йә, йәш, егәрле киленсәк, устарыма ҡойсо тамсыларыңды, ҡартласты дәртләндереп ебәр әле. Ғүмер буйы урыҫ та урыҫ тип башымды ғына ҡатырып бөттөләр. Бына ҡаршыңда сей башҡорт!

Ейән-ейәнсәрҙәренә ҡыуанды. Каникул еттеме, йәнә өйгә ҡот тула. Йәзилә менән Зөлхизәнең моңло тауышы, Буранбайҙың ҡартатаһынан ул-был төпкөл тарихты төпсөнөүе, Ғәҙелдең тирә-яҡты, тәбиғәтте оҫта һүрәтләп төшөрөүе – барыһының да бәләкәй мәлдәге илде бағып, илде данлаусылар булып йәшәүҙәренә иманы камил.

Эйе, бер мәл ейән-ейәнсәрҙәре менән тәбиғәт ҡосағына сығып, бала саҡ хәтирәләрен иҫкә төшөрөп алғайны. Шунда, Буранбай ейәнене ҡыҙыҡһынғас, Тәкәл тауының тарихын һөйләгәйне. – Элек бер баһадир Тәкәл батыр йәшәгән.

Шул ваҡыттарҙа кешеләрҙе йонсотҡан бер убырлы ҡарсыҡ та булған. Ул балаларҙы урлап ашар булған. Тәкәл былдай яуыҙлыҡты туҡтатыу, убырлыны юҡ итеү маҡсаты менән ҡарсыҡты эҙләргә сыға. Китеп барғанында уға йылан осрай, ҡапсығын аса ла йыланды һалып ала, бер ни киткәс, юлда көршәк табып ала. Уны ла ҡапсығын сисеп, һалып ҡуя. Атлай торғас, шеш тимер табып ала. Бара-бара, тағы ла һыйыр сыуыны табып ала. Бара торғас, бер өйгә осрай. Инһә, бер әбей дүрт һынын дүрт яҡҡа ташлап хырылдап йоҡлап ята, ти. Батыр тегенең ботона шеш тимер бәйләй, шул арала әбей уяна. Йыланды ҡатыҡлы көршәгенә һала. Һыйыр сыуынын ишек алдына түшәп ҡуя. Мейес артында утын була. Әбей уянып, ырғып тороп ҡатыҡлы көршәкте эсмәксе була, ауыҙын йылан саға. Ҡасайым тиһә, мейес артынан утын алып һуҡҡан, тағы ҡасайым тиһә, һыйыр сыуынына тайып йығыла, ти. Тағы ынтылған икән, шеш тимер күҙенә сәнселгән. «Башҡаса улайтмайым, кешеләрҙе йонсотмайым», – тип анттар әйткән.

Шулай итеп, Тәкәл ҡарт уны аҡылға ултыртҡан. Батыр хөрмәтенә был тау Тәкәл тауы тип исемләнгән.

Ҡәйүм ҡарт һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән Буранбай ейәне лә ниндәйҙер асыш яһаған кешеләй, ашығып телгә килде:

– Ҡартатай, тыуған төйәгебеҙ ҙә тарихҡа, батырҙарға бай, һин беҙгә күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һөйләнең. Мин дә Ҡәҙим Аралбаевтың «Сал ҡылғанлы дала» китабын уҡып, үҙебеҙҙең нәҫелгә ҡағылышлы яңылыҡтарға тап булдым. Шуларҙы һеҙгә ишеттерәйем.

*– Ултыраҡ Бикйәновтың улы Уразбай (Урыҫбай). Ултыраҡ ауылынан бүленеп сығып, 1858 йыл Уразбай ауылы Урыҫбай ауылы була. Байғаҙаҡ шәжәрәһенсә, Бикбау ауылына исем биргән Бикбау Бүлтерәктең улы тип күрһәтелә, ә Бүлтерәктең атаһы Илбаҡ ҡарт, уны икенсе төрлө Аҫҡаҡ батыр (Ишмаҡ батыр) тип тә йөрөткәндәр. Уразбай ауылында 72 йәшлек отставкалағы зауряд – есаул Йәноҙаҡ Уразбай улы Илбаков йәшәй.*

Буранбай китаптан теркәгән яҙыуын күрһәтеп:

*– Үҫәргән – Ялпаҡсал – Ялпаҡ Йәлил – Илбаҡ (Аҫҡаҡ батыр) – Бүлтерәк. (Бикбау, Ҡотлоғужа, Бәҙеғол, Бикйән, Байғаҙаҡ – Бүлтерәктең улдары.) Бөгөнгө көндә Мурзин, Бикйәнов, Ҡотлоғужин, Ҡунысбаев, Ултыраҡовтар, Илбаковтар нәҫелдәштәр һәм ауылдағы аралар соңғор, ҡыҙыл ыштан, ҡойон тип йөрөтөлә.*

«Атам, һиңә арнала» тип үҙе яҙған йырын Ишморат башҡарҙы.

*Әпән-төпән баҫып килә*
*Күпте күргән Ҡәйүм ҡарт.*
*Ҡушаматы – Ҡыҙыл ыштан,*
*Ялтыр башлы Мөйәм ҡарт.*
*Аҡ тирмәлә ултырып,*
*Әсе ҡымыҙ йыпырып.*
*Ялтыр башын һыпырып,*
*Аҡыл һата ҡупырып...*

Улының бала сағын иҫләп, ҡоҙоҡтан һыу алып ҡайтҡандағы хәлдәрен ояла-ояла һөйләүен хәтерләп алды. Ишморат ҡоҙоҡтан һыу тултырып торғанда, ырҙындан ҡыҙҙар ҡайтып килә һәм араларынан шаянырағ Шәһиҙә:

– Эй, матур булып үҫкәнһең, һиңә генә кейәүгә барам да ҡуям, – тип ыҫҡындырмаһынмы! Ер тишегенә инә яҙҙым, тип һөйләп көлдөргәйне. Сәсе шыма, аҙаҡ тулҡынланып, күпертеп, танауы ҡырласланып, бөркөт ҡарашлы булып, Ишморатының ҡапыл матур булып үҫеп киткәнен дә иҫләй. Ана, ниндәй матур йырлай шул.

Ҡәйүм маһая бирҙе. Бесәйен күтәреп, уны иркәләп һәр балаһын йотлоғоп тыңланы. Ҡәйүм үҙе бәләкәйҙән бесәйҙән айырылманы, ҡайҙа ла уны ҡосаҡланы ла йөрөнө. Ауырыған еремде дауалай, тип тә үҙенән ебәрмәй. Әле лә бесәйе алдында ята.

– Атамдың таҡмаҡтарын халыҡ ярата шул!

*Ағиҙелде иңләп йөҙгән*
*Аҡҡош микән ҡаҙ микән, иха-ха-хай.*
*Урам аша сығып барған*
*Егет микән ҡыҙ микән, иха-ха – хай.*

– Дөрөҫ йырлағанмын, мына бит килде шул заман. Урам аша ҡыҙмы, егетме сығып барыуын да белмәйбеҙ, икеһендә лә салбар, ҡыҫҡа сәс, икеһе лә машина йөрөтә, үәт бит, әй. Инсафлы, аҡыллы, тәүфиҡлы булығыҙ. Үҫмәҫ борон бер аҙ еңеү яулаһалар, халыҡтан өмөт итәләр, мине күтәрмәйҙәр, тип үпкәләйҙәр, халыҡҡа  ярҙам итер кәрәк, шул сағында һин дә халҡыңа кәрәкле булырһың. Халыҡ кешене күтәрмәй, кеше халыҡты күтәрә, ошоно онотмағыҙ.

Һалҡын һыуҙа мәж килеп, лыҫҡылдатып теүәтәйен һыулап башына һалды ла:

– Ошо изге түбәтәйемде кейеп, доғалар менән бата уҡып, әллә күпме йәшләрҙе ҡауыштырҙым. Ай, эттәгенәһе, бата тигәндәй… Оҙаҡ йөрөп ташланым, тағы берәйһен яусылап, бата уҡырға кәрәк булмағайы. Ә Ҡәйүм ҡарт «экскурсияла», – тип ихласлап доғаһын дауам итте, уларҙы нисек ятлай башлауын иҫкә төшөрҙө.

...Бер заман төшөндә ап-аҡ болоттар өҫтөндә йөҙә. Салҡан ятһа, ҡаршыһына болот туҡтала ла унда серле яҙыуҙар күренә, йөрәк һалып уҡый, хатта иртәнсәк шул доғаларҙы ҡабатлауын ишетеп, Ырыҫбикәһе хайран ҡала. Төшөндәге ятлаған «Аятел көрси»не әбейенә һөйләп:

–Ләхәүлә Ҡәй-йүм, ишетәһеңме. Ырыҫым, бәхетем минең, хатта доғала ла минең исем бар, мин – дин балаһы», – тип әйткәйне.

***

– Ней булһа ла, Хызыр-Ильяс юлдаш булһын! Шишмәм, доғаларымды ла йырыңа ҡушып ал, улар шундай изге. Эй, шишмәм, һүнмәҫ-һүрелмәҫ булһын йырҙарым, һиңә йырлап ҡалдырам, отоп ал да минең йырымды ла юлаусыларға ишеттер. Әхмәт дуҫым менән беҙҙең һуғыш хәтирәләре хаҡында китап яҙырға хыялланғайныҡ, һиңә һөйләйем, бөтә тарих һиндә һаҡлана, киләсәк быуынға сылтыр йырың итеп ишеттерерһең. Һинең янында Мәғәфүрә әүлиә апайым «100-гә бер-ике тулғансы йәшәрһең» тигәйне, ай-һай, дөрөҫтөр, шөкөр, йөҙҙө ҡыуалайым. (Юғиһә, бер мәл, сиғандар ҡулын ҡарап, алтмышҡа тиклем йәшәйһең тиҙәр, юрау хаҡы итеп Мәүлиҙә ҡыҙының яҫтығын биреп ебәргәйне. Алтмышҡа етә башлағас, шөрләңкерәй, алтмышты үткәс, шатлығынан ҙур байрам үткәрҙе). Мына бит, биш батшала булған аҡһаҡал Ҡәйүм ҡаршыңда тора, шишмәм.

Һинең һутың, һыуың, йырың менән ғүмер буйы йәшәнем. Тик дошман ҡулына әсиргә төшөп, һуңынан тере ҡайтыуымдың ни ғәйебе бар? Минең дә бит йәшәүгә хаҡым бар? Һүҙем хаҡ бит, шишмәм?!

Тарих битендә бер яңы йыр тыуҙы һәм фәрештәле, бөркәнсекле Ҡәйүмдең йырын өйрәлтмәк уратып алды ла, ҡойонда уйнатып, берсә ҡурай моңондай талғын, берсә тынлы оркестрҙай көслө көйҙө бергә ҡушып, наҙлы тулҡындарға ебәрҙе, ә йыр, халыҡ күңеленә инә һалайыҡ тигәндәй, шишмә сылтырауына ҡушылды ла ағып та китте...



Мәүлизә
ӘХМӘТЙӘНОВА

# АЯҠҺЫҘ ҠАРТҠА АҠ ЭШЛӘПӘ

Хикәйә

Йылға быуылған урынға күпер һуғылған. Бәлки, киреһенсәләр: күпергә терәп быуа быуғандарҙыр, йылға ниндәй замандарҙан бирле аға, күпер ҙә шул саҡта уҡ булғандыр – теге ярға нисектер йөрөгәндәрҙер бит. Оноттоңмо әллә, күперҙе кире сығып, һулға боролоп, аҙ ғына атлаһаң, ҡуйы шыршылыҡта – ҡәберлек, шуға оло кешеләр, бик ҡартайһалар: «Аръяҡҡа китергә ваҡыт етте-е», – тиҙәр.

Яңылышаһың, дөрөҫөрәге, шулай тип әйтә торғайнылар, сөнки улай тип әйткән әҙәмдәр барыһы ла аръяҡҡа күсеп бөттө инде, ә хәҙер кешеләр был һүҙҙәрҙе әйтеп уфтана торған йәшкә инеп өлгөрмәй. Ашығып йәшәйҙәр ҙә кинәт үлеп китәләр. Боронғолар әйткәнсә, аръяҡҡа китергә тейешле ваҡыттары етмәй ҡала. Шундай болғансыҡ заманалар.

Һинеңсә, заманаларҙың икенсе төрлөһө лә буламы? Минеңсә, заманалар һәр ваҡыт болғансыҡ. Болғаталар, сөнки. Эйе шул, ҡартинәйем нисек әйтә ине әле: болғансыҡ һыуҙа... Юҡ, хәтерҙә ҡалмаған...

Нимә тынып ҡалдың, ярай, онот ул турала, барыбер беҙҙең баш етерлек әйбер түгел, ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙып ташла. Әйҙә, ауыл тураһында ғына һөйләшәйек әле.

Беҙ күпергә еткәйнек.

Күпер аша егелгән арба сыҡҡанда, бүрәнәләр ат дағаһы аҫтында, йән ингәндәй, тәгәрмәс артынан йүгерә башлай. Ҡарап торһаң, иртәнән кискә тиклем күпер дөбөр-шатыр килә.

Юлсылар йә күрше ауылдарға сыға, йә беҙгә килә. Ҡайһыһы ниндәй йомош менән йөрөй, ә күптәре күпер төбөндә көноҙоно геүләп ултырған тирмәнгә он тарттырырға килә.

Тирмән алдында һәр ваҡыт аттар бәйләүле тора, асыҡ ишектән арҡаларына

*Мәүлизә Әхмәтйәнова (1960) Мәсетле районының Теләш ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Мәсәғүт педагогия училищеһында уҡыта, район гәзитендә эшләй, Ямал-Ненец автономиялы округының Тарко-Сале ҡалаһында 25 йылға яҡын балалар уҡыта. Әлеге ваҡытта Оло Ыҡтамаҡ ауылында йәшәй.*

тоҡ һалған кешеләр инеп-сығып йөрөй. Улар әйтер һүҙен тирмәнсенең ҡолағына терәлеп ҡысҡыра. Барыбер геүелдәүҙе еңә алмай, шуға ла күберәк ымлап аңлаша. Эстә, ярыҡтарҙан төшкән яҡтыла, туҙан бөртөктәре аҫылынып тора, бында, ҙур тирмән таштарынан тыш, ҡыҙыҡлы әллә нәмә юҡ. Ыштан балағы шикелле, өҫтән аҫылып ҡуйылған киндер тоҡ эргәһендә һәр ваҡыт кешеләр тора. Сөнки уның аҫтындағы тоҡто асып, ике ҡуллап тотоп тормаһаң, оноң иҙәнгә лә ағып ятыр.

Ә беҙ ни эшләп һәр ваҡыт шул тирмәндә йөрөнөк икән? Кем беҙгә унда инергә рөхсәт итте? Кем булһын – тирмәнсе. Ул беҙгә кем тейешле ине? Иҫтә ҡалмаған. Әммә беҙ эскә инһәк, ул, онға батҡан кеше, өҫтөгөҙҙө бысратаһыҙ, бер ергә лә һөйәлмәгеҙ, тип йылы устарына беҙҙең ҡулды алып, йылға буйлап атлай, ә уның кирза итектәре аҫтында бер ни уйламай йөрөп ятҡан мөгөҙөмсыҡтар һытылып, шырт итеп ҡала.

Көслө ағым мүк баҫҡан ҡуласаларҙы әйләндерә, һыу, ҡояш нурында мең төҫкә инеп, шаулап аҫҡа төшә. Йылға менән көрәшә торғас, уның таҡталары серей башлаған, ҡайһы бер урындарында мүк, ләм үҫкән. Оҙон һаҡалға оҡшап торған үләнде лә һыу туҡтауһыҙ тарап, ағыҙып алып китергә тырыша, тик көсө етмәй, үҫентеләр йәшел йылан кеүек борғолана ла борғолана. Ниндәй ҙур таштарҙы йөрөтә, ә бына шул ебәк кеүек кенә үләнгә көсө етмәй.

Хәтерендәлер, быуа яҙлы-көҙлө ташып китә ине, ел сыҡһа, тулҡындары ярға бәрелә, улар әрһеҙләнеп, хатта бәрәңге баҡсаларына килеп инә. Бындай саҡта меҫкен әсәйем туҡмай-туҡмай иҙән балаҫтарын йыуа, шунан теҙе-е-п кәртә буйлап элеп сыға. Уларҙан үлән өҫтөнә тәүҙә бик шәп булып һыу аға, ары-бара һирәкләтеп кенә тамсылай, шунан бөтөнләй туҡтай. Тирә-яҡ тәлмәрйен балалары – сүмесбаш менән тула. Улар шул тиклем күп – яр буйындағы һыу йыраҡтан ҡап-ҡара булып күренә. Беҙ уларҙы һауыт менән һоҫоп алабыҙ ҙа ергә түгәбеҙ, мәхлүктәр тәүҙә ҡойроҡтарын шәп-шәп һелтәп, йөҙөп китмәк була, шунан ҡояш аҫтында ҡороп, ҡатып ҡала. Бер заман беҙҙән ҡотолғандары һыуҙан сығып, үләндә һикереп йөрөй башлай, аяҡ баҫырлыҡ та ер ҡалмай.

Йәй көнө быуа һайығып ҡала, уны үлән баҫа, йылға сәскә ата. Һыу ебәгенең тырпайып сығып торған алһыу төҫлө башағына, селтәрле ҡанаттарын ватылып китер тип ҡурҡҡандай һаҡ ҡына бәүелтеп, сиңерткәләр, бызылдашып бал ҡорттары төшә.

Йылға сәскә ата, тиһеңме? Йылғалар, дөрөҫөн әйткәндә, сәскә атмай. Һин инша яҙғанда былай тип әйтә күрмә, Тәммәпа асыуланыр. Әммә беҙҙең йылға ысынлап йәмле йәй көндәрендә сәскә атыр ине.

Был үлән шулай шашынып үҫеп китә, хатта ишкәк тығыр әмәл ҡалмай, бындай саҡта кәмә менән йөрөйөм тиһәң, уны тамыры менән тартып сығарып, ситкә ырғытып, һуҡмаҡ һалырға кәрәк.

Бына шул уралатып ситтәрен үлән баҫҡан, күктә йөҙөп йөрөгән болоттар сағылған быуа уртаһында ағас кәмә сайҡала. Кешеһе йыраҡтан бик күренмәй. Ә бына уның башына кейгән аҡ эшләпәһе әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора.

Нимә тип ҡысҡыра? Эшләпә ҡысҡырамы?

Һин мине әйткән һайын бүлдереп торһаң, беҙ бер ҡасан да балыҡсы ҡарт тураһында һөйләргә өлгөрмәйбеҙ. Бүрәттән һуң, Гөлсөм апаны алыштырып килгән яңы апа рөхсәт итмәһә, һаман да дефективный интернаттың ике ҡатлы йоҡо корпусында булыр инек, ә беҙ инде быуа уртаһында сайҡалған кәмәгә барып еттек. Шуның өсөн шауламай ғына ултыр.

Эшләпә ҡысҡыра, тиме? Ул шулай булып күренә генә.Ҡарайһың, тирә-йүндә

күҙгә төртөлөрҙәй бер нәмә юҡ. Йәшел урмандар, үлән баҫҡан быуа... Һәм шунда... Ап-асыҡ булып бер әйбер күренеп ҡала. Ап-асыҡ булып... Бындай саҡта шулай күренгән әйбер әллә ҡайҙан: «Мин! Мин!...Мин бында-а-а!» – тип ҡысҡырған кеүек тойола.

Балыҡсы туҙ иретеп яһалған ҡалҡыуыстары һыу өҫтөндә саҡ-саҡ күренеп торған йылымын ҡарап сыға ла быуаның ҡаршылағы ярын ҡаплаған ҡамышлыҡҡа йүнәлә.

Шул ҡамыштар араһында бала сығарған бер инә өйрәк, ояһын эйәртеп йөрөп яҡканда, кинәт алдына килеп сыҡҡан кәмәне күреп, ҡурҡышынан оло тауыш күтәреп, тәүҙә ҡанаттарын һыу сәсрәтеп ҡаға-ҡаға, бәпкәләрен сыр-сыу тирәяҡҡа таратып ебәрә, аҙаҡ, уларҙы йыйып ала алмай, бик оҙаҡ ҡаңғырып йөрөй.

Ниңә таратып ебәргәнен аңланыңмы? Ул һунарсыға, был осраҡта кәмәлә ултырған кешегә, былай ти: «Бында мин бер үҙем генә, ҡулыңдан килһә, ат», – ти. Үҙе шунда уҡ һауаға күтәрелә.

Меҫкен генә бисара ҡош, тиһеңме. Улай тимә, ҡыланышы бер ҙә меҫкендәрсә түгел.

Бына шундай ожмахтай урында ыҫмалаға буялып ҡара төҫкә ингән ағас кәмәлә инә өйрәкте ҡурҡытып, һунарсы түгел, ә бер балыҡсы ултыра. Ни эшләп мин шул балыҡсы тураһында һөйләргә ҡаныҡтым әле. Сәбәбеме? Сәбәбе бик тә ябай, сөнки ул балыҡсы – беҙҙең атай.

Уның башында – эшләпә. Был эшләпәнең төҫө тәүҙәрәк ап-аҡ ине, аҙаҡ ул, ҡояшҡа уңып, елгә елләп, ямғырға сыланып, һороға әйләнде. Был фыртауай әйберҙе беҙ уға магазиндан һатып алманыҡ. Сабыр әсәйем уға баш кейемдәренән һәр төрлө баштарҙы ла ҡапларға яраған кепка йә фуражка алып биргән булыр ине, ә эшләпә... Хәйер, кем белә, бәлки, эшләпә лә алған булыр ине... Магазинда һатылһа, тим.

Килеп керәһең, ти, ауыл кибетенә, унда рәт-рәт булып эшләпә теҙеп ҡуйғандар, бөтөн халыҡ ҡырылышып ала. Иртәнсәк ирҙәр бөтөнөһө бер юлы урамға эшләпә кейеп сығыр ине микән. Бына ирмәк булыр ине. Тик ҡартинәйем, кеше ышанмаҫ хәбәрҙе, ысын булһа ла, һөйләмә, ти ине?

Иҫеңә төшөр, ауылда эшләпәне кемдәр генә кейә торғайны? Әлбиттә, урында ултырған кешеләр.

Мәҫәлән, колхоз рәйесе. Хәйер, беҙҙең яҡта улай тип тә әйтмәй торғайнылар, урыҫ араһында ултырғанғамылыр, персиҙәтел тиерҙәр ине. Эшләпәнең бик тә еллеһен – башы тирләп йонсоған бер аҡыллы уйлап сығарған, тишкеләп сыҡҡан кеүеген ауылдың хөрмәтле кешеләренең береһе – мәктәп директоры кейә ине.

Был эшләпәне атайыма бүләк иттеләр, тип әйтһәм дә, дөрөҫ булмаҫ. Ҡунаҡҡа барған ерҙән, бына атайыңа күлдәк кейҙереп ҡайтарҙылар, тип әсәйемдең маҡтанып һөйләгәнен хәтерләйем. Ундай хәл дә би-и-к һирәк була торғайны. Ә, эшләпә кейҙереп ҡайтарҙылар, тип әйткәне иҫтә ҡалмаған.

Был эшләпәне уға килтерҙеләр ҙә бирҙеләр.

Теләһә кем урамдан күтәреп кертмәне инде. Берҙән-бер яратҡан абзыйыбыҙ...

Ауыҙҙарынан һеләгәйе ағып торған ат хәтле үгеҙҙәрҙең муйынына арҡан ырғытып, күҙ асып йомғансы башын бороп, бағанаға бәйләп ҡуйған. Хәтереңдәлер, ул  калхуз малын дауаланы. Усын йомарлатып ҡына себенде эләктереп алып, шап итеп иҙәнгә бәреп үлтерә белгән. Эйе шул, аҡ халатлыларҙа булған сирҡаныуҙы белмәү кеүек һыҙат, малдарҙы ғына дауалаһа ла, уға ла хас ине. Себендән үгеҙгә хәтлем һәр йән эйәһе менән оҫта эш итә белгән, көслөһөнә – икеләтә көс, йылғырына етеҙлек ҡаршы ҡуя алған... Тик, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, ҡайһы саҡта ҡырлы стаканға ҡойолған шайтан әсеткеһенә генә көсө етмәгән ...

Абзыйыбыҙ, Хужа бабайҙы күмеп ҡайтҡас, беҙгә килде. Аҙыраҡ һалып та алғайны, буғай. Ҡулында ап-аҡ төҫтәге фетр эшләпә, өп-өр-яңы, бөтөнләй ҙә кейелмәгән. Кейһәләр, бер-ике мәртәбә генә кейеп сыҡҡандарҙыр. Кем кейгән, тиһеңме? Эшләпә хужаһы Хужа бабай инде, башҡа кем булһын.

Ҡояшта уйнап, һимеҙ мал тиреһе кеүек йылҡылдап тора. Ышанмаҫһың: тульяһын уратып һуҙылған таҫмаһы ла, ҡыбырҙатһаң, йылан кеүек, мең төҫкә инеп ялтырай. *Мә, кей, оҡшаһа*... тине шикелле. Ҡыйынһынып та торҙо, буғай, ағайымды әйтәм.

Бәлки, ҡыйынһынмағандыр ҙа әле, эсеп тә алған булһа. Хужа бабайымдыҡы, *мә, әтей, мужыт, оҡшатырһың,* тине, буғай.

Бәлки, бер нәмә лә әйтмәгәндер, килтергән дә тотторғандыр, ундай саҡта күп ләпелдәп тормайҙар ҙа инде, үҙен беләһең.

Юҡ, юҡ! Бына бит хәтер тигәнең. Яҡшылап ҡына барыһын да иҫеңә төшөр әле.

Йәйҙең ҡыңғырау кеүек бер көнө. Тәүҙә баҡса артында беҙ атайым менән икәү генә, өсәү генә(?) инек. Ул балыҡҡа китһә, өйҙә кем бар – шул уны ҡаршы алырға йылға буйына төшә. Был юлы әсәйем мине, беҙҙе ебәрҙе.

Буш биҙрәне бәргесләп, шалтыр-шолтор бәрәңге баҡсаһы буйлап ярылған һуҡмаҡтан йүгереп килдек. Көнө-төнө тыпыслауҙан ялтырап ҡатҡан был юлды һәр ваҡыт шулай саптырып үтәбеҙ. Күҙгә аҡ-ҡара күренмәй елдереүҙең сәбәбе – ҡыяр түтәлендә ҡояшҡа ҡыҙынып ятҡан туҙбаш йыландар. Кеше-ғара булмаһа, улар йомғаҡ кеүек йомарлана ла тиҙәктән бейек итеп күтәрелгән түтәлдә, ҡыяр япрағының өҫтөндә, ҡымшанмай ҙа ҡояшҡа ҡыҙынып ята. Әгәр инде беҙҙең кеүек шаталаҡтар биҙрә доңғорлатып осоп килһә, ул һары ҡашлы йомро башын күтәрә лә, ике тарбаҡлы оҙон ҡара телен сығарып, ыҫылдай башлай. Хоҙа-а-й!.. Елдермәҫ ереңдән елдерерһең.

Кәмәлә һикерешкән балыҡтарҙы сүпләгән арала, атайым һүҙһеҙ генә тәмәке көйрәтеп ултырҙы. Шул саҡта баҡсалағы һуҡмаҡтан, талғын ғына атлап, ағайым килеп төштө. Башҡа ваҡытта ул тубыҡланыр ҙа, телен сатлатып, ҡойроҡтарын ян-яҡҡа бәргесләгән, тос бәрҙеләрҙе ҡулына алыр, беҙгә шаяртып берәй һүҙ өндәшер ине. Ә бына ул көндө уның күҙенә балыҡ та, мин дә, һин дә, атайым да күренмәне, ул уйҙары менән һаман аръяҡта, ҡуйы шыршылыҡ эсендә урынлашҡан ҡәберлектә, ине. Сөнки, әйтеүемсә, был көн ул, Хужа бабайымды һуңғы юлға оҙатып ҡайтҡас, матайын тырлатып, беҙгә килде.

Бына барыһы ла бөгөн генә булғандай иҫкә төштө. Ағайымдың өҫтөндә – кешелеккә генә сыҡҡанда кейә торған күлдәк, башында – фуражка, ә уң ҡулына ул, ватылып китер тип ҡурҡҡандай, һаҡ ҡына бер әйбер тотоп алған. Яҡыныраҡ килгәс, ул алып килгән нәмә ап-аҡ төҫтәге фетр эшләпә икәне күренде.

Ул кәмә сылбыры эленгән баҫмаға кермәне, ә атайым эргәһенә сүгәләп ултырҙы ла:

– Хужа бабайымды күмдек... – тине. Уның уйҙары ошо минутта әллә ҡайҙа, ә күҙҙәре ҡулындағы баш кейемендә ине. – Бына, төҫө итеп кейһен, тинеләр. Атайым эшләпәне бик оҙаҡ ҡулында тотоп уйланып торҙо. Кем шулай тине, тип тә һорамаНы, ни өсөн тап миңә биреп ебәрҙеләр, тип тә әйтмәне.

Сөнки кем мәрхүмдең әйберҙәрен таратҡаны былай ҙа билдәле ине – ҡатыны барлағандыр. Ни эшләп тап шунда атайымды иҫенә төшөрөүе генә аптыраш. Сөнки уларҙың туған-тыумасаһы, таныш-белеше беҙҙән башҡа ла бихисап. Ә, бына бит, атайымды иҫенә төшөргәндәр. Бәлки, шул ваҡыт хужабикәнең күҙенә ағайым салынғандыр. Йә иһә уның менән дуҫ булып йөрөгән оло улдары әсәһенең ҡолағына шыпырт ҡына төшөргәндер:

– Әйҙә, атайымдың аҡ эшләпәһен Ғәлиәкбәр абзыйыма ғына бирәйек, Әсҡәр алып барыр, – тигәндер.

Әсәһе Әмилә әбей был эшләпәне тотоп, уйланып та торғандыр. Ташкентҡа ҡыҙы менән кейәүенә ҡунаҡҡа барғанда ҡояш аҫтында көноҙоно йөрөп, иренең башына эҫе ҡабып, ауырып ятҡаны иҫенә төшкәндер. Икенсе көндө, хаҡын күргәс, ҡатындың күҙе аҡайһа ла, улар иң тәүҙә ошо эшләпәне һатып алдылар.

– Тиҙ бул, ана, Әсҡәр ҡайтырға йыйына, – тип улы уның уйҙарын бүлгәндер. Шул ваҡыт ул, аҡ эшләпә менән һис кенә айырылырға теләмәй, күкрәгенә ҡыҫып торһа ла:

– Мә, улым, тиҙ генә сығарып бир, атайыңдың төҫө итеп кейһен, – тигәндер. Әллә ҡайҙарҙан ҡырҡ һыу үтеп килеп кергән эшләпәне ҡулына алғас, атайым да тынып ҡалды.

Мәрхүмде иҫенә төшөргәндер, яҡшы кеше ине, ауыр тупрағы еңел булһын, тигәндер. Ул, әлбиттә, был һүҙҙәрҙе ҡысҡырып әйтмәне. Ғөмүмән, ул артығын һөйләп бара торған кеше түгел ине (эсмәгән сағында).

Ул эшләпәнең түбәһенә усының ҡыры менән йомшаҡ ҡына итеп һуғып уртаға бөкләне лә, башына кейеп ҡуйҙы. Кейеп ҡуйҙы ла ҡабат сисмәне. Ә беҙ, атайымдың яҡтырып, йәшәреп киткән йөҙөнә ҡарап, иҫебеҙ китеп торҙоҡ.

Шул тикле лә килешә ине уға был баш кейеме ... Ағас күрке – япраҡ, әҙәм күрке – сепрәк, тип ҡартинәйем бик дөрөҫ әйтә икән.

Беҙҙең яҡта шулай үлгән кешенең әйберҙәрен яҡындарына таратҡан булалар. Элек шулай була торғайны. Хәҙер улай итмәйҙәрҙер инде... Элек әйбер ҡәҙерле булғандыр, тим. Бәлки, кеше лә ҡәҙерле булғандыр, кем белә инде.

Мәрхүмдең исеме Хужа булып, ул ауылда ғына түгел, ә тирә-яҡта ихтирам ҡаҙанған, өс ауылға *власть* булып, халыҡты тотоп торған, бик тә аҡыллы, бойороусан холоҡло, ҡаты кеше ине.

«Хужа абзыйым ғүмере буйы председатель булып торҙо...» Ағайы тураһында һүҙ сыҡҡанда, мишәр танауын күтәрә биреп, әсәйем шулай тип әйткеләр ине. Кемдеке – уныҡы, йәнәһе. Ғүмере буйы председатель булып торманы, әлбиттә, әсәйем аҙыраҡ ҡуйыртып ебәрә .

Һеңлеһе уға һәр ваҡыт хөрмәтләп – Хужа абзыйым – тип өндәшер, ҡартинәйем ололап «Хужиәхмәт» тиер, ә атайым «Хужа» тип кенә ебәрер ине. Сөнки атайым бер ҡасан да, бер кем алдында ла башын эймәне, эйә лә белмәне. Арҡыры кеше ине, ҡайһы саҡта. Эйе шул, бигерәк тә, *власта торъандарҙы* яратманы.

Тулы исеме тап шулай яңғыраған ул бабай ҡартатайымдың – әсәйемдең атаһының бер туған энеһе ине. Ә минең атайыма килгәндә, уның, балалар йортонан ҡасып, теләһә ҡайҙа йөрөгән урам малайының, беҙҙең ауылда туған-тыумаһы булманы, шикелле.

***

Ә ҡартатайымдың исеме Шакирйән булып, ул йәшләй генә яуҙа үлеп ҡалған. Был һуғыштан уның менән бергә киткән ауылдаштарының, ҡартинәйемсә әйткәндә, *әрмейестәрҙең,* күбеһе ҡайтмаған. Ә бына олатайымдың кесе туғандары бәхетенә һуғыш эләкмәй. Ҡайныһының йәше етмәй ҡалған, ҡайныһына аҡ билет биргәндәр. Улар барыһы ла иҫән-һау ауылда хәлле генә тормош көттө. Шуға күрә энеләр үҙҙәрен оло ағалары алдында бурыслы тип иҫәпләгәндәр. Бәлки, улай уҡ гәзитсә булмағандыр ҙа, кем белә инде?!

Әммә уларҙы өйҙә:

– Киленгә булышың, малайҙар, барың, утын булһа ла алып төшөп, тураҡлап

бирең, – тип гел генә ҡолаҡ итен ашап торған әсәләре, Ҡазан етеме Бибикамал ҡыуанғамы, өс малай егет саҡтарында еңгәләренә килеп, донъя көтөргә аҙ-маҙ ярҙамлашҡан.

Шулай һуғышҡа эләкмәгән өс туған ҡыҙыларменец булып үлеп ҡалған абзыйҙары алдында бурыслы икәнен онотмаған. Онотгормағандар.

Бәлки, эшләпәһен дә үлер алдынан, Хужа, Шакирйән абзыйҙың кейәүенә генә бирегеҙ, үҙе етем ине, ҡайны кешеһе лә һуғыштан ҡайтманы, тигәндер.

Шулай Шакирйән йәш кенә килеш Сталинград ҡаҙанында мәңгелеккә тороп ҡала.

Ҡала – утлы ҡаҙан, шунда кешеләр үлә, йөҙәр кеше, меңәр кеше...

Шулар араһында – минең олатай. Тәүҙә уның ҡулына ярсыҡ тейә, бәйләп, ул артабан атышып ята. Сөнки уға бер ҡайҙа ла китергә форсат теймәй, тирә-яҡта – ут. Шунан ул үлемесле яра ала.

Әгәр һалдат шул саҡта кинәт кенә аңын юғалтмаһа, үлер алдынан ул тылда ҡалған ғәиләһе хаҡында уйлағандыр. Өс ҡыҙының иң кесеһенә ул киткәндә – өс аҙна, уртансынына – һигеҙ, олоһона – ун бер йәш тулып, ҡатыны баланан һуң саҡ шәбәйә башлаған була.

Иманым камил: шул саҡта яраланған һалдаттың туҙанлы бите буйлап тамсы-тамсы күҙ йәше тәгәрәгәндер. Ул ғаиләһенә өй генә лә һалып бирә алмай китә.

Атай ҡартының өйөнә егет кәләшен ун өсөнсө йән итеп алып ҡайта, һыйыры ла, аты ла шул булған «Зингер» машинаһында көн-төн туҡылдап, оло ғаиләһен туйҙырған тегенсе ҡарттың бәләкәй генә өйөндә, йәй әле һәр кем ҡайҙа, бесәнлектәме, соландамы үҙенә төртөләр урын тапһа, бына ҡышын иһә арт борор ҙа урын булмай.

Шуға күрә Шакирйән олатай, әле уртансы ҡыҙҙары тыумаҫ борон уҡ, берәүҙәр менән ваҡытлыса торорға хаҡына килешеп, атаһынан башҡа сыға. Йәй ул ураҡта эшләп, һыйырлы була, ә бына өй рәтләй алмай ҡала.

Бына шуға илағандыр ҙа һалдат, йәштәре субырлап ағып төшкәндер, ә күҙҙәре төтөн араһынан саҡ-саҡ күренгән ҡояшҡа ҡарап ҡатып ҡалғандыр.

Ул, әсәйем һөйләүенсә, зәңгәр күҙле, оҙон буйлы, ҡаҡса кәүҙәле кеше була. Колхоздар ойошторғас, уны бригадир итеп һайлап ҡуялар, сөнки әлегә тиклем эшләгән әртилдә ул үҙен техниканы аңлай торған оҫта кеше итеп күрһәтә. Холоҡ-фиғеленә килгәндә, ниндәй ҡыйын саҡтарҙа ла ҡатынын рәнйетеп ауыр һүҙ әйтмәй. Былары – ҡартинәйемдең һүҙҙәре.

Ҡартатай юҡҡа илай, уның ғаиләһен бер кем дә урамға ҡыуып сығармай. Өйҙөң хужаһы, күрше ауыл бабайы, алыусы таптым, һатам, тип һалдат ҡатынына, йәғни минең ҡартинәйемә, килә.

Меҫкен ҡатын ни әйтһен инде, шунда уҡ илай башлай. Ә минең әсәйем ҡарттың ҡаршыһына һикегә барып ултыра ла (быларын һөйләгәндә ул, бына, мин йәш кенә булһам да, ниндәй үткер булғанмын, тип өҫтәп тә ебәрә), былай ти:

– Әгәр һин беҙҙе өйөңдән ҡыуып сығарһаң, Хоҙай Тәғәлә һине башыңдан орор. Шуға күрә һин әлегә беҙҙең ала быҙауҡайҙы ал, икенсе йылға тағы килерһең, беҙ һиңә икенсеһен үҫтереп торорбоҙ.

Бына хәҙер ҡулыма аҡса керә, тип торғанда, уйҙары селпәрәмә килеүенә аҙыраҡ эсе бошһа ла, хужа ут эсендә йөрөгән һалдат ғаиләһен урамға ҡыуып сығарырға баҙнат итмәй. Ул бер самауырҙы бушатып, ярай, йөрөүем бөтөнләй бушҡа булманы, тип үҙ-үҙен йыуатып, йәш быҙауҙы арбаһына бәйләп, кәлтер-көлтәр ауылына ҡайтып китә. Ҡарт тағы бер килә әле бурысы артынан, шунан һуң вафат та була.

Был заманда ауыл кешеләре бик ҡырыла – ҡайһыһы сирләп, ҡайһыһы ҡартайып. Күптәре, бигерәк тә бала-саға, урамы-урамы менән аслыҡтан шешенеп үлә, шуға күрә ҡартинәйем яңылыҡты тыныс ҡабул итә:

– Урыны ожмахта булһын, бик яҡшы кеше ине, – тип, ауыр һулап ҡына ҡуя.

Ә ҡартатайға килгәндә, ул һуғышҡа алып киткәндә лә, күҙ йәше түгә. Бик йомшаҡ күңелле кеше булғандыр инде, ахыры.

Мобилизацияға эләккәндәр, ә был ярты ауыл тигән һүҙ, арбаларға ултыра, ә ул, барыһын да янынан этеп ебәрә лә ауа-түнә сирәмгә барып ҡаплана. Йоҙроғо менән ерҙе төйә-төйә:

– Үлтерергә апаралар беҙҙе, ҡайталмабыҙ инде, һеҙ нисек кенә донъя көтөрһөгөҙ икән, сабыйҙарым... – тип үкереп илай. Аяҡтарында ныҒыраҡ баҫып торған ике ауылдашы уны ҡултыҡлап торғоҙа ла, һөйрәп тигәндәй, арбаға алып барып һала. Шунан ул ҡабат тороп ултыра ла оло ҡыҙын, минең әсәйемде, ҡул менән эргәһенә тартып алдына ала.

Ҡартинәйем, кешеләрҙән оялып, имсәк балаһын күкрәгенә ҡыҫҡан килеш шунда тора, иренең ҡыланышына эсе бошһа ла, башҡа ҡатын-ҡыҙҙар менән бергә, ауылды сыҡҡансы, илай-илай, уны оҙатып бара. Һуңғы өйҙәрҙе үткәс, ҡартатайым әсәйемде биленән тотоп ергә баҫтыра ла:

– Бар, ҡыҙым, – тип еңе менән күҙ йәштәрен һыпырып төшөрә.

Һиҙгәндер, күрәһең, Шакирйән ҡартатайымды әйтәм, үлемен һиҙгәндер, бахыр.

Уның нисек һәләк булғанын фронтҡа бергә эләккән яҡташы һөйләй. Ул кешеләр арҡылы, Шакирҙы үҙем ерләнем, ҡатыны килһен, тип хәбәр ебәрә.

Был ваҡытта инде ҡартинәйем «*Без вести пропал*» тип яҙылған ҡағыҙ алған була.

– Быныһы инде, хөкүмәттең *политикаһы,* – тип аңлата уға күрше Бәҙерттин. Дүрт атын калхуз двурына йүгертеп төшөрөп, кулак исеменән ҡотолоп, Себерҙән саҡ ҡалған ҡарт хөкүмәттең *палитикаһын* бик яҡшы аңлай. – «*Бизвести*» булһа – бушлай, Сәлимә, «*геройски пагип*» булһа – түләүле. Һинең кеүектәргә артыҡ аҡса сығармаҫ өсөн шундайын ебәргәндәр.

– Э-эй... Һуғышта төрлө хәлдәр була, бәлки, яраланып яталыр, шуға хәбәр ебәрә алмайҙыр – тип уфтанып, Сәлимә ирен һаман көтә.

Ҡыш көнө йәйәүләп әсәле-ҡыҙлы китәләр был кеше йәшәгән ауылға. Юлда туҡтап, ят ауылдарҙа төрлө кешеләрҙә ҡуналар, өсөнсө кискә хәбәр ебәргән һалдаттың ауылына көскә барып керәләр. Өшөп бөткән юлсыларҙы өҫтәл артына ултырталар, алдарына ризыҡ ҡуялар. Бына ошонда, шул тиклем ер килеп, ишетергә теләгән хәбәрҙәрен тыңлай улар. Һуғыштан сулаҡ булып ҡайтҡан һалдат һау ҡулы менән ҡырлы стаканды бушата ла, өҫтәл артында буш еңен һелкей-һелкей:

– Сәлимә, көтмә, үҙем бына шул ҡулдарым менән яр буйына күмдем. Әй, ундағы мәхшәрҙе иҫкә төшөрһәң...– тип сәсрәп килеп сыҡҡан күҙ йәштәренә иғтибар итмәй, тағы берҙе ҡойоп, ҡаплап та ҡуя.

Уның бәләкәй генә буйлы, табаҡ битле ҡатыны ике һүҙ һайын:

– Хөпөттин... Хөпөттин... – тип өлтөрәп йөрөй, – Һурпа эс әле, ас ҡорһаҡҡа хәҙер башыңа сыға ла инде, илаһым.

Юлсылар, ҡараңғы төшкәнсе аҙыраҡ атлайыҡ, ҡыҙҙар көтә бит, тип ҡуҙғалғас, хужалар бер тауыштан:

– Кис ҡоро юлға сығалармы, эт-ҡошҡа осрауығыҙ бар – тип ҡаршы булһалар ҙа, уларҙың, балалар көтә, тип аҡланыуын йыға алмай.

– Бына, юлда ҡапҡыларһыҙ, – тип хужабикә килтереп сығарған арыш

икмәген күргәс, Сәлимә тәүҙә аптырап, күҙҙәрен тултырып ҡатынға ҡарап тора. – Ирем ранин булып ҡайтты, тип персеҙәтелдән яҙҙырып алдым. Ал, ал, нисек тәғәм ризыҡһыҙ шундай юлға сығаң, – тигәс, ҡатын, уларҙы көтөп ҡалған бәпестәрен уйлап, уны ҡуйынына тыға. Сәлимәне аңлағандай, Хөбөттинден ҡатыны тағы бер таба икмәкте ашъяулыҡ аҫтынан алып, Сәлимәгә һона:

– Быныһын өйҙәгеләреңә алып ҡайт.

Илап ултырған сабыйым юҡ, сулаҡ булһа ла, хужам бар, үлмәбеҙ,тип ҡарай ине Хөбөттин ҡатынының күҙҙәре. «Ысынлап та, һинең, исмаһам, ирең ҡайтҡан», – тип уйлап, Сәлимә уныһын да ҡуйынына ҡыҫтыра. Ошо ике табикмәк йылы биреп, ике ҡанат булып осортоп алып ҡайта уларҙы ауылға. Оҙон юл буйы әсәле-ҡыҙлы, ишетеп көйгәнсе, ишетмәй-күрмәй көйһәксе, тип илашып та алалар, шунан, үлгән артынан үлеп булмай, тип, танауҙарын тартып, үҙ-үҙҙәрен йыуатып атлайҙар ҙа атлайҙар...

Әммә ҡартинәйем барыбер ғүмере буйы ирен көтә, әхирәте Бәҙернисаға төшөн һөйләй:

– Ап-аҡ ҡаҙҙар, йорт уртаһына ҡанаттарын йәйеп, килеп төштө ...

– Э-эй, әхирәтем, Шакирйәнең ҡайтырыналыр, бары шуға ғына. Бына шундай-шундай ауылда, әллә нисә йыл үткәс, бер салдат ҡайтҡан, *плендан*... Неместекенән ҡайтҡас, үҙебеҙҙекеләрҙә егерме биш йыл урман киҫкән ... Һуғышҡа ла кермәнек, мылтыҡтарҙы йыйҙылар ҙа, эшелоныбыҙ менән ырҡылып ҡул күтәрҙек, тип илай, ти, меҫкен.

Әммә Шакирйәндән башҡа бер хәбәр ҙә булмай, күрәһең, сулаҡ һалдат күмгән кеше, ысынлап та, минең ҡартатайым булып сыға.

Олатайым хаҡында хәбәрем шул ғына. Бибикамал ҡартинәйҙең вагон баштарында күтәреп йөрөткән, бик тә яратҡан тәүге балаһының шулай бигерәк тә бәхете булмаған. Малайы ла тыумаған, өй ҙә һала алмаған, ҡәбере лә билдәһеҙ.

Еңеүҙең нисә йыллығына арнап һуғыш темаһына инша яҙырға ҡуштылар. Мин олатайымдың иҫтәлегенә бағышланым һәм буйлы дәфтәрҙең уртаһынан йыртып алынған ике табаҡты тултырып, байрам алдынан ғына башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Тәммәпаға тапшырҙым.

Оҡшатманы. Нимәһен килештермәгәндер инде. Үҙемә ҡалһа, бик тырышып яҙғайным. Һеҙгә лә үҙ һүҙҙәрем менән генә һөйләп бирәйем әле. Бәлки, оҡшар. Ул былай тип башланды. *Миллиондарҙан-берәү. Инша.*

Һәр йыл Еңеү байрамы алдынан һуғышта һәләк булған һалдаттарҙы иҫкә алабыҙ. Сөнки улар ғүмерҙәрен аямай көрәшкән. Башын һалған миллиондар араһында минең олатайым Рамазанов Шакирйән дә булған. Ул аяуһыҙ алышта батырҙарса һәләк булған. Уның кеүектәр бик күп була, хатта тарих уҡытыусыһы ла был һанды теүәл генә итеп әйтеп бирә алманы. Ул беҙгә былай тине: һуңғы йылдарҙа гәзит-журналдарҙа академиктар һәм йәнә тағы әллә ниндәй билдәле шәхестәр бәхәс күтәрә. Һуғышта нисә миллион кеше һәләк булған, тигән һорау тулҡынландыра икән был сал сәсле уҡымышлыларҙы. Төрлөһө төрлө һандар килтерәләр. Шунса, шунса миллион, тиҙәр.

Мин уйлайым, ҡат-ҡат тылҡырға, берәй ҡаҙаныш бармы был нолдәр теҙелгән һанда? Берәүҙәре, документтарҙы йәшерәләр, икенселәре, һандарҙы кәметәләр, тип әйтә икән.

Был һандың осона сығыр өсөн мин, алтынсы «а» синыфы уҡыусыһы Гөлдәр Хәйбуллина, иң еңел юл тәҡдим итәйемме?

Шул бәхәсләшкән кешеләрҙе беҙҙең ауылға саҡырам, иҫәпләгеҙ башта беҙҙә, шунан күрше ауылға китерһегеҙ, аҙаҡ сығырһығыҙ туралап ҡына Әкәтәйгә, Ҡорғатҡа, Тимербайға, Һалҡын шишмәгә,Ҡурғашҡа, Абдуллаға... Һәр ауылда

бар ундай ташҡа уйылған исемдәр. Беҙҙең төбәктә йөрөп сыҡҡас, китерһегеҙ Өсөйлө аша Ямашҡа, Нөгөшкә, Жарлыханға, Балаҡатайға, бер республикала иҫәпләп бөтөргәс, күсерһегеҙ икенсеһенә... Шунан еректәре генә тороп ҡалған, ҡороған ауылдарҙың ҡайтмаған һалдаттарын яҡынлата ғына булһа ла ҡушырһығыҙ.

Ә һеҙ ул ауылдар ниңә бөткән тип уйлайһығыҙ? Яуабы билдәле инде. Буш ҡалған улар. Ирҙәре һуғыштан ҡайтмаған, ә ғаиләләре астан ҡырылған.

Үҙегеҙҙең ғүмерегеҙ етмәһә, улығыҙға, улығыҙ улына васыят итеп ҡалдырыр. Барыбер бер заман осона сығырһығыҙ.

Бына шулай иҫәпләп сығарған һан иң дөрөҫө булыр, бер кем дә бер нәмәне лә йәшермәй, кәметмәй, арттырмай, барыһы ла күҙ алдына баҫыр.

Исемлек төҙөлгәс, уны уҡый башлаған кешене генә ҡыҙғанам. Танкыларға ҡаршы ҡылыс һелтәп сапҡан атлыларҙы ҡыра торғас, аҡылдан яҙған немец пулемётчиктары шикелле, (Хоҙай һаҡлаһын!) еңеләйеп китмәһен.

Кемдер, бары сатан Хәким менән сулаҡ Ғәйнетдин генә ауылға иҫән ҡайтҡан был һуғышты бөйөк тип атаған. Минең фекеремсә, хаталанған ул кеше. Бөйөк еңеүҙең еңеүселәре була.

Олатайымдың бары клуб алдында аҡбурға буялған һәйкәл эргәһенә ҡуйылған ташта исем-шәрифкәйе генә ҡалған. Мәңгелеккә. Мәңгелек инде, ташҡа уйылғас.

Ундағы исемдәр теҙмәһен тулыһынса күҙаллайым тиһәң, бик оҙаҡ торорға кәрәк, шуға мин барыһын да рәттән уҡып тормайым. Мин түгел, үҙ балалары ла бик хәтерләмәгән Шакирйән олатайҙың исеме ҡайҙа яҙылғанын беләм, шуға хәҙер эҙләп табам.

Миллиондарҙан берәү олатайым Шакирйән Ниғәмәтйәнов беҙҙең күңелдәрҙә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған.

Оҡшатманы Тәммәапа. Билдә лә ҡуйып тормаған, *«см»* хәрефтәрен генә ҡуйған да вәссәләм. Төнө буйы ултырҙым бит әле, бишле ҡуймаҫын белһәм, берәй ерҙән күсереп кенә алыр инем шартлатып...

Ни эшләп уны әсәһе вагон башында күтәреп йөрөткәнме? Минең әсәйемдең олатаһы, бөтә ауылды баштан аяҡ кейендергән тегенсе Ниғәмәтйән ҡарт – телгә оҫта, хәйләкәр, дини һәм дә ки бик дәртле кеше була. Ҡара эштән баштары сыҡмаған ауыл ҡарттарынан бер башҡа айырылып тора. Ул, ҡышын башына ҡупшы папаха, бай яғалы һәйбәт туҡыманан пальто, күн менән өҫтөнән йөрөтөлөп тегелгән быйма, ә йәй аҡ күлдәк өҫтөнән ҡап-ҡара камзул кейеп, бик ыҫпай ғына йөрөй. Эшкә лә бик егәрле була. Ике мәртәбә үҙе бура бурап, өй күтәрә. Икенсе өйөнә сыҡҡанда, ул инде етмеште ары атлаған була.

Һуғыш ваҡытындағы аслыҡта үҙ балаларын ғына ҡайғыртмай, мохтаж булған туған-тыумасаһына ла булышырға тырыша, тәү сиратта һуғышта ятып ҡалған оло улының ғаиләһен ситкә типмәй. Әсәйем һеңлеләрен эйәртеп, өйгә килеп инеп, ишек тупһаһынан төшөүе була, ул, эшен ташлап, ейәнсәрҙәренең сәстәренән һыйпап сыға, шунан ҡарсығынан сәй ҡуйҙыра. Балалар тамаҡтарын туйҙырып, ҡайтырға сыҡһа, артығы булмаһа ла, ҡуйын-ҡултыҡтарына нимәлер төйөнләп ҡайтара, буш ҡул менән өйҙән сығармай.

Йәше байтаҡ булһа ла, ул бер ҡасан да ҡул ҡаушырып ултырмай, ҡар ireү менән, ейәндәрен йыйып, кәсепкә сыға. Улар шау-гөр килеп Ямаш тауына урыҫ ерҙәренә башаҡ сүпләргә, балтырған, ҡаҡы, һарына, Һоябашҡа йыуа йыйырға йөрөй.

Был көндө ҡыҙ-ҡырҡын өйҙән өйгә йүгереп, тиҙ генә бер-береһен саҡырып, ҡартатайҙары өйөнә йыйыла, һәр кем арҡаһында биштәр, тоҡ аҫып, ауылдан сығып китә. Күмәкләшеп улар Һоя буйындағы әрәмәлеккә... ҡарға бәпкәләрен сүпләргә бара. Аслыҡтың яманыраҡтарын иңендә күтәргән ҡарт, күрәһең,

бәпкәләрҙең ҡасан күҙҙәре асылып, ит ҡуна башлаған ваҡытын бик яҡшы белә.

Әрәмәлә бала-саға ян-яҡҡа таралып китмәй, ҡартатайҙарын уратып алып, ул нимә ҡушһа, шуны эшләй. Ҡарға оялаған ағасты күреп ҡалыу менән, ул етеҙерәк бер малайҙы ағасҡа мендерә. Был *бәхет* йышыраҡ ҡарттың һонтор Исмәғил, Ибраһим исемле кесе малайҙарына тейә. Уларҙың ялт-йолт килгән ҡиндраҡтарына ҡарап тора торғас, аҫтағы ҡыҙҙарҙың муйындары тала, күҙ алдында осҡон сәсрәй башлай. Малайҙар ояға ҡулдары етерлек булғас, туҡтап ҡала, шунан ауыҙҙарын асып, сәрелдәшкән ҡошсоҡтарҙы берәмләп ҡуйынына тултыра. Өҫтә, инә ҡарға пыран-заран килә, ул әлдән-әле таш кеүек атылып, ояһын туҙҙырыусыларға ташлана, уларҙың башындағы бүреген тибеп төшөрә. Бала-саға береһен-бере уҙҙырып ҡарғаны ҡыуалай, ағас-таш бәрә. Ниһайәт, малай, бушаған ҡулы менән таҡыр башын инә ҡарғанан ҡаплап, аҫҡа төшә башлай. Аҫтағылар, дәрт биреп, уға ынтылған ҡошҡа айт-һайтлап ҡысҡырыша. Малай ергә баҫыу менән түшендә сәрелдәшкән табышын бушата. Был арала кемдер икенсе ағасҡа үрмәләй. Ҡарт тубыҡлана ла:

– Бисмилләһи-рахман-иррахимм!

Битен һыйпап, килтергән себештәрҙе салып, һуйған берен биштәр-тоҡҡа тултыра бара.

Улар шулай көтөүе менән оя туҙҙырып, кискә хәтле йөрөйҙәр, һәр кемдең тоғо һиҙелерлек ауырайғас, уны арҡаларына аҫып, ҡайтырға сығалар.

Хужабикәләр табышты тасҡа тултырып, эҫе һыу менән бешекләп таҙарталар ҙа ҡаҙан аса. Исмаһам, бер тамаҡтары туйғансы һурпа эсә.

Шәберәк сағында, кейем тектерергә килгән ҡатын-ҡыҙ бик йылмайып ҡараһа, ул, һаҡалын һыпырғылап, эйәреп оҙатып та сығып киткеләгән, һәр ваҡыттағыса, ниндәйҙер бер юҡтан ғына килеп сыҡҡан зыу-ғәләмәттән һуң, ҡартатайҙың әсәһе, ул заманда йәш ҡатын, имсәк балаһын күтәрә лә, тыуған яғына ҡайтырға сыға. Зыу-ғәләмәттең ҡайҙан килеп сығыуының сәбәбе билдәле инде, сәсе оҙон да башында сыбар яулыҡ.

Тимер юлына хәтлем йөҙ саҡрымды Бибикамал йәйәү атлай. Станцияла ла бер кем дә меҫкен ҡатынға ул заманда «люкс» тәҡдим итмәй. Уға балаһын яулыҡ менән алдына бәйләп, тауар вагонының башында, елгә елферҙәп барырға тура килә.

Сей йәш бала күтәреп, иренән ҡасып ҡайтҡан ҡатынды, тыуған илендә лә бер кем дә ҡосаҡ йәйеп ҡаршыламағандыр. Ниндәй туғанына күпмегә генә һыйғандыр, бәлки, артыҡ ҡалаҡтан туйған береһе, ҡатыныңды килеп ал, тип хәбәр ҙә ебәргәндер – уныһы ҡараңғы.

Тик күпмелер ваҡыт үткәс, бабай, яйына сығып, әбейе артынан бара. Ҡайтҡанда уларҙың был оҙон юлды нисек үтеүе хаҡында тарих – ләм-мим.Әммә бабайҙың ул холҡо үҙгәрмәй, сөнки, билдәле булыуынса, холоҡ тигәнең ул сисеп кенә ырғытырға күлдәк түгел.

Тик ары-бара йәш ҡатындың балалары яулыҡҡа ғына төрөп, алдына бәйләп ҡуйып килештерелек кенә булмай, Шакирйәндән тыш өс малайы, ике ҡыҙы, инде илле дүрткә кергәс, тағын бер төпсөк балаһы булып китә. Шуға күрә ул, сабыр итеп, бабайы менән йәшәй бирә.

Тора-бара Бибикамал инәй зыу-ғәләмәт ҡубармаҫҡа ла өйрәнә,ҡарты күлдәк тектерергә килгән ҡупшы артынан сығып китеүе була, эйәреп кенә арттарынан килә икән дә, улар сәй эсергә генә ултырһалар, эскә керә лә, ян-яғына мендәр ҡыҫтырып, һикегә аяғын бөкләп менеп ултырған ҡартына:

– Эсмәгән сәйеңме? Донъяңды онотоп, нимә эшләп ултырмаҡ кәрәк. Әйҙә,

ҡайт, – ти икән. Аҡырмай, баҡырмай, йомшаҡ ҡына тауыш менән әйтә. Бабайға, кәрәге сыҡмаған мендәрҙәрҙе ситкә этеп, ҡупшы кәзә һаҡалын һыпыра-һыпыра, ҡарсығы артынан эйәрергә генә ҡала.

Шулай Шакирйәндең туғандары үлеп ҡалған ағаларының ғаиләһенә ярҙам итергә кәрәк икәнен беләләр, әммә белеү менән эшләү – икеһе ике нәмә бит әле ул.

Бына колхоз председателе булып торған Хужа, ҡартинәйем хөрмәтләп әйткәнсә Хужиәхмәт, халыҡ, Хужа үҙенекеләрҙе ситкә типмәй, тип әйтер тип, ҡурҡып, туған-тыумасаһын киреһенсә ситкә тибергә тырышып ята.

Ямашҡа, тракторислыҡҡа уҡырға ике туғанын ебәрә, ярай, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, ул бит шунда уҡ ике һеңлеһен дә оҙата, йәш кенә ҡыҙҙар ҡара яҙҙан ҡара көҙгә хәтлем көн-төн ҡырҙан ҡайтмай эшләйҙәр.

Хәлимә исемлеһе, һыуы ҡайнап сыҡҡан тракторҙың капотын, уйламай, кинәт аҫып ебәреп, битен, муйынын, түшен парға бешерә.

Утын киҫергә урманға ебәрергә кешеләр йыя икән, иң тәүгеләрҙән исемлеккә минең әсәйемде, ул саҡта ун туғыҙ йәшлек ҡыҙҙы, яҙып ҡуя. Балалы ҡатындарҙы урманға ебәрергә ярамай, яңғыҙаҡтарҙы була.

Әсәйем үҙе кеүек йәш ҡыҙҙар менән урмандан ҡасып ҡайта. Югуз тиклем Югуздән – ҡыш көнө, йәйәү. Уның юлы ниндәй бит әле, йәйәү йөрөрлөкмө: ҡара урман, тау-таш. Ауылға ҡайтып еткәнсе әллә нисә ергә кереп ҡуналар әле улар. Өшөп-туңып өйгә ҡайтып йығылған балаһын күргәс, ҡартинәйемдең сәсе үрә тора:

– Эх, нимә була инде хәҙер, нимә генә эшләтерҙәр инде һеҙҙе?

Ә ҡыҙы ҡысҡырып илай.

– Көнө-төнө ҡара урмандабыҙ. Күҙ асыр әмәл юҡ, ирҙәр бәйләнә... Үҙебеҙ асбыҙ, ә норманы бир, үтәмәһәң, борсаҡ оно ла эләкмәй. Ул борсаҡ онон да бригадир Зәкерей, башта ҡалаҡтың өҫтөн тигеҙләп, өйөлөп торғанын бармағы менән һыпырып төшөрә әле ул, ҡыйшыҡ, шунан ғына һинең тоғоңа бушата. Кис ҡунырға ҡайтҡанда беҙ көрт йырып йәйәү атлайбыҙ, ә Ҡазый беҙҙең эргәнән, атына һыҙырып, һыҙғырып үтеп киткән була, муйыны боролғор...

Бер заман, толобон санаһында ҡалдырып, еңелсә генә, бик йонсоған ҡиәфәтле Хужа, Хужиәхмәт өйгә килеп керә лә тупһанан уҡ йоҙроҡ төйөп ҡысҡырып ебәрә:

– Бузатйо-о-р.! Бузат-йо-о-р! Беләһеңме, быҙың өсөн һеҙҙе нимә эшләтергә була? Тирмәнтауға сығарып атырға була. Бына шулай, арҡағыҙға терәп, шартлатып атырға. Ҡушҡандар икән, эшлә! Ҡылды ҡырҡҡа ярған заман. Бөтә халыҡ тырыша, һуғыштан һуң аяҡҡа баҫырға кәрәк. Кем илде аяҡҡа баҫтырыр? Америка килеп эшләрме? Юҡ, беҙҙән башҡа бер кем дә килеп эшләмәҫ. Әйт: кем ҡотортто! Әйт! Бына йөрөрһөң әле һикергеләп, бик йөрөрһөң, олаҡтырһам башыңды...

– Асбыҙ, бригадир борсаҡ онон да норма менән бирмәй, үләйемме хәҙер, бармайым бер ҡайҙа ла, – тип илай һеңлеһе.

Председатель ҡыҙҙарҙы йыйып, ат биреп, һалам аҫтына ярты тоҡтай арыш оно тығып, кире урманға ебәрә. Ебәрә инде, эше шул етәксе кешенең, арыраҡ та ебәрә алыр ине, власть ҡулында. Әммә ул ҡыҙҙарҙы санаға ултыртып, кире урманға ғына ебәрә. Уныһына ла рәхмәт. Ҡартинәйем илай-илай, ҡыҙының өҫ-башын ямаштырып-ялғаштырып, юлға йыя.

– Сей тирегә ут ҡапмай, түҙ инде, балаҡайым, ни эшләйһең...

Бына шундай ҡаты кеше була Хужа, Хужиәхмәт. *Партийный* кеше була. Ул үҙе лә башта тракторист булып эшләй, шунан, эшен күрһәткәс, уны партияға алалар, МТС-та бригадир итеп ҡуялар, аҙаҡ ваҡ колхоздар ойошторолғас, ул председатель булып китә. Бына шундай кешенең фетр эшләпәһен үлгәнсе кейҙе инде

минең атай. Улар дуҫ та түгел, дошман да түгел тигәндәй, шуға күрә Хужа бабай теге донъяға киткәс, ағайым күтәреп килгән уның фетр эшләпәһен атып бәрмәне, ә башына кейеп ҡуйҙы. Күрә алмаған булһа, кеймәҫ ине.

Урман ул заманда әсәйемдең бигерәк йәненә тейә: икенсе мәртәбә ҡасып ҡайтҡас, ул, иҫән булһам, ике аяғымдың береһен дә атламайым, Һояға батам да үләм, ти. Ҡыҙының улай ҡысҡырғанын бер ҡасан да ишетмәгән Сәлимә ҡайны ҡартына йүгереп бара. Үҙенә ҡалһа, ул былай тип уйлай: әйтәйем ҡартҡа, улы, йәғни Хужиәхмәт менән һөйләшеп ҡараһын, ебәрмәһен минең ҡыҙымды башҡа урманға, колхозда эш бөткәнме, ҡуйһын, ана, һыйыр һауырға, быҙау ҡарарға... Бер туған ағаларының ҡыҙы бит, ул беҙгә аҙыраҡ булышмаһа, кем булыша...

Бик ҡыҙып килгән киленде һикегә самауыр артына ултырталар, алдына сәйшәкәр ҡуялар. Ян-яғына мендәр ҡыҫтырып, аяҡтарын бөкләп сәй эскән хәйләкәр ҡарт башта өндәшмәй, оҙаҡ ҡына уйланып ултыра. Шунан, ап-аҡ кәзә һаҡалын оҙон бармаҡтары менән һыпыра-һыпыра, былай ти:

– Беҙ ҡыҙҙы кейәүгә бирәбеҙ.

– Кемгә? – тип аптырай килен кеше.

– Бына миндә йәш егет эшләй, мин уның атаһын беләинем, бик яҡшы кеше ине, мәрхүм...

Буласаҡ атай кеше, балалар йортонан ҡасып, теләһә ҡайҙа йөрөп үҫкән *зимагур,* был заманда инде ултырып та сыҡҡан була, кемгә өй, кемгә нимә бурап, беҙҙең яҡтарҙа ауылдан ауылға йөрөп ята. Була уға был заманда егерме өс йәш. Бысаҡтай үткер, һыу һөлөгө кеүек фыртауай егет, урыҫсаны һыу кеүек эсә, ҡулында балтаһы уйнап тора, ут инде ут, ә инде хром гармунда уйнап, йырлап та ебәрһә... бөтөн ҡатын-ҡыҙ ах тип ебәрә икән.

Ул заманда ауылда ирҙәр юҡ, атайыма һый-хөрмәт, ҡайҙа эшкә яллана,– шунда бер ҡатын алып ебәрә, урыҫ ауылы булһа – мәрйәне, марый, сирмеш бисәләре лә була бының.

Ҡайны менән килен урындағы власть менән кәңәшләшәләр. Хужа, әлбиттә, риза була, беренсенән, һеңлеһен урмандан алып ҡалды, тип һүҙ тыҡһалар, сәбәбе бар: кейәүгә сыҡты, икенсенән, Сулеянан орлоҡ ташырға кеше кәрәк, йыраҡ юлға шундай үткер егетте эҙләп тә таба алмаҫһың. Бына йәш кейәүҙе иртәгәнән үк шунда егергә була. Шулай Хужа, минең буласаҡ атайымдың килде-китте дөкәмиттәренә лә иғтибар итмәй, ат тотторол, станцияға ашлыҡҡа ебәрә.

«Кемгә булһа ла кейәүгә сығам, тик урманға бармайым», – тип илаған ҡыҙ шулай кейәүгә сыға. Әммә үҙе ғүмере буйы:

– Урамда йөрөгән зимагурға тотоп бирҙегеҙ! – тип ҡартатаһы менән әсәһенә үпкә йөрөтә. Бына шулай Хужа бабай, уйламаҫтан, минең әсәйемдең атайыма кейәүгә сығыуына һәм минең апай-ағайымдарҙың донъяға килеүенә сәбәпсе була.

Ҡасандыр ап-аҡ төҫтә булып, йәндәй генә түрҙә эленеп торған эшләпәне башына кейгән саҡта, бәлки, ул бына ошоларҙы иҫенә төшөрөп ултырғандыр.

Бына бит, берәү әйткән ти: минһеҙ мине өйләндерҙеләр. Бында ла шулай килеп сыға, ҡыҙҙың уйы – нисек булһа ла урманға бармау: әсә кеше инде, билдәле, балаһына бары яҡшылыҡ ҡына теләй. Ҡартатай кешенең дә уйы аныҡ: ул, ҡыҙ баланың был йәштә кейәүҙә булыуы хәйерле, ти: ә кейәү кешенең килеп сыҡҡан хәлдә ниндәйерәк уй йөрөтөүе хаҡында бер һүҙ ҙә сыҡманы.

Оҡшатҡандырмы ҡыҙҙы, әллә был өйләнешеүгә һәр ауылда тороп ҡалған бисәләре рәтендәге сираттағы мауығыу тип кенә ҡарағанмы – билдәһеҙ. Бәлки, ул был ваҡытта эргәһендә яҡын кешеләре булыуын теләп, туғандарса мөнәсәбәткә һыуһап йөрөгәндер. Нимә менәндер егелмәгән тайҙың муйынына арҡан ырғыталар.

Бәлки, ысынлап та оҡшатҡандыр. Ашау яғы бик ҡыҫан булһа ла, әсәйем ҡыҙ сағында матур ғына була.

Һуғыштан һуң төшкән бер фотоһүрәт һаҡланып ҡалған. Унда өләсәйем ҡыҙҙары менән өйҙәренең эргәһендә ултыра. Әсәйемдең унда буй-һыны өрөп тултырған кеүек, ерән төҫтәге сәсен икенән үреп, толомон алдына төшөргән. Бик тә һөйкөмлө генә ҡыҙ бала.

Уның артынан да күҙ атып йөрөгән күрше егете була, әлеге шул сәүит палитикаһын, дүрт атын етәкләп двурға төшөрөп биргән Бәҙертдиндең оло малайы. Уның биргән бүләктәрен, ҡурҡып, ҡыҙ ҡара бураға күмә.

Әммә инәһе егеттең исемен дә әйттермәй, ышанма, алмаҫ ул һине, улар бай, беҙ ярлы, алыр булһа, йәрәшеп китер ине, ә был беҙҙең тиң, беҙ ҙә етем, ул да, тип ҡыҙының ауыҙын яба.

***

Бәлки, бына ошолар иҫенә килеп төшкәндер, тим, эшләпәне күргәс. Йә иһә, уйлап-уйлап торғандыр ҙа, был эшләпә башына әлегә хәтлем кейеп йөрөгән уңған кипкәгә ҡарағанда шәберәк тә инде, өр-яңы, етмәһә ап-аҡ төҫтә, төшөңә лә кермәҫ бындай байлыҡ, тип кенә уйлағандыр.

Бәлки, ни эшләп эшләпәне бары колхоз председателе менән мәктәп директоры ғына кейергә тейеш әле, мин кемдән кәм, тип тә ебәргәндер.

Минең атайым ғүмерендә лә председатель дә, директор ҙа булып торманы, тинем.

Бер заман нисек мәктәп директорының хужалыҡ буйынса урынбаҫары булып торғанда, алып ҡайтып уҡытыусыларға, иҙән йыуыусыларға таратырға тейешле аҡсаны Ямашта эсеп йөрөп туҙҙырып бөтөргәнен, аҙаҡ әллә нисә йыл буйы бушҡа эшләп йөрөгәнен һөйләмәйем. Оят.

Нисек ултыртып ҡуймағандар, тиң, әлеге лә баяғы колхоз рәйесе алып ҡалған. «Эшләр, түләр» тигән, итәк тулы бала менән ул ҡатын, йәғни минең инәйем, нимә эшләргә тейеш? Утыны кәрәк, бесәне кәрәк, тигән. Ултыртмағандар.

Ә тартырға, сәй-шәкәргә инәйем менән улар аҡсаны былай эшләйҙәр. Атайым балыҡсы тип әйттем инде, ул, төн йоҡламай, ҡара таңдан мурҙаларын ҡарап китә икән дә, бер ыңғай, балыҡ уйнағанда берәй сәғәт ҡармаҡ менән дә ултыра. Шунан инәйем балыҡты биҙрәгә тултырып, яурын башына ултыртып, тау аша ғына ятҡан урыҫ ауылына саба, иптәшкә оло малайын, йәғни минең абзыйымды эйәртә.

Ямаш тауын артылып, тәүҙә Нөгөш ауылына төшәләр. Унда һата алмаһалар, ары Ямашҡа китәләр. Урамға килеп кереү менән урыҫсалап «Балыҡ! Балыҡ!» тип инәле-уллы ҡысҡырып йөрөйҙәр. Осратһалар, әсәйемдең *знакум мәрйәләре* уны ҡосаҡлап алалар, ҡайҙа ултыртырға, нимә менән һыйларға белмәйҙәр.

Унда ҙур һыу юҡ, шуға балыҡ бик ҡәҙерле. Был кәсептән ҡулға кергән аҡсаға улар шул ауылдағы *лавкаға* кереп, таҡта сәй, *ҡумыҡ* шәкәр, атайыма тартырға алалар.

Төшкә хәтлем, хазина тапҡандай, осоп ҡайтып керәләр, ә атайым кәсепселәрҙе ауыҙын йырып ҡаршы ала. Инәйем үҙе сәйһеҙ тора алмай, беҙҙең өсөн шәкәр үҙе бер байрам, ә атайыма тартырына булмаһа... Атайымдың тартырына булмаһа нимә булырын бик яҡшы белгән инәйем, шулай балыҡ һатып булһа ла, уға тәмәке табып тора.

Минең атайым, был эшләпәнән тыш, өҫтөнә тағы нимәләр кейә торғайны әле? Иртәнән кискә хәтлем һыу буйынан ҡайтмай йөрөгән йәй көндәрендә ул өҫтөнә ҡояшта уңып, ең остары ҡыршылып бөткән, ҡултыҡ аҫтары әсәйемдең

ҡулы менән эре-эре сәнскеләп тегеп тә ҡуйылған, әммә тын алдыра торған *хыбы* пинжәк кейә торғайны. Уның кеҫәләре һәр ваҡыт төрлө яҡҡа ҡабарып торор ине. Барыһы ла бар ине ул кеҫәләрҙә. Сөнки ул бөтөн кәрәк нәмәһен үҙе менән йөрөтә торған кеше ине.

Пинжәген йыуырға бирергә булһа, мөйөштәренә тәмәке валсығы йыйылған кеҫәләрен аҡтарып, өҫкә күтәреп, бармаҡтары менән буйынан-буйын ҡапшап сыҡҡас ҡына, уны кер машинаһы янына ырғытыр ине. Беҙ уны ҡабаландырмайбыҙ, сөнки балыҡ тәңкәһе йәбешеп, ләм еҫе һеңеп бөткән уның әйберҙәрен, бөтә керҙәрҙе йыуып бөткәс кенә әйләндереп алабыҙ. Кеҫәләрен бушатҡас, ул йыйылған әйберҙәрен башта ентекләп тикшереп сыға әле. Бысраҡ ҡулъяулыҡтар ҙа кер өйөмөнә оса, ҡаҙаҡ, шөрөп кеүек ваҡ-төйәкте ул таҙа пинжәгенең кеҫәләренә тыҡмай, иҙәндә ҡалдыра – уларын беҙ алып ҡуябыҙ, ә төгәл урыны шунда булған әйберҙәре: сигареты, шырпыһы, асҡыстары, бысағы һәм тағы әллә нәмәләре өҫтөнә кейгән таҙа пинжәге кеҫәләренә күсә.

Көндәр буйы һыу буйынан ҡайтмай балыҡ, балыҡ тип йөрөгән сағында атайым тағын нимәләр кейә торғайны әле ул? Эшләпәһен әйттем инде, пинжәген... Киймәгән әйберҙәрен һанап китһәм, моғайын, еңелерәк булыр. Ул аяғына итек киймәй торғайны, сөнки уның ике аяғы ла төгәл тубығынан юғары киҫелгән ине.

Аяҡтарын ул, әсәйем әйтеүенсә, Себерҙә боҙло һыуҙа ағас ағыҙғанда өшөткән. Кем белә инде... Минең ҡартинәйем бындай саҡта, әҙәм балаһы күрәсәген күрмәй гүргә кермәй, тип әйтә ине. Бәлки, атайымдың да аяҡһыҙ ҡалыуы уның күрәсәге булғандыр. Был тормошта уның күрәсәктәре шулай бик еңелдән булмай.

Ауыл буйлап кәлтер-көлтөр үшән бейә егелгән арба бара. Уның бер яғында, – халыҡ йөрөткәнсә, *уполномошный,* урта йәштәрҙәге ир кеше, икенсе яғында ялан аяҡтарын һелкетеп ике бала ултыра. Ҡыҙ бала ҙур ғына, был ваҡытта уға ун биш йәш самаһы, ә малай кешегә – дүрт-биш тирәһе. Ауыл буйлап арбаға бик оҙаҡ келтерләргә тура килә, сөнки был ауыл Ыҡ йылғаһы буйлап әллә ҡайҙарға һуҙылған. Юл буйлап кем китеп барғанын аңлаған ҡатын-ҡыҙҙар дилбегә тотоп ултырған иргә ҡул һелтәйҙәр ҙә йүгереп өйҙәренә кереп китәләр, шунан алъяпҡыс итәктәренә ҡайһыһы икмәк телеме, йоморҡа һалып килеп сығалар ҙа ризыҡтарын тиҙ генә балаларҙың алдына бушаталар.

Ат ҡуҙғалып китә. Оҙатыусылар, эй, Хоҙайым, был балаларҙы үҙең ҡурсала инде, тип бышылдап, яулыҡтарына күҙ йәштәрен һөртөп тороп ҡала.

Ауылдың бер осонан икенсе осона барып еткәнсе йыйылған аҙыҡты ағай кеше ике тоҡҡа бүлеп тултыра, сөнки шул ваҡытта уларҙың юлы айырыла. Ҡыҙыҡайҙы башта ФЗО-ға уҡырға, аҙаҡ Иркутск яҡтарына торф сығарырға ебәрәләр. Ә малай кешене балалар йортона урынлаштыралар.

Тик хөкүмәт аҙығы тиҙ туйҙыра, ул яҙ етеп, көндәр йылытҡас, ялан аяҡ китә балалар йортонан. Ни эшләп ялан аяҡмы? Ә бер-ике мәртәбә аяҡ кейемендә ысҡынғас, тотоп алып ҡайталар, шунан, был бала ҡабат сығып ҡасмаһын тип, *казённая* ботинкаларҙы йәшереп ҡуялар, ә ул ялан аяҡ тая, был юлы инде эҙләп тә маташмайҙар... Ботинкалары урынында.

Йәйен етем малай ауылдарҙа ялланып мал көтә, ҡыш кешеләрҙә бала ҡарай. Ул шулай буй еткерә, егет ҡорона инә. Бөтөн етемдәрҙең нужалы юлы менән бәрелә-һуғыла йөрөй торғас, эләгә, ултыртып ҡуялар быны. Үҙе кеүек тай-тулаҡ ҡараҡтар, шайкаға ойошоп, түбәнән төшөп, магазин талап йөрөйҙәр.

Бер ашап-эсеп йылға буйында ятҡанда, ат аунаған ерҙә нимә ҡала тиҙәр әле, бына бында ла ҡайһыһылыр сылғауын онотоп ҡалдыра, шуның эҙенән эт эйәртеп килеп сыға пагонлылар.

Егеттәрҙе ҡайһыһын ҡайҙа оҙаталар, ә ул тайгала урман киҫә, шуны йылға менән ағыҙа. Аслы-туҡлы көноҙоно бил тиңәлтен һалҡын һыуҙа тороу туйҙыра, ҡаса ул *сплавтан.*

Был ваҡытта бер урыҫҡа тормошҡа сыҡҡан апаһы янына нисектер барып сыға. Һуғыштан яраланып ҡайтҡан еҙнә тейешле кеше урында ултыра һәм ҡәйнешенә дөкәмиттәр юллап бирә. Был турала атайым, әлбиттә, бер кемгә лә бер ҡасан да һөйләмәй, ул заман кешеләре, ауыҙы тулы ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмәгән, тешен ҡыҫҡан. Был турала әсәйемә атайымдың апаһы һәм уның ауылдаштары һөйләй, нимәнелер ул үҙе лә уйлап өҫтәп ебәргәндер, ундай ҙа оҫталығы бар ине, ә ҡалғанын инде мин үҙем соҡоп сығарҙым. Кемдеке – уныҡы.

Әгәр ҡулға эләкмәгән булһа, бәлки, йәше еткәс, һуғышҡа ла алып киткән булырҙар ине. Тик уны ултыртып ҡуялар, шуға һуғыш уға теймәй. Кем белә инде, бәлки, ул һуғышҡа эләккән булһа, уның яҙмышы бөтөнләй икенсе юл менән киткән булыр ине. Эйе шул, эләккән булһа, иҫән ҡалһа... Һуғышта ябай һалдаттың ғүмере бәйәһе хаҡында уйлаһаң, уның тере ҡалыуы бигерәк тә шикле.

Бәлки, боҙло һыуҙа ағас ағыҙыу ҙа сәбәп булмағандыр әле, ул заманда кем ағас киҫмәгән дә кем ағыҙмаған. Тик бер сәбәбе булғандыр инде – атайымдың оҙаҡ йылдар аяҡтары һыҙлай.

Нимә генә эшләп ҡарамай ул: ерҙә усаҡ яғып, шунда ла ятып ҡарай, һәр төрлө үләндәр бешекләп яба, бал ҡортонан да саҡтырырға маташа, улары яҡын да килмәй, ҡул бармаҡтарын ғына шештереп бөтөрә. «Коммунист» колхозы алдынғы малсыһын ял йортона ла ебәрә. Тик барыбер бер нәмәнең дә файҙаһы булмай.

Иллене үткәс, баш бармағы ҡарайып сыға. Башта ҡалала бер аяғын киҫәләр, ул әле ҡултыҡ таяҡ менән булһа ла кеше рәтендә, үҙ аяғында үҙе йөрөй.

Шунан – икенсеһен, уныһын инде районда ғына ҡырҡып ырғыталар. Ҡатынҡыҙ эшенең рәте бармы, тип тиргәшеп ултырыр ине һыҙланғанда. Операция уңышһыҙ була, хирург Сафиуллина һөйәкте бөтөнләй яланғас ҡалдыра, ул, протез яһатһа ла, кейеп йөрөй алмай. Баҫып та булмай, тип ҡул һелтәп ҡуя. Шунда үҙенә ерҙән шыуышып ултырып йөрөргә кейеҙҙән оя тегеп, ергә терәп, ҡулы менән кәүҙәһен күтәреп йөрөргә ағастан тотҡос юнып ала.

Бер заман уға, инвалидтар ултырып йөрөй торған машина бирәбеҙ, тип райондан ҡағыҙ ебәрәләр, шулай инде, хәйерсегә ел ҡаршы, машинаһын бирәләр, ә аҡсаһын ҡайҙан табырға? Мисәтле ҡағыҙҙарҙы аҡтарып, Хәйҙәр исемле бер ауылдашы менән ултыралар икәүләп.

Шулай, элек аралашып йөрөгән ауыл кешеләре, уның хәлен белеп, һирәгерәк булһа ла, килеп сыға ине.

Был юлы Хәйҙәр колхоз йыйылышына тип килгән дә, юлы урауыраҡ булһа ла, беҙгә һуғылған. Әсәйем, йомартланып китеп, ҡайҙандыр килтереп сығарған шешәнең дә яртыһы бушаны, баштары эшләп китте ирҙәрҙең.

Хәйҙәр, Ташкент яҡтарын *хутҡа* ебәреп ҡайтҡан, донъя күргән кеше, әсәйемдән ҡағыҙ-ҡәләм һорап ала ла, былар икәүләшеп колхоз идараһына ғариза яҙа.

Шунан китә Хәйҙәр йыйылышҡа, унда, атайым менән икәүләшеп яҙған ғаризаны һелкә-һелкә халыҡ алдына сығып былай ти:

– Ғүмере буйы ҡара таңдан, ҡара төнгә хәтлем һыҙырылып эшләне, миҙалдары, Почет грамоталары бер һандыҡ, бар байлығы шул. Бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға ул ҡыҙыл флаглы Лилин бабай төшөрөлгән ҡағыҙҙар өсөн генә йөрөнөмө ни ул, ә-ә-ә? Аҙраҡ бына шундай саҡта ярҙам да итмәгәс. Таҙа сағында кәрәк ине, хәҙер ултыра бына ике аяҡһыҙ. Бер кемгә лә кәрәге юҡ. Ул таҙалығын ҡайҙа юғалтҡан? Калхузда. Ә калхуз? Шундай мохтаж кешеләргә берәй ярҙам күрһәтәме? Юҡ. Бына машинаға ҡағыҙ килгән, өстән бер өлөшөн хөкүмәт үҙе

түләй, икенсеһенә йыйған аҡсалары ла бар, ә ҡалғанына ике пенсионер ҡайҙан аҡса алһын, ике бала уҡыталар. Бер айҙан түләп килеп алмаһағыҙ, икенсе кешегә бирәбеҙ, тип шылтыратҡандар.

Быңдай ҙа сығыштан һуң, әлбиттә, идара элекке алдынғы колхозсыһына биш йөҙ һум аҡса бүлә.

Һары төҫтәге был машинаны алырға мәрхүм уҡытыусы Марс абзыйҙың оло малайы менән китәләр. Егет аҙаҡ, көлөп-көлөп, был хаҡта ошолай һөйләне:

– Карпашауҙа туҡтаныҡ бер магазинға, асыҡтырҙы, малай, ашарға берәй нәмә алайым тип керһә-м – кеше-е-е, аяҡ төртөр урын юҡ. Нимә һаталар, тим, өндәшмәйҙәр... Ике сәкүшкәне, кешеләрҙең башы өҫтөнән күтәреп, тотоп алып сығып килгән бер мужикты күргәс, аңланым, малай. Быңдай байлыҡты инде ҡасандан күргән юҡ. Киттем кире машинаға. Абзый, шундай-шундай хәл, тим, *йә пан, йә пропал*. Кейҙә абызый сиҙүшкәләрен, таяҡтарын тотто ҡулына, киттек икәү. Ишекте киң итеп асып ебәрҙем, керҙе эскә абзый.Ҡысҡырам халыҡҡа: «Инвалидҡа юл бирегеҙ!»

Кассаға тар ғына бер кеше үтерлек юл асылды, киттек икәү. Аҡса бар, һатыусы һорай, күпме кәрәк, ти, абзый күҙен дә йоммай: «Йа-щ-щ-ик» –ти, малай. Нисауа, ҡарайым, һатыусы артындағы йәш малай беҙҙең алға бер тартманы ултыртып ҡуймаһынмы! Түләне абызый аҡсаһын, китте алдан, мин йәшникте күтәреп – уның артынан. Күңелдәр күтәрелеп китте, малай.

Киләбеҙ, киләбеҙ. Инде Малаязды ла үттек, бер заман абзыйым һуҙып йырлап ебәрмәһенме:

*Йырлағыҙ, ҡыҙҙар, йырлағыҙ,*
*Бар бит һеҙҙең һырғағыҙ...*

Тартма йәнәшендә бит инде, ултыра торғас, әкертен генә һурып килә икән был...

Әсәйем шуға күрә уға аяҡ кейеме һатып алып мәшәҡәтләнмәй ине, ә булған аяҡ кейемдәрен... Уның кирза итегенән тыш аяҡ кейеме лә юҡ ине, буғай. Ә, юҡ, ҡулында ғына тотоп торорлоҡ, баҫҡан һайын шығырҙап торған, һабантуйҙарға ғына кейеп сыҡҡан, быңа тигән хром итеге бар ине бит. Уны атайым, ит һатып, Әртәнән алып ҡайтҡайны. Ярай, беҙҙең ауыл, Ер шарының иң аҡыллы кешеләре йәшәгән беҙҙең ауыл, Ер шарының иң хәйерсе ауылы булһа ла, башы эшләп, хәлле генә урыҫ ауылдары, ҡалалары араһына килеп ултырған әле. (Әллә, киреһенсә, урыҫ ауылдары, ҡалалары беҙҙе уратып алғанмы? Уларҙың уратып алырға хәлдәренән килгәс, беҙҙең ата-бабаларҙың ураттырмаҫҡа хәлдәренән килмәгәс, бер һүҙ ҙә юҡ.) Колхоз техника бирһә, алдынғы колхозсылар, үҙҙәренең өҫтөнә яҙҙырып. Урал, Пермь кеүек ҡалаларға барып әйләнәләр.

Хром итеген атайым Әртәнән алып ҡайтҡайны, буғай.

Юҡ, юҡ, Әртәнән түгел. Уралға тимер алырға барғанда алып ҡайтты, шикелле. Һин *салага* ғына инең ул саҡта, ҡайҙан беләһең инде ул итекте ҡайҙан алып ҡайтҡанын, тиҙәр инде тағын оло апа-ағалар. Еңешергә оҫта улар, ә быңа мин шуларҙы бөгөнгөләй хәтерләйем.

Төнөн ҡашъяҡтан ишетелгән тауышҡа уянып китәм дә аҡыртын ғына ул яҡҡа атлап сығам. Өҫтәл артында аңҡы-тиңке булып атайым ултыра, төнөн ҡайҙандыр ҡайтҡан. Быңа бит, хәтерләмәйем ҡайҙан ҡайтҡанын: Уралданмы, Әртәнәнме?!

Хәйер, барыбер түгелме, ҡайҙандыр ҡайтҡан инде... Ул он тарттырырға киткән ине. Беҙ уны көнө буйы түҙемһеҙләнеп көттөк.

*– Быңа атайым ҡайта, атайым ҡайта, беҙгә берәй нәмә алып ҡайта...* Иң

мөһиме беҙҙең өсөн бына шул инде: *нимә алып ҡайта.* Көтә-көтә көтөк булып, йоҡлап киттек.

Бына бит, мин торҙом, ә һеңлем йоҡлай. Бүләктең шәбе кемгә тейә инде? Тәү ҡаршы алған кешегә.

Мине күргәс, атайымдың ауыҙы йырылып китә:

– *Бына минең бәпесем... Уяндыңмы?*

– *Уянмай ни, таңъа хәтлем ҡаңъылдап ултыраң да, бөтә балаларҙы уятаң инде хәҙер.* Был арыған тауыш инде әсәйемдеке.

Шешәнең әле яртыһы ғына бөткән. Тәҙрә артында саҡ ҡына ағарып тора – күрәһең, таң да атып килә. Атайым мине ҡосаҡлап ала. Ҡырылмаған бите менән минең яңаҡты сыя, мин ситкә тартылам.

– *Колбаса, колбаса киҫ әле балаъа...*

Колбасаның еҫе баланың танауын ярып керә. Әсәйем ҡалын итеп уны тураҡлай, түңәрәк эсенә кемдер тығып-тығып ҡуйғандай, ап-аҡ май ауыҙҙа ирей. Мин тәүге тапҡыр колбасаны ауыҙ тултырып ашайым.

– *Әпәйләп аша, әпәйләп, эсең китер...*

Әпәй ашаған бар ҙа инде, мин икмәк телемен миңә һонған ҡулды ситкә этәм. Беҙҙең келәттә ит бото-бото менән аҫылынып тора, әммә колбаса күргәнебеҙ юҡ.

– *Ҡая, ҡая, алып бир әле, мин бына нәмә алып ҡайттым.*

Әсәйем ҡайҙаңдыр юғарынан алып, атайыма бәләкәй генә аҡһыл һоро төҫтәге, йомшаҡ ҡына күндән тегелгән ике ридикюль алып бирә. Атайым миңә бәләкәй генә ҡул сумкаһының йоп-йомро, көҙгө кеүек ялтырап торған ике түңәрәк тимерен шаҡ-шоҡ итеп, башта уны бер асып, бер ябып күрһәтә лә шунан ғына ҡулыма тоттора. Мин уның май кеүек яғылған сатин эсенә ҡулымды тығам. Бына бәхет ҡайҙа ул: атайым миңә ридикюль алып ҡайтҡан! Былдай әйбер беҙҙең урам ҡыҙҙарының төшөнә лә кермәгәндер әле. Урам тағы, ауылда берәүҙер.

– *Бына икегеҙгә лә алдым...*

– *Әллә күпме торъандыр әле...*

Әсәйемдең мыңғырлауын ишеткән кеше юҡ.

– *Быныһы – һиңә, быныһы – һеңлеңә...*

– *Әйе, атыу талашырҙар...* – тип, әсәйем һүҙ ҡыҫтыра.

– *Талашмайҙар, һандуъас бипейҙәре бит улар...*

Һандуғас бипейҙәренең холҡон бик тә яҡшы белгән инәйем *«талашмайҙар»ъа* бик ышанып китмәй, бер ридикюлде кире йәшереп ҡуя.

Мин инде колбаса ла ашап туйҙым, бүләгемде лә алдым, китһәм дә була.

– *Әтей, әйҙә ят...*

Быныһы, ишетелмәй генә яңғыраған бойороҡҡа буйһоноп, минең исемдән атайыма әсәйем ялына.

– *Шулаймы, ҡыҙым.*

Өҫтәлдә ултырған яртылаш бушаған шешәгә томанлы ғына итеп ҡарап ҡуйғас, ауыр һулап, ул оло усына минең ҡулды ала ла ауырлыҡ менән тора.

Аҡса беҙҙең ғаиләлә һирәк ҡунаҡ икәнен әйткәйнем инде, ҡышҡа кергәндә берәй ергә барып, ололар ит һатып ҡайтһалар, йылына бер байып китәләр. Унда ла был аҡсаға тоғо менән ҡумыҡ шәкәр, ҡалай кеүек хужалыҡта кәрәкле берәй ҙур әйбер алып ҡайтырға тырышалар, сөнки беҙҙең магазинда рәт-рәт булып теҙеп өйөлгән ялтыраҡ башлы араҡынан башҡа бер нәмә лә юҡ тиһәм, ялған булыр, тоҙ, шырпы, грузин таҡта сәйе бар.

Ҡулына аҡса килеп эләккәндә, атайым, иң тәүҙә беҙҙе уйлап, бүләк алып

ҡайтҡанын әйт әле һин. Хром итеген шул ваҡытта алып ҡайтҡандырмы, юҡмы, бына иҫтән сыҡҡан. Юҡ. Беҙгә ридикюлде ул он тарттырырға барған ерҙән алып ҡайтҡайны, ә итекте Пермгә ит һатырға барғанда алған булғандыр. Эй, хәҙер уныһы барыбер инде, ҡайҙа ғына ята икән ул – ҡулыңда ғына тотоп торорлоҡ ҡәҙерле әйбер.

Хром итеге, ялҡылдап торған, әллә ни итеп кенә айына бер кейеп сыҡҡан хром итеге бар ине бит атайымдың.

Аптырап һүҙлек аҡтарам, ни эшләп ул итек хром итеге тип аталды икән. Әһә. Хромдың мәғәнәләре бик күп икән. Бына мин эҙләгәне. *Хром тоҙҙары менән дубланып эшләнгән йомшаҡ йоҡа күн. Хром күн.*

Ауыл ерендә хром итек кейеп ҡайҙа ғына йөрөгән тиһең.

Э-ээ... һин улай тимә әле. Атайым уны кейеп сыҡмағанда ҡайҙа ғына ултыра торған ине әле ул. Шифоньер янында ғына торор ине мөйөштә, урыны шунда ине. Һин уға тейеп ҡара, иҙән йыуғанда ситкә алып ҡуябыҙ, аҙаҡ тағын кире урынына ултыртабыҙ.

Ни эшләп keймәй, ти, кино күрһәтһәләр, клубҡа барғанда, атайым мотлаҡ шул итеген кейеп ебәрер ине. Колхозсыларҙың йыйылыштарына йөрөгәне булманы, ғөмүмән, ҡыҙыл әләмле сараларҙы яратманы, депутаттар менән осрашыу, һайлау кеүек нәмәләргә, аяғы булғанда ла әле, ике аяғының береһен дә баҫманы, ә аяҡһыҙ ҡалғас, һайлау ваҡытында, санаға тартманы ултыртып, силсәүиттекеләр килер ине өйгә. Уҡырға-яҙырға белмәне, нимә әйтһәләр, шуны арлы-бирле һыҙғылап төшөрөр ине ҡағыҙҙарҙы ҡумтаға, ә бына концерттарға, киноға барғыланы.

Әсәйем, етмәһә, беҙҙе тағып ебәрә.

*– Барың, барың, ҡалмаң атайыңдан...*

Ҡайҙа тороп ҡалыу ул, ҡайтҡанда уның елкәһендә йоҡлап китәһең, йоҡо аралаш ҡына ишетелеп ҡала. «Шығыр-шығыр, шығыр-шығыр».

Зарлана-зарлана ҡайта итек, һирәк кейәһең, йәшерәк сағындағы кеүек, көҙгө кеүек ялтыратҡансы таҙартмайһың, ышҡып, сепрәк менән йылҡылдатып ҡуя торғайның, тиме.

Әллә атайым зарланамы...

Яңғыҙ ҡатын Әсмәкәй, алғы рәттән, әйләнгән һайын башын бороп ултырҙы инде, шыуып төшөп мәшәҡәтләгән яулығын рәтләгән һайын артына ҡараны, би-и-к ҡараны...

«Ҡойроҡтарыңды ниңә эйәртеп йөрөйһөң,үҙең генә килһәң булмаймы? – тигәндер. – Юл ыңғайында кереп сәй эсеп сығыр инең... Эх, һин», – тигәндер.

Кем булһа ла зарланғандыр инде шунда: атайыммы, итекме?

Шулай әсәйемә кешеләргә таратып мәшәҡәтләнергә уның аяҡ кейемдәре лә булманы, буғай, ә хром итекте йәлләгәндер, әллә ни итеп ҡәҙерләп, ит һатып ҡына алған итекте әллә ҡайҙан күтәреп алып ҡайт та кешегә бушлай биреп сығар. Бирмәгәндер бер кемгә лә, бәлки, абзыйыма ҡалдырғандыр. Бына-бына, йәнеләй күреп, улына биреп ҡайтарғандыр, ә ул, атайымдың төҫө булыр тип, күтәреп алып ҡайтҡандыр ҙа солан мөйөшөнә ултыртып ҡуйғандыр. Шунан еңгә, иҙән буятҡанда, кейелмәгән әйберҙәр менән өй башына мендергәндер, яталыр ул шунда туҙанға батып. Шунда яталыр ул уфтанып.

Эх, бар ине бит шығыр-шығыр һабантуйҙарҙа ғына йөрөгән замандар, һеҙ ҡайҙарҙа ҡалдығыҙ, тип.

Үлән баҫҡан быуа уртаһында кәмәлә бер балыҡсы ултыра.

Йыраҡтан ҡарап торһаң, ул һис тә ҡыбырҙамаған кеүек. Ә ысынында иһә һис тә улай түгел. Ҡарт балыҡ тота.

Арты менән шыуышып яр буйына килеп еткәс, ул ултырып йөрөгән сиҙүшкәләрен сисә лә кәмәгә күсә. Шымарып бөткән таяҡ менән этеп, баҫманан һалынған юлы менән төпкә йөҙөп китә.

Үҙәккә хәтлем барғас, ул йылым ырғыта, һыуға ташлар алдынан уның ике яғына ла, тәрәнлеккә тура килтереп, төпкә ныҡ итеп батырып ҡуйырға таяҡ бәйләй. Таяҡты тыҡҡас, кәмәне ҡуҙғатып ебәрә лә ул ыңғайға йылымды аҡрын ғына һыуға төшөрә бара, бөткәс, икенсе осто ла шулай ергә нығытып ҡуя.

Балыҡ килеп бәрелеү менән ҡалҡыуыстар һыу өҫтөндә уйнай башлай. Балыҡсы ағым булмаған урынға күсеп уларҙың һикерешкәнен күҙәтеп ултыра ла ултыра. Тәмәкеһен тартып бөткәс, икенсеһен ҡабыҙа. Шунан ул, ауыр һулап, тәмәке төпсөгөн һыуға сиртеп ебәрә, уныһы, ағымға эләгеп, бер аҙ бара ла, өйөрмәгә тап булып, уралып-уралып бер-ике әйләнгәс, һыу төбөнә инеп күҙҙән юғала.

Хужа председатель атайымды ниндәй генә эшкә ебәрмәй? Ҡыш булһа – урманға ҡыуа, яҙлы-көҙлө – ашлыҡ ташырға ҡуша, ә ҡыш – тирмәнгә. Атайым башын баҫып эшләй ҙә эшләй, ҡайҙа барһын, өй тулы ваҡ ҡына бала. Шулай, килмешәк кейәүен бик һанламай Хужа, хәйер, атайым, һанлаймы уны председатель, һанламаймы – бик иҫе лә китеп бармағандыр, сөнки ул, әйтеүемсә, власть алдында бик башын эйеп барған кеше түгел ине.

Ә Хужанан ҡалған эшләпәне маңлайына төшөрөп йылға уртаһында кәмәлә ултырғанда инде, элек тә буй бирмәгән кеше, был турала ыжлап та бирмәгәндер, сөнки был ваҡытта инде уларҙың барыһы ла әллә ҡасан аръяҡҡа күсеп бөткәйнеләр.

***

Шулай, ваҡытты өскә генә бүлгән булалар: үткән, хәҙерге, киләсәк заман. Бер ҙә дөрөҫ түгел, минеңсә. Әйттем бит инде: улар барыһы ла, тирмәнһеҙ ҡалған күперҙе аша сығып, аръяҡҡа күсеп бөттөләр. Хужа, минең ҡартатайым менән бер туған бабай, һуңғы йылдарҙа бик сәйер сир менән йонсоно: ул муйынын ҡыбырҙата алмай, йәнәшендәге кеше менән һөйләшкәндә лә, саҡ ҡына башын борор урынға, бөтөн кәүҙәһе менән әйләнер ине, сөнки уның елкәһен сәйер шеш баҫып алды. Уларҙы Хужа бабайымдың түҙемле һәм сибәр ҡатыны әллә ниндәй һаҫыҡ дарыу менән көндә һылай ине, ә улар, оялағандай, берәһе бөтһә, артынан икенсеһе сығып, уны тамам йонсотоп, теге донъяға алып китте.

Уның ҡәберенә, исемен яҙып, йондоҙло таш ҡуйҙылар. Йондоҙһоҙ булмай, сөнки ул бит *партийный* кеше ине. Ундай ҡәбер ауылда берәү, башҡаларҙы ағас бура менән генә кәртәләйҙәр, күпмелер ваҡыт үткәс, ул буралар серей, кешеләр, шулай булырға тейеш, ҡәбер яңыртырға ярамай, насар ғөрөф-ғәҙәт, тиҙәр. Теүәл бер йылдан һуң Хужа бабайҙың ҡәберенә ҡуйылған ташы ҡыйшайҙы. Бабайҙың оло малайы, абзыйымды саҡырып, улар икәүләшеп уны тигеҙләнеләр.

Бында бер төрлө лә иҫ китерлек нәмә юҡ, була торған хәл.

Ә бына шуны миңә кем аңлатыр, ни эшләп әле мең дә туғыҙ йөҙ ҙә нисәнсе йылда үлгән атайым, бына ошо минутта, ләм баҫҡан быуа уртаһында балыҡ тотоп ултыра. Башында – председателдән ҡалған эшләпә, ауыҙында – тәмәке. Элек ярылып ятҡан кәмә эҙе генә бөтөнләй күренмәй.

Ә үткән көҙ мин уны бөтөнләй боҙ өҫтөнән йәйәү атлап ҡайтып барғанын күрҙем. Эйе, эйе, атлап. Аяҡтарын киҫтеләр, тинем бит инде, һуңғы йылдарҙа ул ике аяҡһыҙ ултырҙы, ултырманы инде, хәленән килгәнсә йөрөп ятты. Кешегә һөйләһәң, кеше ышанмаҫ: тирмән геүелдәп эшләп ултыра (ул тирмәнде инде нисә йыл элек бөтөрҙөләр), сыр-сыу килеп бала-саға боҙҙа йөрөй, ҡайһыһы –

конькиҙа, ҡайһыһы былай ғына йүгерешә, ә минең атайым, кирза итектәре менән һаҡ ҡына баҫып, төшкө аш ашарға турынан ғына өйгә ҡайтып бара.

Беҙҙең өй инде нисә йыл буш тора, йәй көнө генә бал ҡорто күсе шикелле геүләп китә, ә ҡыш көнө бөтә йортто көрт баҫа.

Төшкө аш бешереп уны көтөп торорға бер йән эйәһе лә юҡ,. Ә ул ян-ғына ҡарамай ҙа, һыпырта ғына.

Бына хәҙер ҙә, иҫе лә китмәй, балыҡ тотоп ултыра, башында – һаман шул Хужа бабайымдан ҡалған аҡ эшләпә, ауыҙында – тәмәке, төтөнө нәҙек кенә булып өҫкә күтәрелә. Аптыраш.

Бәлки, был донъяла нимәлер үҙгәргәндер, элекке заман кире әйләнеп ҡайтты микән, улай тиһәң, хәҙерге заман ҡайҙа? Бына, әйтәм бит, ваҡытты өскә генә бүлеп бик яңылыш эшләгәндәр. Үткән заман, хәҙерге заман... Урталыҡта тағын бер заман булырға тейеш. Мотлаҡ булырға тейеш.

***

Ә Ямаш ауылының фитилле лампалар менән генә яҡтыртылған бала табыу бүлмәһендә, был донъяның әҙәм балалары өсөн бик тә яраҡһыҙ, бик тә һалҡын икәнен аңлап, тәүге тапҡыр ҡысҡырып ебәргән бала ҡайҙа ҡалды? Ул сабый аҙашманымы икән был буталсыҡ заманала?

Аҙашмаҫҡа тейеш, сөнки һалҡын ҡайсы ҡыртлатып киҫеп төшөрһә лә, иманым камил, уны бәйләгән ептәр өҙөлмәгәндер.

Ул күрер күҙҙән йәшерен ептәр, күҙ, ҡаш, ҡул, аяҡ кеүек, тере кешенең бер ағзаһы. Ул – әҙәм балаһының кендеге. Күҙ күрә, ҡолаҡ ишетә, аяҡ йөрөтә, ҡул тота, ә кендек бәйләй. Ул ағза ғүмер иткән нәҫел менән тоташтыра һәм ул, кеше әле үҙ аяғы менән ерҙә йөрөгәнсе, уны етәкләп йөрөтә. Эйе, эйе, етәкләп йөрөтә.

Ҡайһы бер хәтерһеҙ әҙәмдәрен етәкләмәй, ташлап ҡуя. Бынлыһы инде – үкенесле хәл, бик үкенесле. Кендекһеҙ кеше был донъяла – ҡарурманда аҙашып йөрөгән берәҙәк. Меҫкен кеше, бәхетһеҙ кеше... Кендегең булмағас, аяғың да юҡ, ҡулың да, күҙең дә. Булһа ла, улар аяҡ аҫтындағын, күҙ алдындағын ғына күрә, ишетә, ә әҙәм балаһына тормош итер өсөн был бик аҙ, бик аҙ... Тамыры юҡ бындай кешенең, тамыры...

Беҙ бәхетле, шундай ҙа бәхетле кеше, сөнки бик тәрәнгә киткән тамырҙарыбыҙ бар. Улар беҙҙе өмөтһөҙлөккә бирелмәҫкә өндәй.

Беҙҙе әҙәм иткән кешеләр барыһы ла бына улар, береһе лә ҡара гүрҙә түгел, яҡты донъяла. Һәр береһенең үҙ урыны бар: ҡайһыһы түрҙә, ҡайһыһы ишек төбөндә. Ни эшләтәһең, беҙ түгел, улар үҙҙәре шулай һәр береһе, донъя тип аталған ҙур сыбар сатырҙа үҙҙәренә тейешле өлөштө бүлешеп алды ла шунда көн итәләр.

Ә һеҙ әйтәһегеҙ, үткән заман, хәҙерге заман, киләсәк тип. Ниндәй тилеһе шулай еңел генә уйлап, ваҡытты бүлеп сыҡҡан. Юҡ ундай нәмә – ваҡытты өс өлөшкә генә бүлеү. Бына улар һәр береһе күҙҙәрен терәп миңә ҡарап тора.

Иҫән генә булығыҙ. Йәшәгеҙ. Беҙҙең уйҙарыбыҙҙа ғына булһа ла йөрөгөҙ, һөйләшегеҙ, йылмайығыҙ, көлөгөҙ, сөнки гүр ғазаптары бик ауырҙыр. Хоҙай Тәғәлә һәр берегеҙгә түҙем бирһен. Ә иң беренсе ул түҙемлелекте беҙгә бирегеҙ, беҙ инде барығыҙға ла уны тигеҙ итеп бүлербеҙ.

# *Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил БИКБАЕВҠА – 75 йәш*

## Тәрән тамырлы ижад

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаев сығышы менән Ырымбур далалары, Туҡ-Соран буйҙарынан. Бик боронғо дәүерҙә – 922 йылда ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙлан нәҡ ошо сәхрәләрҙә көн күргән сая рухлы башҡорттар менән осрашып, халҡыбыҙҙың тормошон үҙенең юлъяҙмаларында теркәп ҡалдырған. Был бәрәкәтле тараф әҙәбиәтебеҙгә Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, Сәғит Агиш кеүек күренекле әҙиптәр, Мөхәмәтша Буранғолов ише сәсәндәр, дәүләт эшмәкәрҙәре, сәнғәтебеҙгә йырсылар, артистар, рәссамдар биргән данлы яҡ. Хатта шағир һәм ғалим Ғабдулла Амантай Рауил Бикбаевтың ауылдашы һәм яҡын туған кешеһе. Тарихта серле тап килеүҙәр һәм ғәжәп бәйләнештәр бар. Тағы ла бер иҫкә төшөрәйек: Аҡмулланың үлтерелгән йылы Бабич тыуған йыл ине. Бабич үлтерелгән йыл – Мостай Кәримдең тыуған йылы. Башҡорттоң күпме аҫыл шәхестәре менән бергә 1938 йылдың 10 июлендә Ғабдулла Амантайҙы ла аталар. 1938 йылдың 12 декабрендә Рауил Бикбаев тыуа. Халыҡ әйткәне хаҡ ул, туған туғанға тартылыр, яҙмыш үҙенекен итер: әүәлге Ғабдулла Амантай Өфөлә директор булып эшләгән хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Рауил Бикбаев оҙаҡ йылдар ғилми хеҙмәткәр булып эшләр, шиғыр өлкәһендә һәм фәндә лә үҙен талантлы шәхес итеп танытыр.

Тормош юлы ла Рауил Бикбаевтың заманыбыҙса аныҡ һәм үтә баҫҡыслы: Ырымбур өлкәһенең Соран йылғаһы буйындағы элекке Ҡыпсаҡ волосы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуып үҫкән, һуңыраҡ күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына күсеп, шунда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған. Аҙаҡ Аҡбулаҡ педучилищеһында белем алғас, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филологияһы факультетында уҡый. Артабан Өфө Фәндәр академияһында аспирантураны тамамлап, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә ирешә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 30 йыл (1965 – 1995) тирәһе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1995 – 2011 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың башлығы. Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, дүрт орден, күп миҙалдар кавалеры.

Шағирҙың шиғырҙары һәм «Вокзал» исемле беренсе поэмаһы ингән, 1964 йылда донъя күргән тәүге йыйынтығы «Дала офоҡтары» тип атала. Унда тыуып үҫкән яҡтың яландар иркенлеген, һауаларының йәмен-тәмен тойорға мөмкин. Аралаш әскелтем әрем еҫтәре лә, дала ҡырыҫлығы ла ҡағылып китә. Йәш шағир, тәбиғи рәүештә, үҙе һәм тиҫтерҙәре хаҡында, ҡарт даланы, элекке сиҙәм ерҙәрҙе хәҙер иген баҫыуҙарына әйләндереүселәр хаҡында уйлана. Соранда һыуҙар ҡойонған, туғай-яландарын ҡыҙырған,бесән сабышҡан, мал баҡҡан иләҫ-миләҫ йәшлеген, тәүге мөхәббәт хистәрен иҫенә төшөрә. Уй-хистәре, әйтерһең, тай-тулаҡтай тулап, ялан-далалар буйлап саба.

Әммә шағир күңеле дала киңлектәренә генә һыймай, уға әле Уралдан да бейегерәк тауҙарҙы ашаһы бар, Ағиҙелдәй даръяларҙы кисәһе бар, йәш йөрәге ялҡынын яңы төҙөлөштәр һулышына ҡушаһы, Йыһан бейеклектәренә сәләмдәр ебәрәһе бар. Ҡабатлай-ҡабатлай бар тибеҙ, сөнки алда ул тарафтарҙы күрер Башҡортостандың юламан шәхесе булып, Ер шарының күп мөйөштәрен гиҙеп үтер, шул хаҡта сәйәхәтнамәләр китабы яҙыр.

Йәш шағир шиғри биҙәктәрен һайлағанда туғай, дала тәбиғәтенең берсә ҡуйы, берсә һаран булыуҙары менән хушһынып етмәгәндәй, төҫ-образдарҙы, гүйә, йыһандан да үрелеп алғылай:

*Төн тағы ла зәңгәр буяуына*
*Манып ҡуйҙы ялан, урманды.*
*Меңәрләгән йомаҡ йондоҙ итеп,*
*Баш өҫтөнә элде йыһанды.*

Ана ҡалай баштан уҡ йыһан ҡоласы, ғаләмдең ҡуйы буяуы бар Рауил Бикбаев поэтикаһында.

«Ҡош юлы» (1967) исемле икенсе китабынан күренеүенсә, Рауил Бикбаев поэзияһы дала офоҡтары аша космос бейеклектәренә күтәрелә. Ҡош юлы күк есеме киңлектәренә сыға. Исеменә күрә есеме – образдар йыһан ҡоласында, биҙәктәр ғаләмде иңләй. «Кисәге шуҡ буҙ малайҙар, бөгөн уттай егет булып, Ваҡыт атын дағалайҙар, яғалайҙар йыһанын да». Етегән йондоҙ шағирға ете ырыуының күккә тишеп һалған тамғаһы төҫлө. Хатта ишек яңағында малайҙар буйҙарын үлсәп һалған билдәләр ябай тамғалар түгел: «йылдарыбыҙ күккә илтер баҫҡыс булып теҙелешкән». Әммә нисек кенә булмаһын, шағирҙың бар хәстәре ерҙә: ул – ер улы, туған халҡы балаһы.

Бына ошо төп һыҙат Рауил Бикбаев ижадында шағир һәм заман, шәхес һәм халыҡ мөнәсәбәтен тығыҙ үрелештә үҙәкләштереп ебәрә.

«Лирика – шағирҙың күңел биографияһы», ти Герцен. Шул күңел биографияһын Рауил Бикбаев «Автобиография» циклында халыҡтың күңел биографияһы итеп үҫтермәксе. «– Тыуған йылың ҡайһы? – Халҡым тыуған йыл» тигән эпиграф шуны раҫлап тора.

«Ғүмер уртаһы» китабына ингән шиғырҙары авторҙың ижад ғүмере миҙгелен дә аңлата. Быны программа характерындағы инеш шиғыр үҙе үк әйтеп тора. Шағир хәҙер «ғүмеренең аҫыл уртаһында был тормоштоң серле асылын» аңларлыҡ олпат шәхес инде.

Рауил Бикбаев – заман һулышына үтә һиҙгер шағир. Ул Ер шарының һәр тарафынан иҫкән төрлө елдәрҙе, тетрәнеүҙәрҙе йәһәт тоя, шатлыҡлы һәм хәүефле өн-тауыштарҙы ҡолағы сос ишетә, күҙҙәре күп нәмәләрҙе зирәк күрә. Уның шундай хәлдәргә бағлы үткер публицистик шиғырҙары байтаҡ. «Заман! Бирсе пульсыңды. Ниндәй ярһып һуға тамырың» тигәйне ул тәүге осорҙағы бер шиғырында. Заманының ана шундай пульсы һәм тын алышы, төрлө ел-дауылдары башҡорт поэзияһының, шулай уҡ Бикбаев шиғриәте ҡылдарын төрлөсә зыңғырҙатып ебәрә. «Асылын эҙләп тормоштоң» шиғырында әйткәнсә, шағир йөрәктәр тибешен, йәшкә мансылған шатлыҡты, хаҡ менән нахаҡ алышын аңларға, ерҙә йәшәү мәғәнәһен төшөнөргә, төшөндөрөргә теләй. Был ынтылыштар Рауил Бикбаев шиғриәтен тәрән мәғәнәле, фәлсәфәүи йөкмәткеле итә. Уға шулай уҡ глобаль темалар, масштаблы образдар, ишле метафоризм, символдар менән иркен эш итеү, киң ассоциатив фекерләү, экспрессив һүрәтләү сараларын мул ҡулланыу,

ярым ирекле шиғыр формаларына ла мөрәжәғәт итеү, публицистик алымдарҙы әүҙем файҙаланыу хас.

Рауил Бикбаев төрлө күләмдәге ундан артыҡ поэма ижад итте. Шуныһы үҙенсәлекле, уның поэмаларын тышҡы сюжетҡа, хәл-ваҡиғалар теҙмәһенә ҡарағанда эске сюжет, уй-фекерҙәр динамикаһы билдәләй, поэтик структураһына – лиро-эпик формалар ҡоролошо хас. Былар иһә авторға сағыштырмаса кескәй күләмдә ҙур проблемаларҙы, оло социаль-тарихи хәл-ваҡиғаларҙы, философик ҡараштарҙы йәтеш поэтик берләштереүгә булышлыҡ итә. Уларҙың барыһы ла тиерлек, лирикаһындағы шикелле, шағир һәм заман, шәхес һәм халыҡ проблематикаһына килеп тоташа.

Был йәһәттән шағирҙың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы ошо ижад принцибының художество юғары кимәлен һәм поэтик пафосын билдәләгән бер аҫыл тажы ул. Был поэманың замансa шунса көслө яңғыраған пафосына бәрәбәр ғәжәйеп бай, төрлө алымлы, ҡуйы тасуири саралы, лиро-публицистик стилле поэтикаһы үҙе генә ни тора! Поэтик набат тауышлы ул.

Илленсе – алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә. Быға миҫал итеп бик күп шиғырҙарҙы, «Халҡыма хат», «Баҙар балтаһы», «Система», «Барокамера», «Хазина» һ.б. үткер-үткер поэмаларҙы, шағирҙың тарихи йыйындарҙа йәки үтә көсөргәнешле ваҡиғалар уртаһында яңғыраған публицистик сығыштарын килтерергә мөмкин. Бына ошо тормошсан йөкмәткеһе, уй-фекерҙәрҙең гражданлыҡ ҡыйыулығы һәм яуаплылығы, һүҙҙең тәьҫир көсө Рауил Бикбаевҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исемдә биреү өсөн ныҡлы нигеҙ булды.

Һәләте менән Рауил Бикбаев тапҡыр фекерле, уйсан шағир. Уны Мифтахетдин Аҡмулла, Шәйехзада Бабичтарҙан килгән көслө поэтик традицияларҙы, беҙҙең заманда уларҙы артабан үҫтереп һәм күрелмәгәнсә байытып ебәргән Мостай Кәрим, Рәми Ғариповтарҙың шиғри мәктәптәрен лайыҡлы дауам иткән халыҡ шағирыбыҙҙың күренеклеһе итеп күрәм.

Башҡортостан Фәндәр академияһының член-корреспонденты, атҡаҙанған фән эшмәкәре Рауил Бикбаевтың ғилми эшмәкәрлеге үҙе махсус һүҙҙе, ентекле байҡауҙы талап итә. Бөгөнгө көндә Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов әҫәрҙәре яңы Башҡортостан өсөн тынғыһыҙ көрәш юлында азаматтарса хеҙмәт итә икән, уларҙың ижадтарының халҡыбыҙҙың рухи тормошона ошо дәүмәлдә килеп етеүендә Рауил Бикбаевтың фәнни эшмәкәрлеге ҙур хеҙмәт башҡарҙы. Башҡортса һәм русса фундаменталь шиғри антологияларҙы уҡыусыларға еткереүгә лә ул көс һалды. Ҡәләмдәштәре хаҡында әйтелгән һүҙҙәр, төрлө жанрҙар буйынса ғилми тикшеренеүҙәр, яҙыусыларҙың съездарындағы бай йөкмәткеле докладтар, публицистик сығыштар, шиғри тәржемәләр, һуңғы йылдарҙа үҙенсәлекле күренешкә әйләнгән шиғри хәҙистәр үҙҙәре махсус томдарҙы тәшкил итерлек. Рауил Бикбаевтың «Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙәрҙә» китабы башҡорт әҙәбиәтендә сәйәхәтнамә жанрын өр-яңы баҫҡысҡа күтәрҙе. 2008 – 2012 йылдарҙа әҫәрҙәренең биш томлығы донъя күрҙе. Быйыл уның тағы ла бер фундаменталь хеҙмәте –

шағирҙың 1969 – 2009 йылдарҙағы тормош тәьҫораттарын туплаған ҡалын ике томлыҡ көндәлектәре баҫылып сыҡты.

Рауил Бикбаев эшсәнлегенең шул яғын да иҫтә тотайыҡ: ул ысын мәғәнәһендә көслө ижтимағи эшмәкәр, аҡыл эйәһе, трибун шағир. Был йәһәттән ул яҙыусыларыбыҙға ғына түгел, республика интеллигенция вәкилдәренә лә оло бер үрнәк. 2008 – 2013 йылдарҙа Башҡортостан республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты – Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре комитеты рәйесе. Ул публицистикала үҙе бер телмәр оҫтаһы. Күп тармаҡлы, юғары сифатлы, тәрән тамырлы ижады менән Рауил Бикбаев башҡорт әҙәбиәте үҫешенә, Башҡортостандың рухи тормошона үҙенең ҙур өлөшөн индерә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

• • • • • • • • • • • • • • •

## Мостай КӘРИМ

* * *

Рауил Бикбаевҡа

*Сая бейенең һин, менеп бер саҡ*
*Упҡын өҫтөндәге ҡаяға,*
*Ҡурҡманым мин, була күрмәһен тип*
*Ошо саялығың заяға.*

*Күҙ алдымда ташландың*
*һин бер көн*
*Тауҙан атылып төшкән ташҡынға,*
*Мәкерле һыу һине йотмағай тип,*
*Хатта шик инмәне башыма.*

*Ил алдына сыҡһаң, – мин*
*тынысмын –*
*Һөйләмәҫһең ваҡты, яманды.*
*Изгеләрҙе яуыз яһамаҫһың.*
*Хаҡҡа сығармаҫһың ялғанды.*

*Кисә һине «03» алып китте,*
*Ышанамын, доктор ҡотҡарыр.*
*Ҡаты сырхау йыҡҡас, һинең өсөн*
*Тәү ҡат, Рауил, осто ҡоттарым.*

1990

• • • • • • • • • • • • • • •

* * *

Равил Бикбаев, прежде всего, глубоко национальный поэт, не ограниченный в своем национальном своеобразии, поэт широкого масштаба и высокого полета. Мир его поэзии многокрасочен, человечен и, я сказал бы, при этом тревожен, как само время. Он, как поэт-гражданин, очень чуток к голосу времени, самозабвенно верен героической и трагической истории своего народа, весь устремлен в светлое будущее его.

Глаза поэта зорки, видит не то, что лежит сверху, а то, что нужно и необходимо. Поэтому он в своих творческих поисках больше находит, нежели ищет. В своем поэтическом мышлении, в образном видении мира он очень смелый, даже дерзкий, но он поэт-новатор в лучшем смысле, весь опирающийся на лучшие традиции родной поэзии. При этом он поэт большой интеллектуальной культуры, хорошо усвоивший все достижения восточной и русской поэзии, значит, всей современной.

Поэтому-то его «Автобиография» вобрала в себе все лучшее прошлого и современного и так естественно сочетает личное с общим. И его личная автобиография превращается не только в художественную самоописанию его поколения, но и в своеобразную поэтическую историю своего народа, возрожденного революцией, при этом не теряя индивидуальный почерк, чисто бикбаевский голос его. И голосу этому не внимать нельзя, ибо голос этот чист, искренен и мудр, как сама молодость. Равиль Бикбаев – поэт молодости, ибо настоящая поэзия не может по своей сути жить без молодости. Поэтому поэзия близка и дорога молодежи, нашему комсомолу. Р. Бикбаев быстро, энергично растущий поэт, поэт большого будущего. Тому порукой является его «Автобиография», потрясающее стихотворение «Сонгми» и великолепная поэма о Ленине, одна из лучших созданных о нем в башкирской поэзии.

Лично я считаю, что сам Салям достоин Бикбаевской премии!

**Рами ГАРИПОВ.**

•••••••••••••••

**Тимер**
**ЙОСОПОВ**

## *Бөркөт саңҡыуы*

Рауил Бикбаевҡа

*Сама тигән аттар тыпырсынып,*
*Алмашынган саҡта дәүерҙәр.*
*Һин ҡалҡаһың алга,*
*Оло булып,*
*Кесерәйгән саҡта дәү ирҙәр.*
*Тере ҡуҙҙай күҙҙә осҡон янһа,*
*Өмөттәрҙең ҡалһа остого,*
*Һин ҡалҡаһың алга,*
*Сая рухлы*
*Рәмиҙең дуҫы, ҡустыһы.*

*Күңелдәрең яҙға сарсағанда,*
*Ал ҡояшҡа тейә устарың.*
*Һин еләһең.*
*Йәшен тынын тоя*
*Эйәрҙәш тә килгән дуҫтарың.*
*Һөрән һалмай,*
*Илгә оран һалдың.*
*Тик ил гәме генә уйыңда.*
*Үҙгеңә үткәс,*
*Йыр йырланың,*
*Һәм сарсаның йылға буйында...*
*Оранында бөркөт саңҡыуы бар,*
*Ҡылыстарҙың унда бар сыңы.*
*Сәсәндәрҙең алыҫ һин бер осо.*
*Ғәййәр Кинйәләрҙең ярсыгы.*

1995

•••••••••••••••

* * *

Мы с Равиль Бикбаевым поступили в Башкирский государственный университет в год его открытия – 1957 г. Вместе таскали бетонные плиты на четвертый этаж здания, вместе слушали общие лекции и работали во время «третьей сессии» в колхозах республики. Он пришел из оренбургских степей сложившимся поэтом и в восемнадцать лет писал стихи, не уступающие по глубине чувств и духовной зрелости стихам, написанным много лет спустя, по праву выступая от имени своего поколения; стал первым из нашего поколения лауреатом Государственной премии РБ им. Салавата Юлаева и народным поэтом Башкортостана. В этом смысле его смело можно назвать и первопроходцем, и первооткрывателем. Его 60-летний юбилей – это достойный венец и нашей молодости, и всей нашей национальной литературы.

**Газим ШАФИКОВ.**

•••••••••••••••

**Ирек**
**КИНЙӘБУЛАТОВ**

## *Ҡуш йөрәкле ҡоштоң осҡаны*

Рауил Бикбаевтың
«Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны»
китабын уҡығас.

*Рауил ҡорҙаш, яңы китабыңды*
*Меңдәр уҡып хайран ҡалалыр.*
*Меңдәр оҙаҡ көткән был китапты*
*Тағы ҡат-ҡат ҡулга алалыр.*

*Мин үҙемдән сығып әйтәм быны,*
*Уҡый-уҡый иҫем киткәнгә.*
*Тотош китап түгел, әйтәһе юҡ,*
*Һәр шиғырың хайран иткәнгә.*

*Бер һүҙ менән һис тә әйтеп булмай,*
*Биреп булмай бөтә баһаны.*
*Бары йөҙ йылға бер тыуа торған*
*Заман үҙе шағир яһаны.*

*Хатта заман яһай алмаҫ ине,*
*Бирелмәһә һиңә Алланан!*
*Бирелмәһә һиңә күктән, ерҙән,*
*Күк әремле сикһеҙ даланан.*

*Эт күрмәҫте күрҙек бала саҡта,*
*Яуҙа ятып ҡалды атайҙар.*
*Етемлекте еңеләйтмәй ине,*
*Яуғир балаһы, тип атау ҙа.*

*Ҡараңғынан ҡараңғыға тиклем*
*Эштә булды беҙҙең инәйҙәр.*
*Тик ниңәлер улар онотолдо,*
*Һәр береһе – герой, тимәйҙәр.*

*Беҙҙең яҙмыш шулай башланһа ла,*
*Оло мәктәп булды бар яҡлап.*
*Тормош һәр саҡ күҙ уңында тотто*
*Берсә ҡыйырһытып, бер яҡлап.*

*Онотолмаҫ йылдар, юлдарҙың да*
*Булғандыр ҙа төрлө мәлдәре.*
*Борсой һине бөгөн ил яҙмышы,*
*Һине борсой донъя хәлдәре.*

*Халыҡтың бар фажиғәһе борсой,*
*Ҡыуандыра уның уңышы.*
*Китабыңдың һәр битендә тойҙом*
*Борсолоусы кеше һулышын.*

*Ғәжәпләнәлер күптәр асыҡ күреп,*
*Бер күңелгә донъя һыйғанын.*
*Тик бер йөрәк мең йөрәктең зарын,*
*Һәр тибешен нисек тойғанын.*

*Һин яҙғанһың йөрәгеңдән алып*
*Бөтә һыҙланыуын замандың;*
*Яҡшылығын күреп яҡшыларҙың,*
*Яуызлығын күреп ямандың.*

*Уйландырҙы мине ошо исем:*
*«Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны».*
*Эйе, тик бөркөттәр яңғыҙ оса,*
*Яңғыҙ осҡаны юҡ ҡарғаның.*

*Шиғриәттең бейек көмбәҙендә*
*Һин бит ҡуш йөрәкле ҡош һымаҡ.*
*Күкте болот ҡаплап торһа ҡай саҡ*
*Күңел йыһандары буш һымаҡ.*

*Халыҡ барын һәр саҡ ҡарап тора:*
*Был осҡамы, теге осҡамы?*
*Ғорурланып күҙәтәләр улар*
*Ҡуш йөрәкле ҡоштоң осҡанын.*

*Ҡуш йөрәкле, тиҙәр, бик-бик хаҡлы*
*Осҡаныңа шундай бейектә.*
*Һин көмбәҙҙә саҡта шыбырлаша*
*Төлкө-маҙар, ваҡ-ваҡ кейектәр.*

*Ләкин һин бит һис тә яңғыҙ түгел,*
*Һиңә ҡарап торған халҡың бар.*
*Һин – халыҡтың улы, халҡыңа ла*
*Таянырға тулы хаҡың бар.*

•••••••••••••••

**Фақиһа**
**ТУҒЫҘБАЕВА**

## *Иртәрәк тә түгел, һуңғараҡ та...*

Ҡәләмдәшем Рауил Бикбаевҡа

*Иртәрәк тә түгел, һуңғараҡ та –*
*Тыуҙырған бит заман һине белеп.*
*Һинең хис һәм аҡыл ҡушылғанға*
*Һин йәшәгән заман үҙе бөйөк.*

*Иртәрәк тә түгел, һуңғараҡ та ...*
*Һин – еңеүсе көрәш майҙанында.*
*Һиңә ҡарап илде танып йәр бит,*
*Йөрөһәң дә, шағир, ҡайҙа ғына.*

*Берсә балдар, берсә ҡандар тама*
*Остарынан осло ҡәләмеңдең.*
*Иртәрәк тә түгел, һуңғараҡ та –*
*Шағир булып мәңге ҡала белдең.*

*Иртәрәк тә түгел, һуңғараҡ та –*
*Ҡаһарман ир илгә бөгөн кәрәк.*
*Һинең хисең, һинең аҡыл менән*
*Бөйөк халҡым тағы бөйөгөрәк.*

1998

• • • • • • • • • • • • • • •

* * *

Равиль Бикбаев – народный поэт Башкортостана. Удостоен он заслуженных почестей, не лишен высоких званий и наград. Мы знаем его по философской, жизненной поэзии, знаем и его научные, критические, публицистические произведения. При этом мы знаем его и как общественного деятеля, крупного политика. Известное дело – поэты такого таланта не умещаются в привычных рамках! Потому уверен, что Бикбай – это всегда открытие!

За подтверждением этой мысли далеко ходить не пришлось. Открыл я его новую книгу и вновь оказался поражен. Оказывается, Бикбай – прекраснейший лирик! Какая у него любовная лирика! Что бы ни говорили, поэт любовью жив, любовь его вдохновляет. Без любви сама поэзия невозможна! Там, где нет мук любви, где нет разлук и встреч, страдания и наслаждения, там нет поэта.

Но для поэта мало уметь любить, надо суметь передать свои чувства в стихах, ведь это читатель должен в них поверить. И Бикбаю это удается сполна! Читая его стихи, словно и сам оказываешься в волшебной круговерти любви. Стихи бросают то в огонь, то в омут, волшебные строки поэта задевают живые струны души. Вспоминаются молодость, опьянение от любви...

Да, любовь неповторима, одна не похожа на другую, у каждого – своя. И я с удовольствием прочитал любовную лирику Бикбая, с большим удовольствием перевел ее на татарский язык. Замечательные стихи! Прекрасная любовь! Счастливец Равиль Бикбай!

**Роберт МИНУЛЛИН,**
**народный поэт Татарстана.**

• • • • • • • • • • • • • • •

* * *

Поэзия Равиля Бикбаева – поэзия серьезных раздумий, драматических переживаний. В ней нет места равнодушию, нет места искусственной нарочитости, потому что поэт предъявляет высочайшие требования к самому себе, и своей поэзии, проявляя огромное чувство отвественности перед творчеством, перед читателями.

**Ахияр ХАКИМОВ,**
**народный писатель Башкортостана.**

• • • • • • • • • • • • • • •

* * *

В его поэзии «я» и мир, человек и мир предстают в романтической глобальности. Его лирический герой постоянно оказывается, я бы сказал, в экспериментальной ситуации, в которой он может находиться всечасно в реальной повседневности, в ситуации «великого противостояния» с одной из широких сфер, с одной из стихий Вселенной. Вот он ведет разговор с Солнцем. А вот наедине с собою и космосом.

В другом стихотворении он уже смотрит на землю, горящую внизу как слеза, с космических высот, стучась в ворота Вселенной.

Если лирический герой исповедуется, то перед собственной Родиной, взрастивший его и наполнившей поэзией, если клянется о верности, то Народу.

В стихотворении «Жизнь, ведешь себя странно...» он беседует с Жизнью, пытаясь проникнуть в ее каверзы и парадоксы. Не менее абстрактен и опять-таки весьма показателен для лирической манеры поэта его собеседник в стихотворении «Забыв навеки о покое...» Здесь идет диалог со Временем.

Эти предпочтения в выборе лирического «контрагента» в поэзии Равиля Бикбаева свидетельствуют о нестандартности складывающейся поэтической системы, о нешаблонности его мироощущения.

**Виталий СМИРНОВ.**

•••••••••••••••

**Зөфәр**
**ВӘЛИТ**

## *Талант*

Башҡортостандың халыҡ шағиры
Рауил Бикбаевҡа

*Ҡояш ғүмерен бирәлер*
*Хоҙай оло талантҡа.*
*Талант йәне иремәй ул*
*Хаким ҡуйған талапҡа.*

*Өмөт өҙмәй, ниҙер эҙләп,*
*Килгән-киткән йылдарҙан;*
*Бары талант ҡына йөрөй*
*Ҡояш йөрөгән юлдарҙан.*

*Ул – бер бөтөн айырым дәүләт,*
*Хакимы ла үҙелер.*
*Күңелендә – киләсәктең*
*Балҡыясаҡ йөҙөлөр...*

*Донъя моңон йыя-йыя,*
*Ул йондоҙға әйләнер.*
*Ә нурҙары киләсәктең*
*Йөрәгенә бәйләнер...*

***

То, что Равиль Тухватович в Башкортостане пользуется огромным авторитетом, – ни для кого не новость. Равиль Бикбаев – это душа Башкортостана, один из символов современного Башкортостана, один из ближайших друзей и соратников великого Мустая Карима, продолжатель дела Мустай-агая...

Огромным уважением Равиль Бикбаев пользуется во всей России – и в Дагестане, и в Кабардино-Балкарии, и в Москве, и в Татарстане... И, конечно же, в Чувашии. Потому что здесь, у нас, знают: народный поэт Башкортостана, выдающийся сын башкирского народа Равиль Бикбаев искренне любит наш край, нашу литературу и культуру. И все это он подтверждал и подтверждает делами.

В октябре 2000 года мои башкирские друзья подарили мне прекрасную книгу, которая называется «Мустай Карим. Жизнь и творчество». В этой книге имеется одна замечательная статья с очень простым названием – «Голос народа», автором которой является, конечно же, Равиль Бикбаев. А я просто не мог не перевести ее на чувашский. Не мог, потому что так написать о Поэте мог только Поэт.

**Валерий ТУРГАЙ,**
**народный поэт Чувашии.**

•••••••••••••••

**Александр**
**ФИЛИППОВ**

## *На Родине*

Равилю Бикбаеву

*По ромашкам, по сырой сурепке*
*С туеском по ягоды иду.*
*Ветер крепок, как табак турецкий,*
*Я его глотаю на ходу.*

*Солнце, небо – все вокруг приемлю,*
*Этот ветер, этот добрый мир.*
*Я люблю свою родную землю*
*Точно так же, как любой башкир.*

*В поле одинокая березка*
*Расплескала листья-бубенцы,*
*За сережкой падает сережка*
*С золотым наличием пыльцы.*

*Что мне ветер! Что мне это поле,*
*Если не во сне, а наяву*
*Звонкое башкирское раздолье*
*Я любимой Родиной зову.*

*Видимо, крадучись по опушке,*
*Конокрад, любови не тая,*
*Умыкнул из дедовской конюшни*
*Скакуна ретивого, как я.*

*И повел без всяческой боязни*
*По башкирской роздыми полей.*
*Точно конь ретивый к коновязи,*
*Я привязан к Родине своей.*

*Вот иду по солнечной сурепке,*
*Рядом веет ветер-конвоир.*
*Здесь лежит мои святыни – предки,*
*Как и у любого из башкир.*

•••••••••••••••

* * *

Дорогой Равиль!

Поздравляем тебя с 75-летием, с годами жизни, что не были легкими и беспечальными. Но это годы жизни человека, который неустанно трудился и трудится на благо родного народа, родного Башкортостана, нашего общего Отечества – России.

На таких, как ты, людях и держится страна – не впадающих в эйфорию в счастливое время, стойких в годы испытаний, верных дружбе, умеющих видеть новые горизонты тогда, когда у многих опускаются руки.

Ты – талантливый поэт, видный общественный деятель, прекрасный организатор литературного дела, наш давний и верный друг.

Желаем тебе творческой неиссякаемости, крепкого здоровья, добрых друзей, долгих лет.

С искренним уважением,

**Валерий ГАНИЧЕВ,**
**Председатель правления**
**Союза писателей России.**

•••••••••••••••

## Әҙәбиәт солтаны

Алдыңда ысын шиғриәт оҫтаһының, ғалимдың китаптары ятҡанда, ҡайһыһы һине ныҡ тулҡынландырҙы икән, замандаштарының уй-хистәрен ниндәй яғы менән үҙенә ылыҡтырғаны, уның ижады менән таныш һәр кем күңелендә һәм хәтерендә һәр шиғри юлы тигәндәй һеңеп ҡалғаны тураһында уйланғанда, һүҙ оҫтаһының фекергә ярашлы тос һүҙҙәрҙе тапҡанына, фекер ҡеүәһенә һоҡланаһың. Һәр ваҡыт уның шиғриәтендә анһат ҡына күренгән һүҙҙәр аша тотош осор, әҙәбиәт ғилеме тарихы, хеҙмәт көрәше, көнкүреш йәшәйеше һәм шәхестең үҙе тере көйө асыҡ, сағыу биҙәктәрҙә күҙ алдына баҫа. Мин Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Төхфәт улы Бикбаев тураһында ауыҙ асырға баҙнат итәм.

Беҙҙән алда, биш йыл элек (1962) кенә, Рауил ағай Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын һәм аспирантураһын тамамлап, 1965 йылдан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының әҙәбиәт бүлегендә ғилми хеҙмәткәр булып эшләй башлағайны. Аҫылғужаның курс һәм диплом эше етәксеһе булды.

1968–1969 уҡыу йылында беҙҙең төркөм Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡыу башланы. Марат Хәләф улы Минһажетдинов етәкләгән, утыҙ талипты берләштергән әҙәби-ижад түңәрәге яҙыусылар, ғалимдар, ғөмүмән интеллигенция вәкилдәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәне. Яҙлы-көҙлө йылына дүрт тапҡыр Салауат Юлаев һәйкәле янында шиғыр бәйгеләре гөрләп үтһә, университеттың актовый залында республиканың билдәле шәхестәре менән осрашыуҙар ойошторолдо. Беҙҙең төркөм, хатта Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары менән берлектә «Яҙ, ҡыҙ һәм мөхәббәт» исемле телевизион фильмда ҡатнашты, Өфө сәнғәт академияһы профессоры Фәрдүнә Ҡасимова етәкселегендә Мостай Кәримдең «Айгөл иле» драмаһын сәхнәгә ҡуйып, студенттар хөкөмөнә сығарҙы. Беҙ аяҡ баҫмаған яҡын тирәләге интернат-мәктәптәр, балалар йорто, юғары уҡыу йорттары ҡалмай. Ҡулдан сығарылған «Йәш әҙәбиәтсе» стена гәзитендә иң яҡшы шиғырҙарыбыҙ, хикәйәләребеҙ, мәҡәлә-очерктарыбыҙ аша үҙебеҙҙе йәштәштәргә таныттыҡ. Бер нисә йыл Аҫылғужа ошо гәзиттең мөхәррире булды. «Йәш көстәр» альманахында беҙҙең барлы-юҡлы әҫәрҙәребеҙҙе баҫалар, нисек тә ижади дәртебеҙҙе яҙыусылар күтәреп алдылар. Бына шулай әҙәбиәт донъяһында ҡайнап йәшәгән студенттар хатта бергәләшеп әҙәби процесҡа йоғонто яһарға батырсылыҡ иттек. Икенсе курста уҡып йөрөгәндә Аҫылғужа Рауил Төхфәт улы Бикбаевтың «Автобиография» (Өфө, 1969) тигән шиғырҙар йыйынтығы тураһында төркөм алдында ҡырҡ минут тирәһе сығыш яһаны ла, китаптың Ғ. Сәләм премияһына тәҡдим ителергә тейешлеген белдереп, үҙенең инициативаһын күтәреп алғандарға берике битлек рецензияһы аҫтына ҡултамғаларыбыҙҙы ҡуйырға саҡырҙы. Беҙҙең һәм беҙҙән юғары курста уҡығандарҙың теләге Аҫылғужаның «Студенттар фекере» («Мнение студентов») исемле мәҡәләһе «Ленинец» гәзитендә донъя күрҙе. Унда былай тип яҙылғайны: «Мы, студенты Башкирского государственного университета, с радостью восприняли выход поэтического сборника Равиля Бикбаева «Автобиография». С удвоенной радостью узнали мы о том, что этот сборник выдвинут на соискание комсомольской премии имени Г. Саляма.

Голос Бикбаева в башкирской поэзии звучит уверенно, своеобычно и притягательно. Лучшей иллюстрацией тому служит последний сборник «Автобиография». В маленьком вступительном слове автор говорит, что человек должен жить с прошлым, настоящим и будущим родной земли, родного народа. Прошлое и будущее – два крыла человека. В своей книге он ярко и поэтично раскрыл это, выразил сложный и богатый духовный мир современного человека. Каждое стихотворение сборника лучится своим особым блеском. В стихах Бикбаева живо ощущается необычная свежесть, новизна, своеобразие мысли…

*О грани скал, как*
*будто нож,*
*Свое перо точу,*

– пишет поэт. Традиционное фольклорное точение оружия приобретает здесь новую, мирную окраску и поэтическую отточенность.

Мы отнюдь не собирались дать анализ стихам поэта. Мы просто хотели от всей души выразить свое желание видеть Равиля Бикбаева в числе награжденных премией Г. Саляма. Он это заслуживает.

Студенты БГУ Асылгужа Багуманов, Ильдус Буляков, Танхылыу Карамышева, Минлебай Юлмухаметов, Нурия Биккулова и др. *(всего 106 подписей)*».

Шулай итеп, үткәндәр өсөн әрнеү, һыҙланыу аша һоҡланыу, киләсәккә оло ышаныс, бөгөнгөнөң бөйөклөгөн асып биргән, ошо өс осорҙо оҫта үрелдереп һүрәтләгән, хәҙерге кешенең илаһи миссияһын данлаған, айырым кешенең генә түгел, тотош халҡыбыҙҙың автобиографияһы һымаҡ ҡабул ителгән, йырлы телле йыйынтыҡ мотлаҡ шул премияға лайыҡ ине. Торғонлоҡ осоро. Һәр һүҙ иләксиләк аша үткәрелеп тикшерелгән, саҡ ҡына тайшаныу һәр яҡлап тыйылған заманда, Аҫылғужа тәүләп үҙенең ҡултамғаһын ҡуйҙы. Был ул заманда оло батырлыҡҡа тиң булды. Бының өсөн, әлбиттә, Аҫылғужаны тейешле урындарға саҡыртып һорау алыусылар йышайҙы. Кем ҡоторҡкан, йәнәһе. Алтмышынсы, етмешенсе йылдарҙа үҙ фекереӊ менән йәшәү, улай ғына ла түгел, көрәшеү нисек ауыр булғанын йәштәштәр, замандаштар бик яҡшы белә.

Бына шулай күмәк көс менән әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге хаҡында ҡайғыртып, шәхестәребеҙ тураһында хәстәрләп йәшәгәнгәләр инде, беҙҙең төркөмдән өс профессиональ яҙыусы сыҡты: Аҫылғужа Баһуманов, Факиһа Туғыҙбаева, Миңлегөл Хисамова.

Ғалимдар ҙа йыйынтыҡтарға үҙ фекерен белдерергә тырышты. Мәҫәлән, Раиул Бикбаев «Совет Башҡортостаны» гәзитендә былай тип билдәләне: «Йәш көстәр» альманахындағы әҫәрҙәр менән танышҡанда бөтәһенән элек ундағы шиғырҙарҙың күбеһенең версификация ҡанундары буйынса төҙөк, дөрөҫ яҙылыуын күрәһең. Шиғриәттең формаль закондарын бик һиҙгер тоя белә хәҙерге йәш авторҙар. Ә бит ҡасандыр быға ирешеү күптәр өсөн былай еңел бирелмәй ине.

Ләкин йәштәрҙең шиғриәтте аңлауы бының менән генә сикләнмәй. Улар образлы фекерләй белә, тәбиғәтте, күңелдәге кисерештәрҙе тапҡыр поэтик деталдәр аша ла аса ала. Йәштәр бигерәк тә тәбиғәттең күңелен һиҙгер тоя.

*Быуындары ҡаты үләндәрҙең,*
*Аҡ таждарын һалды бәпембә,*
*Әүәлгесә ҡайнап һут йүгермәй*
*Ҡайындарҙың һомъол тәнендә,*

– тип яҙа Аҫылғужа Баһуманов».

Торғонлоҡ заманында бик һирәктәр генә ҡыйыу фекер әйтә алды. Әҙ генә тел тейҙер – башыңды буштан-буш төрмәлә серетергә әҙерҙәр. Һәр һүҙеңде юҡҡабарға һаплап, арттырыусылар табылып ҡына тора, туған-тыумасаңды ла энә күҙәүенән үткәрәләр, күҙәтеү аҫтына алалар, бер ҡапҡанан ысҡыныуға икенсеһе һине көтөп шар асылып торған заман. «Милләтсе» мөһөрө тағыла ла ул кешене бар ғәләме менән ситкә этәрә башлайҙар. Быны «Ленинсе» менән «Ленинец» гәзиттәрен бер-береһен һүҙмә-һүҙ ҡабатлауҙан айырып үҙ аллы яһар өсөн көрәшкән Рәми Ғарипов, тура телле, милли рухлы Раиул Бикбаев менән Аҫылғужа Баһуманов һәм башҡалар үҙ елкәләрендә татыны.

Яҙмышмы, әллә рухи яҡынлыҡ кешеләрҙе яҡынлата? Белмәҫһең. Аҫылғужа Раиул Бикбаев етәкселегендә Шәйехзада Бабич сатираһы буйынса курс эшен үҫтереп диплом итеп яҡланы. Етәксенең баһаһы роль уйнағандыр тим, Аҫылғужаны Мәскәү Әҙәбиәт институты аспирантураһына уҡырға ҡоҙаланылар. Ә ул

баш тартты. «Ғилми донъяла асыш яһар урын юҡ!» – тип иҫәпләгәйне лә йәшәй-йәшәй, өйрәнелмәгән тәрән ҡатламдарҙы күреп шаҡ ҡатты, аспирантураға бармағанына ныҡ үкенде. Беҙҙе Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына күктән килеп төшкәндәй күреп мейене арбанылар, юлдан яҙҙырҙылар шул.

Аҫылғужа дипломының бер өлөшөн әҙәби мәҡәлә итеп «Ватандаш» журналында һуңынан баҫтырҙы баҫтырыуын. Ул тәүге китабын «Күк томанлы иртәләр» тип атағайны һәм Яҙыусылар союзы тарафынан нәшер итергә тәҡдим дә ителгәйне. 1986 йылда Аҫылғужаны СССР Яҙыусылар союзына ағза итеп алынғанда биргән рекомендацияһында Рауил Төхфәт улы Бикбаев тап шул китапты иҫкә алған: «Путь в творческий мир у каждого поэта неповторим: одни выходят в литературу стремительно, у других этот путь длится годами.

Довольно сложным был творческое формирование и у Асылгужы Багуманова. Уже в первых стихах, опубликованных в республиканской печати, в молодежном альманахе А. Багуманов заявил о себе как о своеобразном поэте. На Республиканской конференции творческой молодежи в начале 70-х годов получил высокую оценку его первый сборник, который был рекомендован в издательство. Однако молодой поэт почему-то не спешил с этой книгой. В этом, может быть, проявилась его высокая требовательность к слову, серьезное отношение к творчеству.

В 80-е годы одна за другой вышли две книги А. Багуманова «Солнечная заря» («Ҡояшлы таң») и «Ледоход» («Боҙ киткәндә»), которые не затерялись в потоке таких сборников молодых авторов, а запомнились своей зрелостью, неповторимым поэтическим почерком.

В стихах Асылгужи меня особенно радует естественность мыслей и переживаний, их красота и содержательность. Его стихам свойственно также тематическое многообразие. Поэт ведет интересные поиски в области формы.

Мне хочется особо отметить поэму «Ледоход», с которой открывается вторая книга А. Багуманова. Его дебют в жанре поэмы, по-моему, удался.

Я с уважением отношусь к творчеству Асылгужи Багуманова и, рекомендуя его принять в Союз писателей СССР, желаю ему в будущем работать более плодотворно.

**13.11.85.**
**Равиль Бикбаев. Член СП СССР с 1966 г.**
**Членский билет № 02939».**

Аҫылғужаның архивынан табылған был документты Рауил ағайҙың «Ағиҙел» (1992, № 1, Б. 172) журналында баҫылған мәҡәләһе лә раҫлай. Республиканың ижади йәштәр конференцияһында юғары баһа алып та авторҙың китабын нәшриәткә бирергә ашыҡмауына ғәжәпләнә ғалим. Ғәжәпләнерлек урын бар шул. Рәми Ғарипов кеүек оло шағирҙың үтә ҙур баһаһын алып та Баһумановтың оҙаҡ йылдар әҙәбиәттән ситләшеп тороуының үҙ сәбәбе бар. Берҙән, Аҫылғужаға тура теллелеге арҡаһында ғүмер буйы теләһә ниндәй ҡолаҡҡа ятмаған бысраҡтар өйөлдө. Ә ул ваҡытта, Обком ҡарары менән, уны Яҙыусылар союзына алыныр урында төшөрөп ҡалдырҙылар, хатта кемдең-кем икәнен тикшерер өсөн, ете кешенән торған комиссия төҙөнөләр. Шуларҙың береһе – эшенә, икенсеһе өйөбөҙгә килде. Мин шул тиклем был хәлгә аптыраным, хәлемдән килгәнсә иремде яҡлап, килгән береһенә ҡарсығалай ташландым. Бик ныҡ яндым-көйҙөм, был ғәҙелһеҙлекте үтә ауыр кисереп, больницаға эләктем. Өфөнөң Орджоникидзе

районында мин ятып сыҡмаған бер генә больница ла ҡалманы. Аҫылғужа ҡулында ике бала, яуаплы эш. Ул китабын нәшриәткә тотоп барманы ла. Нисек кенә матди ҡыйынлыҡ кисерһәк тә түҙҙек. Алтын балдаҡтарыбыҙҙы һатып булһа ла, йөҙөбөҙҙө һытмай, был ваҡиғаны артыҡ һөйләп бармай, имен-аман артабан еңеп сыҡтыҡ. Ваҡыт үткәс, әлбиттә, Аҫылғужаның үҙ ижадына талабы ла көсәйҙе, ҡыҙғаныс, тәүге йыйынтыҡҡа индерелгән күп кенә шиғырҙарын юҡҡа сығарған, күрәһең, артабанғы китаптарына индерелмәгән, архивында ла тапманым.

Эйе, Аҫылғужа үҙенең яҙыу һәләтен журналистикаға арнаны, милли рухлы шиғриәтен ситкә ҡуйып, эргәһендә өйөрөлгән «ҡара көстәр»гә ҡоторорға ирек бирмәй, уларға ҡаршы ҡаты яуап биреүенән тайпылып, журналистикаға күсте һәм йәш балалы ғаиләһе нигеҙен нығытыуға кереште.

Рауил ағай ғүмер буйы тигәндәй баҡсабыҙҙа күрше булды, аралашып йәшәнек. Иҫ киткес күңелле, ойошоп, табындаш булып, үҙ-ара асыҡтан-асыҡ фекерләшеп, һәр беребеҙҙең уңышына ҡыуанып үтте көндәребеҙ. Ҡайғылар ҙа уртаҡ кисерелде. Рауил ағайҙың берҙән-бер улын юғалтҡан ауыр саҡтарында уның ҡайғыһын уртаҡлашырға табын артына йыйылдыҡ. Ырымбурҙан килеп сыҡҡан ҡунаҡтары – әсәһе, туған һәм дуҫтары беҙҙең өсөн дә ҡәҙерле ине, сөнки беҙҙең ата-бабалар ерҙәре Ырымбур өлкәһендә киҫелеп бирелгәс, ярты туғандарыбыҙ, нәҫел ҡәберҙәре унда ҡалды.

Башҡортостанға бойондороҡһоҙлоҡ яулау хәрәкәте башланғас, баҡсалағы һәр яҙыусы үҙ өлөшөн индерергә тырышты. Бер заман, 1989 йылда Рауил Төхфәт улы «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһын, башҡорт халҡының демографик хәле мәсьәләләрен, милләт яҙмышын ҡурсалап, мәҙәни донъяла шау-шыу ҡуптарҙы. Халыҡ иҫәбенең милләткә йоғонтоһон шиғриәттә тәү тапҡыр күтәреп сыҡты ул. Уға Республиканың Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелеүен әҙәбиәтебеҙҙе баһалау һымаҡ ҡабул иттек. Аҫылғужа ла был осорҙа милли рухлы мәҡәләләр, шиғырҙар яҙып ҡына ҡалмай, трибуналарға, хатта демонстрацияларға сыҡты. Динис ағай хөкүмәт йортонда депутаттарға халыҡ яҙмышы тураһындағы яҙыусыларҙың борсоулы фекерҙәрен еткерә торҙо. Гөлфиә Юнысованың Мәскәү трибуналарында, депутат булараҡ, милләт өсөн яулашыуы зәңгәр экрандар аша бөтә ғәләмгә билдәле булды.

Тормош беҙҙе күпме генә айҡап-сайҡамаһын, беҙ һаман да үҙ халҡыбыҙға тоғро хеҙмәт итеү юлынан тайпылманыҡ.

Динис ағай менән Рауил ағай Яҙыусылар съезына килгән һәр ҡунаҡты, моғайын, баҡсабыҙға һуғылдырмай ҡайтармағандыр. Аэропорт яҡын бит. Ҡаршылайҙар, һыйлап, матурлап оҙаталар. Ысын дуҫтар менән милләт-ара дуҫ йәшәнек.

Баҡсабыҙҙа яҙыусылар һирәгәйеп, күптәре аҡ донъяға күскәс, Рауил Төхфәт улы ла беҙҙән күсеп китте. Уның шәхесен, ижадын иҫкә төшөрөп, өйөнөң тәҙрәһенән китап менән тулы китап кәштәһе күренә. Ҡустыһына ҡалдырып китте ул. Ғәжәпләнер урын юҡ, яҙыусынан йәштәргә китап ҡалырға тейеш, шулай тип тир түкте, йөрәк майын һурҙы, милләте өсөн янды-көйҙө шағир.

**Миңниса БАҺУМАНОВА.**

Наил
ҒӘЙЕТБАЙ

# ӨҘӨК-ЙОЛҠОҠ ХӘТИРӘЛӘР

## Урал аръяғында әҙәби мөхит

1979 йылдың майында, Сибай ҡалаһында Урал аръяғы райондарында йәшәүсе йәш яҙыусыларға ижади ярҙам маҡсатында, “Ирәндек” әҙәби берекмәһе ойошторолғайны. Уның нигеҙендә 1993 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзының Сибай төбәк ойошмаһы төҙөлдө лә уңышлы эшләп китте. Шуға ла бөгөн берекмәнең ойошторолоуын, тәүге аҙымдарын иҫләп алыу яҙыҡ булмаҫ.

“Ирәндек” әҙәби берекмәһе 80-се йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзының ижади йәштәр менән эшләүсе әҙәби консультанты, билдәле яҙыусы Рәшит Солтангәрәев инициативаһы менән ойошторолдо.

Рәшит Солтангәрәевтың яҙмышыма йоғонтоһо ҙур булды. Ул минең тормоштағы ҡылыҡтарыма, ижадыма ҡарата тура һүҙле ине. Әсе генә итеп тәнҡитләп тә ташланы, әммә ауыр хәлдәргә эләкһәм, кәңәштәр бирҙе, ярҙам итте. Беҙ уның менән ныҡ дуҫтарға әйләндек. Дөрөҫө – ул мине бер туған ҡустыһы кеүек яҡын күрҙе, мин Сибайҙа йәшәгәндә көн дә телефон аша һөйләштек, бер-беребеҙгә төрттөрөүгә, юморға тулы хаттар яҙыштыҡ. Мин Өфөгә килеп ятаҡҡа урынлашҡас, яҡында ғына йәшәгәнгә күрә, кистәрен килеп инә торғайны, командировканан ҡайтышлай һәр саҡ миңә һуғыла, хәлдәрен һөйләй, ижади проблемалары менән уртаҡлаша ине.

Ул осор ике повесым “Ағиҙел” журналында баҫылып (“Әлфиә” – 1976 й., “Тәүге ҡар” – 1979 й.) миңә яҙыусы тигән исем-шәрифе йәбешә башлағайны. Йәштәргә һәр саҡ иғтибарлы булған Рәшит ағай, “Ирәндек” әҙәби берекмәһе ойошторолор булғас, мине етәксе тип тәҡдим итте. Ләкин ул мәлдә Сибайҙа ла, Урал аръяғы райондарында ла минең абруйым юҡ ине әле. Ә ошо уҡ ҡалала бер нисә пьесаһы төрлө театрҙарҙа ҡуйылған драматург, билдәле журналист Гәрәй Исхаҡов йәшәп ята. Шуға мин уны етәксе итеп ҡуйыу яғында инем. Телефон аша һөйләшкәндә Рәшит ағай бының менән килешмәне, Сибайҙа һөйләшербеҙ, тине.

1979 йылдың йылы май көндәрендә, “Ирәндек” берекмәһен ойоштороу маҡсаты менән, Өфөнән билдәле яҙыусылар Рәшит Солтангәрәев, Булат Рафиҡов, Ирек Кинйәбулатов, Вафа Әхмәҙиев, Ғәлим Дәүләтовтар килеп төштө.

*Дауамы. Аҙағы журналдың 2014 йылдың 1-се һанында баҫыласаҡ.*

Сибайға шулай уҡ Урал аръяғында йәшәүсе бик күп ижади йәштәр: Рәшит Туйсин, Гөллирә Исхаҡова, Мөслим Әбсәләмов, Ҡадир Әлибаев, Буранбай Исҡужин, Самат Фәйзуллин һәм башҡалар йыйылғайны. Ошо ултырышта мин уларҙың күбеһе менән тәү тапҡыр осраштым. Сибай ҡалаһының Үҙәк китапханаһында йыйылыш башланды. Хәтеремдә, "Китап" нәшриәтендә мөхәррир булып эшләүсе шағир Ғәлим Дәүләтов Өфөнән яңы ғына баҫылған китабымды алып килгәйне. Был ваҡиға йәштәрҙең күңелендә оло өмөт уятты, ойошторолорға тейеш "Ирәндек" берекмәһе үҙ китаптарын күрергә ярҙам итер, тип хыялланды улар.

Йыйылышҡа тиклем Гәрәй ағай Исхаҡов менән дә, Өфө әҙиптәре менән дә берекмәнең етәксеһе кем булырға тейешлеге хаҡында һөйләшергә өлгөргәйнем. Гәрәй ағай ҡаршы түгел, шуға бер тауыштан берекмә башлығы итеп уны һайлап ҡуйҙыҡ.

1979 – 1981 йылдарҙа "Ирәндек" берекмәһе ағзалары йылына бер-ике тапҡыр ғына Баймаҡ ҡалаһында йыйыла ине. Унда беҙ бер-ике ҡулъяҙма тикшерҙек, әммә төп эшебеҙ, гәзит-журналдарға яҙылыуҙы пропагандалау йәһәтенән, клубтарҙа әҙәби кисәләр ойоштороуға ҡайтып ҡалды.

## Боролош мәле

1981–1983 йылдарҙа Мәскәүҙә уҡығанда "Ирәндек" менән бәйләнешем бөтөнләй өҙөлөп торҙо. Әммә 1983 йылдың йәйендә Сибайға ҡайтҡас, ошо төбәктә йәшәүсе йәш яҙыусылар осраған һайын "Ирәндек" эшенең һүлпәнәйеүен, ҡулъяҙмалар тикшерелмәүен, ултырыштар, осрашыуҙар үткәрелмәүен, ойошма эшен йәнләндерергә кәрәклеген һөйләйҙәр ҙә мине быға тотонорға тәҡдим итә башлайҙар. Яҡшылап уйлағас, "Ирәндек" берекмәһен етәкләргә риза булдым. Ошо маҡсат менән 1983 йылдың 24 сентябрендә Баймаҡ ҡалаһында Урал аръяғында йәшәүсе барса талантлы йәштәрҙе йыйҙыҡ. Шул юлы ла, киләсәктә лә бар ойоштороу эштәрендә миңә ике шәхес ихлас күңелдән ярҙам итте: бөгөн билдәле шағирә, ғалимә Рәсимә Ураҡсина менән 2002 йылда ваҡытһыҙ вафат булып ҡалған талантлы шағирә һәм журналистка Гөллирә Исхаҡова.

Йыйылыш ҡыҙыу үтте. Ни сәбәптәндер, унда Гәрәй Исхаҡов үҙе килмәгәйне. Шунан файҙаланыпмы, уның эшен бик ҡаты тәнҡитләнеләр, "Ирәндек"тең һүнә барыуында ғәйепләнеләр һәм киләсәктә миңә был хаталарҙы ҡабатламаҫҡа өндәнеләр.

Бына шул ултырыштың протоколы. Һөйләшеүҙең нисек үткәнлеген күрһәтеү өсөн, ҡыҫҡартып булһа ла, шуны хәтерләйек. "Ирәндек" берекмәһенең бөтә протоколдары Милли әҙәбиәт музейы фондында һаҡлана.

*"Ирәндек" әҙәби берекмәһе ултырышының протоколы*

Баймаҡ ҡалаһы, 24 сентябрь, 1983 йыл.

Ултырышта ҡатнаштылар: Рәсимә Ураҡсина, Гөллирә Исхаҡова, Гөлшат Әхмәтҡужина, Наил Ғәйетбаев, Фәүзиә Юлдашбаева, Рәшит Туйсин, Әнүәр Хәсәнов, Ҡадир Әлибаев, Буранбай Исҡужин, Әғзәм Ишморатов, Әмир Моратов, Зилиә Ҡужабәкова, Фирүзә Алсынбаева, Фәнүзә Рыҫҡужина.

Көн тәртибенә өс һорау ҡуйылғайны:

1982–1983 йылдарҙа эшләнгән эш хаҡында отчет, берекмәнең яңы бюроһын һайлау һәм 1983–1984 йылдарға эш планын раҫлау.

Тәүге һорау буйынса өс кенә кешенең сығышын ҡыҫҡартып килтерәбеҙ.

Рәсимә Ураҡсина: "Насар эшләнек, активыраҡ булайыҡ, ҡулъяҙмалар тикшерергә кәрәк. Наил Ғәйетбаевты етәксе итеп ҡуйырға тәҡдим итәм".

Гөллирә Исхаҡова: "Эйе, активлашырға кәрәк. Республика гәзит-журналдарына подборкалар әҙерләп бирәйек".

Наил Fәйетбаев: “Яңы бюро һайлайыҡ. Һәр кемгә конкрет эш бирергә кәрәк. Ултырышты ике айға бер тапҡыр, төрлө ерҙә үткәреү дөрөҫ булыр: Асҡарҙа, Аҡъярҙа, Йылайырҙа, Баймаҡта, Сибайҙа. Һәр ерҙә ултырышты үткәреүгә бюроның бер ағзаһы яуаплы булырға тейеш”.

Шулай итеп, “Ирәндек” әҙәби берекмәһенең бюроһына түбәндәге иптәштәр һайланды: Наил Fәйетбай (берекмә етәксеһе, Сибай ҡалаһы), Рәсимә Ураҡсина (Сибай ҡалаһы), Гөллирә Исхаҡова (Баймаҡ ҡалаһы), Гөлшат Әхмәтҡужина (Әбйәлил районы), Буранбай Исҡужин (Баймаҡ ҡалаһы), Әлфиә Ҡырымғужина (Хәйбулла районы), Фәүзиә Юлдашбаева (Йылайыр районы).

*Ултырыш аҙағында бюро шундай ҡарар ҡабул итте:*

1. Әҙәби берекмәнең ултырышын (шулай уҡ уҡыусылар менән осрашыуҙарын) ике айға бер үткәрергә.
2. Ултырыштарҙы алмашлап төрлө районда ойошторорға.
3. Ултырышты үткәреүҙә шул районда йәшәгән бюро ағзаһын яуаплы итеп тәғәйенләргә.
4. Киләһе ултырышты Әбйәлил районы үҙәге Асҡарҙа 1983 йылдың 19-20 ноябрендә үткәрергә.
5. Киләһе ултырышты үткәреүҙә яуаплы итеп Гөлшат Әхмәтҡужинаны тәғәйенләргә.
6. Киләһе ултырышта Рәсимә Ураҡсинаның ҡулъяҙмаларын тикшерергә.
7. Рәсимә Ураҡсинаға тикшереү өсөн ҡулъяҙмаһын әҙерләп, бер ай алдан бюро ағзаларына таратырға.
8. Рәсимә Ураҡсинаға балалар фольклоры тураһында 20 минутлыҡ сығыш әҙерләргә.

Протоколда әйтелгәнсә, “Ултырыштарҙы ваҡытында үткәрергә” тип әйтеү генә аҙ, уны ойоштора белергә лә кәрәк.

## Ойоштороу серҙәре

“Ирәндек”тең ултырышын партияның район комитеттарыһыҙ юғары кимәлдә үткәреү мөмкин түгел. Ә Сибайҙа йәшәүсе, әҙәбиәт донъяһында әле танылмаған, рәсми органдар араһында абруйы бөтөнләй булмаған Наил Fәйетбаевтың уларға йоғонто яһарға бер ниндәй мөмкинселеге юҡ ине. Шуға ла баштан уҡ ойоштороу эшенә Яҙыусылар союзы рәйесе, республикабыҙҙың Юғары Советы рәйесе, СССР Яҙыусылар союзы секретары, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Әсғәт Мирзаһитовты әйҙүкләргә булдым. Төрлө хәйлә-мәйлә менән уның исеменән ултырыш үткәрелгән төбәктәге райкомдың беренсе секретарына хат ойоштора инем. Унда Башҡортостандың Яҙыусылар союзы Урал аръяғы ижади йәштәрен берләштереүсе “Ирәндек” менән бергә киңәйтелгән ултырыш үткәреләсәге хаҡында әйтелә, уға Мостай Кәрим, Булат Рафиҡов кеүек билдәле яҙыусыларҙың киләсәге хәбәр ителә һ.б. Бындай хаттан һуң ниндәй район етәксеһе үҙ төбәгендә үтәсәк оло байрамға битараф ҡалһын?! Хат артынан уҡ үҙем районға килеп төшәм үә ултырышты ойоштороу Яҙыусылар союзы тарафынан миңә йөкмәтелгәнлеген, Әсғәт Мирзаһитовтың тура районның беренсе кешеһенә инергә ҡушҡанлығын хәбәр итәм.

Әйткәндәй, минең туранан-тура район хужаһына мөрәжәғәт итеүем комсомол етәкселәренә, партия райкомындағы түбәнерәк дәрәжәләге түрәләргә оҡшап етмәй торғайны. Әммә, ултырышты юғары кимәлдә үткәреү фәҡәт урындағы  хужаға бәйләнгәнгә күрә, бер нимәгә ҡарамай, был ғәҙәтемдән бер ҡасан да баш тартманым, һәр саҡ тик районның беренсе етәксеһе менән эш иттем. Ошо сәбәпле бар ултырыштарҙы кәрәкле сифатта үткәрергә өлгәшә алдым, тим. Әлбиттә, йыш ҡына Әсғәт Мирзаһитовтың хатында күрһәтелгән оло шәхестәр районға килә алманы, хәйер, хөрмәтле ағайҙарыбыҙҙың килеүенең кәрәге лә юҡ

ине, беҙ уларһыҙ ҙа ултырыштарҙы ла, осрашыуҙарҙы ла бынамын итеп үткәрә инек. «Оло шәхестәр килә» тигән хәбәрҙең төп маҡсаты – ултырышты, әҙәби кисәләрҙе, йәш яҙыусыларҙы ҡаршылау һәм оҙатыуҙы тейешле кимәлдә ойоштороуҙа ярҙам итеү ине бит. Абруйлы исемдәр, ысынлап та, үҙ бурысын үтәне, улар килә тип район ныҡ әҙерләнә, ә инде шуларға тигән һый-хөрмәткә Урал аръяғында йәшәүсе ябай, йәш, әммә талантлы яҙыусылар эләгә ине. Йәштәр быға бик ҡыуана, әҙәбиәт донъяһында һәр саҡ ошондай матур, бай, йәмле тормош көтә, тип ышана ла бер нәмәгә ҡарамай әҙәбиәткә ныҡлап килергә, үҙҙәренең талантын асырға тырыша торғайны.

Йылына 4-5 тапҡыр йыйылып, 1983 – 1986 йылдарҙа беҙ “Ирәндек” берекмәһенең барлығы 17 ултырышын ойошторҙоҡ, 21 ҡулъяҙма тикшерҙек, шуларҙың 14-е аҙаҡ китап булып сыҡты.

Һәр ултырыш ошондайыраҡ тәртиптә үткәрелә ине. Беренсе көн иртәнсәк районға киләбеҙ. Беҙҙе алдан билдәләнгән урында, тәғәйенләнгән ваҡытта ихлас ҡаршылайҙар, шунан көн эсендә дүрт-биш урында уҡыусылар, колхозсылар менән осрашабыҙ, ә кискеһен район үҙәгендә төп әҙәби кисә һәм мәжлес ойоштороla. Икенсе көн иртәнсәк берекмәнең ултырышын үткәрәбеҙ, ҡулъяҙма тикшерәбеҙ ҙә, төшкө сәй эскәндән һуң, киләһе осрашыуҙың үткәрәһе урынын, көнөн тәғәйенләп, тикшереләһе ҡулъяҙмаларҙы билдәләп таралышабыҙ. Ултырыштарҙың нисек үткәнлеген, ауыл эшсәндәре менән ҡайһылайыраҡ осрашҡаныбыҙҙың барыһын да һөйләү мөмкин түгел. Шуға 1983 йылдың 19-20 ноябрендә Әбйәлил районында үткән осрашыуҙарыбыҙҙы һәм ултырыштарыбыҙҙы тулыраҡ бәйән итмәксемен. Ул “Ирәндек” әҙәби берекмәһенең йөҙөн, кимәлен, осрашыуҙарҙың атмосфераһын, иң мөһиме, халыҡтың шул йылдарҙағы рухын һәм әҙәбиәткә ниндәй йылы ҡараштa булғанлығын күрһәтә, тип уйлайым.

### Әбйәлил – ҡунаҡсыл ил

Ҡыштың яңы ғына нығынып аяҡҡа баҫҡан осоро. Һалҡынса. Күңелдәрҙе арбап, йөрәктәргә илһам өҫтәп иртәнән бирле ябалаҡлап ҡар яуа. Алда үҙҙәрен көткән осрашыуҙарҙан йәш шағирәләр, йәш шағирҙар тулҡынлана ла, шул уҡ ваҡытта уны ашҡынып көтә лә. Шулай булмай ни! Улар бит айҙар буйы яңғыҙ ҡалып ижад иткән әҫәрҙәре тураһында үҙҙәренең яҡташтары алдында отчет бирергә тейеш. Нисек ҡабул итерҙәр уҡыусылар уларҙың эштәрен, яратырҙармы, әллә, киреһенсә, битараф ҡалырмы? Йәш яҙыусы өсөн был бит шундай мөһим!

Әйтергә кәрәк, йәш яҙыусыларҙан ғына торған делегацияның ауылдан-ауылға әҙәби осрашыуҙар үткәрергә йыйыныуы – әбйәлилдәр өсөн яңы күренеш. Етмешенсе йылдар башында бындай сығыштарҙы үткәреү тураһында уйлау ҙа мөмкин түгел ине. Әммә 1976 йылда КПСС-тың Үҙәк Комитеты “Йәш ижади көстәр менән эште яҡшыртыу тураһында”ғы ҡарары ҡабул ителгәндән һуң, ул йылдарҙа беҙҙең республикала йәш яҙыусыларға ҡарата хәстәрлек бермә-бер үҫте. Етмешенсе йылдарҙа тәүге китабын сығарыусылар һаны бер-ике кешенән артмаһа, һикһәненсе йылдар башында ғына егерменән ашыу йәш яҙыусы үҙенең тәүге китабын ҡулына алыу бәхетенә иреште. Урал аръяғындағы дүрт районның ижади йәштәрен берләштереп торған “Ирәндек” берекмәһе лә ошо ҡарарҙың бер емеше ине.

“Ирәндек”тең Асҡарға тәүге килеүе. Ошоға тиклем был яҡтарҙың йәш ижади көстәре гел генә Сибай ҡалаһында, ара-тирә генә Баймаҡта осрашты. Ләкин сентябрь айындағы үҙҙәренең ултырышында йәш яҙыусылар, әгәр беҙ дүрт районға ла ҡараған әҙәби берекмәнең ағзалары икәнбеҙ, һәр районға ла “Ирәндек”те алып барырға, шундағы уҡыусылар менән осрашып, улар алдында ижади отчет тоторға тейешбеҙ, тигән фекергә килделәр. Район етәкселәре лә был уйҙы хупланы.

Хәҙерге заманда яҙыусыларыбыҙ барып етмәгән бер генә мөйөш ҡалмаһа ла, әбйәлилдәр ҙә уларҙың күбеһен күреп белһә лә, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен үҙ ауыҙҙарынан ишетһәләр ҙә, әле билдәһеҙ булған, ләкин ижади дәрттәре ташып, күңелдәренән дә, йөҙҙәренән дә йәшлек тыны бөркөп торған шағир-шағирәләр менән ҡайҙа ла ҡыуанып осрашырға риза булдылар. Эргәндә генә эшләп йөрөүсе, һинең менән йәнәш йәшәүсе яҙыусыларҙың ижады менән танышыу күңелдә бөтөнләй икенсе хис, тойғо уята бит. Үҙ ауылына, үҙ тауына бағышлап яҙған шиғри юлдарҙы тыңлаған һәр кеше уны уратып алған матурлыҡты яңы күргәндәй тирә-яғына ғәжәпләнеп тә, һоҡланып та ҡарап ҡуя, шул уҡ ваҡытта үҙенең янында ябай колхозсы, йә булмаһа уҡытыусы булып эшләүселәрҙең шиғри таланты менән ғорурланыу ҙа тыуа күңелендә.

Беҙҙең делегация составында Әбйәлил районының төрлө ауылдарында уҡытыусы булып эшләп йөрөүсе Мәүҙиға Рәхмәтова, Зөһрә Кашапова, Фәнүзә Биктимерова исемле йәш шағирәләр ҙә бар ине. Шуныһы ҡыҙыҡлы: улар сәхнәнән залда ултырыусыларға исемләп өндәшеп, уларға арнаған әҫәрҙәрен ҙур бер тулҡынланыу менән уҡыны. Шуға күрә лә йәш шағирәләрҙең сығышынан һуң һәр саҡ дәррәү ҡул саптылар, оҙаҡ ебәрмәйенсә яңынан-яңы шиғыр уҡыуҙарын һоранылар.

Был өс Әбйәлил ҡыҙынан башҡа, беҙҙең төркөмдә районның тағы ике йәш шағиры бар. Улары – районның “Осҡон” гәзитенең хеҙмәткәрҙәре Гөлшат Әхмәтҡужина менән Самат Фәйзуллин. Баймаҡ ҡалаһынан өс шағир килгән: электрик Рәшит Туйсин, балта оҫтаһы Әғзәм Ишморатов, район радиоһы редакторы Буранбай Исҡужин. Сибайҙан да делегация составында өс кеше: педагогия училищеһының башҡорт теле уҡытыусыһы Рәсимә Ураҡсина, шул уҡ училищеның студенткаһы Фирүзә Алсынбаева һәм ошо юлдарҙың авторы. Йәш шағирҙар, яҙыусылар төркөмөн Әбйәлил райкомының агитация һәм пропаганда бүлеге мөдире Әшрәф Әсғәт улы Илһамов оҙатып йөрөнө.

Асҡар уҡыусылары алдында сығыш яһағандан һуң, йәштәрҙе тейәп алған автобус, яңы ҡар менән ҡапланған яландарҙы кисеп, районның тау зонаһына ҡарай елде. Бында инде “Ирәндек” ағзаларын район эшсәндәре менән осрашыуҙар көтә ине.

Тәүге тұҡталыш – Амангилде ауылында. Клуб халыҡ менән шығырым тулы. Йәш яҙыусыларҙың тулҡынланыуы йөҙҙәренә сыҡҡан. Әммә ауылдың пионерҙары уларға хөрмәтләп икмәк-тоҙ тапшырғас, ҡотлап йыр бүләк иткәс, улар бер аҙ тынысланa төштө. Ә инде шул уҡ уҡыусылар “Ирәндек” берекмәһенең һәр ағзаһының икмәккә, хеҙмәткә арналған шиғырҙарын ҡысҡырып уҡып ишеттергәс, тағы ла Амангилде мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы Булат Әйүповтың Гөлшат Әхмәтҡужинаның һүҙҙәренә яҙған “Студент саҡтар” һәм “Юлдар” исемле йырҙарын башҡарғас, йәш шағирҙар үҙҙәре лә илһамланып сығыш яһарға тотондо. Был ваҡытта уларҙың йөҙҙәрендәге тулҡынланыу һыпырып ташлағандай юҡ булғайны.

Эйе, халыҡ яратты яҡташтарының ижадын. Шуға ла йәштәрҙең әҙәбиәттәге тәүге аҙымдарын хуплап, уларҙы яңы бейеклектәр яуларға ҡеүәтләп, дәррәү ҡул саптылар. Ошо минутта ауыл эшсәндәре яҡташтарының күңелдәргә үтеп инеүсе шиғырҙарын тыңлап ғорурланмаған тиһеңме лә, халыҡтың йотлоғоп тыңлауын күреп, йәш шағирҙар үҙ ижадының кәрәклеген тоймаған, яңынан-яңы әҫәрҙәр яҙыу өсөн илһамланмаған тиһеңме?! Улар ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла бер үк тойғолар кисерҙе, бер үк ут эсендә янды. Шулай булғас, кәрәк, кәрәк ул бындай байрамдар!

Йәш яҙыусылар Амангилде колхозсылары һәм уҡыусылары менән иҫтәлек өсөн клуб алдындағы Ленин һәйкәле янында фотоға төштөләр ҙә ары юлландылар.

### Берекмәнең даны

Райондағы байрамдың иртәгәһенә, йәғни 1983 йылдың 20 ноябрендә, "Ирәндек" ултырышында Рәсимә Ураҡсинаның шиғырҙар йыйынтығы тикшерелде.

Аҫҡарҙағы ултырышта Сибайҙан Наил Ғәйетбаев, Фирүзә Алсынбаева, Әбйәлилдән Самат Фәйзуллин, Зөһрә Кашапова, Гөлшат Әхмәтҡужина, Фәнүзә Биктимерова, Мәүҙиға Рәхмәтова, Шәмсетдинов М.Р. ("Осҡон" гәзитенең баш мөхәррире), Баймаҡтан Рәшит Туйсин, Буранбай Исҡужин, Әғзәм Ишморатовтар ҡатнашып, Рәсимәгә ҡулъяҙмаһын яҡшыртыу өсөн шәп кәңәштәр бирҙе һәм йыйынтығын китап итеп сығарырға тәҡдим яһаны.

Ул осор өсөн был тәҡдим ҙур яңылыҡ ине. Сөнки ошоғаса фәҡәт Яҙыусылар союзы секцияһы ғына ҡулъяҙманы «китапҡа әҙерелдерергә» рөхсәт бирә торғайны. Ә беҙ, һис тә ҡурҡып тормай, шундай яуаплылыҡты үҙ өҫтөбөҙгә алғанбыҙ. Иң ҡыуаныслыһы шул: беҙҙең тәҡдим буйынса Рәсимәнең китабы бер нисә йылдан донъя күрҙе.

"Ирәндек»селәр «Киләһе ултырышты 1984 йылдың 28 ғинуарында Баймаҡ ҡалаһында үткәрергә, унда Рәшит Туйсиндың ҡулъяҙмаһын тикшерергә, уға шағир Булат Рафиҡов менән Аҫылғужа Баһумановты саҡырырға» тигән ҡарар сығарып, үҙҙәре йәшәгән, эшләгән төбәктәргә таралышты. Алға китеп шуны әйтәм: ултырышҡа Аҫылғужа килә алманы, әммә Булат Рафиҡов менән ғинуарҙың һыуыҡ көндәрендә Баймаҡ районында оло кимәлдәге бик күп осрашыуҙар үткәрҙек. Булат ағай "Ирәндек"тең эшенә юғары баһа биреп ҡайтып китте, аҙаҡ яҙыусылар йыйылышында ошо хаҡта шатланып һөйләгән.

"Ирәндек"тең данлы, матур, бай йөкмәткеле үткән күп ултырыштарында ҡатнашҡан талантлы шағир Рәйес Түләков бер мәл әйтеп һалды: "Наил ағай, һин шул ултырыштарҙы иҫ киткес итеп үткәрә инең... Икмәк-тоҙ менән ҡаршылайҙар, клубта халыҡ тулы була ине. Һәр кемгә, шиғыр уҡығас, оҙаҡ итеп ҡул сабалар, киренән саҡырып сығаралар. Аҙаҡтан һый ойошторалар, һәм беҙ, яҙыусыларҙың тормошо һәр саҡ шулай була икән, тип әҙәбиәткә килдек. Ә баҡһаң... Һин беҙҙе алдағанһың!.." Эйе, мин йәш таланттар өсөн бер аҙ алдатҡыс донъя ойошторғанмындыр ул саҡта, алтын тауҙар вәғәҙә иткәнмендер. Әммә, ни генә булһа ла, 80-се йылдарҙа "Ирәндек" берекмәһенә йөрөгән йәштәрҙән бөгөн республикабыҙ әҙәбиәтенең тотҡаһы булған әҙиптәр үҫеп сығыуы оло ҡыуаныс түгелме ни?! Һүҙҙәремдең буш түгеллеген аңлатыу өсөн уларҙың исемдәрен генә һанап китәйек. Бына улар: Гәрәй Исхаҡов, Мөслим Әбсәләмов, Ҡадир Әлибаев, Буранбай Исҡужин, Рәсимә Ураҡсина, Фәүзиә Юлдашбаева, Әлфиә Ҡырымғужина, Рәмил Ҡолдәүләтов, Әхмәр Үтәбаев, Рәйес Түләков, Нияз Мәһәҙиев, Лилиә Ҡәйепова, Фәнил Әбделмәнов, Рәмилә Ибраһимова, Зилиә Ҡужабәкова, Фәнүзә Биктимерова, Зөһрә Кашапова, Самат Фәйзуллин, Әнүәр Хәсәнов, Булат Әйүпов һәм башҡалар. Уларҙың күбеһенең ҡулъяҙмалары беренсе булып "Ирәндек"тә тикшерелде, нәшриәткә тәҡдим ителде һәм китап булып донъя күрҙе.

Беҙҙә ултырыштарҙың даими үтеүе хаҡында хәбәр Өфө әҙиптәре араһында тиҙ таралды. Бер мәл оло, билдәле яҙыусылар үҙҙәре "Ирәндек"те килеп күрергә, уның ултырышында, уҡыусылар менән осрашыуында ҡатнашырға теләүен әйтә, саҡырыу алмағандары өсөн үпкәләүҙәрен һиҙҙерә башланы. Шуға күрә тиҙҙән беҙ ултырышыбыҙға олпат яҙыусыларҙы ҡатнаштырыу буйынса бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡтар кисермәнек. Бына шул йылдарҙа Өфөнән килеп, беҙҙең ҡулъяҙмаларҙы тикшереүҙә, әҙәби кисәләрҙә ҡатнашҡан яҙыусыларҙың тулы булмаған исемлеге: Булат Рафиҡов, Яныбай Хамматов, Әнғәм Атнабаев, Динис Бүләков, Рәшит Солтангәрәев, Ғәлим Дәүләди, Роберт Байымов, Мирас Иҙелбаев, Аҫылғужа Баһуманов, Муса Сиражи, Рауил Ниғмәтуллин, Рәдиф Тимершин, Сабир Шәрипов һәм башҡалар. Олпат әҙиптәрҙең талапсанлығы, файҙалы кәңәштәре

йәш яҙыусыларҙың ҡулъяҙмаларын яҡшыртырға, аҙаҡ китап итеп сығарыуға ныҡ ярҙам итте.

“Ирәндек” берекмәһенең Өфөнән алыҫта, Урал аръяғында йәшәгән йәштәр өсөн рухи яҡтан ниндәй урын тотҡанлығын аңлатыу өсөн 1984 йылда көндәлегемә яҙған юлдарҙы килтерәм. Был һүҙҙәр аҫтына “Ирәндек”тең һәр ағзаһы ла ҡулын ҡуйырға риза булыр ине, тип уйлайым.

“Ирәндек”, “Ирәндек”! Һин булмаһаң, нисек йәшәр инек икән беҙ? Өс айға бер тапҡыр ғына йыйылһаҡ та, ике генә көн бергә булһаҡ та, ҡәләмдәштәрем менән осрашыуҙарҙан күпме ҡыуаныс, күпме дәрт, күпме илһам алам мин! Нисек һағынышып осрашабыҙ ҙа, нисек моңайышып хушлашабыҙ! Ә ҡайһылай ҡунаҡсыл ҡаршылайҙар беҙҙе ауылдарҙа, сығыштарыбыҙҙы нисек ихлас тыңлайҙар! Шул саҡ үҙебеҙҙең дә, әҙәбиәттең дә халыҡҡа ни тиклем кәрәк икәнлеген аңлағандай булабыҙ. Ләкин “Ирәндек”тең ултырышы, нисек кенә матур, файҙалы ойошторолмаһын, шундай тиҙ үтеп китә һәм хушлашыр мәл етә. Иң ҡыйыны – ошо. Һәм беҙ йәнә өс ай буйы осрашыуыбыҙҙы иҫләп һағышланабыҙ, киләһе ултырышты түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ. Тиҙерәк саҡыр беҙҙе, йый үҙ яныңа, һөйөклө “Ирәндек”!..

## Буранбай буран туҙҙыра

Әлбиттә, берекмәлә осрашыуҙар ойоштороуҙан, ҡулъяҙмалар тикшереүҙән башҡа эштәр менән дә шөғөлләнергә тура килә ине.

...“Ирәндек”тең тәүге ултырыштарында уҡ үҙенең үҙенсәлекле һәләте, тапҡыр теле менән Буранбай Исҡужин тигән йәш шағир иғтибарҙы йәлеп итте. Уның тиҙ арала китабын сығарыуына ла, ысын яҙыусы булырына ла бер кем дә шикләнмәне. Әммә ҡапыл... юҡҡа сыҡты: берекмәнең ултырышына йөрөмәй башланы, ҡайҙа икәнлеген бер кем дә белмәй. Беҙ уны эҙләргә тотондоҡ, ләкин бер нисек тә таба алмайбыҙ. Ара-тирә хәбәр ишетелеп ҡала: Себергә олаҡҡан, әҙәбиәтте ташлаған. Бер мәл ишетәбеҙ: тыуған яҡтарына ҡайтҡан һәм – ҡот осҡос яңылыҡ: эшендә уң ҡулын өҙҙөргән... Мин Баймаҡта эшләп йөрөгән талантлы шағирҙарға – Рәйес Түләков, Әхмәр Үтәбаев, Нияз Мәһәҙиевтарға – Буранбайҙың ниндәй талантлы шәхес икәнлеген аңлатҡандан һуң, уны эҙләп табыуҙарын үтендем. Был һөйләшеү “Ирәндек”тең Сибайҙа үткән бер ултырышынан һуң булғайны. Рәйес, Әхмәр, Нияз минең Буранбай хаҡындағы һүҙҙәрем йоғонтоһо аҫтында автобуста Сибайҙан Баймаҡҡа ҡайтып барғанда, пассажирҙар араһындағы тапҡыр һүҙле шаян егеткә иғтибар итәләр, етмәһә тегенең уң ҡулы яртылаш юҡ... Шағир егеттәр шунда уҡ унан һорайҙар: “Һин Буранбаймы?” “Эйе”, – ти теге. Шулай итеп, Буранбайҙы таптыҡ һәм киләһе ултырышҡа саҡырып алып килдек.

Тәү мәл Буранбай үҙенең ижадына бик битараф ине. Элек яҙған бар хикәйәләрен дә тиерлек юғалтып бөткән. Шуға ҡарамай, 1984 йылдың декабрендә булған республиканың йәш яҙыусылар конференцияһына “Ирәндек” берекмәһе исеменән Буранбайҙың юморескалар йыйынтығын тикшереүгә ҡуйҙырҙым. Шунда уҡ хикәйәләрен табырға, тапмаһа, киренән яҙырға ҡуштым. Ул ныҡыш егет булып сыҡты: күп тә үтмәне, алдыма хикәйәләр йыйынтығын килтереп тә һалды. Уҡып сыҡтым, ашығыбыраҡ әҙерләгән, әммә конференциянан нәшриәт исеменә «Китапты сығарырға!» тигән фатиха алырға кәрәк ине, ә хикәйәләрҙе аҙаҡтан да еренә еткерергә була бит. Ләкин нисек итеп Әнғәм Атнабаев, Рәсих Ханнанов, Ибраһим Абдуллин, Рәдиф Тимершин кеүек олпат яҙыусыларҙың ыңғай фекерен алырға? Хәйлә ҡорҙом. Секция ултырышында беренсе булып һүҙ алдым да Буранбайҙың йыйынтығын бөтә яҡтан ныҡ ҡына тәнҡитләнем, бар етешһеҙлектәрен асып һалдым, хатта буласаҡ китапты юҡҡа сығарҙым. Аҙаҡтан Буранбай: “Һин шулай сығыш яһағас, мин ныҡ аптыраным, былай булғас,

баҫылмай икән, тип ҡурҡтым”, – тигәйне. Әммә мин һүҙемде былай тип тамамланым: “Буранбай бик талантлы яҙыусы, әле ваҡыт бар. Ул мин әйткән бар етешһеҙлектәрҙе төҙәтеүенә шигем юҡ. Мин уның ҡулъяҙмаһын китап итеп сығарырға тәҡдим итәм”. Минән һуң ултырыштағы бар яҙыусылар: “Наил бар етешһеҙлектәрҙе әйтте, ҡабатлап тормайыҡ”, – тинеләр ҙә Буранбайҙың ҡулъяҙмаһын китап итеп сығарыу хаҡындағы тәҡдимгә ҡушылдылар. Күп тә үтмәй, Буранбайҙың был китабы донъя күрҙе. Шунан һуң Буранбай ижадҡа ныҡлап тотондо. Уның буран туҙҙырып әҙәбиәткә кире ҡайтыуында “Ирәндек” берекмәһе ҙур роль уйнаны, тип уйлайым.

**Фәүзиә**

1985 йылдың ҡыш уртаһында ул осор Башҡортостан Яҙыусылар союзының яуаплы сәркәтибе булып эшләгән билдәле яҙыусы Булат Рафиҡов Сибайға шылтыратты.

Баҡһаң, обкомға шағирә Фәүзиә Юлдашбаеваны насарлаған хат килгән икән. Имеш, Фәүзиә эсә, уйнаш итә. Ни өсөн шундай кешенең шиғырҙарын гәзит-журналдарҙа баҫаһығыҙ, тип асыулана икән ҡайһы бер кешеләр. Булат ағай шуны Юлдыбайға барып тикшерергә, аҙаҡ Союзға хат яҙырға ҡушты.

Ҡыштың һалҡынса көнө. Ҡар яуып тора. Мин автобус менән Баймаҡҡа ҡарай юлға сыҡтым. Ярты юлды үткәс, көслө буран күтәрелде. Бер мәл автобус туҡтап ҡалды. Ҡараһаҡ, алда тиҫтәләгән машиналар, автобустар батып ултыра. Кире боролоп булмай, юл тар. Буран көсәйгәндән-көсәйә. Бер метр ситкә китһәң, автобус күренмәй. Шуға автобустан сыҡмайбыҙ. Бер ваҡыт ҡараңғы төштө, автобус эсендә ултырып сыҙамаҫлыҡ һыуыҡ булып китте. Ә минең аяҡта – итек, өҫтә йоҡа ғына пальто. Башҡа пассажирҙар ҙа еңел кейенгән. Ныҡ өшөтә башланы. Аптырағас, биҙрәгә бензин ҡойҙоҡ, эсенә сепрәк һалдыҡ, шуны автобус уртаһына ҡуйып яндырҙыҡ, алмашлап биҙрә янына килеп йылынабыҙ. Ҡулдар, биттәр ҡап-ҡара ҡором булып бөттө. Иң ҡурҡынысы: был хәлдән ҡотолоу юлын белмәйбеҙ. Бензин әҙәйә, әгәр ул бөтһә, туңып үләбеҙ бит. Ҡар ҙа автобусты төрлө яҡтан күмә бара. Башҡа төрлө ҡурҡыныс уйҙар килә. Буранда кешеләрҙең туңып үлеүе хаҡындағы ваҡиғалар иҫкә төшә. Үлемебеҙ ошомо икән ни?..

Төн уртаһында ғына беҙгә Баймаҡтан ярҙам килде. Райондың етәкселәренең береһе – Сырлыбаев бер нисә трактор менән юл ярып килеп етте беҙгә. Шулай итеп, машиналар колоннаһы, тракторҙар артынан теҙелешеп, таңғы биштәрҙә Баймаҡҡа килеп инде. Мин ҡунаҡханала йоҡланым, Юлдыбайға барып торманым, Сибайға ҡайттым да Булат ағай Рафиҡовҡа: “Теге хаттағы факттар дөрөҫләнмәне, Фәүзиә эскесе лә, уйнашсы ла түгел – бик матур йәшәп ята”, – тип яуап ебәрҙем.

Шулай итеп, Фәүзиә Юлдашбаеваға ҡаршы башланған «ҡара эш» туҡтатылды. Шул йылдың апрель айында Стәрлетамаҡта үткән йәш шағирҙар конференцияһында осраштыҡ беҙ Фәүзиә менән. Ул миңә мең рәхмәттәр әйтте. Баҡһаң, Фәүзиә һөт ҡабул итеү пунктында эшләй икән. Һауынсыларҙан һөт алған саҡта ҡуйылығын күрһәтер кәрәк. Һөткә һыу ҡушыусы һауынсылар, үҙҙәренең фашланыуына йәне көйөп, Фәүзиәнән үс алыу ниәте менән, теге ғәйбәт хатын яҙғандар икән обкомға. Мин, Фәүзиәне яҡшы белгәнгә, ҙур ышаныс менән уны аҡлаусы хат ебәргәйнем дә инде Булат Рафиҡовҡа. Бына шундай хәлдәр ҙә була ине “Ирәндек»тә.

**“Ирәндек” менән хушлашыу**

1986 йылдың мартында Аҡъярҙа “Ирәндек” әҙәби берекмәһенең сираттағы ултырышы һуңғы тапҡыр минең етәкселектә үтте. Шул йылдың көҙө мин Мәскәүгә Юғары театр курстарына уҡырға киттем, унан һуң Өфөгә күстем.

Әкренләп “Ирәндек” әҙәби берекмәһенең башҡа ағзалары ла: Рәйес Түләков, Нияз Мәһәҙиев, Әхмәр Үтәбаев, Рәмил Дәүләтколов, Гөлшат Әхмәтҡужина, Лилиә Ҡәйепова, Рәсимә Ураҡсина һәм башҡалар Өфөлә төпләнде, әҙәбиәтебеҙ йөгөнә ныҡлап егелде. Әммә Урал арьяғында Мөслим Әбсәләмов, Ҡадир Әлибаев, Фәүзиә Юлдашбаева, Буранбай Исҡужин кеүек көслө әҙиптәр ҡалды. Уларҙың ижады һәм ижтимағи эше Яҙыусылар союзының Сибай төбәк ойошмаһының нигеҙ ташы булды ла инде.

Бөгөн Сибай яҙыусылар ойошмаһы актив һәм ырамлы эшләй икән, бында 35 йыл элек билдәле яҙыусы Рәшит Солтангәрәев инициативаһы менән ойошторолған “Ирәндек” әҙәби берекмәһенең, уның ағзаларының өлөшө бик ҙур.

### Ҡәләмдәштәр менән алыштар

Үрҙә әйтеүемсә, миңә шахмат буйынса спорт мастерлығына кандидат нормаһын үтәргә, мастерлыҡҡа ла балдар яуларға тура килде. Минең менән бергә кандидат, мастер дәрәжәһен алғандарҙың күбеһе гроссмейстер булып бөттө. Мәҫәлән, Сергей Долматов (заманында Гарри Каспаровтың, Рәсәй йыйылма командаһының тренеры), Юрий Аверкин, Евгений Свешников һ.б. Мин ижади көсөмдө яҙыусылыҡҡа йүнәлттем, шахматты ташланым һәм мастерлыҡҡа кандидат кимәлендә тороп ҡалдым. Әммә был кимәл дә бик юғары һәм ябай шахматсыны ферзеһеҙ, ладьяһыҙ йәки таҡтаға ҡарамайынса уйнап, анһат ҡына еңергә мөмкинселек бирә. Һәм быны мин генә түгел, мастерлыҡҡа һәр кандидат эшләй ала. Әммә шахмат уйнаусы яҙыусылар, журналистар, артистар араһында ла көслө генә уйнаусылар бар. Тик кандидат кимәлендәге дәғүәсе осрамаһас, улар минең яҡшы уйнауымды бер нисек тә ҡабул итә алмайҙар, еңелһәләр – үпкәләйҙәр, асыуланалар, хәйләкәрлектә ғәйепләйҙәр. Ошо осрашыуҙар мәлендә төрлө мәҙәк хәлдәр ҙә булғылай. Шуныһы ғына уңайһыҙландыра: ҡәләмдәш әҙиптәрҙе гелән еңергә тура килгәс, яҙмаларым маҡтанған кеүегерәк сыҡһа, бигәйбә. Хәйер, бөтәһе лә – ҡәҙимге тормоштан.

***

Тәүҙәрәк үҙемдең көслө шахматсы икәнемде ҡәләмдәштәргә белгертмәй йөрөнөм. Нимәгә кәрәк? Улар менән уйнарға йыйынмайым, сөнки, күреп йөрөүемсә, улар миңә ҡарағанда күпкә йомшаҡ уйнай. Шулай ҙа Сибай беренселегендә даими ҡатнашып, чемпион исемен яулай торғайным, ошо хаҡта йыл һайын “Совет Башҡортостаны” гәзитендә хәбәр ҙә күренеп ҡала ине.

Минән яҙыусылар һорай:

– Сибайҙың чемпионы Наил Ғәйетбаев, имеш. Шул һин түгелме ул?

– Юҡ, – тип алдайым да ҡуям. – Минең аҙаш ул.

Отҡор уйнауым барыбер әкренләп беленде.

...80-се йылдарҙа Агиш Ғирфанов менән Стәрлетамаҡҡа командировкаға барҙыҡ. Кис Агиш ағай урындағы бер журналист менән шахмат уйнарға тотондо. Мин уйнай белмәйем тигән һылтау менән карауатта китап уҡып ятам. Былар оҙаҡ ҡына уйнаны, талашып та китәләр. Ишетеп ятам: журналист йышыраҡ еңә.

Бер мәл Агиш Ғирфанов әсенеп әйтеп һалды:

– Эх, Наил, исмаһам, һин уйнай белмәйһең! Белһәң, ярҙам итер инең. Кәрәкте бирә бит был!

Мин шаяртмаҡ булдым. Шуға торҙом да әйттем:

– Өйрәтегеҙ һуң. Мин хәҙер уны еңәм!

Улар икәүләшеп көлөштө. Ә мин юрамал ныҡыша башланым. Шунан тегеләр фигураларҙың нисек йөрөгәнен күрһәттеләр ҙә теге журналистҡа ҡаршы уйнарға ултырттылар. Журналист ферзһеҙ уйнарға булды. Мин юрамал еңелдем, шунан:

– Миңә ферзде лә, королде лә һаҡларға тура килә, шуға еңелдем, ә һеҙ королде генә һаҡлайһығыҙ, шуға еңдегеҙ, – тинем.
Агиш ағай менән журналист шарҡылдап көлдөләр.
– Ферзь – иң елле фигура!
Ә мин үҙемдекен тылҡыйым:
– Әйҙә, хәҙер мин ферзһеҙ уйнайым. Шул саҡта мин еңәм!
Журналист көлдө лә ризалашты. Мин ферзһеҙ уйнағас, бөтә көсөмдө һалдым да еңдем!
Агиш ағай менән журналистың күҙе шар булды. Улар бер ни аңламаны.
– Әйҙә, хәҙер һеҙ ферзһеҙ уйнағыҙ әле, – тим. – Ул саҡта һеҙгә уйнауы еңел буласаҡ.
Журналист ферзһеҙ уйнағайны, мин юрамал еңелдем.
– Бына күрәһегеҙме, ферзь уйнарға ҡамасаулай ғына!
Инде һуң ине. Тағы бер-ике партия уйнаныҡ. Әммә ферзһеҙ уйнаған кеше гел еңде, ферзлеһе еңелде. Ахырҙа журналист башын тотоп ҡайтып китте.
Иртәгәһенә Өфөгә юлландыҡ. Автобуста Агиш ағай төпсөнә башланы:
– Юҡ, улай булмай! Нисек инде ферзһеҙ еңергә мөмкин. Һин алдашаһың. Һин шәп уйнайһың!
Ағайҙы бер аҙ аптыратҡандан һуң, үҙемдең кандидат икәнлегемде әйтергә тура килде. Әҙип автобус яңғыратып оҙаҡ ҡына көлдө. Ана шулай әҙәби мөхиттә минең көслө шахматсы икәнлегем билдәле булды.

***

Шағир Аҫылғужа Баһуманов менән бәхәсләшеп китһәң, уға ниндәй генә далил килтермә – ышанмай, һаман үҙенекен тылҡый торған ғәҙәте бар. Бер мәл Аҫылғужаға:
– Наил Ғәйетбай ғәләмәт шахматсы икән. Бөтәһе менән дә йә бер, йә ике ладьяһын йәки бөтөнләй ферзен ташлап уйнай, – тип әйткәндәр.
– Ышанмайым! – тигән Аҫылғужа. – Мин, ферзһеҙ уйнаһа, Карповты ла еңәм!
Осрашабыҙ Аҫылғужа менән :
– Әйҙә, шахмат уйнайыҡ, – ти был.
Мин баш тартам. Сөнки хөрт уйнаған кеше менән шахмат уйнауы ҡыҙыҡ түгел. Ир уртаһы кешегә өс йәшлек бала менән көрәшеүҙең дә ҡыҙығы юҡ бит. Бында ла шундай тойғо.
– Ниңә уйнамайһың? – тип төпсөнә Баһуманов. – Ҡурҡаһың бит.
– Юҡ, барыбер еңеләһең.
– Ҡайҙан беләһең? Әйҙә, бер шешә коньякка уйнайбыҙ. Еңелһәм – түләйем. Еңелһәң – һин ултыртаһың.
– Бер йәшнигең дә кәрәкмәй, слабактар менән уйнауы ҡыҙыҡ түгел.
Аҫылғужа бәхәскә инһә, туҡтай алмай.
– Юҡ, уйнайбыҙ! Юғиһә, һине ҡурҡаҡ тип һөйләйәсәкмен. Минең менән уйнарға ҡурҡты, тип әйтәсәкмен.
– Тик мин ике ладьяһыҙ уйнайым, – тим.
– Ике ладьяһыҙ уйнаһа, мин Карповты ла еңәм!
– Бик һәйбәт. Әйҙә, мине лә ең. Тик бер шарт: әгәр еңелһәң, башҡаса бер ҡасан да уйнамабыҙ.
– Риза.
Тиҙҙән Аҫылғужа мат алды. Ул ваҡиғанан һуң егерме йылдан ашыу ваҡыт үтте. Шағир башҡаса миңә, шахмат уйнайыҡ, тип әйтмәне. Әммә уңайы сыҡҡанда… “О! Наил – бөйөк шахматсы ул!” – тип минең абруйҙы күтәреп ебәрер ине.

***

Шәриф Биҡҡол арыу, ихлас уйнай ине. Әммә мине алдан уҡ: “Ул бик ҡыҙыу кеше, йәне көйһә, шахмат таҡтаһы менән башыңа һуғыуы ла бар”, – тип иҫкәртеп ҡуйҙылар. Шуға күрә ағай бик өгөтләһә лә, унының менән уйнауҙан гел баш тарта инем. Тик бер көндө “Пионер” журналы редакцияһында Динис Бүләковты көтөп ултырһам, Шәриф ағай килеп инде.

– Ә-ә, шахматист! Тотолдоңмо! Фамилияң Ғәбитовмы әле? Мин һине бер ҡайҙа ла ебәрмәйем – уйнайбыҙ.

– Юҡ, Шәриф ағай! Мин ашығам.

– Юҡ! Юҡ! Бер партия уйнамайынса китмәйһең, – Шәриф ағай шахматтарҙы теҙеп тә ҡуйҙы.

Мин шахматҡа яҡын да бармайым. Редакциялағы ҡыҙҙар аптырай:

– Ниңә уйнамайһың? Һине көслө шахматсы, тиҙәр бит.

– Еңелһә бик үпкәләй, һуғыша башлай, тип ишеткәйнем.

– Еңел дә ҡуй.

Ысынлап та, еңеләм дә ҡотолам! Һәм уйнарға ултырҙым. Шәриф ағай ярайһы ғына уйынсы икән. Әммә күп булһа 15 йөрөштән уға мат ҡуйып була ине. Мин, еңелергә уйлағас, юрамал хөрт йөрөш яһайым.

Ағай минең һәр йөрөшкә үҙенсә комментарий яһай:

– Наҙан! Кем индерҙе һине Өфөгә? Иртәгә үк ҡайтып кит! Башҡа күренеп йөрөмә! У, пижон! Һиңә шахмат уйнарға түгел, бәҙрәф көрәргә кәрәк.

Һәр әйткән һүҙе йәнгә тейә, асыуҙы ҡабарта. Әллә еңәйем дә ҡуяйыммы икән, тигән уй ҙа килә башланы башҡа. Әммә ҡыҙҙарға һүҙ биргәс, ныҡ торҙом – еңелдем.

Шәриф ағайҙың нисегерәк ҡыуанғанын күрһәгеҙ! Шул уҡ ваҡытта мине төрлө кәмһетеүсе һүҙҙәр ҙә әйтергә онотманы.

– Һине иҫ китмәле шәп шахматсы, тигән булалар, һин бит бөтөнләй уйнай белмәйһең!

Ярты йылдай үткәс, бер төркөм яҙыусылар Мәскәүгә Яҙыусылар съезына китеп барабыҙ. Бер нисә әҙип купеға йыйылып шахмат уйнай. Араларында Шәриф Биҡҡол да бар. Ул мине күреп ҡалды ла:

– Ниңә уйнамайһың? – тип һорай.

– Уйнағым килмәй, – тим.

Башҡалар күтәреп алды:

– Уға беҙҙең менән уйнауы ҡыҙыҡ түгел, һәммәбеҙҙе ладьяһыҙ ҙа еңә ала.

Шәриф ағай ырғып торҙо:

– Булмаҫ! Мин уны тигеҙ көстәр менән еңә алам. Ғәбитов, әйт шуларға.

Мин өндәшмәнем. Көлдөм дә үҙ купема киттем. Бер мәл Шәриф ағай килеп еткән.

– Ғәбитов, әйҙә әле, әйт шуларға: мин бит һине еңдем бер тапҡыр. Һин ладьяны ла ташлап торманың. Әйт шуларға. – Ағай һөйрәп тиерлек мине теге купеға әйҙәне. – Ғәбитов, әйт, дөрөҫ бит шул хәл: мин һине еңдем!

– Ғәбитов түгел, Ғәйетбаев, – тине кемдер. – Фамилияңды бутаған өсөн мат ҡуяһыңмы әллә шуға?

– Тик мин ике ладьяһыҙ уйнайым, – тинем уға. – Шуға риза булһағыҙ, уйнайым, риза булмаһағыҙ – юҡ.

Шәриф ағайға риза булырға тура килде. Мин ике ладьяһыҙ уйнап, тәү тапҡыр еңгәс, уның сикәләре, муйындары ҡыҙарҙы.

Икенсе тапҡыр еңелгәс, уның танау остарында, маңлайында тир бөрсөктәре килеп сыҡты.

Инде өсөнсөгә лә еңелгәндән һуң, ул ҡып-ҡыҙыл булды һәм:

– Һин бөтөнләй уйнай белмәйһең, размендар яһап ҡына еңәһең, – тип шахмат таҡтаһын осора һуҡты ла купенан сығып китте.

Ошо ваҡиғаға биш-алты йыл үткәс, ул бер осрашҡанда ҡулымды ҡыҫты һәм:
– Һинең фамилияң Ғәйетбаев бит әле. Афарин, шахматты шәп уйнайһың, – тине.

***

Мәскәүгә китеп барабыҙ. Ғәҙәттәгесә, бер төркөм яҙыусылар шахмат уйнай. Мин яндарына бармайым да, ҡыҫылмайым да. Бер мәл юлдаштар үҙ-ара уйнап туйҙылар, ахыры – мине саҡыра башланылар:
– Әйҙә, кил, уйна.
Мин уларҙан ҡотолоу өсөн:
– Мин һеҙҙең бөтәгеҙ менән бер юлы, таҡтаға ҡарамайынса ғына уйнарға ризамын, – тим.
Күптәр таҡтаға ҡарамайынса уйнай алыуҙы белмәй икән, шаҡ ҡаттылар.
– Нисек... ҡарамай?
– Алдыңда буш таҡта ла тормаймы?
– Битен ҡаплап ята ла уйнай.
– Йөрөштө нисек белә һуң?
– Беҙ әйтеп торабыҙ: Кс3 йәки ферзь а4...
– Фигураларҙың ҡайҙа торғанлығын нисек хәтерләй?
– Йәшенеп кенә ҡарайҙыр ул.
– Эргәһенә бер кешене һаҡлап торорға ҡуяйыҡ.
Уйнарға килешкәс, мин купеның өҫкө һәндерәһенә менеп яттым да йөҙөмдө гәзит менән ҡапланым һәм партия башланды. Миңә ҡаршы яҙыусылар араһындағы бөтә көслө шахматсылар уйнай: Сафуан Әлибай, Шәриф Бикҡол, Әнүәр Бикчәнтәев, Сабир Шәрипов, Ғәзим Шафиҡов һәм башҡалар. Бөтәһе унлап кеше. Купеға саҡ һыялар. Төрлөһө төрлө йөрөш тәҡдим итә. Яңылыш йөрөш яһап, фигураларын юғалтыр булһалар, мин иҫкәртәм:
– Улай йөрөмәгеҙ, фигураларығыҙҙы юғалтаһығыҙ.
Тегеләр шаҡ ҡата:
– Әллә бөтәһен дә күрә!
Бер тапҡыр әйттем:
– С3-тә торған атымды d5-кә йөрөйөм.
Бөтәһе бер тауыштан:
– С3-тә атың юҡ, – тип ҡысҡырып ебәрҙеләр.
Мин аптырайым:
– Унда ат булырға тейеш.
Улар:
– Юҡ та юҡ! Һин онотҡанһың, ул атыңды ашаныҡ, – тиҙәр.
– Улайһа, хәҙер партияны бер ҡайҙа ҡарамайынса яҙып бирәм. Мин бөтә партияны башынан аҙағынаса хәтерләйем, – тигәс кенә, тегеләр ғәфү үтенде.
– Ҡара әле, хәтерең яҡшы икән. Беҙ бит, шаяртып ул атыңды урлағайныҡ.
Партия аҙағына яҡынлашты. Яҙыусылар йөрөш яһай. Мин әйтәм:
– Улай йөрөмәгеҙ, юғиһә өс йөрөштән мат!
Тегеләр вариант ҡарай, әммә мин иҫкәрткән матты таба алмай. Ә ул матты ҡуйыу өсөн мин тәүҙә ферзде ҡорбан итәм, шунан мат ҡуям. Яҙыусылар шул ферзде ҡорбан итергә кәрәклеген күрмәй:
– Юҡ мат!
– Бында өс йөрөштән түгел, биш йөрөштән дә мат юҡ.
– Алдаша! Ҡурҡыта!
– Йөрөйбөҙ шул ходты!
– Йөрөйһөгөҙмө? – тип һорайым.
– Йөрөнөк, – тиҙәр.

Мин ферзде ҡорбан иттем дә мат ҡуйҙым.

– Ә-ә, улай булһа, әлбиттә.

Ошо хәлдән һуң миңә шахматта алышырға тәҡдим итеүселәр ныҡ кәмене.

***

1983 йылдарҙа билдәле журналист, һәләтле шахматсы Венер Йәнбәков миңә Матбуғат йортоноң иң көслө журналистары һәм яҙыусылары менән бер юлы 18 таҡтала шахмат уйнау сеансы үткәрергә тәҡдим итте. Мин риза булдым.

– Ситтән көслөрәктәрҙе саҡырайыммы? – тип һораны Венер ағай.

– Саҡыр, – тинем. – Тик барыһы ла журналист йәки яҙыусы булһын.

Сәғәт алты. Матбуғат йортона килһәм, 18 таҡта теҙелгән. Таҡта артында кемдәр генә ултырмай: Әнүәр Бикчәнтәев, Сафуан Әлибай, Шәриф Бикҡол, Тайфур Сәғитов, Агиш Ғирфанов, Миңлеғәли Яҡупов, Рәшит Бикбулатов, Сәлимйән Ғүмәров, Ғәтиәт Үзбәков, тағы әллә кемдәр... Мин ҡаушап ҡалдым. Әгәр еңелһәм, көлкөгә ҡаласаҡмын.

Бер юлы күп таҡтала сеанстар биргәнем бар ине, шуға үҙенә күрә ҡағиҙәһен дә уйлап сығарғанмын. Һәр сеанс ике сәғәткә тиклем һуҙыла, икенсе сәғәттең аҙағына арыта башлай, иғтибар кәмей. Шуға күрә иң көслө 4-5 шахматсыға тәүге ярты сәғәттә уҡ мат ҡуйып, уларҙан ҡотолорға кәрәк. Былары ҡамасауламаған, сибектәрен рәхәтләнеп сүпләргә була. Шуға күрә лә сеанс алдынан Венер ағайҙы ситкәрәк саҡырҙым да һораным:

– Арағыҙҙағы иң көслө дүрт шахматсыны күрһәт.

– Ана тегеһе Гальперин – Матбуғат йорто чемпионы, беренсе разряды бар. – Ағай йәнә өс шахматсыны күрһәтте.

Мин уларҙы юғалтмаҫ өсөн ҡулыма дүрт бит ҡағыҙ алдым да, осраҡлы рәүештә һалған кеүек, ҡағыҙҙарҙы ҡаршыларында ҡалдырып киттем.

Ҡалғаны еңел булды. Гальперинға 12 йөрөштә мат ҡуйҙым, 2-се, 3-сө, 4-се тигән шахматсылар ҙа 15-се йөрөш тирәһендә мат алдылар. Ә урта ҡул шахматсылар һин дә мин уйнап ултыралар. Былар бик асыуланды:

– Әйҙә, тағы уйнайыҡ! Әйҙә, тағы уйнайыҡ! – тип шахмат фигураларын кире теҙеп ҡаранылар. Сөнки быларға үҙҙәре ғүмер буйы еңеп йөрөгән сибегерәк шахматсылар алдында оят ине.

– Юҡ, – тип баш тарттым мин. – Күрмәйһегеҙме, миңә тағы күпме кеше менән уйнайһы бар әле.

Аптырағас, былар башҡаларға ярҙам итергә тотонған булды. Көслөләр ҡамасауламағас, сибегерәк шахматсыларҙы мин тиҙ ҡыҫтым һәм тиҙҙән иҫәп минең файҙаға 17:0 ине инде.

Һуңғы булып Тайфур ағай Сәғитов ултырып ҡалды. Уның позицияһы көслө: ферзь һәм дүрт пешкаһы бар, минеке: ферзь да бер пешка. Дөрөҫ уйнаһа, ағай еңергә тейеш. Бөтә шахматсылар беҙҙе уратып алды. Мин ағайҙың ҡаршыһына ултырғыс килтереп ултырҙым да (физик яҡтан арылған – өҫтәлдең оҙонлоғо бер метр тип алғанда ла, 18 таҡтала 40-ар йөрөш яһау өсөн, улай-былай 80 тапҡыр үткәндә лә, сеансер бер сеанста 7 километрға яҡын юл үтә бит):

– Тайфур ағай, ничья тәҡдим итәм. Юғиһә, ун етегеҙ еңелде. Һин генә ничья яһаһаң – ниндәй ғорурлыҡ!

Башҡалар ҡысҡырыша башланы:

– Ризалашма! Һинең өс пешкаң артыҡ бит, һин еңәһең! Уйна.

Мин тағы һорайым:

– Тайфур ағай, ризаһыңмы?

Яҙыусы аптырап ҡалды, башҡаларға ҡараны. Ә башҡалар:

– Уйна! Еңәһең!

– Улайһа, еңеләһең, – тинем дә өс-дүрт йөрөштә being бөтә пешкаһын да

ашап бөттөм. Хәҙер минең пешкам артыҡ. Уға ферзгә сығырға күп ҡалмаған. Еңеү минең яҡта ине, ләкин мин еңеп торманым.

– 18 : 0 бигерәк насар иҫәп бит. Шуға мин һеҙҙе еңеп тормайым. Әйҙә, бер ничья булһын! – тинем.

Бөтәһе лә ризалашты. Шуға иҫәп 17,5 : 0,5 булды.

***

Матбуғат йортонда сеанс биргәс, Сибайға ҡайтып киттем. Бер айҙан Өфөгә килһәм, Матбуғат йортоноң коридорында “Ҡыҙыл таң” гәзитенең әҙәбиәт бүлеге мөдире, шағир Фәрит Ғабдрахимовты тап иттем.

– Наил, әйҙә, ин әле, – ти был.

Индек.

– Һин бында шахмат буйынса сеанс биргәнһең икән, мин командировкала булып ҡалдым. Әйҙә, бер партия уйнайыҡ әле.

– Ағай, минең ваҡытым юҡ, – тим.

– Бер генә партия?!

– Ярай, тик мин – ладьяһыҙ...

– Юҡ, тигеҙ уйнайбыҙ.

– Миңә ҡыҙыҡ түгел.

– Ярай, улайһа. Уйна ладьяһыҙ.

Мин еңдем.

– Ысынлап та, көслө уйнайһың икән, – тигән булды күңеле төшкән Фәрит ағай.

***

Бер мәл Агиш Ғирфанов тотоп алып, әйҙә, уйнайыҡ әле, тип бәйләнде. Уға ладьяһыҙ бер нисә мат ҡуйғас:

– Яҙыша белмәйһең, ярай, исмаһам, шахмат уйнай беләһең, – тигән булды.

***

1981 йыл Мәскәүҙең Юғары әҙәбиәт курстарына уҡырға килдем. Фойела бер төркөм яҙыусылар шахмат уйнай. Араларында Ғәзим Шафиҡов та бар. Мин эргәләренә бармайым, сөнки ҡыҙыҡ түгел. Бер мәл ишетәм: Шафиҡов бөтәһен дә еңә икән.

Иртәгәһенә ул минең эргәгә килде:

– Ниңә шахмат уйнамайһың? – ти.

– Уйнағым килмәй.

– Ҡурҡаһыңмы? – Ғәзимдең холҡо шулай ҡорораҡ.

– Ҡурҡмайым. Әйтәм бит, уйнағым килмәй.

– Бикбай һине, шәп уйнай, ти ине. Әйҙә, уйнап ҡарайыҡ. Мин бында бөтәһен дә еңәм. Хатта, ана, Чувашияның чемпионын еңдем.

– Һәйбәт булған. Тик мин уйнамайым.

– Уйна, тием! Ултыр! – Ғәзим көслө генә, елтерәтеп мине өҫтәл артына ултыртып ҡуйҙы. – Уйна! Уйнамаһаң, берҙе эләктерәм хәҙер.

Минең дә асыу килде. Бынан үс алырға булдым.

– Ярай, уйнайым. Тик мин ладьяһыҙ уйнайым. Еңелгән һайын ике шешә һыра килтерәһең: миңә һәм үҙеңә.

– Ә һин еңелһәң?

– Мин еңелһәм, үҙем килтерәм.

– Ә ниңә ладьяһыҙ уйнайһың?

– Һыраға барғанда еңелерәк булһын өсөн.

Башланыҡ. Әлбиттә, еңдем. Ғәзим һыраға барманы.

– Әйҙә, тағы уйнайыҡ. Һин еңелһәң – ничья була.

– Мин еңелмәйем. Лутсы барып кил.

– Юҡ, уйнайбыҙ.

Тағы фигураларҙы теҙҙек. Ғәзим еңелде, әммә һыраға бармай, хәрәмләшә. Өсөнсө партияны башлайбыҙ. Ғәзимдең берәй фигураһын ашаһаң, ул йән асыуы менән уң ҡулының бөгөлгән бармағы менән өҫтәл ситенә килтереп һуға. Ҡот осҡос тауыш сыға. Был тауышты ишетеп, бөтә ятаҡ йыйыла башланы.

– Ни булды? Что случилось? Что за драка?

– Вот мазявка! – тип ымлай миңә Ғәзим. – Играть не умеет! Рассчитывает только на зевки! На зевках я тоже умею играть! – Ғәзим уйнап бөтмәгән партияны һибеп ташланы.

– Давай снова! – ти үҙе. – Играй честно! Играй по правилам! А вы смотрите: он рассчитывает только на зевки!

Аптырағас, ҡаҙаҡ шағиры Бахытжан Конопьяновты судья итәбеҙ.

Бахытжан һорай:

– На что играете-то?

– Һыраға, – тием мин.

– Какое пиво? Какое пиво? – тип йәне көйөп китә Ғәзимдең. – Сперва научись играть по-человечески!

Хәҙер мин ҡаршылаша башланым.

– Бахытжан! Беҙ, кем еңелә, шул һыраға бара, тип башланыҡ. Етмәһә, ладьяһыҙ уйнайым. Өс тапҡыр еңелде, килтермәй.

Ғәзим оҙаҡ бәхәсләшкәндән һуң, ошо партияла ла еңелһә, магазинға барырға һүҙ бирҙе судьяға. Һәм еңелгәс, ысынлап та, барып килде. Уға ул көндө күп барырға тура килде һыра артынан.

Ошо сәбәпле, Ғәзим миңә бер аҙ үпкәләп тә йөрөнө. Әммә бер төндө ул мине уята:

– Наил, тор әле! Бахытжанға Ҡаҙағстандан халыҡ шағиры Олжас Сөләймәнов ҡунаҡҡа килгән. Ул мастер спорта икән, өҫтәүенә Ҡаҙағстандың Шахмат федерацияһы председателе. Бөтәбеҙҙе лә еңеп тик ултыра. Беҙ уның менән бер коньякка бәхәсләштек. Мин һин уны еңәһең, тием. Еңәһеңме?

Мин күҙҙе тырнап астым:

– Һин ҡушҡас, еңәм инде.

Таңға тиклем уйнағандан һуң еңдем Олжас абзыйҙы. Көслө генә уйнай икән. Коньягын эстек, шәп ине. Шунан һуң Ғәзим курсташ мине бер аҙ хөрмәт итә башланы.

***

1986 йылдарҙа Юғары театр курстарында уҡыған саҡ. Бер мәл Киевтан ҡайтып килгән Рәдиф Тимершин миңә һуғылды. Аҡсаһы бөткән, минеке лә юҡ тиерлек. Һуңғы аҡсаларҙы йыйып, эргәләге ҙур барға һыра эсергә киттек. Берәр көрөшкә эскәйнек, кеҫәбеҙ таҡырайҙы. Ҡараһаҡ, залдың уртаһындағы бер өҫтәл тирәһенә күмәк кеше йыйылған, бәй, аҡсаға шахмат уйнайҙар.

Рәдиф әйтә:

– Һине бит, шахматты шәп уйнай, тиҙәр. Әйҙә, шуларҙы еңеп, аҡса эшләп ал. Әтеү һыра эсеп тә туймаными, ашарға лә кәрәк.

Мин әйтәм:

– Әйҙә, ҡарайыҡ әле. Бәлки, улар үтә көслө уйнайҙыр. Ыштанһыҙ ҡалыуыбыҙ бар.

Ҡарап торам: уйнауҙары минекенән саҡ ҡына хөртөрәк кеүек. Конға 3-әр һум һалалар ҙа, кем еңә, шул 6 һумды ала. Еңелгән кеше тора, уның урынына икенсеһе ултыра.

Мин бәхетте һынап ҡарарға булдым. Кеҫәләребеҙҙәге бар аҡсаны тырнап өс һум йыйҙыҡ.

Бына уйнарға ултырҙым. Тәүге партияны еңдем, икенсене… бишенсене… Кеҫәлә егерме һумдан артыҡ аҡса йыйылып китте. Ул осор өсөн был ярайһы уҡ аҡса.

Рәдиф әйтә:

– Етте, киттек!

Урынымдан торайым ғына тигәйнем, яуырныма ауыр ҡул ятты. Ҡараһам, эргәмдә 2 метр бейеклектәге йыуан мужик тора.

– Играй дальше! – ти был.

Мин Рәдифкә ҡарайым. Ул әйтә:

– Бер партия еңелеп, 3 һумды кире ҡайтар. Юғиһә, ебәрмәйәсәктәр.

Әммә, бер генә еңелгәс китәйем тигәйнем, теге ҡул йәнә яурынға ятты:

– Играй.

Өс һумды һалдым да йәнә еңелдем. Теге көслө ҡул биш тапҡыр еңелгәнсә ебәрмәне. Бишенсе тапҡыр еңелгәс:

– Ладно, иди! – тине.

Байрам итергә беҙгә аҡсаның ҡалғаны ла етте.

***

Был тарихтағы яҙыусының исемен әйтмәҫкә тура килә. Сөнки… хәйер, үҙегеҙ тыңлағыҙ.

70-се йылдар аҙағы. Мин әҙәбиәткә яңы инеп киләм. Тәүге генә китабым сыҡҡан. Сибайҙа йәшәп ятам.

Шул осор Өфөнән абруйлы ғына бер яҙыусы Сибайға командировкаға килде. Бер нисә урында уҡыусылар менән осрашҡандан һуң, кис ҡунаҡханаға килдек. Бер ярты алдыҡ. Тәүге рюмканы төшөргәс, ул минең әҫәрҙәрҙе маҡтаны, тиҙҙән икенсе китабым, яңы повесым сығырын әйтте. Яҙыусылар союзына ағза итеп алырбыҙ, ғөмүмән, һиңә ҙур өмөт бағлайбыҙ, тип ҡыуандырҙы.

Ошо ерҙә ул миңә шахмат уйнарға тәҡдим итте. Уның ярайһы уҡ яҡшы уйнағанын ишеткән инем. Ләкин мин уны барыбер еңәсәкмен бит. Тик, яңы ғына унан шундай һәйбәт һүҙҙәр ишеткәндән һуң, был абруйлы ғына ағайҙың кәйефен дә төшөргө килмәй. Шуға баш тарттым. Ә ул ныҡыша:

– Мине алама уйнай тиһеңдер? Мин яҙыусылар араһында иң көслөләрҙән һаналам. Уйнайбыҙ!

Ни эшләйһең, горничныйҙан шахмат килтертеп, фигураларҙы теҙергә тура килде. Әҙиптең ныҡ ҡаршылашыуына ҡарамай, фәҡәт ладьяһыҙ ғына уйнарға ризалаштым. Тәүҙә, еңеп үпкәләтмәҫменме, тигән уй башыма килһә лә, уйын ҡомары күңелде солғап алды. Ошоғаса бик һүҙсән ағай нисектер шымып ҡалды. Икенсе партия уйнай башланыҡ. Мин тағы еңдем. Ағай өсөнсөгә теҙергә тотондо.

– Мин һинең менән яңылыштым шикелле! Һин телде белмәйһең, әҙәби белемең дә юҡ, китабыңды пландан һыҙып ташларбыҙ, ахыры, повесыңды ла баҫмабыҙ. Вообще, башҡа Өфөгә аҡса әрәм итеп килеп йөрөмә! – тине.

Минең йәнде өшөткөс шундай һүҙҙәрҙе әйтеп, рюмканы түңкәреп ҡуйғас, ағай фигураларҙы киренән теҙҙе лә ҡаты ғына тауыш менән бойорҙо:

– Йөрө!

Ҡот осто! Инженерлыҡтан китеп, бөтә киләсәк яҙмышымды яҙыусылыҡ менән бәйләргә йыйына инем бит ул мәлдә. Һәм булмышымдың киләсәге, Өфөгә күсеүем ошо ағайға ныҡ бәйләнгән ине. Бөтә хыялдарым селпәрәмә килдеме икән ни?

– Йөрө! – тип тағы ҡысҡырҙы шул арала ағай кеше.

Мин беренсе йөрөштө яһаным да, туҡта, тинем үҙ-үҙемә. Еңһәм, бөтә яҙмышым селпәрәмә киләсәк бит. Еңелһәм, бәлки… Эйе, еңеләйем дә ҡуяйым! Һәм еңелдем. Ағайҙың күңеле шунда уҡ күтәрелеп китте.

– Йә, нисек мат ҡуйҙым? Шәп бит! Өфөгә барғас, Ғәйетбайҙың үҙенә мат ҡуйҙым, тип һөйләйәсәкмен! Ышанмаһалар, раҫларһың!.. Ә китабың өсөн ҡайғырма, сығарабыҙ, повесыңды ла баҫырбыҙ. Яҙыусылар союзына ағза итеп алыу буйынса хәҙер үк ғариза яҙып бир. Ә Өфөгә бөтөнләй күсеү хаҡында ни уйлайһың?!

Былай, ул ағай бик һәйбәт кеше ине. Хәҙер мәрхүм инде.

***

Сабир Шәриповта ла Шәриф Биҡколға хас һыҙаттар бар, йәғни еңелә башлаған кешеһен һүҙ менән дөмбәҫләргә ярата. Әлбиттә, ул шаярып әйтә, шулай ҙа… Еңеп барғанда уның әйткән һүҙҙәре бик үҙенсәлекле, мәҙәк, хәтерҙә ҡалырлыҡ.

Яҙыусылар араһынан Сабир менән мин иң күп уйнағанмындыр. Әлбиттә, ладьяһыҙ уйнайым. Өҫтөнлөгөн һиҙһә, теле асыла, түҙеп кенә тор:

– Ҡараңғы ғына ауылда тыуып үҫһәм дә, шәп уйнайым бит, ә?

– Ҡараңғы ауылда үҫтем! Электрһыҙ! Ә нисек уйнайым! Каспаровтан кәм уйнамайым мин!

– Мейе күберәктер, тим, минең башта... Мә, тотоп ҡара! Аҙаҡ киләсәк быуынға һөйләрһең. Сабир дуҫтың башы тумалаҡ ине, үҙем тотоп ҡараным, тиерһең.

– Уҡыған кеше – уҡыған инде. Йөрөһәм, табам бит ходын!

– Ну минең баш! Яҙыусылар араһында иң зирәк баш минеке. Наил, һинеке лә нисауа. Но минекенә етмәй!

– Генийымындыр ул мин! Гений булмаһам, был тиклем уйнамаҫ инем. Рюкзак әҙерлә, матыңды апҡайтырға. Юлда төшөп ҡалмаһын, тим.

Партия аҙағында коридорға уҡ сығып ҡысҡыра:

– Килегеҙ әле! Мин хәҙер мастерлыҡҡа кандидатҡа мат сәпәйем! Башҡа шахмат тип ауыҙын астырмаҫтай итәм! Илатып ҡайтарып ебәрәм мин һине. Нисауа, һинең бисәң йәш, йыуатыр!.. Шәпме мат? Һыу эскеһеҙ иттемме! Уй, хәтәр мат! Быңдай матты Каспаров та ҡуя белмәй! Ҡараңғы ғына ауылда тыуһам да, үтә талантлымын шул. Хоҙай бирһә, бирә шул, йәлләмәгән инде минән. Күрҙегеҙме? Бына ошолай мат тотторалар кандидаттарға. Өйрәнегеҙ мин тере саҡта! Һин кемдең тренерымын тип яҙҙың әле үҙеңде? Карповтыҡымы? Каспаровтыҡымы? Уға ла мат ҡуям, саҡырып килтер, ҡасып йөрөмәһендәр минән...

Еңелгән саҡта Сабир ләм-мим өндәшмәй, бойоғоп китә, фәҡәт ара-тирә:

– Һыу эскеһеҙ итер инем дә, бөгөн баш ауыртыбыраҡ тора шул, – тиеү менән сикләнә.

– Дә-ә, ундай баш менән...

– Шулай тим шул. Мейеһе күптер, тикшерһендәр, әйт, йәме.

Әммә еңеп барғандағы бөткөһөҙ тирадаһын тыңлау өсөн генә унан ара-тирә еңелеү яҙыҡ түгел.

Әгәр партнеры хаҡлы ялдағы кеше икән, былайыраҡ мыҫҡыл итә:

– Шах и мат! Ҡайтҡас, әбейең маҡтар үҙеңде. Пенсияһын да алып ҡайта, мат тигәнен дә ташый, маладис, тиер.

Ара-тирә лаҡап та ҡыҫтырғылай хәбәренә.

– Бер йыл Ғәтиәт ағай (журналист Үзбәков мәрхүм. – **Н. Ғ.**) менән балыҡҡа барҙыҡ, балдыҙы-бажаһы йәшәгән Татарстандағы Адай ауылына. Шахмат күреп ҡалдыҡ та – керештек... Еңгәс, әйттем: «Шәмсетдиныш, үҙебеҙҙә мат бөткәндер шул, Татарстанға килеп алмаһаң...»

Ултыра биргәс, йәнә мәҙәк.

– Үткән ялда яҡташ шылтырата, уйнарға теләк белдерә. Ҡуй, баҡса көтә, тим

үҙенә. Инәлә теге, мин дә барам, ти. Әйҙә, мат-фәлән баҡсала үҫә, тип ризалаштым. Шулай итеп, сумкаһына ун ҡыяр, биш мат тултырып ҡайтарҙым, әй!

Ҡыҫҡаһы, үҙе бер спектакль!

## Насар пьеса

Театрға пьеса илттем. Бер аҙҙан әҙәбиәт бүлеге хеҙмәткәренә шылтыратам.

– Уҡып сыҡтығыҙмы?

– Уҡыныҡ. Пьеса оҡшаны, – ти теге. – Тик ҡуймайбыҙ.

– Ниңә? – тип аптыраным мин. – Оҡшаны, тиһегеҙ бит.

– Өлкән актерҙарҙы ситләткәнһең.

– Нисек... ситләткәнмен?

– Пьесаңда оло йәштәге артистар өсөн роль юҡ.

Ә-һә, төшөндөм: әҫәремдәге геройҙар барыһы ла утыҙ тирәһендә.

– Һуң театрығыҙҙа йәштәр күп бит. Шулар уйнар.

– Һәйбәт пьесала йәштәрҙең рәхәтләнеп уйнауын өлкәндәр ауыҙ асып ҡарап ултырһынмы? Улай булмай. Пьесаңа 50 йәштәр тирәһендәге бер ҡатын менән бер ирҙе, 70 йәштәрҙәге бер бабай менән әбейҙе индер. Күберәк керетһәң дә ярай.

– Улай эшләһәң, пьеса тарҡала, әҫәрҙең идеяһы боҙола бит.

– Борсолма! Режиссер йыйыр, идеяһын да табыр.

Ҡыҫҡаһы, пьесаны кире алырға тура килде.

***

Икенсе бер театрға пьеса илттем. Баш режиссер уны уҡып сыҡты ла ҡыуанып китте.

– Һәйбәт пьеса, алабыҙ. Ҡуйырлыҡ әҫәр юҡ бит. Гастролгә сығыу өсөн артистарҙың ике бригадаһына йомшаҡ пьесаларҙан спектакль эшләнек. Бер бригадаға пьеса таба алмайбыҙ. Аптырағас, кисә бер хөрт пьесаға туҡталғайныҡ. Былай булғас, уны ҡуймайбыҙ, һинекен алабыҙ. Иртәгә кил, коллективҡа уҡыйбыҙ.

– Уны ниңә уҡып торорға, оҡшағас, ҡуй әйҙә, – тим.

– Юҡ, – ти режиссер, – коллективҡа уҡымай булмай.

Иртәгәһенә бар артистарға пьесаны уҡыныҡ. Мин драманы маҡтауҙы, әҫәр менән һоҡланыуҙы көтөп ултырам. Көтмәгәндә артистар әҫәрҙе әрләргә тотондо, юҡҡа сығара башланы. Был пьесаны алмайыҡ, кисәге уҡығанды (режиссер “йомшаҡ” тигән пьесаны) ҡуйайыҡ, тиҙәр. Пьесаны маҡтаған актерҙар ҙа бар. Ләкин улар аҙ. Режиссер ҙа пьесаны яҡлап ҡараны, ләкин барыбер, әҫәрҙе алмаҫҡа, эшләргә кәрәк, тигән фекер менән таралыштыҡ.

Минең пьесаны иң ныҡ тәнҡитләгән актер менән бергә ҡайтып барабыҙ. Ул, минең кәйеф төшкәнде күреп, йыуата башланы:

– Ҡайғырма, Наил Әсғәтович, пьесаң шәп!

– Бәй! – Мин аптырап киттем. – Шәп булғас, ниңә әрләнең?

– Нисек әрләмәйһең? Һинең пьесаң минең бригадаға эләкмәне. Беҙҙең бригада сибек кенә әҫәрҙе уйнай, хәҙер йыл буйы ыҙалап шуның менән гастролдә йөрөйәсәкбеҙ. Ә был бригадаға һинең һәйбәт пьесаң эләкһә, бер йыл рәхәтләнеп уйнаясаҡтар. Әйҙә, кисә уҡыған насар пьесаны алһындар ҙа беҙҙең кеүек ыҙалаһындар. Шуға мин әҫәреңде алдырыуға ҡаршы!

– Ә ҡайһы бер актерҙар ниңә маҡтаны һуң пьесаны?

– Өсөнсө бригадыныҡылар. Һәйбәт пьесала уйнарға теләйҙәр. Килеп сыҡмаҫ! Күпселек ҡаршы!

***

Бер танылған режиссерға пьеса бирҙем. Ул уҡып сыҡҡан да миңә шылтырата.

– Ҡуймайым пьесаңды.

– Ниңә?
– Насар пьеса. Унда режиссер өсөн эшләр урын юҡ. Һин бөтәһен дә эшләгәнһең, бөтәһе лә урынында. Мин сибек, уртаҡул әҫәрҙе ҡуйырға яратам, унда теләгәнсә ҡыҫҡартырға була, кәрәк нәмәне өҫтәргә, күмәк бейеүҙәр индерергә мөмкин. Рәхәтләнеп эшләйһең. Ә һинекенә ни масса кертергә урын юҡ, ни персонаждарҙан аҡыллы фәлсәфә әйттереп булмай, сөнки хәрәкәт, конфликт көслө. Ҡыҫҡаһы, насар пьеса.

## Һәйбәт пьеса

Драматургияға яңы килгән мәл. Комедия яҙҙым да Сибай театрының олпат ҡына актерына уҡырға булдым.
– Бер ярты ал да өйгә кил, – ти был.
Килдем. Актер бер рюмка һалып эсте лә:
– Уҡы, – тине.
Уҡый башланым. Актер ағай ҡағыҙға нимәлер теркәп ҡуя, ара-тирә араҡы һалып эсә. Пьеса уҡып бөтөүгә байтаҡ нәмәләр яҙҙы, теге ярты эсеп бөттө.
Бына һуңғы битте яптым. Ағай, ырғып тороп, ҡулымды ҡыҫты:
– Шәп пьеса!
– Замечаниеларығыҙҙы әйтегеҙ. Унда нимәлер яҙҙығыҙ бит.
– Замечанилар юҡ. Мин үҙ ғүмеремдә яратҡан бисәләремдең исемлеген төҙөп ултырҙым.

***

Олпат драматургтың пьесаһын уҡып сыҡтым. Оҡшаманы. Хәрәкәт юҡ, конфликт сибек. Кәләш менән кәңәшләшкәйнем, ул әйтә:
– Тәнҡитләмә, ниңә үҙеңә дошман арттырырға, маҡта ла ҡуй!
Шул уй менән драма секцияһы ултырышына барҙым. Тыңлап ултырам: бөтә драматургтар хәйләләй, күккә күтәреп маҡтай пьесаны. Ләкин Асанбай нык ҡына тәнҡитләне. Ә автор уға бер ни өндәшмәне. Шулай булғас, мин дә дәртләнеп киттем, тәүге уйымдан баш тарттым да йәшермәйенсә пьесаны ҡаты ғына тәнҡитләнем.
Ошо ерҙә әҫәр авторы ырғып тороп, мине әрләргә тотонмаһынмы!
– Һин кем шул тиклем? Минең пьесамды бар драматургтар, бар режиссерҙар маҡтаны. Ике-өс пьеса яҙғас, драматург булып киттеңме?
Бик ҡыйын булды. Төнө буйы йоҡлай алманым. Төрлөсә уйлағас, иртәгәһенә теге драматургҡа шылтыратып, ғәфү үтендем, яңылыш әйткәнмен, пьесағыҙ һәйбәт, тинем.
Драматург ҡыуанып китте.
– Мин кисә бик аптырағайным шул. Әллә үсе бармы икән, тип ултырҙым. Һәйбәт пьеса бит.
Ул пьесаны бер театр ҙа ошоғаса сәхнәләштермәне. Сәбәбе нимәлә икәнлеген аңлайһығыҙҙыр.

***

Режиссер Рафаэль Әйүповҡа яңы ғына яҙған пьесамды килтерҙем. Ул әҫәрҙе ҡулына алды.
– Нисә кеше ҡатнаша? Алты? Һәйбәт! Дүрт ҡатын-ҡыҙ, ике ир! Шәп! Нисә битлек? Ун ете! Гениально! Ҡуябыҙ!

***

Бер халыҡ артискаһынан һораным:
– Мин һеҙҙең логикағыҙҙы аңламайым. Ҡайһы саҡ һәйбәт пьесаны күрә тороп, насар әҫәр, тип юҡҡа сығараһығыҙ, театрҙа ҡуйҙырмаҫҡа тырышаһығыҙ, ә

икенсе юлы насар пьесаны күккә күтәреп маҡтайһығыҙ, театрға алдырырға тырышаһығыҙ. Сәбәбе нимәлә?

– Сәбәбе бик ябай, – тине актриса. – Әҫәрҙә үҙемә роль булһа, ул пьеса һәйбәт, ә инде унда миңә роль юҡ икән, был пьеса, Шекспирҙыҡы булһа ла, бик насар. Ул әҫәрҙе театрға яҡын да ебәрергә ярамай!

## Нисек... баш мөхәррир булманым

1986 йылдың йәйендә мин өс ай буйы Талҡаҫ күле янындағы Баймаҡ ял йортонда "Уҙыш" тигән роман яҙып яттым. Бер көндө күл уртаһында бер дуҫым менән кәмәлә йөҙөп йөрөһәк, ярҙан рупор менән ҡысҡырғандары ишетелде.

– Гаитбаев, на берег! – тип һөрәнләйҙәр.

Ярға сыҡһам, Сибай ҡала партия комитетының пропаганда бүлеге мөдире Мөхәммәтов Марат Әнүәрович тора (аҙаҡ ул ҡала комитетының беренсе секретары ла булды).

– Наил, тиҙ генә йыйын, – ти Мөхәммәтов. – Поезға өлгөрөргә кәрәк. Һине срочно Өфөгә обкомға саҡыралар.

– Кем саҡыра? Ниңә?

– Бер нәмә лә белмәйем. Иртәгә барғас та обкомға, Хисамов Ғәлим Афзаловичҡа ин.

Поезға һуңлап бара инем, шуға ла нисек кейенгәнмен, шулай киттем Өфөгә. Ә минең өҫтә – еңел куртка, джинс. Ул джинсы ла ал яҡтан ямалған. Төн уртаһында Сибай театры актеры Вәкил Йосопов менән мотоциклда уның тыуған ауылы Әмингә китеп барғанда ҡолап йыртҡайным. Ямауын яманым, әммә күренеп тора. Иң мөһиме – сәстәр оҙон, етмәһә, һаҡал-мыйыҡлымын.

Иртәгәһенә поездан төшкәс тә, ошо ҡиәфәттә обкомға килеп индем.

Хисамов мине күргәс шаҡ ҡатты:

– Ниңә былай кейенеп килдең?

– Ә нисек кейенергә кәрәк ине?

– Беҙ бит һине "Пионер" журналына баш мөхәррир итеп тәҡдим иттек. Хәҙер Бакировҡа, шунан Ахунйәновҡа индереп күрһәтәбеҙ.

– Һуң күрһәтегеҙ.

– Юҡ, былай бармай! – тине Ғәлим Афзалович, елкәһен ҡашып, – Һине сәғәт 12-лә күрһәтәбеҙ. Шуға тиклем йыуын, сәсеңде ҡыҫҡарт, һаҡал-мыйығыңды ҡыр, костюм-салбар, аҡ күлдәк кейеп ал, галстук таҡ!

– Минең костюмым Сибайҙа, бында юҡ.

– Берәй яҙыусыныҡын йәки журналистыҡын һорап торорға тура килер. Һинең буйың күпме?

– Бер метр ҙа һикһән сантиметр.

– Туҡта, Рәмил Йәнбәк тә оҙон ғына бит.

Рәмил Йәнбәков ул осор "Башҡортостан пионеры" газетаһында баш мөхәррир ине. Хисамов уға шылтыратты:

– Рәмил, һинең бейеклегең күпме?

– 1 метр ҙа 76 сантиметр, – тине аптыраған Рәмил.

– Һин костюм-салбарҙамы? Галстук таҡҡанһыңмы?.. Улайһа, хәҙер һиңә Наил Ғәйетбай килә. Бер сәғәткә уға костюмыңды биреп тор, – тине лә Ғәлим Афзалович миңә бороло. – Ун икелә бында бул. Юл ыңғайында һаҡалыңды ҡыр, сәсеңде ҡыҫҡарт.

– Сәсте ҡыҫҡартам, ә һаҡалды ҡырмайым.

– Ярай, бар. – Ҡулын һелтәне кәйефе төшкән Хисамов.

Рәмил кәүҙәгә минән күпкә тәпәшерәк түгел, тик костюм-салбары миңә ҡыҫҡа булып сыҡты. Уларҙы кейгәс, мин цирктағы клоунға оҡшап киттем.

Ләкин хәл юҡ, башҡа яҙыусылар тағы ла ҡыҫҡараҡ, миндәйҙәре бөгөн эшкә костюм кейеп килмәгән.

Киттем обкомға. Хисамов мине күрҙе лә саҡ ҡолап китмәне.

– Их, һин! – шулай тине, ауыр көрһөнөп. – Ниңә Сибайҙан костюмыңды алып килмәнең инде?

– Бәлки, Бакировҡа ла, Ахунйәновҡа ла күренеп тормам?

– Нисек күренмәйһең? Улар ҡушты, мин үтәргә тейеш. Бар, ин Бакировҡа.

Индем Бакиров Урал Насыровичҡа. Ул бик аптырап, мине төрлө яҡтан ҡарап сыҡты, бер-ике һорау биргән булды. Шунан көрһөнөп:

– Ярай, бар, ҡустым, – тине.

Ә Ахунйәновҡа индереп тә торманылар.

Аҙаҡ ишеттем – Бакиров әйткән, имеш:

– Һеҙ миңә ниндәй босякты килтерҙегеҙ?! Был әҙәм пионерҙарҙы тәрбиәләрлек түгел, уның үҙен тәрбиәләргә кәрәк!

**“Төн” трагедияһы**

Тарихи темаға әҫәр яҙыу ҡомары һәр ижад кешеһенең күңелендә йөрөйҙөр... Минең дә данлыҡлы Буранбай тураһында әҫәр яҙыу теләге күңелдә оҙаҡ йәшәне. Ләкин материалдың күплеге, архивтарҙа соҡонорға кәрәклеге ҡурҡытты, әҫәргә ниндәй форма бирергә белмәү туҡтатты. Икенсенән, үҙемә яҡын ваҡыттағы шәхестәр хаҡында яҙыу күңелгә ятышлыраҡ ине. Үҙенән-үҙе Һәҙиә Дәүләтшина, Рәми Ғариповтарҙың яҙмыштары күҙ алдына килде. Яҙмыштары үкенесле, фәһемле. Икеһе тураһында ла яҙырғамы? Әллә береһе күрһәтелһә лә етерме?

Туҡһанынсы йылдар башында режиссер һәм актер Байрас Ибраһимов менән театр, драматургия тураһында йыш ҡына әңгәмәләшергә, хатта бәхәсләшергә тура килде. Бер мәл ул тарихи пьесаны нисегерәк күреүе хаҡында һөйләй башланы. Мин уға ҡушылып киттем. “Әгәр Һәҙиә Дәүләтшинаны сәхнәгә сығарырға булһаң, – тине Байрас, – унда мотлаҡ әҙибәнең геройҙары ла хәрәкәт итергә тейеш”.

Ошо һөйләшеү күңелгә ойотҡо һалды. Мин мотлаҡ рәүештә Һәҙиә Дәүләтшина тураһында трагедия яҙырға булдым. Ә Рәми Ғарипов? Уйланам, уларҙың яҙмыштарының ауаздаш икәнлегенә иғтибар итәм. Улай булғас, ниңә икеһе тураһында ла бер әҫәр яҙмаҫҡа? Яҙмыштары аша пареллель үткәрергә лә икеһенең дә трагедияһын бер әҫәрҙә күрһәтергә! Шәп идея бит! Уларҙың тормошта осрашмауы бер аҙ ҡыйынлыҡ тыуҙыра, әлбиттә. Әммә мин был проблеманы еңел хәл иттем: әҫәрҙе шартлы рәүештә ҡорҙом да унан ваҡыт һәм арауыҡ тигән төшөнсәләрҙе алып ташланым.

Әҫәр еңел яҙылды. Мин уны бер аҙна эсендә Талҡаҫ күлендәге Баймаҡ ял йортонда 1990 йылдың июлендә яҙҙым. Ғөмүмән, символик пьесаларҙы яҙыуы ябай реалистик драма-комедияларҙы яҙыуға ҡарағанда күпкә еңелерәк. Сөнки ул прозаға тартым. Бында характерҙы асыу, уны логик үҫтереү, геройҙы ҡайҙа сығарып ебәреү йәки ҡайҙан алып килеү, индереү кеүек, ураған һайын килеп тыуған проблемаларҙы ныҡ мотивировкаларға кәрәкмәй. Схема төҙөп алаһың да яҙаһың да яҙаһың. Теләгән урында кәрәккән геройҙы килтереп индерәһең, кәрәкмәгәнен сығарып ебәрәһең. Ә реалистик пьесала улай эшләһәң, әҫәрең юҡҡа сығасаҡ, образдар асылып етмәйәсәк.

Бер аҙ ситкә киттем, буғай.

Трагедияны яҙып бөткәс тә коммунистар сафынан сыҡтым. Сөнки әҫәр партияны бик ныҡ тәнҡитләй, шуға күрә минең КПСС ағзаһы булып ҡалырға хаҡым юҡ ине.

Ары был трагедия менән ҡыҙыҡ хәлдәр башланды. Өфөгә ҡайтып, әҫәрҙе машинкала баҫып бөтөүгә, Сибайҙан ҡунаҡҡа атайым килгәйне. Ул “Төн”дө

уҡыны ла ҡото осто. (Хәтерләйек: 1990 йыл – совет власының көслө сағы, әлегә компартия тарҡалмаған.)

– Һине... төрмәгә ултыртасаҡтар! – тине лә атайым пьесаның бөтә экземплярҙарын тартып алды. – Мин һиңә быны бирмәйем!

Бер кемгә лә күрһәтмәҫкә вәғәҙәләп кенә, атайҙан пьесаны кире алдым. Әммә, ул ҡайтып киткәс тә, трагедияны билдәле театр тәнҡитсеһе Һөйөндөк Сәйетовҡа уҡырға бирҙем.

Сәйетов әҫәрҙе уҡығас, машинкала баҫылған утыҙ битлек рецензия килтереп тотторҙо. Ул да мине партияға һүҙ күтәргәнем өсөн бик ныҡ тәнҡитләгәйне. Тормошто аңламауҙа, фәлсәфә закондарын белмәүҙә, Лениндың хеҙмәттәрен уҡымауҙа ла ғәйепләгәйне. Әммә, шуға ҡарамай, трагедияны үҙе Исрафиловҡа илтеп биргән.

Ул осор Башҡорт академия драма театры Ғәзим Шафиҡовтың “Һәҙиә” драмаһын ҡуйырға йыйынған. Мин быны аҙаҡ белдем. Исрафилов тотҡан да минең әҫәрҙе коллективҡа уҡыған. Артистар бер тауыштан Ғәзимдең драмаһын ҡуймаҫҡа, минекен сәхнәләштерергә хәл иткән. Ә мин, бер ни белмәй, Мишкә районында (һатып алған өйөмдә) яңы әҫәр яҙып ята инем.

Бер мәл Башҡортостан әҙиптәре менән бергә Мәскәүгә – Яҙыусылар съезына барырға тип Өфөгә килеп төштөм. Идараға етеп барғанда Ғәзим Шафиҡовты тап иттем. Ул минең һаулыҡ һорашыуымды алмай үтеп китте. Мин быға аптыраным: иң яҡын дуҫтарымдың береһе, ике йыл бергәләшеп Мәскәүҙә уҡыныҡ, бер табаҡтан ашаныҡ, тиергә була. Ниңә шулай итә ул? Күрмәй ҡалғандыр, тип үҙемде тынысландырҙым. Союзға барып ингәйнем, Аралбайҙы тап иттем. Ул рәйес урынбаҫары булып эшләй ине. Уҫал ҡиәфәт менән мине әрләргә тотондо:

– Наил, һинең оятың бармы, юҡмы? Ни йөҙөң менән Ғәзимдең пьесаһын академтеатрҙа ҡуйҙырмаҫҡа ҡушҡанһың. Оят бит!

Һораша башланым. Ниңә... оят? Әммә Аралбаев һаман үҙенекен һөйләй:

– Алдашма, һин бөтәһен дә беләһең! Әле генә Ғәзим инеп һөйләп сыҡты. Исрафилов уның “Һәҙиә”һен ҡуймаҫ өсөн һиңә пьеса яҙырға ҡушҡан. Һин нисек хөрмәтле яҙыусыбыҙҙың әҫәрен ҡуйҙырмаҫ өсөн шундай ҡәбәхәтлеккә барҙың?

Мин Ғәзимдең “Һәҙиә” тигән пьесаһы барлығын белмәүем, был трагедияны яҙырға бер кем дә заказ бирмәүен, фәҡәт үҙ теләгем менән яҙыуым хаҡында аңлатып ҡараһам да, Аралбаев миңә ышанманы, һаман минең мораль-этик сифаттарымды тәнҡитләүен белде.

Мин Союз бинаһынан шаңҡып сығып киттем. Шунда уҡ Ғәзимдең өйөнә шылтыратып ҡараным, ләкин уны өйҙә юҡ, тинеләр. Ул арала Мәскәүгә съезға китер мәл килеп етте. Вагон купеһында көтмәгәндә миңә драматургтар Нәжиб Асанбай, Рафаэль Сафин, Фәрит Богданов ябырылды:

– Наил, бөтә яҙыусылар һинең ҡылығыңа возмущены! Һин ни йөҙөң менән Исрафиловтың Шафиҡовҡа ҡаршы ойоштороған этлегенә эйәрҙең?

Уларға башҡа яҙыусылар ҡушылды. Ҡыҫҡаһы, мин Мәскәүҙән ҡайтҡас та трагедияны Исрафиловтан барып алдым. Ул бик ғәжәпләнде.

– Ни эшләйһең һин? Репетиция башланыҡ бит. Ҡуйылырға йөрөгән пьесаһын алып киткән драматургты тәүгә күрәм!

Үҙемдең ғәйепһеҙ икәнлегемде бер кемгә лә иҫбат итә алмауыма үкенеп йөрөнөм дә трагедияны Сибай дәүләт театрына илтеп бирҙем. Бында режиссерҙар араһында пьесаны ҡуйыу өсөн талаш башланды: кемдән ҡуйҙырырға теләүемде өҙөп кенә әйтеүемде талап иттеләр. Әммә мин:

– Кем ҡуйһа ла миңә барыбер, – тинем.

Тиҙҙән режиссер Дамир Ғәлимов “Төн” пьесаһы буйынса ҡыҙыҡлы спектакль сығарҙы. Ул тамашасыларға бик оҡшаны.

Әммә мажаралар быным менән генә бөтмәне әле. Үрҙә әйтеүемсә, Рәми ағайҙың

өйөндә бер нисә тапҡыр булырға тура килгәйне. Унда мин Надя еңгәйҙең бер ҡайҙа ла эшләмәгән Рәми ағайҙы ҡаты тиргәүен үҙем күрҙем, үҙем ишеттем:

– Кисә улыбыҙҙың уҡытыусыһы килде, ул: “Ни өсөн балағыҙҙы ҡыш көнө плащ менән, кәпәсһеҙ, туфли кейҙереп мәктәпкә ебәрәһегеҙ?” – ти. Шул ерҙә ер аҫтына төшөп китерҙәй булдым. Балаларға ҡышҡы кейем алырға бер тин аҡса юҡ! Ҡасан эшкә урынлашаһың, ҡасан өйгә аҡса алып ҡайтаһың?» – тип әрләне Надежда еңгәй Рәми ағайҙы минең күҙ алдымда.

Ғариповтың трагедияһын тәрәнерәк күрһәтеү ниәтендә, нәҡ ошо эпизодты пьесаға индерҙем. Һис тә еңгәйҙе яманларға йыйынманым, киреһенсә, иманым камил: ире бер ҡайҙа ла эшләмәһә, йылдар буйы өйөнә аҡса алып ҡайтмаһа, һәр ҡатын тормош иптәшенә ошо һүҙҙәрҙе әйтер ине. Мин был эпизод аша партия тарафынан эшһеҙ ҡалған Рәми ағайҙың ниндәй ауыр хәлгә эләккәнлеген күрһәтергә генә теләгәйнем.

Әммә пьесала, үҙен «бик үк матур итеп күрһәтелмәгәнмен» тип һанап, Надежда Васильевна обкомға ялыу яҙып ебәргән. Һәм юғары инстанциянан миңә лә, Сибай театрына ла көслө баҫым башланды. Бында спектаклдә компартияның кире яҡтан күрһәтелеүе лә үҙенең ролен уйнаны, әлбиттә.

Ләкин Сибай театрының директоры Дамир Ғәлимов сая кеше булып сыҡты: спектаклде репертуарынан барыбер алып ташламаны, ике йыл буйы районлар буйлап гастролдәрҙә алып йөрөнө.

Миңә бала саҡтан уҡ Һәҙиә Дәүләтшинаның байҙарҙы боҙоҡ әҙәм итеп, ә ярлыларҙы уғата яҡшы кеше итеп күрһәтеүе оҡшап етмәгәйне. Быны миңә әсәйем, ҡартәсәйемдәр ҙә әйткәйне. Бында әҙибә бер аҙ арттырып ебәргәндер, тип уйланым мин һәм трагедияма әҫәр геройҙарын – Айбулатты (ярлы) һәм Имайҙы (бай) Һәҙиә Дәүләтшина менән «осраштырҙым». Роман геройҙары яҙыусыны әҫәрендә уларҙы дөрөҫ күрһәтмәүҙә ғәйепләй, Имайҙың ярлыларға ярҙам итеүе, улар өсөн мәктәп асыуы тураһында яҙылмауы өсөн асыулана. Мин, әлбиттә, Имайҙың мәктәп асҡанмы-юҡмы икәнлеген белмәй инем, фәҡәт байҙарҙың шул тиклем насар булғанлығына күңелем менән ышанып етмәгәйнем. Шуға Имайҙы нисек тә аҡлау өсөн ошо эпизодты уйлап сығарғайным. Бер нисә кеше минән: “Имай ысынлап та шулай һәйбәт кеше булғанмы ни?” – тип һораны. Мин аныҡ ҡына яуап бирә алманым һәм бер мәл күңелемдән генә ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ кисерә башланым.

Ә инде 1992 йылда “Башҡортостан” гәзитендәге бер мәҡәләне уҡығас, шаҡ ҡаттым. Уның авторы Ниязғол байҙың ейәнсәре, Имайҙың ҡыҙы ине. Силәбе өлкәһендә йәшәп ята икән. Был апай Һәҙиә Дәүләтшинаны романында атаһы менән ҡартатаһын дөрөҫ күрһәтмәүҙә ғәйепләй, улар эшләгән яҡшы эштәрҙе, шул иҫәптән ярлыларға ярҙам итеүҙәрен, мәктәптәр асыуҙарын һанай... Был факт минең өсөн бик ғәжәп булды. Аҙаҡ кешеләргә һөйләһәм, улар ышанманы, һин быны белгәнһең, тинеләр. Яҙыусының интуицияһы, тойомлауы ошолай булалыр, тип ҡотолдом.

## Драматург яҙмалары

Минең “Ҡойма ямғырҙа” исемле тәүге драмам Сибай башҡорт дәүләт драма театры сәхнәһендә 1984 йылда ҡуйылды. Ләкин был әҫәр беренсе пьесам түгел ине. Тәүге драмамды мин, Себер яҡтарынан ҡайтып, Сибайҙа төпләнгәс, урындағы театрҙың спектаклдәренә йөрөй башлағас, 1977 йылда яҙҙым. Уны ике-өс артисҡа уҡытып, маҡтау һүҙен ишеткәс, Сибай театрының баш режиссеры Ғәләүетдинов Фәтхислам ағайға килтереп тә тотторҙом. Әммә режиссерҙың һүҙҙәре өҫтөмә боҙло һыу һипкәндәй тәьҫир итте. “Пьесаң бик сибек, сәхнә ҡанундарын белмәй яҙылған, ҡуйырлыҡ түгел…” Икенсе пьесам менән дә шул уҡ хәл ҡабатланды.

Өсөнсө пьесамды яҙырға минең менән бергә Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙа уҡыған Ғәзим Шафиҡов менән татар драматургы Ризван Хәмид сәбәпсе булды. (Мин проза семинарында шөғөлләнә инем). Тыуған ерҙән ситтә ике йыл йәшәгәс, беҙ ныҡ дуҫлашып киттек, йыш ҡына бергәләшеп ултырыр булдыҡ. Өс яҙыусы нимә хаҡында һөйләшәһең инде? Әлбиттә, һүҙ күберәк башҡорт, татар әҙәбиәте тураһында барҙы. Әммә өсөбөҙҙөң икәүһе драматург булғас, хәбәр йышыраҡ драматургия, театр тирәһендә өйөрөлә ине. Ике йыл буйы Ғәзим Шафиҡов менән Ризван Хәмидтең нисек пьеса яҙыуҙары тураһында тыңлай торғас, мин драма әҫәренең прозанан бөтөнләй айырылып торғанлығын аҙыраҡ аңлай башланым. Тәүге ике пьесамдың төп етешһеҙлектәрен күргәндәй булдым. Көндәлдә драматургия, театр ҡанундарына ныҡлап төшөнөү теләге уянды.

Мин данлыҡлы драматургтарҙың пьесаларын йотлоғоп уҡырға тотондом. Аллаға шөкөр, Әҙәбиәт институтының китапханаһында донъя драматургтарының китаптары тулып ята, шунан файҙаланып, мин ярты йыл эсендә Тенниси Уильямс, Артур Миллер, Генрих Ибсен, Юджин О'Нил кеүек данлыҡлы драматургтарҙың пьесалары менән танышып сыҡтым. Көндәлдә йәнә пьеса яҙып ҡарау теләге тыуҙы. Һәм 1983 йылдың май айында үҙ ғүмеремдә өсөнсө пьесамды яҙырға ултырҙым. Көнө-төнө тырышам, ашығам. Сөнки Мәскәүҙәге ике йыллыҡ курстар тамамланып бара. Ә минең пьесаны яҙып бөтөп, Ғәзим Шафиҡов менән Ризван Хәмидкә уҡып ҡарағым килә. Хәҙер инде мин пьесаның нимә икәнлеген аңлағандай булдым, шуға ла ике тәжрибәле драматургтың фекерен ишетеү минең өсөн бик мөһим ине.

Май башында тотонған пьесамды ай урталарында тамамлап та ҡуйҙым. Тиҙ генә машинкала баҫып әҫәремде дуҫтарыма тотторҙом. Был юлы инде үҙемдә шәп пьеса яҙҙым тигән ныҡлы ышаныу юҡ ине.

Хәтеремдә, Ғәзим Шафиҡов менән Ризван Хәмид пьесамды уҡып сығып ун етешәр замечание әйтте. Мин шунда уҡ улар өҫтөндә эшләргә тотондом, һәм бер аҙна эсендә төҙәтеп, пьесаны яңынан машинкала баҫтым.

Дуҫтарым пьесаны икенсе тапҡыр уҡып сыҡты һәм тағы бер нисә төҙәтмә индерергә тәҡдим итте. Уларын да эшләгәс, икеһе лә әҫәрҙе берәй режиссерға күрһәтергә кәңәш бирҙе. Был һүҙҙәр миңә ҡанат ҡуйғандай итте. Һәм уҡыуҙы тамамлап, тыуған ҡалама ҡайтыуыма бер ай ғына ҡалһа ла, түҙемлегем етмәне, пьесаны почта аша Сибайға, Фәтхислам Ғәләүетдиновҡа, ебәрҙем. Ҡайтыуҙың иртәгәһенә үк мин театрға йүгерҙем: Фәтхислам ағай ни тиер?

– Пьеса бар, – тине Фәтхислам ағай. – Әммә ошо көйө ҡуйырлыҡ түгел. Төҙәтергә кәрәк.

Шулай тине лә Фәтхислам ағай замечаниеларын әйтә башланы. Мин уларҙың барыһын да ҡағыҙға яҙып алдым да хушлашып ҡайтып киттем.

Бер көн эсендә пьесаны төҙәтеп сығып, мин эшемдән Учалыға командировка алдым. Биш көн буйына ошо ҡаланың ҡунаҡханаһына бикләнеп пьесамды машинкала баҫтым, төҙәттем. Сибайға ҡайтыу менән йәнә пьесаны тотоп Фәтхислам ағайға килдем. Ул әҫәрҙе ике көн уҡыны, өсөнсө көн үҙе шылтыратты:

– Наил, пьесаң оҡшаны. Ҡуябыҙ. Өфөнән рөхсәт ҡағыҙы алып кил.

Күк йөҙө уртаға ярылдымы ни! Минең башым әйләнеп китте. Ни һөйләй ул? Ни ишетәм? Ысынлап та, пьесам ҡуйылырмы икән?

Ул осор пьесаны драма секцияһы аша үткәреүе уғата ауыр ине. Ә драма секцияһының рөхсәте булмайынса Мәҙәниәт министрлығы пьесаны театрҙарға яҡын да ебәрмәй. Ә драма секцияһында Әсғәт Мирзаһитов, Ибраһим Абдуллин, Ғабдулла Әхмәтшин, Нәжиб Асанбаев, Рафаэль Сафин кеүек тәжрибәле драматургтар ултыра. Уларҙың бер-икәүһе башлап яҙыусының пьесаһын уҡып сыға ла хәрт тигән һылтау менән секцияла уҡырға ла алмай. Шулай итеп, пьесаңды секцияла тикшертеүгә рөхсәт алыу үҙе оло бәхет һанала ине. Ә инде драма секцияһы

әҫәреңде хуплаһа, ул театрҙа ҡуйылды тигән һүҙ. Әммә һуңғы йылдарҙа былдай бәхет секция ағзаларынан башҡа тағы бер-ике драматургка ғына эләккән. Шуға күрә Сибай театры ҡуйырға теләһә лә, был әҫәр сәхнәгә күтәреләсәк тигән һүҙ түгел ине әле.

Мин хәүефләнеп Өфөгә килеп төштөм һәм туп-тура ул саҡтағы Яҙыусылар союзының председателе Әсғәт Мирзаһитовҡа йүнәлдем. Уның абруйы ҙур, депутат… Етмәһә, үҙе драматург, әгәр пьесамды оҡшатһа, секцияла тикшерергә лә рөхсәт итер, ә инде оҡшатмаһа!.. Ул саҡта әҫәремдең сәхнәгә ҡуйылыры хаҡында уйларға ла кәрәкмәй.

Әсғәт Мирзаһитов минең пьеса килтереүемә артыҡ ныҡ ғәжәпләнмәне. Сөнки ул саҡта ла, хәҙерге кеүек, пьеса яҙыусылар бик күп ине. Әммә эшкингән ижад итеүселәр юҡ кимәлендә. Шуға күрә тағы бер яҙыусы пьеса килтергән икән, ниңә быға артыҡ аптырарға… Фәҡәт минең:

– Пьесаны Сибай театры ҡуйырға йыйына, уларға драма секцияһы менән Мәҙәниәт министрлығынан рөхсәт ҡағыҙы кәрәк, – тиеүем генә Мирзаһитовта ҡыҙыҡһыныу уятты. Ул тәүҙә пьеса хаҡында: “Әҫәреңде ҡалдыр, секция председателе Рафаэль Сафин уҡып сығыр”, – тиһә, минең һүҙҙәрҙе ишеткәс:

– Ярай, бөгөн үк үҙем уҡыйым, иртәгә килеп сыҡ, – тип мине ҡыуандырҙы.

Иртәгәһен таң менән Яҙыусылар союзына килеп еттем. Мирзаһитов хаҡында белешкәс, секретарь Йәмилә апай:

– Ул бер кемде лә ҡабул итмәй, ниндәйҙер пьеса уҡый, – тине.

Мин ике сәғәтләп Өфөләге башҡа эштәрем менән йөрөнөм дә тағы Яҙыусылар союзына килдем. Был юлы Йәмилә апай мине күреү менән урынынан ырғып торҙо:

– Наил, ҡайҙа йөрөйһөң? Әсғәт ағайың инде ярты сәғәт һине таптыра, эҙләмәгән ер ҡалманы. Бар, ин!

Шул ваҡытта Әсғәт Мирзаһитов янына нисек инеүем, унда нимәләр ишетеүем бөгөнгөләй хәтеремдә. Мин был минуттарҙы таныштарыма маҡтанып һөйләргә яратам, сөнки ул ваҡиға, ысынлап та, минең киләсәк яҙмышымды хәл итеүсе ваҡиғаларҙың береһенә әүерелде.

Мин кабинетҡа инеү менән, Мирзаһитов, бейек кәүҙәһен әкрен генә күтәреп урынынан торҙо, ҙур өҫтәлде урап миңә ҡаршы килде һәм ихлас күңелдән ҡулымды ҡыҫты:

– Һин – драматург! Пьесаң оҡшаны, әммә замечаниелар бар. Иртәгә сәғәт өстә драма секцияһының ултырышын үткәрәбеҙ. Инде ярты йыл Илшат Йомағолов менән Мөкәрәмә Садыҡованың пьесалары тикшерелмәй ята. Өсөгөҙҙө бер юлы тикшерербеҙ.

Шунда уҡ Әсғәт Мирзаһитов минең пьесамдың өс экземплярын алды ла шоферы аша Ибраһим Абдуллин, Ғабдулла Әхмәтшин, Рафаэль Сафинға ебәртте, уларға ике сәғәт эсендә уҡып сығырға ҡушты, сөнки ике сәғәттән шофер Фаил ул пьесаларҙы башҡа драматургтарға илтергә тейеш ине. Шулай итеп, Мирзаһитов ярты көн эсендә минең пьесамды ете-һигеҙ кешенән уҡытып, иртәгәһенә больницала ятҡан драма секцияһы рәйесе Рафаэль Сафинды, машина ебәрәп, Яҙыусылар союзына алып килде һәм тәүге әҫәремде тикшергән драма секцияһы башланды.

Әммә тәүҙә Илшат Йомағолов менән Мөкәрәмә Садыкованың пьесалары тикшерелде. Уларға бик ҡаты тәнҡит һүҙҙәре әйтелде. Минең ҡот осто. Улар бит нисә пьесаһы ҡуйылған тәжрибәле драматург. Әгәр уларҙы әрләйҙәр икән, минең хаҡта ни әйтерҙәр? Хәтеремдә, минең әҫәрҙе тикшереүҙән алда тәнәфес иғлан иттеләр. Мин ул саҡтағы Яҙыусылар союзының әҙәби консультанты булып эшләгән Рәшит Солтангәрәевкә индем дә тулҡынланыуымды һөйләп бирҙем. Рәшит ағай бер стакан араҡы һалып бирҙе:

– Мә, эс! Әрләһәләр ҙә, тыныс булырһың! Бәлки, мин дә инермен. Әрләй башлаһалар, яҡлашып бер-ике һүҙ әйтермен. Пьесаң нимә хаҡында һуң?

Минең әҫәр хаҡында беренсе булып драматург Ғабдулла Әхмәтшин сығыш яһаны. Уның һүҙҙәре әле лә ҡолағым төбөндә яңғырай:

– Һуңғы осор бик күп пьеса уҡырға тура килде. Әммә уларҙың береһе лә күңелгә теймәне. Һәм бына кисә Наил Ғәйетбаевтың “Ҡойма ямғырҙа” драмаһын уҡыным. Ауырыбыраҡ тора инем, шунда уҡ һауығып киткәндәй булдым. Беҙҙең араға драматург килә!..

Бүтәндәрҙең дә сығышы шулайыраҡ булды. Әлбиттә, тәнҡит тә әйтелде. Әммә һәр кем пьесаны театрға бирергә тәҡдим итте.

Иң аҙаҡ Әсғәт Мирзаһитов сығыш яһаны. Башҡа драматургтарҙың мине күккә күтәреүе Әсғәт ағайҙың әҫәремә ҡарата иҫ киткес йылы ҡарауынан килеп сыҡҡанлығын мин һиҙеп ултыра инем. Шуға күрә уның үҙенән дә фәҡәт маҡтау көткәйнем. Ә ул уйламағанда:

– Мин Наилдың пьесаһын ошо көйө ҡуйҙырыуға ҡаршы, – тине.

Минең йөрәк жыу итеп ҡалды. Сөнки ул осор Әсғәт ағайҙың абруйы иҫ киткес ҙур ине. Һәм бер яҙыусы ла уның фекеренә ҡаршы сығырға баҙнат итмәй ине.

– Һүҙ юҡ, пьеса һәйбәт, – тип һүҙен дауам итте Әсғәт ағай. – Әммә Наилдың драматургияны төбөнә етеп аңламауы күренеп тора. Әгәр хәҙер уны ошо пьесаһын еренә еткерергә мәжбүр итмәһәк, әҫәрен ҡуйырға рөхсәт бирһәк, ул күп нәмәне аңламай ҡаласаҡ. Һәм ошо етешһеҙлектәр киләсәктәге пьесаларына сәхнәгә күтәрелергә ҡамасаулаясаҡ.

Мин “Ҡойма ямғырҙа” пьесаһын бөгөн уҡып сығам да Әсғәт ағай Мирзаһитовтың һүҙҙәре менән тулыһынса килешәм. Һәм артабанғы ижад тормошомда шул етешһеҙлектәрҙе аңлар кимәлгә күтәрелә алыуыма ҡыуанам. Әммә ул көнө мин быны аңлай ҙа алмай, аңларға теләмәй ҙә инем.

Шуға күрә урынымдан ырғып торҙом да:

– Әсғәт ағай, – тинем, – әгәр ошо пьесамды бөгөн ҡуйҙырырға рөхсәт бирмәһегеҙ, мин башҡаса пьеса яҙмайым!

Драматургтар дәррәү көлөштө лә пьесаны ҡуйырға рөхсәт итте.

Иртәгәһенә Нәжиб ағай Асанбаев мине өйөнә алып ҡайтып пьесамды энәһенән ебенә тиклем тикшереп сыҡты, төп хаталарымды күрһәтте, һәм пьеса яҙыуҙың күп кенә серҙәрен асты.

Ғөмүмән, драматург кимәленә күтәрелеү юлында миңә иҫ киткес изге, яҡшы күңелле драматургтар, режиссерҙар һәр саҡ ярҙам ҡулын һуҙҙы, драматургия серҙәрен аңларға булышлыҡ итте. Мин яҙмаларымдың дауамында уларҙың барыһын да һанап үтермен. Әлегә шуны әйтәм: был кешеләрһеҙ мин бер ҡасан да драматург була алмаҫ инем. Ошо исемлекте, әлбиттә, Әсғәт Мирзаһитов менән Фәтхислам Ғәләүетдинов аса. Әсғәт ағай әле бешеп етмәгән әҫәремде тиҙ арала ҡуйылырға рөхсәт биреп, үҙенә оло яуаплылыҡ алһа, Фәтхислам ағайҙың шул сибек әҫәрҙе сәхнәгә сығарыуы – үҙе бер батырлыҡ, тиер инем мин. Хәҙер мин үткән йылдарға әйләнеп ҡарайым да, әгәр “Ҡойма ямғырҙа” пьесаһы сәхнәгә ҡуйылмаһа, өсөнсө пьесам да өҫтәл тартмаһына барып ятһа, мин, моғайын, пьеса яҙыуҙы ташлар инем һәм прозаик ҡына булып ҡалыр инем. Әммә Фәтхислам ағай Ғәләүетдинов әле ысын драма булып етмәгән тәүге пьесамды ҡуйҙы, шулай итеп мине, театр менән “ағыуланы” һәм миңә быға саса белмәгән, күрмәгән иҫ киткес матур донъяның ишеген асты.

1986 йылдың йәйендә мин ике айға яҡын Баймаҡ районындағы Талҡаҫ күле янында ял иттем. Ошо мәлдә проза секцияһында тикшерелгән романымды төҙәтеү менән бергә 1980 йылда яҙылған икенсе пьесамды рәткә килтереп маташтым һәм “Ҡойма ямғырҙа”ны Мәскәүгә ебәреү өсөн руссаға тәржемә иттем. Юғары театраль курстарҙың етәкселәре пьесаны оҡшатты. Һәм мине уҡырға ҡабул итте.

Көҙ Мәскәүҙә уҡый башлауға, минең алда ике оло эш тора ине. Беренсеһе, йәйен төҙәтелгән романды киренән машинкала баҫыу, икенсеһе “Ағиҙел” журналы өсөн ошо уҡ романдың ҡыҫҡартылған вариантын әҙерләп биреү. Мин ең һыҙғанып ошо ике эшкә тотондом. Уҡыуҙар үҙ яйы менән алға барҙы. Дәрестәрҙә, театр, пьеса тураһында лекциялар тыңлайым. Ятаҡта үҙем менән бергә уҡыған режиссер, драматургтарҙың туҡтауһыҙ бәхәстәрендә ҡатнашам, ә кистәрен көн дә тиерлек театрҙарға йөрөйөм. Ошондай мөхиттә теләһәм дә, теләмәһәм дә, пьеса яҙыу теләге йәнә күңелде өйкәргә тотондо. Етмәһә, хәҙер инде мин пьесаның нимә икәнлеген ныҡлап аңлай башланым, шикелле. Шуға ла, үҙләштергән белемемә таянып, сәхнә әҫәре яҙып ҡарағы килә. Етмәһә, эргәмдә күпме режиссер, нисәмә драматург уҡый. Уҡытыусылар ҙа танылған театр белгестәре. Яҙған әҫәреңә уларҙың баһаларын ишетеү үҙе ни тора! Һәм 1986 йылдың ноябрь аҙағында, романды ситкә этеп, яңы бер пьеса өҫтөндә эшләргә тотондом. Пьеса яҙыуымдың икенсе сәбәбе лә бар. Беҙ – драматургтар – мотлаҡ рәүештә йыл эсендә бер пьеса яҙып курстарҙы тамамлауға тапшырырға тейеш инек. Шуға күрә лә әҫәрҙе русса яҙырға тура килде.

1986 йылдың аҙағы – 1987 йылдың башы романдың ике вариантын әҙерләү менән бергә яңы пьесам өҫтөндә эшләү менән үтте. Ниһайәт, февраль айҙарында әҫәремде бергә уҡыған егеттәргә бирергә батырсылыҡ иттем. Улар миңә төрлө кәңәштәр бирҙе. Мин, тәжрибәмә таянып, уларҙың барыһын да түгел, ә үҙемә кәрәктәрен генә һайлап алдым. Март айында әҫәрҙең төҙәтелгән, яңы варианты әҙер ине. Уның менән танышҡас, бар курсташтарым да пьесаны хуплағандай итте. Шул мәл ике-өс көнгә Сибайға ҡайтҡайным. Әлбиттә, әҫәрҙе театрға алып барҙым. Был ваҡытта Фәтхислам ағай Ғәләүетдинов хаҡлы ялға киткәйне. Шуға пьесаны режиссер Рафаэль Әйүповтан уҡыттым. Ул әҫәрҙе бик оҡшатты, быйыл уҡ ҡуйырға теләүен белдерҙе, етешһеҙлектәрен дә әйтте. Мин, пьесаны башҡортсаға тәржемә итеп, уға бирергә вәғәҙә иттем.

Май айына, уҡыуҙар тамамлауға пьесаның башҡортса варианты әҙер ине. Сибайға ҡайтҡас та әҫәрҙе театрҙа баш режиссер булып эшләй башлаған Лек Вәлиевҡа тотторҙом.

Көҙ театрҙың бар труппаһы, бергә йыйылып, пьесаны уҡыны һәм ҡабул итте. Тиҙҙән репетициялар ҙа башланып китте. 1988 йылдың март башында спектаклдең премьераһы булды.

Ошонан һуң инде минең бар яҙған пьесам театрҙар тарафынан ихлас ҡабул ителә һәм анһат ҡына сәхнәгә күтәрелә башланы.

1988 йылдан 1992 йылдың йәйенә тиклем проза менән шөғөлләнеүҙән тыш ун ике пьеса яҙҙым. (Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, Мәҙәниәт министрлығында эшләй башлағас, ижад итергә ваҡытым етмәй башланы.) Бигерәк тә 1991 йыл уңышлы булды. Ул йылы биш пьеса яҙып ташланым. Һәм ошо пьесаларҙың барыһы ла Башҡортостанда ғына түгел, Татарстанда, Урта Азия республикалары, хатта сит ил театрҙарының сәхнәләрендә ҡуйылды.

Күптәр өсөн минең быңдай уңышҡа өлгәшеүем көтөлмәгәнсә килеп сыҡҡандыр, ләкин, ошо яҙмаларҙан күреүегеҙсә, был осраҡлы ла, еңел дә булманы. Һис һүҙһеҙ, әҙәбиәттең һәр жанрын ижад итеүе ауыр һәм улар бик күпте белеүҙе талап итә. Әммә, драматургияның күп сәнғәт төрҙәрен үҙендә уҡмаштырыуы сәбәпле, етмәһә, сәхнәлә тере кешеләрҙең ҡатнашырға тейешлеге арҡаһында, пьеса яҙыусы сәхнә ҡанундарын профессиональ кимәлдә белергә бурыслы.

## ҠЫРҠТЫТАУ ЙӘШМӘЛӘРЕНЕҢ БАЛҠЫШЫ

Һуңғы йылдарҙа Ғ. Сәләм премияһы лауреаты Әсхәл Әхмәт-Хужаның «Сәм», «Ҡырҡтытау йәшмәләре», «Аҡ теләктәр әйтәм» тигән китаптары донъя күрҙе. Былар, шағирҙың әүҙем эшмәкәрлеге, ижад ҡомарының һайыҡмауы тураһында һөйләй.

XX быуаттың 70-се йылдарында әҙәбиәт һуҡмағына аяҡ баҫып, әлеге көнгә тиклем арымай-талмай ижад иткән әҙип 1968 йылда «Һыбай сыҡтым» тигән шиғри йыйынтығы менән башҡорт әҙәбиәтендә өр-яңы, йәштәрсә һүҙ әйтеүгә өлгәшкәйне. Был яңы тауышты байтаҡ ҡына ғалимдар, ҡәләмдәштәре хуплап ҡаршыланы. К. Әхмәтйәнов, Ә. Хәкимов, Р. Әмиров кеүек ғалимдарҙың төплө мәҡәләләре йәш шағирҙы ҡанатландырып ҡына ҡалманы, ижади ҡараштарын артабан киңәйтергә, һүҙ сәнғәтенең аҫыл өлгөләренә дөрөҫ юлдарҙы күрергә мөмкинлек бирҙе. Ғөмүмән, әҙиптәргә замандаш һүҙе, уҡыусы теләктәре һәр саҡ кәрәкле. Был йәһәттән Әсхәл Әхмәт-Хужа бәхетле. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары М. Кәрим менән А. Филиппов, халыҡ яҙыусылары Ғ. Хөсәйенов менән С. Поварисов, шағирҙар К. Кинйәбулатова, М. Ғәли, Ғ. Рамазанов, Р. Шәкүр, Р. Сафин, шулай уҡ сыуаш шағиры Ю. Семендер, татар шағиры Зөлфәт һәм башҡаларҙың мәҡәләләре шағир ижадын юғары баһаланы. Әлбиттә, быларҙың барыһы ла күптән яҙылған. Әсхәл Әхмәт Хужа иһә әле лә әүҙем ижад итә.

Башҡорт шиғриәтенең милли йөҙөн билдәләрлек төп үҙенсәлек – романтизм. Ғаләмгә ҡараш, тәбиғәт менән илаһи мөнәсәбәттәр һәм шәхси башланғыстың юғары кимәле генә лирик геройҙы романтик рух менән байыталыр ул. Әсхәл Әхмәт-Хужаның да фекер динамикаһына, ҡатмарлы парадоксаль күренештәрҙе үҙенсәлекле образдарҙа биреүенә һәм уйҙарҙың һайыҡмай, тәрәнәйә генә барыуына һоҡланаһың.

Автор типологик поэтик образдарҙы фәлсәфәүи яҡтан дөйөмләштереү ҡеүәһенә эйә.

*Бишек аҫҡан тыуған өйөм*
*– юлым башы,*
*Тупһам ташы – бар ғаләмгә*
*нигеҙ ташы! –*

тип әйтә икән, бында эпик фекерҙең кимәле лә, сиктәре лә һоҡландыра ғына. Ситтәгенә ҡарап ҡыҙыҡһыныу түгел, ә үҙеңдекен символ юғарылығына күтәреү – маҡтауға лайыҡ. Ошондай граждандлыҡ лирикаһын уҡып үҫкән уҡыусы үҙ ерендә үҙен хужа, дөрөҫөрәге, төп хужа итеп тойор. Әле беҙгә тап ошо тойғолар етешмәй ҙә шикелле.

*...Затлы дуға-йәйғор ятты!*
*Эх!*
*Еген тә ошо дуғаға*
*Сапсып торған хыял-атты,*
*Сабырға ла сабырға ине,*
*Нурға күмеп тирә-яҡты!*

Ләкин романтик күңел күктәргә олғашһа ла, аҙымдары ерҙе тоя.

*Үрҙә – ҡояш,*
*Ерҙә – тормош,*

*Йәшәү – бәхет, йән тетрәткес...*
*Аҡһаҡалдың һәр бер һүҙе –*
*Йәш егеткә бөйөк дәрес!*

Башҡорт шиғриәтендә заман менән бәхәскә кереү, дәүергә тура бағыу – күп шағирҙарҙың ижадында осрай. Ләкин һәр шағирҙың үҙ ҡарашы, үҙ дәғүәһе поэтик образдарҙа ярылып ята. Әсхәл Әхмәт-Хужаның да шиғриәтендә был тематика бер ҡалыпҡа һалынмаған.

*Бөгөн бына заман һандалына*
*Йөрәгемде һалам баҙлатып! –*

тип өндәшә икән, лирик герой кисерештәре үтә ярһыу, юғары тиҙлеккә көйләнгән. Ғаләмдең мәңгелеген аңлап та, ғүмерҙең фанилығы унын өсөн хәсрәт тоҡсайы түгел. Шуға ла ул:

*Замандың толпары бик етеҙ,*
*Йылдарҙы ул үтә көндән тиҙ...*
*...Йөрәгем!*
*Ярһы!*
*Өн!*
*Сәс осҡон –*
*Уй-хистән бөркөлөп нур осһон! –*

тип сәмләнә генә. Был шиғри юлдарҙа йәшлек дәрте, йәшлек моңо дәүер йырына ҡушылып, ҡабатланмаҫ симфония барлыҡҡа килтерә.

*Ваҡыт та бит һөҙөлөп минән үтә...*
*Күҙ ташлаһам ъүмерем йәшмәһенә.*

Шағир «ваҡыт йылымынан» алтын балыҡтарын һанай, саф ынйыларҙы хәтер сылбырына теҙеп, һығымталар яһай. Улар йәшәлгән көндәрҙең һаны менән түгел, эшләнгән изгелек, ижад һулышы менән үлсәнә, тип фекер йөрөтә шағир.

Автор үҙ булмышын тәбиғәттең бер өлөшөндә, ҡабатланғыһыҙ бер мәлендә күрә. Шуға ла шиғриәтендә тау образы айырым урынды биләй. «Мин тауҙарҙа үҫтем» тигән шиғырҙа лирик геройҙың фәлсәфәһе ярылып ята. Бейеклек һәр саҡ юғарылыҡты ғына тиң күрә:

*Түбәндән, юҡ, ҡарап белеп булмай*
*Бейек рухта ниҙәр күкрәүен, –*

тип уйҙарын һүтә «Бейек тауҙың» шиғырында. Шулай уҡ шағир түбәнлекте лә яҡты тойомлай, образлы итеп тасуирлай. «Упҡын» шиғырында хәтәр күренеш булараҡ күҙ алдына баҫа:

*Көтә упҡын –*
*Үҙ күңелең,*
*Меҫкенлегең бушлығы,*
*Ул бушлыҡтан ялтаныръа*
*Юҡ етмәҫ тырышлығың!*

Тәбиғәттәге упҡын менән күңел упҡыны. Шәп йәнәшәлек йән әрнеткес уйҙарға сумдыра. Сөнки, заманға ғына һылтанып, күпме замандаштарыбыҙ, милләттәштәребеҙ упҡынға тәгәрәй бара. Ҡотолоу сараһын, афәтте туҡтатыу ғәмәлдәрен табыуы ауыр. Шуға ла шағир йөрәге һыҡрай, үҙ-үҙенә урын таба алмай. Шуға ла унын шиғриәтенә тарихи үткәндәр, ата-бабаларҙың йәшәйеше аң ағымы булып килеп инә.

«Буй балаҫтар көлөп тора» шиғыры тап ошо юҫыҡта. Ләкин, тарих шаңдауын ишетеп, лирик герой һағыштарға суммай, ә халҡыбыҙҙың данлы үткәнен барлай. Күҙҙең яуын алырлыҡ башҡорт балаҫтары матди байлыҡ ҡына түгел, ә халҡыбыҙҙың юғары зауығын да күрһәтә. Шуға ла автор юғары пафоста:

*Был тиңһеҙ боронъолоҡто,*
*Гүзәллеккә тоъролоҡто –*
*Нәҡ орон-яңрау –*
*Бүләк иткән,*
*Мираҫ иткән*
*Мәңге-мәңгегә*
*Милләтебеҙгә*
*Урал батыр,*
*Һомай матур,*
*Илаһи инәбеҙ Ҡояш,*
*Күктәр һәм Ҡоштар батшаһы*
*Бабабыҙ Самрау,* –

тип тамамлай.

Артабан граждандлыҡ лирикаһы «Изге төйәк», «Тере тамсы» шиғырҙарында тағы ла тәрәнәйә төшә. «Изге төйәк»тә лирик герой тарих төпкөлдәренә, Арҡайым ҡаласығына сәфәр ҡылып, бихисап һорауҙарына яуап эҙләй. Шиғырҙың структураһы ла иҫке төрки шиғриәтенә яҡын: ун икешәр ижекле

бәйеттәр йәнәш рифмаға ҡоролған. Ауаз булып яңғыраған юлдарҙа уйланырға урын бар:

*Тик рух ҡала тауҙарҙа һәм далаларҙа!*
*Тик тел ҡала яңы тыуған балаларҙа!*
*Башҡорт заты, шөкөр,*
*тотош бөлмәне ул,*
*Башҡорт теле, шөкөр, иҫән –*
*үлмәне ул,*
*Дәрт сәмегеҙ ҡабаттан*
*балҡып осҡонда*
*Тупланығыҙ берегеп Башҡортостанда!*

«Тере тамсы» шиғырында бай һүрәтләү саралары поэтик фекерҙе ҡоласлы итә, фәлсәфәгә тиңләй. Автор литота менән гиперболаны бик йәтеш ҡуллана. Башҡортто ул «тере тамсы» тиеп атай ҙа:

*Башҡорт – минең өсөн – ай-ҡояштан,*
*Йондоҙҙарҙан, асмандарҙан ҙур ул, –*

тип үҙ ҡарашын раҫлай. Башҡортто башҡорт иткән ул ер, тел, ҡабатланмаҫ моң. Тап ошо тәғлимәттәр тирәләй ойоша ла шиғыр. Автор традицион унар ижекле йәнәш рифмаға ҡоролған ҡушарлы строфа аша поэтик фекерҙең динамикаһына өлгәшә.

*Тамсы – кескәй генә(яҡшы беләм),*
*Тамсыла мәгәр сағыла ғаләм:*
*Башҡорт булып һәр саҡ*
*йырлап көлһәм,*
*Башҡорт булып һөйһәм һәм һөйөлһәм*
*(Ялбарамын һинән, Хаҡ Тәғәләм!),*
*Мин бит ерҙә иң бәхетле әҙәм.*

Ошо тематика Әсхәл Әхмәт-Хужаның байтаҡ шиғырҙарында үҫтерелә. Бигерәк тә «Әсәм теле» тигән әҫәр иғтибарға лайыҡ. Эпик ҡоласлы шиғырҙың эпиграфы итеп данлыҡлы эпостар телгә алына. Башҡорт теленең моңло һәр өнө, ҡабатланмаҫ һүҙ байлығы, мәҡәл-әйтемдәре – барыһы ла шағир өсөн бөйөк батшалыҡ. Ә батшалыҡтың һәр хазинаһы мең төрлө төҫтәр менән балҡый, тәбиғилеге һәм илаһи моңо менән быуаттар буйы күптәрҙе әсир итә. Ул ҡобайырымы, халыҡ йырымы, әкиәт-риүәйәтеме, мәҡәл-әйтемдәреме – барыһы ла гәрәбәнең алтын бөртөгөнә бәрәбәр. Шиғыр юлдарындағы ошондай фекер үҫешен бер тынала уҡып алаһың да, уның тап шулай булыуына тағы ла ҡыуаныс кисерәһең. Ә шағир ҡайһылай матур, поэтик образдар аша тулайым фекерҙе сағылдыра:

*Һыуҙан ерҙең яралғанын һөйләй,*
*Тәү кешегә мәҙхиәләр көйләй,*
*Изгелеккә генә тик өгөтләй.*

Йәки:

*Әсәм теле,*
*Шиңмәҫ йәншишмә һин,*
*Һин тереһыу сарсау күңелгә,*
*Балаларым балалары алһын*
*Мираҫ итеп һине ғүмергә, –*

тип теләй лирик герой.«Әсәм теле» шиғырында рефрен булып килгән:

*Эй туған тел.*
*Һиңә, телкәйем,*
*Яңы мең йыллыҡтар теләйем! –*

тигән юлдарҙа башҡорттоң оранын да, уй-зарҙарын да, мәңгелек һағышын да ишетергә мөмкин. Ысынлап та, тел яҙмышы халыҡ йәшәйешенә бәрәбәр. Бигерәк тә башҡорт теле яҙмышында һәр осорҙа үтә лә аяныслы мәлдәр күберәк. Әле лә ал да гөл тип әйтә алмайбыҙ. Шуға ла шағир йөрәген ябай һорау түгел, тап ошо мәсьәлә ярып үтә лә.

Әсхәл Әхмәт-Хужа – лирик шағир. Уның граждандыҡ лирикаһында тыуған ер, Әбйәлил, Урал, Ҡырҡтытау һәм башҡа бихисап поэтик образдар бәллүр сыңдары менән сыңлап, үҙенә ылыҡтырып тора. Шағир һәр атҡан таңға ла, һайрар ҡошҡа ла, талғын иҫкән елгә лә, шишмә сылтырауына ла, кешеләргә лә ғашиҡ. Уның мөхәббәт ҡарашында кинәйәле поэтик образ күҙҙең яуын алырлыҡ төҫкә керә, тик үҙенә генә хас моңдо хасил итә. Шуға ла һәр строфа йә йырлай, йә бейей.

«Әбйәлил йондоҙҙары» тигән шиғыр республикабыҙҙа ғына танылыу алыу түгел, ә Европа сәхнәләрен бер итеп сығыш яһаған «Әхирәттәр» халыҡ фольклоры ансамбле солистарына арналған. Шиғырҙа дәртле көй ҙә, ихлас моң да яңғырап тора.

Шағирҙың граждандлыҡ лирикаһында тыуған яҡтың аҫыл ул-ҡыҙҙары Марат Илһамов, Заһир Ғәлин, Ишмырҙа Һиҙиәтов, Мостай Кәрим, Муса Ғәли һәм башҡа шәхестәр ҙә бар. Шуныһы ҡыҙыҡлы: был йүнәлештәге шиғырҙар ғәҙәти тыуған яҡтың кескенә образынан башлана ла артабан киңлеккә лә, юғарыға ла үҫә бара. Ошондай бейеклекте «Башҡортостанға гимн», «Башҡортостан һүҙе», «Толпарым» шиғырҙарында күрәбеҙ.

Ә. Әхмәт-Хужа лирикаһында мөхәббәт лирикаһы сөсөләнеүҙән алыҫ, үҙенсә бер ҡая таш һымаҡ ғорур ҙа, көслө лә, сағыу ҙа образды күҙ алдына баҫтыра.

*Бөгөн килеп йәнә ҡабатлайым:*
*Һөйөү – алмағас ул,*
*Шат алмағас, –*
*Күкрәп сәскә ата,*
*Гел сафлыҡтан*
*Ышаныстан ғына ул яралғас! –*

тип өндәшә икән, лирик герой донъяһында мөхәббәткә урын етерлек. Шуға ла ҡай саҡ ирәйеп тә киткән төҫлө:

*Һин – минең һыңар ҡанатым:*
*Мин йырлайым – һин булғанға,*
*Мин саңҡыйым – һин булғанға,*
*Ҡосағым наҙға тулғанға!*

Әсхәл Әхмәт-Хужаның «Ергә баҫтым, күккә баҡтым» тигән шиғырында лирик геройҙың ҡараштары киңлектәрҙе байҡай, күктәрҙе яулай, бар донъяны мөхәббәт хистәренә сорнай.

*Ергә баҫтым, күккә баҡтым...*
*Күңелем ҡоштай ҡанатлы!*
*Һөйөүем ҡояштай яҡты!*
*Ерҙә йәшәү ниндәй татлы!*

Ысынлап та, лирик геройҙың бындай күңел кисерештәре бар ғаләмде яуларлыҡ шул. Тик шундай шәхестәр генә бар донъяға мөхәббәт менән бағып:

*Сая ирҙәр барҙа –*
*Башҡорт рухы,*
*Юҡ, тапталмаҫ һис тә сит-яттан!*

– тип өндәшер юғарылыҡҡа күтәрелә.

Шағир Әсхәл Әхмәт-Хужаның ижади донъяһы лирик әҫәрҙәр менән генә сикләнмәй. Уның ижади багажында бихисап тәржемәләр ҙә бар. Грузин шағиры Шота Руставелиҙың эпик ҡоласлы «Юлбарыҫ тиреһе ябынған батыр» дастанының тәржемәһе үҙе бер күренеш. Сөнки дастандың йөкмәткеһе генә түгел, ә структур үҙенсәлектәренә лә иғтибар итеп, ювелир ҡулы тейгән кеүек тойола. Шулай уҡ А. С. Пушкиндың байтаҡ ҡына поэтик әҫәрҙәренең тәржемәләре башҡорт теленең бай мөмкинлектәрен күҙ алдына баҫтыра. И. В. Гете, Ф. Тютчев, М. Лермонтов, У. Уитмен, Ян Райнис, О. Туманян, С. Стальский, М. Сеспель, П. Бровка, В.Вальсюнеке, П. Хузангай, А. Твардовский, Я. Ухсай, М. Геттуев, Ҡ. Кулиев, В. Трубицын, Б. Шинкуба, И. Нонешвели, Э. Межелайтис, Ә. Мохтар, Р. Ғамзатов, Д. Кугультинов, С. Орлов, И. Тарба, С. Руфов һәм башҡа күп милләтле Рәсәй әҙәбиәте шағирҙарының поэтик ынйыларын башҡорт теленең моңло саздарына көйләгән. Уйлап ҡараһаң, күпме көс, ныҡышмалылыҡ һәм күңел киңлеге, ихласлыҡ талап итеlә бит был эшкә! Ә был һыҙаттар Әсхәл Әхмәт-Хужала етерлек.

Шағирҙың ижадына сәйәхәт ҡылһаң, оло бер донъя асаһың. Оло быуын шағиры Әсхәл Әхмәт-Хужа шиғриәте лә минең күңел торошомдо үҙенең балҡышы, моңо һәм төҫтәре менән өрәңынан яҡтыртты. Уның шиғриәте, Ҡырҡтытау йәшмәләре кеүек, бөйөк Уралыбыҙҙың күркәмлеген, мөһабәтлеген, мәңгелеген күҙ алдына баҫтырҙы. Ә уҡыусы күңеленә йәшәргә, йәшнәргә һалған сәм дә уның шиғриәтенең поэтик көсө тураһында һөйләй.

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ ӘЙТЕШ

Әйтеш – башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ халыҡтарында аҡын, сәсәндәрҙең халыҡ алдында ойошторолған шиғри бәйгеһе, ярышы.

Ул бөтә асылы менән ауыҙ-тел әҙәбиәте жанры. Ике кешенең шиғри бәйгеһе үҙ мәлендә үк төплө, мәғәнәле һорау биреүҙе, уға кинәйәле, йөкмәткеле яуап табыуҙы талап итә. Әйтеш, ғөмүмән, ауыҙ-тел ижадсыһының оҫталыҡ кимәлен билдәләүсе жанр, «импровизаторлыҡ сәнғәтенең иң юғары нөктәһе».

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә был жанр төрө киң ҡулланылмай, шулай ҙа әҙиптәребеҙ ижадында әйтештәр, әйтеш формаһында яҙылған шиғырҙар осрап тора.

Әйтеш элементтарын ҡулланып ижад ителгән «Йәшәйешебеҙ хаҡында Д. Шәрәфетдинов менән Ә. Үтәбайҙың әйтешкәне» тигән әҫәр бигерәк тә үҙенсәлекле.

XXI быуатты ҡаршылап яҙылған был әйтештә ике шиғыр тарих биттәрен байҡап, халыҡтың көнитмеше, йәшәйеше тураһында, милләтебеҙҙең киләсәге хаҡында уйлана.

Ауыҙ-тел әҙәбиәтендә йырау, сәсән, аҡындар әйтеше, ғәҙәттә, бәйге рәүешендә ойошторола. Д. Шәрәфи менән Ә. Үтәбайҙың әйтеше иһә үҙ-ара асыҡтан-асыҡ һөйләшеү, кәңәшләшеү формаһында ҡоролған.

***Д. Шәрәфетдинов:***

*...Һөйләшәйек һәүетемсә икәү-ара:*
*Быуат бөтә, ә ҡайҙа ил китеп бара?*
*Ошо хаҡта уйланып мин,*
*хайран ҡалам:*
*Ҡай тарафҡа күҙ терәгән*
*беҙҙең заман?*
*... Килер көнөң уйламайса,*
*сапсып атыр*
*Тау зиннәтте ҡорт эҙләүсе*
*себеш аҡыл.*
*Әллә беҙме был тормоштан*
*ныҡ ҡалабыҙ...*
*Ошо хаҡта ниҙәр әйткән Ҡанбабабыҙ?*

***Ә.Үтәбай:***

*Ошо хәлде алдан белгән Ҡанбабабыҙ,*
*Әйтеп киткән зирәк һүҙен аң бабабыҙ:*
*Байлыҡ өсөн йәшәгәндә бөтөр күңел –*
*Аң-зиһенде зиннәт-ниғмәт*
*китер күмеп.*
*... Бәхет өсөн үтәү кәрәк өс ғәмәлде, –*
*Ғүмер буйы тотоп барыу өс әләмде:*
*Беренсеһе – үҙ нәфсеңде тыйыу булһа,*
*Икенсеһе – үс һаҡлама, кенә ҡыума!*
*Өсөнсөһө – ейәнеңдең шатланыуы –*
*Күңелеңдең аҡбуҙатҡа атланыуы.*
*Үҙең шунда ҡойонорһоң аҡ нурҙарға,*
*Ғүмеркәйең торор бары балҡыуҙарҙан.*

Д. Шәрәфиҙең һорауында ла, Ә. Үтәбайҙың яуабында ла шиғыр юлдарының рифмалашыуы а-а-б – тәртибендә килә. Әҫәр ун икегә – ун ике, ҡайһы бер өлөштәре һигеҙгә – һигеҙ үлсәмендә яҙылған. Шағирҙар фекерҙәрен нығытыу, көүәтләү өсөн мәҡәл-әйтемдәр ҙә ҡуллана. Мәҫәлән: «Сир йәшергән – ауырымай үлгән», «Ҡар башына ҡар етә», «Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ», «Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул», «Ил теләге – ирҙә».

Ил яҙмышы... Тел яҙмышы... Халыҡ яҙмышы... Ошо өс төшөнсә бөгөнгө көндөң мөһим көнүҙәк проблемаларынан һанала. Был мәсьәләләр Д. Шәрәфетдинов менән Ә. Үтәбайҙың шиғри әйтешенең үҙәгендә тора. Әҫәргә сәсәндәр әйтештәрендәгесә, улар традицияларын уңышлы үҫтергән Аҡмулла, Ш. Бабич, С. Яҡшығолов, М. Ғафури, Д. Юлтый, М. Кәрим һ.б. хитап һәм мәктүптәрендәгесә, манифестацион-

публицистик аһәң, граждандлыҡ пафосы хас. Үҙенең әхлаҡи-дидактик йүнәлеше, социаль-сәйәси идеялылығы менән ул ҙур ижтимағи-эстетик, тәрбиәүи әһәмиәткә эйә.

Ғәбиҙулланың «Ил эсендә кемең бар» әҫәре лә ике сәсәндең әйтеше формаһында ижад ителгән. Был әйтеш башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтендәге Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсән әйтешен хәтерләтә. Айырмаһы шунда – автор үҙе һорау ҙа ҡуя, яуап та бирә.

Беренсе сәсәндең биш поэтик йомаҡ-һорауына ла икенсе сәсән тапҡыр яуап ҡайтара.

***1-се сәсән:***

*Бына һиңә бер йомаҡ,*
*Бына һиңә бер йомъаҡ.*
*Йомъаҡ ҡаты төш булыр,*
*Көслөктәргә көс булыр.*
*Ярам, тиһәң, ярылмаҫ,*
*Алам, тиһәң, алынмаҫ.*
*Ташҡа бәрһәң, онталмаҫ*
*Һыуҙа ла ул юъалмаҫ,*
*Утта ла ул юъалмаҫ,*
*Алтындан да затлыраҡ,*
*Алмастан да ҡатыраҡ,*
*Көндән яҡты, нурлыраҡ,*
*Һинән, минән ҙурыраҡ*
*Ни булыр илеңдә?*
*Ни булыр илеңдә?*

***2-се сәсән:***

*... Ҡаты ла ҡаты тигәнең,*
*Затлы ла затлы тигәнең –*
*Халҡыңдағы берҙәмлек,*
*Халҡыңдағы берҙәмлек.*

Ғәбиҙулланың был әҫәрен ҡаршы тороусы бәхәссенең аҡыл тапҡырлығы, импровизаторлыҡ маһирлығы кимәлен билдәләүгә, әгәр еңелә ҡалһа, халыҡ алдында рисуай итеүгә йүнәлтелгән «йомаҡлы әйтештәр» төркөмөнә индерергә мөмкин.

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә быуаттар һуҙымында үҫешкән сәсәнлек һүҙ сәнғәтендә ныҡлы урын алған әйтештәрҙән тыш, әйтеш формаһын ҡулланып яҙылған шиғырҙар ҙа бар. Мәҫәлән, М. Илбаевтың «Ас башаҡ менән Туҡ башаҡ» тигән үҙенсәлекле әҫәрендә автор ике башаҡтың әңгәмәһен һүрәтләй. Ас башаҡ уңышы булмағанға үҙ туғанын – туҡ башаҡты күрә алмай, ҡарғай:

*Ерле юҡҡа ғүмер уҙғарҙым,*
*Эй, туъаным... дошман туъаным!*
*Күрә алмайым хәҙер мин һине,*
*Ергә йығҡһын ине ел һине!*
*Серећен ине ятып был башың,*
*Мин ҡаръышлы һиңә, ҡорҙашым.*

Туҡ башаҡ уға былай яуап ҡайтара:

*Буйъа үҫтең, аҡылың үҫмәгән,*
*Көнсөл бул тип кем һуң көсләгән...*
*Ҡаръыштарың ҡайтһын үҙеңә,*
*Мин төкөрмәм һинең йөҙөңә.*
*... Ҡан-ҡәрҙәшһеҙ минең йәнем юҡ,*
*Уңыш уртаҡ булһын – хәлем юҡ...*
*Байлыҡ мыҫҡал, үлсә-үлсәмә,*
*Туъанлыҡ бит – таяу, үс нимә...*

М. Илбаевтың был әҫәре «Кешене ҡарғама, ҡарғыш үҙеңә төшөр», «Таш менән атҡанға аш менән ат», «Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ – хурлыҡ» кеүек халыҡ мәҡәлдәренә һәм әйтемдәренә ауаздаш фекерҙе ҡабатлай.

Факиһа Туғыҙбаеваның да мөхәббәт тураһындағы байтаҡ әҫәрҙәре әйтеш жанры формаһында яҙылған («Нисек йәшәргә һуң уны күрмәй?», «Һөйләшеү» һ.б.). Был йәһәттән айырыуса «Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәре иғтибарға лайыҡ. Шағирә мәшһүр эпос геройҙарын мәңгеләштереп, уларҙың вәғәҙәләшкән ант йырын әйтеш ҡалыбына һала.

***Һыуһылыу:***

*Заятүләк, һөйгән кейәүем һин,*
*Күҙең төшөп мине тапҡанъа.*
*Минең өсөн тәүге күреүҙән үк*
*Әйләндең дә ҡуйҙың ҡалҡанъа.*

***Заятүләк:***

*Эй, һыу ҡыҙы, һөйгән кәләшем һин,*
*Ғашиҡ иттең утты – ер улын.*
*Ут менән һыу бары мөхәбәттән*
*Ҡауышты бит, минең һылыуым...*

Әйтештең мөхәббәт хистәре донъяһында гиҙгән егет менән ҡыҙҙың ҡапма-ҡаршы әйтеше төрөнә ҡараған был

поэтик әҫәр халыҡ йырҙарына хас булған унға-туғыҙ ижекле үлсәүгә ҡоролған. Әммә унда халыҡ йырҙарына хас булған поэтик йәнәшәлелек (параллелизм), эмоциональ көсәйтеү алымдары (-ғына, -генә, -ҡай, -кәй киҫәксәләре һәм ялғауҙары), сағыштырыуҙар осрамай тиерлек.

Гөлфиә Юнысованың «Дим ҡыҙы» исемле әҫәре лә ғашиҡтар әйтешенә оҡшаш. Шиғри ҡалыбы менән ул ҡыҫҡа йыр формаһын хәтерләтә.

***Егет:***

*– Эй, Дим ҡыҙы, һин Димгә*
*Оҡшағанһың, тиҙәр бит.*
*Яр өҫтөндә яңғыҙ һуҡмаҡ –*
*Минең һалған эҙҙәр бит.*
*Нисә йылдар йөрәгеңә*
*Алтын аҫҡыс эҙләйем.*
*Үҙеңде лә, һүҙеңде лә*
*Аңлай алмай йөҙәйем.*

**Ҡыҙ:**

*– Күрә белһәң, йөрәгемдә*
*Кеше асмаҫ бигем юҡ,*
*Мин – Дим ҡыҙы, холҡобоҙ бер,*
*Ул хаҡта һис шигем юҡ,*
*Ташлан Димдең ҡосағына,*
*Йөҙөрлөк булһаң ғына,*
*Сөңгөлгә лә, ағымға ла*
*Түҙерлек булһаң ғына.*

Һуңғы йылдарҙа традицион әйтеш жанрында заманалар бәйләнешен иҫәпкә алып, ижад итергә ынтылыусы шағирҙар араһында М. Ямалетдиновтың ижади эҙләнеүе лә иғтибарға лайыҡ. Уның «Әйтеш» тип исемләнгән шиғыр-әйтеше, мәҫәлән, ғүмерҙең ҡәҙерен белергә, бары тик яҡшылыҡтар эшләргә саҡыра:

*– Был донъяны фани итмәҫ инек,*
*Ике ғүмер беҙгә бирелһә,*
*Ә шулай ҙа нишләр инең, бер саҡ*
*Бер күҙәнәккенәң терелһә?*
*– Теләр инем ауыл урамында*
*Үлән булып шытып сығырға:*
*Бер сабыйға йомшаҡ булыр ине*
*Тәүге аҙымын яһап, йығылһа.*

С. Әлибай поэзияһында ла әйтешкә яҡын әҫәрҙәр осрай. «Әйтсе, тулҡын!» исемле күңелле ноталарға һалынған, йәнләндереү алымы ҡулланылған шиғыр ихласлығы, тәбиғи ябайлығы, еңел уҡылышлы булыуы менән айырылып тора.

*– Ниңә шулай шаяраһың?*
*Әйтсе, тулҡын.*
*– Шаян елдә яралғанға*
*Шаян холҡом.*
*– Алыҫҡамы һин бараһың?*
*Әйтсе, тулҡын!*
*– Бик алыҫҡа. Йәндәремә*
*Нурҙар тулһын!..*

Т. Йосоповтың «Өҙөлмәгән өмөт», Х. Назарҙың «Донъя белә», Р. Ниғмәтуллиндың «Үҙгәреш», Д. Талхинаның «Һөйләшеү», Т. Дәүләтбирҙинаның «Яратҡанға шулай», Р.Түләковтың «Тау артына ҡояш ышыҡланһа», Буранбайҙың «Яҡташтар һөйләшеүенән», С. Ғәбиҙуллиндың «Йәнтөйәгем – тауҙарҙа» исемле шиғырҙары ла быуаттар төпкөлөнән әйтеш формаһын, сара-алымдарын ижади ҡулланыу ерлегендә тыуған.

Был жанрға мөрәжәғәт итеп әҙиптәребеҙ шиғриәтте яңы формалар менән байытып ҡына ҡалмай, әхлаҡи-этик, эстетик традициялар үҫтерелешенә лә яңы һулыш өрә.

**Әҙәбиәт:**

1. Галин С. Тел аҫҡысы – халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1999.

2. Иҙелбаев М. Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәте (халыҡ ижады һәм яҙма әҙәбиәт менән бәйләнеше, жанрҙар тәбиғәте, поэтик мәсьәләләре). – Өфө: БДУ, 2000.

3. Йәшәйешебеҙ хаҡында Д. Шәрәфи менән Ә. Үтәбайҙың әйтешкәне //Шоңҡар, 1998, № 6, 35-се бит.

4. Ғәбиҙулла. Йән йылыһы //Егет һүҙе: шиғырҙар йыйынтығы. – Өфө: Китап, 1997. – 256-сы бит.

**Миңлегөл ТАЙСИНА.**

# МӨХӘМӘТША БУРАНҒОЛОВ ДРАМАТУРГИЯҺЫНДА МИЛЛИ ФӘЛСӘФӘ

*(Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 125 йыл тулыуға ҡарата)*



Атаҡлы фольклорсы, халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов милли ерлекле драматург булараҡ та танылыу яулаған әҙип ине.

Ул 1888 йылдың 15 (27) декабрендә хәҙерге Ырымбур өлкәһе Ҡыҙылгвардеец районы Үрге Ильяс ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1900 йылда үкһеҙ етем ҡала. Автобиографияһында яҙыуынса, ағалары тәрбиәһендә үҫә. Күршеләге Иҫке Юлдаш ауылында земство мәктәбен тамамлағас, Ырымбурға бара. Йәйҙәрен төрлө эштәрҙә йөрөп (башлыса ҡаҙаҡ балаларын уҡытып), ҡыштарын белемен арттырыуҙы дауам итә. 1907 йылда – Ҡарғалы, 1911 йылда «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен тамамлай. 1912 – 1916 йылдарҙа Ҡайыпҡол ауылы мәктәбендә эшләй, аҙаҡ Быҙаулыҡ ҡалаһындағы халыҡ мәғарифы бүлегенә милли мәктәптәр инспекторы булып урынлаша. Октябрь революцияһынан һуң Туҡ-Соран кантонында халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, 1919 йылдың февраленән 1920 йылдың декабренә тиклем Туҡ-Соран кантоны башҡарма комитетының рәйесе. 1921 йылдан 1937 йылға тиклем төрлө мәктәптәрҙә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡыта.

1937 йылда, милләтселектә ғәйепләнеп, ҡулға алына. Иреккә сыҡҡандан һуң, 1938 йылдың сентябренән, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр. Әммә ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1945 йылдың 27 ғинуарында ҡабул ителгән «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында»ғы ҡарарында Мөхәмәтша Буранғоловтың тарихи әҫәрҙәренә ҡарата милләтселек мөһөрө һуғыла, автор тарихты боҙоп күрһәтеүҙә ғәйепләнә һәм эҙәрлекләүҙәргә дусар ителә. Һөҙөмтәлә 1950–1956 йылдарҙа һөргөндә була. Азат ителеп Башҡортостанға ҡайтҡас та, ғүмеренең ахырынаса (1966 йыл вафат) ғәҙеллек өсөн, үҙен үҙе яҡлап ысын мәғәнәһендә тиңһеҙ көрәш алып барырға мәжбүр була. Исеме матбуғатта телгә алынмай, әҫәрҙәре нәшер ителмәй. 1910 йылда уҡ мәшһүр Ғәбит сәсәндән яҙып алынған бөйөк «Урал батыр» эпосы үҙе үлгәндән һуң ғына (1968 йылда) донъя күрә.

Был йәһәттән уның төрлө инстанцияларға яҙған хаттары аяныслы яҙмыш ҡиссаһы булып ҡабул ителә.

***

*Прокурору Башкирской АССР*
*Бурангулова Мухаметши Абдурахмановича*
*г. Уфа, ул. Тукаевская, д. 37, кв. 5*

*жалоба.*

*Постановлением Особого Совещания при МГБ СССР от 1950 г. по 58 – 10 ч. 1 и 58 стст. УК я был осужден к заключению в ИТЛ сроком на 10 лет. В течение 6 лет я находился в заключении и 12 мая 1956 г. освобожден согласно Указа През. Верх. Сов. СССР от 3 сент. 1955 г.*

*Осужден был неправильно.*

*Мне было предъявлено два пункта обвинения.*

*1) Участие в валидовщине; г) в национализме.*

*Оба эти обвинения ничем не подтверждены, являлись абсолютно голословными, т. к. никакого участия в валидовщине я не принимал, членом валидовского правительства не состоял, в то время я работал учителем начальной школы в Оренб. губернии и вообще я всю свою жизнь занимался педагогической деятельностью, у меня 35 лет стажа работы в области народного образования.*

*Я трижды был арестован по обвинению в участии в валидовщине – в 1920, в 1930 и 1937 годах, но каждый раз освобождался за отсутствием оснований<…>*

*И вот в 1950 году я был арестован в четвертый раз. Согласно ст. 40 Закона о судоустройстве СССР, союзных и автономных республик дело мое должно было рассматриваться в Верх. Суде БАССР.*

*Поскольку обвинение не было подтверждено соответствующими доказательствами, то Верх. Суд. БАССР дело к своему производству не принял и оно было направлено на рассмотрение Особого Совещания, которое и осудило меня, не имея никаких доказательств моей вины.*

*Я, как башкирский писатель, написал более 50 произведений. Национализм нашли в моей драме «Идукай и Мурадым».*

*В начале национализма в ней не находили и она с большим успехом шла на сцене в театрах, была положительная рецензия в «Литературной газете» в 1940 г., которая написала, что Идукай и Мурадым были башкирскими народными героями, боровщимися против Золотой Орды и они действительно были народными героями, боровщимися против хана Тохтамыша.*

*Позднее в этой драме нашли национализм, меня арестовали и осудили за написание этой драмы.*

*Если даже и допущены какие-либо ошибки исторического порядка в этой драме, то ведь за это достаточно покритиковать, поправить ошибку, а нельзя же за это арестовывать, и осуждать к 10 годам тюремного заключения. Уголовный кодекс РСФСР не предусматривает такого состава преступления.*

*В отношении меня допущена ошибка. Я прошу ее исправить и снять с меня не заслуженное пятно врага Сов.власти. Я пожилой человек, мне сейчас 68 лет, в лагере показал себя с положительной стороны, активно*

*участвовал во всех общественных мероприятиях, работал бригадиром, к работе относился хорошо, сейчас являюсь инвалидом труда второй группы.*

*Бурангулов.*
*8 июня 1956 года.*

*Секретарю ЦК КПСС тов. Суслову Михаилу Андреевичу*
*от писателя, народного сэсэна*
*Баш. АССР Бурангулова Мухаметша Абдрахмановича,*
*1888 г.рождения, проживающего*
*в г. Уфе по ул. Мингажева 125, кв. 45*

*заявление.*

*Я, фольклорист, в силу чего, мне очень хорошо известен башкирский фольклор. В Башкирском фольклоре есть более триста песен и легенд с соответствующей своей мелодией.*

*Эти песни и легенды в абсолютном большинстве показывают угнетение женщин баями, ханами, тарханами и т.д. Также есть очень интересные героические эпосы.*

*Я, как фольклорист с 1905 года начал собирать фольклорный материал и обрабатывал его. На основе собранного богатого фольклора и эпоса, мною написано ряд драматических произведений, идеей которых был показ несправедливой рабской доли башкирских девушек и женщин в прошлом. В этой связи Башкирское правительство, учитывая мою заслугу в области фольклора, 18 апреля 1944 года присвоило мне почетное звание народного сэсэна Баш. АССР (по казахски – акын).*

*В 1942-43 годах на сюжет народного эпоса мною было написано драматическое произведение «Идукай и Мурадым». Однако, по неизвестным мне причинам, героя этого произведения как-то перепутали с полководцем Туктамыш хана Идегеем, который после смерти моего героя еще сорок лет жил и служил в Золотой Орде<…>*

*Герой этого произведения погиб в борьбе против ханов и никоем образом не является исторической личностью, как это отмечено в постановлении ЦК ВКП (б) от 26 августа 1946 года «О репертуаре драматических театров и мерах по его улучшению».*

*Такое заблуждение отдельных лиц, которые ввели в заблуждение ЦК ВКП (б) чуть ли не стоило мне жизни. Ибо после появления вышеуказанного постановления я был обвинен и в 1950 году осужден особым совещанием на 10 лет. Освободился лишь в 1956 году и был полностью реабилитирован 30 октября 1959 года. В свою очередь был и восстановлен в членстве Союза писателей СССР и народного сэсэна Баш. АСССР.*

*Однако пятно – ошибочное представление моего Идукея ханским полководцем Идегеем в постановлении ЦК ВКП (б) от 26 августа 1946 г. до сих пор имеет свое влияние на мои остальные произведения того времени и даже на последних. Ибо это пятно как бы является тормозом, недоверием на издание моих трудов. Поэтому убедительно прошу Вас дать по существу вопроса мне и нашему Баш. отделу Союза писателей СССР исчерпывающее разъяснение, которое раскрыло бы мне дорогу в моей литературной деятельности и возможности признания моих трудов.*

*К заявлению прилагаю:*
*1. Копию справки Президиума Верховного суда Баш. АССР от 31 октября 1959 г. № 259п – 59*
*2. Выписку из протокола № 5 заседания Правления Союза писателей БАССР от 12 ноября 1959 г.*
*(М. Бурангулов)*
*13 марта 1962 г. г. Уфа.*

*Первому секретарю ЦК КПСС,*
*Председателю СМ СССР*
*т. Хрущеву Н.С.*
*От писателя, народного сэсэна*
*Баш. АССР*
*Бурангулова Мухаметша Абдрахмановича,*
*г. Уфа ул. Мингажева 125, кв. 45*

*заявление.*

*Некоторые клеветники, любители дешевой славы, которые занимались творением из муха слона и пользуясь жестокостью Сталина беспощадно клеветали на честных людей и умывались их слезами. Именно такие в 1946 году 26 августа, представили в ЦК ВКП (б) доклад о репертуарном плане драматических театров. В этом докладе они взяли на замечание мою драму «Идукай и Мурадым» и в этой связи пытались меня оклеветать и обвинять в чем-то. И действительно, в 1952 г. по их инициативе, по приговору особого совещания я был осужден на 10 лет и был выслан в лагерь. Освободился после смерти Сталина, в 1956 г.*

*После письма к т. Суслову М.А. ...работник отдела агитации и пропаганды Обкома КПСС т. Ахунъянов вызывает меня. Я обрадовался и думал, что будет обменяться со мною с мнением и т.д. Но он поступил все равно как прокурор, который вызывает обвиняемого для объявления постановления и привлечения его в уголовной ответственности. Он оказывается поделился мнением тех же людей, которые [с самого –* ***Ф.К.****] начала были против моей деятельности и снова ответил в ЦК КПСС отрицательно.*

*(Якобы собранные мною материалы переделаны и утратили своей современности... Они пытаются доказать, что собранные в 1905 году фольклорные материалы и сданы в институт, якобы мною переделаны вопреки их содержанию и тем самым эти материалы потеряли исторической ценности и не отвечают требованиям современности (?!)*

*Не понимаю, что они хотят?..*

*КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының*
*беренсе секретары иптәш Нуриевҡа*
*Өфө, Туҡай урамы, 87, кв. 5 М. А. Бураңъоловтан*
*10 июнь, 1960*

*...Суд ҡарауынан һуң Яҙыусылар союзы ағзаһы булыуымды ла, башҡорт халыҡ сәсәне исемемде лә восстановить иттеләр. Инде миңә нимә ҡалды? 72 йәшкә етһәм дә, һаулыҡ бар, ҡалған ғүмеремде тыныс ҡына ултырып, халыҡ файҙаһына ҡулдан килгәнсә эшләргә генә ҡалды. Хәҙер партия,*

*халыҡ, хөкүмәт минең алға шуны ҡуя һәм эш талап итә. Ләкин минең донъяла йәшәүемдән күпһенгән бәндәләр минең хеҙмәттәремде лә, үҙемде лә тереләй күмеп, халыҡтан айырырға тырышалар.*

*Мин үҙем ҡулға алынғас, үҙенең район прокуроры булыуы менән файҙаланып, минең ҡарсыҡты төрлө провокациялар менән ҡурҡытып, Валиев Аъзам тигән бераү квартираны алып, ҡарсыҡты бер ниндәй условиеһе булмаған бер бүлмәгә тыҡҡас, библиотека һәм мебелдәрем бында һыймауы арҡаһында, элекке квартирамда ҡалыу айҡанлы бөтәһен туҙҙырып бөткән. Хәҙер мин бер ниндәй условиеһы булмаған бүлмәлә йәшәйем, ләкин минең эшемә ул да аяҡ сала алмай, һаман эшләйем. Миңә фәҡәт мине электән күрә алмаған бәндәләр генә аяҡ салалар. Улар үҙҙәре туранан-тура бер ҙә эш күрмәй, өр-яңы кешеләргә аҕыу ебәрәләр.*

*...Иптәш Ғәйнуллин Обкомда ултырһа ла, үҙ башы менән эшләмәгәнлеген, балтаға һап булып ҡына эш иткәнен мин яҡшы беләм. [Шундай –* ***Ф.К.****] кешеләрҙән эшеңә ярҙам көтөп буламы? Әлбиттә, юҡ. Эшемдә етешһеҙлектәр бар икән, объектив ҡараш менән тура әйтеп, ярҙам бирһәләр генә эшләп булғанды мин әйтмәһәм дә, һеҙ үҙегеҙ бик яҡшы беләһегеҙ.*

*Ана шулай бераүҙе ала, бераүҙе ҡола күреп, үгәйһетмәһендәр ине. Совет законында бер синыфташ кешеләр – совет кешеләре араһында: урам тар булһа ла, шулар ғына бейеһен, ауыҙы ҡыйыш булһа ла, улар ғына һөйләһен, тигән закон юҡ.*

*...1962 йылдың 13 мартында ЦК КПСС-ҡа, иптәш Михаил Андреевич Сусловҡа ғариза яҙғайным. Ул минең ғариза буйынса Обком КПСС-тың ҡарашын һораған икән. Шул айҡанлы мине иптәш Ахунъянов саҡырғайны. Мин, һәйбәт, иғтибарға алғандар, ЦК-ға яуап бирмәҫтән элек минән дә һорашырға уйлай икән, тип, шатланып барғайным. Баҡһаң, иптәш Ахунъянов яуабын яҙып ебәргән, мине тик ғәйепле кешене ғәйепләү актын иғлан ҡылырға саҡырған прокурор һымаҡ ҡына булып саҡырған икән.*

*Сөнки Ахунъянов иптәштең яуабының бер ауыҙ һүҙе лә минең әҫәрҙәрҙе уҡып, үҙ башынан сыҡҡан һүҙҙәр түгел.*

*Бары ла минең әҙәбиәтте генә түгел, ә үҙемде ҡәбергә күмергә йөрөгән юғарыла әйтелгән кешеләрҙең һүҙе генә. Ахунъянов иптәш әйтә: һинең йыйған фольклор материалдарының тарихи әһәмиәте юҡ, ти...*

*Мин быны менән бераүҙе лә яуапҡа тарттырырға ла, 50 йыл буйынса йыйған, яҙған әҫәрҙәремдең барын да донъяға сығарыу өсөн ярҙам итегеҙ, иптәш Нуриев, тип тә һорамайым. Мин иҫке мәҙрәсә емеше генә түгел, заочно булһа ла techинститут менән юридический институтты бөткән. Унға саҡлы ғына һанай ҙа, ике быҙауға кәбәкте айырып, бирә алам. Иптәш Ахунъянов ул яуабы менән үҙен урман әкиәтендәге һымаҡ, юғарыла әйтелгән кешеләргә балта һабы ғына икән. Бына мин шуны әйтәһем килә. Мин хәҙер 74 йәштә. 35 йыл уҡытыусы булып пенсия алам. 50 йыл, яманмы, яҡшымы, әҙәбиәткә хеҙмәт иттем. Ҡалған ғүмеремдә лә халыҡҡа хеҙмәт иткем килә һәм партия, Совет хөкүмәтенең иғтибарға алыуын һуңғы көнөмә саҡлы аҡларға теләйем. Минең шул юлыма аяҡ салмаһалар ине!*

*Бына шул, ярҙам итһәгеҙ ине, тип һорайым, иптәш Нуриев.*

*1962 й.*

***

Асыҡлыҡ заманы башланғас, сәсәндең исеме менән бергә ижады ла халҡына әйләнеп ҡайтты. Ә инде тыуыуына 100 йыл тулыу көндәре әҙәбиәтебеҙҙең, рухиәтебеҙҙең оло байрамына әүерелде: Өфөнөң «Нефтсе» мәҙәниәт һарайында тантаналы шарттарҙа юбилей кисәһе уҙғарылды, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙиптең ижади эшмәкәрлегенә арналған ғилми конференция ойошторолдо, бер нисә йылдан китаптары баҫып сығарылды.

***

Мөхәмәтша Буранғоловтың күп яҡлы ижади эшмәкәрлегендә драматургия күренекле урын биләй. Уның пьесалары хаҡында, айырыуса «Башҡорт туйы»на бәйле уҙған быуаттың егерменсе йылдарында уҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр әйтелә, ваҡытлы матбуғат биттәрендә рецензия-мәҡәләләр күренә башлай («Башҡортостан», 1927, 5 июнь; 1929, 30 май; 13 июнь, 1 июль). Улар араһынан Дауыт Юлтыйҙың мәҡәләһен («Башҡортостан», 1935, 31 декабрь) айырыңҡырап күрһәтергә мөмкин. Һуңғы осорҙағы ғалимдар ҙа күбеһенсә, уның драматургияһына иғтибар йүнәлтә. Был йәһәттән бигерәк тә Миңлеғәле Нәҙерғолов («Ағиҙел»,1988, № 11), Зәйтүнә Шәрипова («Ағиҙел», 1988, № 12), Илдус Буләков («Ағиҙел»,1988, № 11), Рәшит Шәкүр («Арҙаҡлы башҡорттар», Өфө, 1998), Фәнүзә Нәҙершина («Башҡортостан», 2004 йыл, 6,8 ғинуар) мәҡәләләре әһәмиәтле.

Мөхәмәтша Буранғоловтың сәхнә әҫәрҙәре башҡорт тарихынан, башҡорттоң рухи донъяһынан айырылғыһыҙ. Авторҙың бер нисә пьесаһын иҫәпкә алмағанда, тема, сюжет йәһәтенән уларҙың барыһы ла тарихи йырҙарҙан, риүәйәт-легендаларҙан – ғөмүмән, халыҡ ижады әҫәрҙәренән һутланып, уларға тамырланып, үҫеп сыҡҡан. Шуға ла уларҙа тәү сиратта фольклорға хас демократик рух, шәхес ирке, ил азатлығы өсөн көрәш мотивтары өҫтөнлөк итә, миллилек көслө.

Әйтергә кәрәк, миллилек, халыҡсанлыҡ (мәҡәләлә был төшөнсәләр, ғәмәлдә, синоним рәүешендә ҡулланыла) ил яҙмышындағы хәл иткес ваҡиғалар, әҫәрҙәрҙә хәрәкәт итеүсе тарихи йәки легендар шәхестәр булыуы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең иркен файҙаланыуы менән генә аңлатылмай. Миллилекте һүрәтләнеүсе ваҡиғаларға этәреш биреүсе эске ағымға тулайым халыҡтың сәбәпсе булыуын аса алыу тыуҙыра. Халыҡ иһә, үҙ сиратында, байҙар менән ярлыларҙан ғына тормай. Әлбиттә, Мөхәмәтша Буранғолов, үҙ заманы вәкиле буларaҡ, коммунистик идеология принциптарына ҡаршы бара алмай ине. Уның бер үк әҫәрҙең бер нисә вариантын эшләүе, ҡайта-ҡайта эшкәртеүе лә, художестволы камиллыҡҡа ирешеүҙән дә бигерәк, тап ана шул сәйәси талаптарҙы иҫәпкә алырға ынтылыу менән бәйле. Бындай ижад ирекһеҙлеге әҫәрҙең формаһына ла, йөкмәткеһенә лә күпмелер зыян килтереүенә, яһалмалылыҡҡа этәреүенә ҡарамаҫтан, уларҙағы миллилек һыҙаттарын юҡҡа сығара алманы. Бына «Башҡорт туйы»ның бер варианты булған «Гөлсәсәк» драмаһы. Бай ҡатыны булған Туйбикә иренең бер ҡатлылығына бәйле: «Тибенһеҙ (йәғни тибенлекһеҙ ҡалһаң. – **Ф.К.**), ҡыш малыңды ҡырҙырып, тарханлығыңды ҡосаҡлап, бөрйәндәй ҡая башында саңғы юнып, йүкә һутлап ултырырһың», – ти. Күренеүенсә, Туйбикә иренең

төптән уйлап эш итә белмәүенә бәйле, халыҡ аҡылына мөрәжәғәт итеп, бөгөнгө (бөрйәндәр) миҫалында ваҡиғаның ни менән барып бөтөү ихтималлығын иҫкәртә.

Был йәһәттән бигерәк тә ил ағаһы ролендә сығыш яһаған Айсыуаҡ ҡарт образы характерлы. Ул байлығы, тупаҫ көсө, ағаһының тархан булыуы менән маһайып, башҡаларҙы бар тип тә белмәгән, ҡылыс ҡармарға әҙер алабарман Ханнан алдында ла юғалып ҡалмай («Ҡабыҡ һуғып, бүре ҡурҡытма!»). Был уҙаман үҙ исеменән генә йөрөмәй. Үҙ артында халҡы тороуын яҡшы белеп эш итә. Шуға ла уның телмәре аша халыҡ фекере еткерелеүе, милли фәлсәфә төйнәлеүе бик тәбиғи: «Беләге йыуан берҙе йығыр, теләге йыуан меңде йығыр, ил теләге – барын да йығыр...» Ил ағаһының илгә таянырға тейешлеген ул туранан-тура ла ярып һала: «Айсыуаҡ һыуға етмәй күлдәк һалмаҫ, илгә таянмай һүҙ асмаҫ... Донъяла иң яман түрә лә, ҡәберлеккә күргәс, халыҡ менән көнөм башҡа булһа ла, ҡәберем бергә буласаҡ бит, тип бер түбән ҡарай. Ил ташҡыны һиндәй (Ханнанға бәйле. – **Ф.К.**) боҙҙарҙы ғына ағыҙмаған!» Бөгөн дә ни тиклем актуаль яңғырай бындай иҫкәртеү! Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бәғзеләрҙең бары матди байлыҡ ҡына көҫәүен тарихи һабаҡ та, рәнйетелгәндәрҙең күҙ йәше генә түгел, йәндәре ҡыйылыуы ла туҡтата алмай...

Халыҡ фәлсәфәһен Ҡараһаҡал да («Ҡараһаҡал» драмаһы) ҡыйыу асып һала: батырҙы яу тыуҙыра. Башҡортто тереләй яндырған Тәвкилевҡа ул бына нимә ти: «Һеҙҙең илде утҡа тотоуығыҙ, батырҙар ҡанын ҡойоуығыҙ үҙе ил батырын тыуҙыра!»

Халыҡ теләген, ирмен тигән ирҙәрҙең ил алдындағы бурысын батырға мөрәжәғәтендә («Иҙеүкәй һәм Мораҙым» трагедияһы) Һабрау сәсән дөйөмләштерә:

*Уралға антың биреп,*
*Ал ҡулыңа ҡылысты...*
*Даның илгә таралһын,*
*Таянырлыҡ ил булһын!*
*Илде ҡулға алған һуң,*
*Ҡуш Урҙаның ҡушына*
*Шунан яра сабырһың!..*

Ә инде изге яуҙа Иҙеүкәй ҡаһармандарса һәләк булғас, уның эшен дауам иттереүсе итеп улы Мораҙымды күрә:

*Ал, Мораҙым, атаңдың*
*Ҡуш Урҙаның егенә*
*Айыра сапҡан ҡылысын —*
*Ағасы ауһа, тамыры бар,*
*Ҡыйрата сап, ҡалмаһын!..*

Шулай итеп, Мөхәмәтша Буранғолов драматургияһы, һүрәтләнгән осорға ярашлы, милли фәлсәфәне халыҡсан телдә, художестволы әҙәбиәт ҡанундарына хилафлыҡ килтермәйенсә аса алыуы менән әһәмиәтле. Әҙиптең был йүнәлештәге эшмәкәрлеге лә оло баһаға лайыҡ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

# ЕГӘРЛЕ ПУБЛИЦИСТ

*(Мәхмүт Хужин ижады хаҡында)*

Публицистика, ысынбарлыҡты үҙенсәлекле сағылдырған әҙәбиәт жанры булараҡ, идеологик көрәштең алдынғы сафында тора. Әҙәбиәттең башҡа жанрҙарынан айырмалы рәүештә, уға оперативлыҡ һәм динамизм хас. Уның мөмкинлектәренә күрә, был өлкәләге ижад илдәге сәйәси, социаль, мәҙәни һәм иҡтисади тормошҡа ныҡыраҡ тәьҫир итә ала. Әгәр ҙә «нәфис әҙәбиәт тормошто образлы формала сағылдырыу, факттарҙы һәм күренештәрҙе типиклаштырыу саралары, уйҙырма менән файҙаланһа, публицистика иһә – факттар, фекерләүҙәр, йәғни логика, дидактика, документалистика сараларын ҡуллана»[1], – ти күренекле публицист, филология фәндәре кандидаты Р. Хажиев. Г. В. Плеханов үҙенең «сәнғәт һәм йәмғиәт тормошо» тигән хеҙмәтендә «рәссам үҙенең идеяһын образдар менән һүрәтләй, шул уҡ мәлдә публицист үҙенең фекерен логик һығымталар ярҙамында раҫлай», – тип яҙа. Әҙәбиәттең башҡа жанрҙарына ҡарағанда публицистика – тура фекерле һәм ҡыйыу жанр. Ул факттар һәм логика менән иҫбат итә. Йыш ҡына башҡа төр әҙәби әҫәрҙәрҙең эсенә үтеп инеп, уларға яңы сифат бирә, публицистик төҫ һәм үҙенсәлек өҫтәй. Р. Хажиев әйткәнсә, «Публицистика – әҙәбиәттең бер төрө генә түгел, ул уның алдынғы төркөмө, уның разведчигы. Сөнки йәмғиәт өсөн иң ауыр ваҡыттарҙа, әҙәбиәттең башҡа төрө вәкилдәре юғалып ҡалғанда, нәҡ публицистика идеялар көрәше майҙанына атылып сыға һәм үҙенең сағыу, үткер һәм проблемалы очерктары, мыҫҡыллы фельетондары, уҫал памфлеттары, аналитик мәҡәләләре менән дөрөҫ юл яра»[2].

Публицистика ысынбарлыҡ менән туранан-тура бәйләнештә тора. Улай ғына ла түгел – ул уның менән туклана, унан көс һәм ҡеүәт ала. Шуның өсөн дә уны донъяла һәм илдә барған процестарҙан башҡа аңлау һәм тасуирлау мөмкин түгел.

XX быуаттың 80-се йылдар уртаһында башланған «үҙгәртеп ҡороу»ҙы илдең киң мәғлүмәт саралары тарафынан киң пропагандалау халыҡ аңында тәүге мәлдә бер ни тиклем хуш күңеллелек тыуҙырҙы. Шул заманда башланған «баҙар иҡтисады»н ҡороу сәйәсәте илдә иҡтисадты үҙгәртеп ҡороуға алып бара ине. Быны төп мәғәнәһе – илдә яңынан капитализм мөнәсәбәттәрен тергеҙеүгә юл асыу. Әммә тора-бара «үҙгәрештәр еле»нең ҡаршылыҡлы яҡтары ла һиҙелгәс, йәмғиәттә билдәле бер төңөлөү хисе тойола башланы. Был йүнәлеш халыҡ тормошонда төрлө негатив күренештәр хасил итте. Айырыуса 1991 йылда СССР тарҡалғас, «йәмғиәт аңы» ауыр кризис кисерҙе. Шул уҡ ваҡытта төрлө баҫмаларҙа илдең һәм йәмғиәттең ҡайҙа барыуы тураһында уйланыуҙар йышайҙы.

---

[1] *Р. Хажиев. Слово о башкирской публицистике. // Истоки, 1 июль, 2009, №26.*
[2] *Р. Хажиев. Шунда уҡ.*

Билдәле политологтар, тарихсылар, иҡтисадсылар, философтар, социологтар үҙҙәренең фекерҙәрен еткерҙе. Күп кенә әҙиптәр, журналистар һәм дәүләт эшмәкәрҙәре лә килеп тыуған проблемаларҙы ситтән генә күҙәтеп торманы, уйланыуҙары менән сығыш яһаны.

Дөйөм ил күләмендә барған процесс йөмһүриәттең матбуғат биттәрендә лә билдәле сағылыш тапты. Журналистар һәм фән эшмәкәрҙәре иҡтисадта һәм йәмғиәтте «демократлаштырыу»ҙа килеп тыуған ҡаршылыҡлы күренештәрҙе яҡтырта барҙы. Шәхси милекселек һәм хосусилаштырыу хәрәкәттәре киң йәйелгән осорҙа халыҡтың киң ҡатламдары яңы килеп тыуған мөхиттә юғалып ҡала, уға күнегеп һәм яраҡлашып өлгөрмәй. Һөҙөмтәлә йәмғиәттә милек тигеҙһеҙлеге ҡырҡа көсәйә. Йәмғиәт тормошонда «Яңы нуворищтар», олигархтар барлыҡҡа килеү менән бер ҡатарҙан, киң ҡатламдарҙың рухи тарҡалыу һәм люмпенизацияға дусар ителеүе күҙәтелә. «Яңы хужалар» төрлө етештереү сараларын ҡулдарына төшөрөп, уларҙан тиҙ табыш алыу уйы менән генә йәшәй башлай. Уларҙың «эшмәкәрлектәре» йыш ҡына сәнәғәттә эшселәр иҫәбен кәметеүгә, эшләп йөрөгәндәрен ҡаты эксплуатациялауға, экологик проблемаларҙың көсәйеүенә килтерә. Күп кенә демографик һәм милли-мәҙәни проблемалар ҙа ошо «яңы ел»дең иҫеүенә бәйле.

Иҡтисадтың капиталистик нигеҙгә күсеүе ауыл хужалығында ла еңел барманы. Колхоз, совхоздарҙы тарҡатыу, фермерлыҡты, шәхси эшҡыуарлыҡты үҫтереү сәйәсәте ауыл халҡының күп өлөшөн эшһеҙлеккә дусар итте.

Илдә уҙғарыласаҡ реформаларҙы ғәмәлгә ашырғанда атаҡлы иҡтисадсылар һәм дәүләт эшмәкәрҙәре уларҙың киҫкен формаһына – «шок терапияһы»на өҫтөнлөк бирҙе. Философ Ғүмәр Мусин 1995 йылда «Ағиҙел» журналының 1-се һанында сыҡҡан «Реформамы, тик ниндәй һуң?» тигән мәҡәләһендә былай ти: «Бюрократтар инде хәҙер колхозсыға фермерлыҡ хеҙмәте тәҡдим итә. Әммә меңәр йыллыҡ община традициялары менән йәшәгән халыҡтан тиҙ арала эшҡыуар фермер «үҫтереү» хыялын нигеҙһеҙ тип иҫәпләйем»[3]. Был реформалар ауыл халҡының күп осраҡта бөлгөнлөккә төшөүенә, күп кенә ауылдарҙың юҡҡа сығыуына, милли мәктәптәрҙең һаны кәмеүенә алып барҙы. СССР тарҡалыуы һәм иҡтисадты үҙгәртеп ҡороу ил эсендә һәм сит илгә миграцияларҙы көсәйтте. Үҙәк тарафынан алып барылған уҡытыуҙа урындағы компонентты тарайтыу сәйәсәте йәш быуында «манҡортлоҡ», милли мәҙәниәткә битарафлыҡ тойғоһон арттырҙы. Үҙгәртеп ҡороуҙар арҡаһында килеп тыуған проблемалар йөмһүриәттең матбуғат биттәрендә лә сағылды.

Көнүҙәк темаларға арналған публицистик материалдар айырыуса «Ағиҙел» журналында йыш баҫылды. Журналдың махсус «Публицистика» рубрикаһында көнүҙәк мәсьәләләр һәр саҡ күтәрелеп килде. СССР тарҡалғас, «Башҡортостан» гәзитендә лә фәһемле материалдар донъя күрҙе, фәндең төрлө тармаҡтарында эшләгән ғалимдары, әҙиптәр, дәүләт эшмәкәрҙәре йыш ҡына публицистик яҙмалар менән сығыш яһай башланы. Улар илдең, халыҡтың киләсәге тураһындағы уйҙарын, фекерҙәрен киң халыҡ ҡатламдарына еткерергә тырышты. Был осорҙа публицистика жанрының айырыуса йәнләнеүе күҙәтелде. Бер төркөм әҙиптәр М. Кәрим, Б. Рафиҡов, Р. Бикбаев һәм башҡалар халыҡтың киләсәгенә ҡағылышлы фәһемле фекерҙәрен матбуғат биттәрендә баҫтырып сығарҙы. Уларҙың сығыштары йәмғиәттә киң резонанс алды. Шулай уҡ Д. Вәлиев, Ә. Хөсәйенов, З. Ураҡсин, Р. Байымов, Н. Мәҡсүтова һ.б. ғалимдарҙың сығыштары әһәмиәтле ине. Республиканың шундай танылған зыялылары рәтенә бер төркөм журналистар һәм публицистар ҙа баҫты. Улар араһынан Марсель Ҡотлоғәлләмовты,

---

[3]*Ғ.Мусин. Реформамы, тик ниндәй һуң? (Философтың көнүҙәк темаға уйланыуҙары) // Ағиҙел, 1995, №1, 142-се б.*

Сәлимйән Бәҙретдиновты, Зәйтүнә Ханованы, Ризван Хажиевты, Рәүеф Насировты һ.б. атап үтергә мөмкин. Шул төркөмдә Мәхмүт Хужиндың эшмәкәрлеге һәм ижады айырым урын алып тора.

Мәхмүт Хәйрүш улы Хужин 1953 йылдың 20 авгусында Стәрлебаш районының Табылды ауылында донъяға килгән. 1968 йылда – шул ауылдың һигеҙ йыллыҡ, ә 1970 йылда Һарайҫа урта мәктәбен тамамлай. 1971 йылда Совет Армияһы сафына саҡырылғанға тиклем колхозда эшләй. Ике йыл Тымыҡ океан флотында хеҙмәт иткәндән һуң, мәктәптә, артабан тағы колхозда эшләй. 1976–1981 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында белем ала. Уны тамамлағас, шул уҡ йылдың сентябрендә Стәрлебаш районының «Ленин юлы» гәзитендә ауыл хужалығы бүлеге хәбәрсеһе булып китә.

Публицистика менән 90-сы йылдарҙа шөғөлләнә башлап, М. Хужин экология, ауыл хужалығы буйынса беренсе мәҡәләләрен «Ағиҙел» журналында баҫтырҙы. Ауыл тормошон үҙе күреп, үҙ елкәһендә кисергән йәш журналист XX быуат аҙағында көнүҙәк темалар буйынса матбуғат биттәрендә ҡыйыу материалдар сығара. Бындай сығыштар ул осорҙа дәүләт эшмәкәрҙәренә һәм төрлө дәрәжәләге чиновниктарға оҡшап та етмәй. «Ағиҙел» журналының 1992 йылғы 9-сы һанында «Иҙелгән синыф» тигән аналитик мәҡәләһендә автор былай ти: «Беҙгә, журналистарға, рәсми вазифаларҙан, айырыуса элекке партократтарҙан эләгеп тә ҡуя (ни хәл итәһең, гәзит-журналдар тиҫтәләрсә йылдар КПСС комитеттары «кеҫәһе»ндә саҡта улар йырын йырланы бит)»[4]. Улар, автор әйтеүенсә, шағирҙарҙың һәм яҙыусыларҙың ижадында күбеһенсә тик тыуған ауылды, әсәйҙе, һөйгән ҡыҙҙы маҡтау һәм һағыныу йәки ҡәләмдәш иптәштәренең юбилейҙары тураһында тантаналы пафоста яҙыуҙарын теләр ине.

Ошо мәҡәләһендә М. Хужин халыҡ хужалығында хәлдәрҙең көндән-көн насарайыуын, кешеләрҙең көндәлек тормошоноң упҡын сигенә яҡынлашыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Борис Ельциндың программаһы тормошҡа ашыуына халыҡтың шиге нығыныуын белдерә: «Баҙар иҡтисады менән саманан тыш мауығыу ҙа?– ә быны халыҡ хужалығының һәр тармағы асыҡ күрһәтеп тора: тирә-йүн ҡытлыҡ менән тулған, етештереү кәмей, быныҡ иһә баҙар менән бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ»[5]. Ауыл хужалығында реформаларҙың уйланылып һәм нигеҙләнеп бөтмәүе арҡаһында «иҙелгән синыф» ирек алды, әммә ер пайын алып, «башҡа сығырға» ашыҡмай. Крәҫтиәндәргә яңы юлға күсер өсөн ярҙам һәм стимул етмәү арҡаһында, уларҙа ергә ҡарата битарафлыҡ көсәйә. Был турала М. Хужин «нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ауыл кешеһе ошо ер киҫәгенән туйынһа, кейенһә лә, йылдан-йыл уға битарафлығы көсәйҙе, тупраҡтың ярлыланыуы, күп майҙандарҙың йүнләп эшкәртелмәй ятыуы, һыу һәм ел эрозияһынан ашалып, тиҫтәләрсә мең гектар майҙандарҙың сәсеү әйләнешенән сығарылыуы ла уны ике ятып бер ҙә борсоманы»,[6] – ти. Автор ауыл хужалығындағы «реформалар»ҙы уға «ситтән яһалған удар» тип атай. Уҙғарылған реформалар «ауылдың социаль яҡтан ҡатламдарға бүленеүен, тимәк, ҡаршы тороу тенденцияларын көсәйтә генә. Фермерҙар тауар хужалығы менән хөкүмәт өмөт иткәнсә шөғөлләнә алмай, сөнки яңғыҙ ғына монополистик системаға ҡаршы тороу мөмкин түгел»[7]. Мәҡәлә авторы крәҫтиәндәрҙе «иҙелгән синыф» тип атай һәм ауыл хужалығында килеп тыуған проблемаларҙы яҡтырта.

М. Хужин республикалағы экологик хәл менән дә тәрән ҡыҙыҡһына. Билдәле булыуынса, беҙҙең төбәктә нефть химияһы ныҡ үҫешкән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы,

---

*[4]М.Хужин. "Иҙелгән синыф". Ағиҙел, 1995 ,№9, 183-сө б.*
*[5]Шунда уҡ.*
*[6]Шунда уҡ., 187-се б.*
*[7]Шунда уҡ., 188-се б.*

бының менән ғорурланыу йыш ҡына был «үҫеш» килтереп тыуҙырған ҡатмарлы мәсьәләләр артында тороп ҡала. Заманында етештереү артынан ҡыуып, утилләштереүҙе, сәнәғәт һәм көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеүҙе фәнни нигеҙҙә үҫтермәү хәҙер инде үҙенең кире һөҙөмтәләрен бирә. Был күренеш тәбиғәткә һәм кешеләргә ҙур зыян килтерә. Шул уҡ журналдың 1993 йылғы 10-сы һанында журналистың «Сирләй милләт, сирләй тәбиғәт» тигән мәҡәләһе донъя күрә. Автор яҙғанса, Башҡортостандағы нефтехимия предприятиеларының ҡалдыҡтары Ағиҙел йылғаһының бассейнын ағыулай. Был ағыулы ҡалдыҡтар ер аҫты һыуҙарына ла үтеп инә. Ошо хаҡта ул шулай ти: «Әлбиттә, Ағиҙел һәм уға ҡойған йылғалар ғына бысранмай, бәлки, заман химияһының йоғонтоһон кисермәй ҡалмаған һыу сығанаҡтары юҡтыр ҙа»[8]. Ағиҙел һәм уға ҡойған йылғаларҙа бигерәк тә ағыулы фенолдың норманан тыш булыуы заманында бөтә йәмғиәтте тетрәтте. Ул ваҡытта митингылар һәм башҡа төрлө акциялар уҙғарылды. Башҡортостандың атҡаҙанған табибы В. Десяткиндың фекеренә таянып, ул былай ти: «Кеше организмының генетик ныҡлығы запасы, ғәмәлдә, бөттө. Һәр етенсе ғаилә бала тапмай, ғаилә ҡороусыларҙың 15 проценты быға бөтөнләй һәләтһеҙ»[9]. Бының һөҙөмтәһе үкенесле. Автор: «Билдәле булыуынса, үткән йыл Рәсәй Федерацияһында һуғыштан һуңғы йылдарҙан алып беренсе тапҡыр үлем тыуымдан күберәк булды»,[10] – тип билдәләй. Артабан ул былай ти: «Демографик хәл Башҡортостанда ла маҡтанырлыҡ түгел: халыҡтың тәбиғи артыуы кәмей, байтаҡ ҡала һәм районларҙа үлем тыуымға ҡарағанда йышыраҡ күҙәтелә»[11]. Бының тағы ла бер сәбәбен атап, автор: «Социаль-иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ, әҙәмсә тормош ҡороп булмау арҡаһында, өйләнеүсе һәм кейәүгә сығыусылар ҙа һирәгәйә»,[12] – ти. Әммә йәш ғаиләләрҙә лә бәхетһеҙ күренештәр йышая. «Экологик һәләкәттең йылдан-йыл ҡатмарлашыуы сәбәпле, ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәләмәт бала табыуға ла һәләте кәмей бара. Сабыйҙар сибек, йыш ҡына ғәрип булып тыуа»[13]. Үҙ мәҡәләһендә автор йәмғиәттең туҡланыу рационы боҙолоуын һәм аҙыҡтың сифаты түбәнәйеүен атап үтә. Шулай уҡ зыянлы ғәҙәттәрҙең дә йәмғиәттең киң ҡатламдарында таралыуы төрлө тиҫкәре күренештәргә килтерә. Үрҙәге барлыҡ сәбәптәргә бәйле, бар ерҙә яман шеш сиренең артыуы күҙәтелә, тип билдәләй журналист. Был сәбәптәр башҡорт халҡының да һаны кәмеүенә һәм генофонды ҡаҡшауына килтереүе ихтимал.

Үҙенең ижадында М. Хужин тағы ла бик мөһим мәсьәләгә иғтибар итә: был – милли үҙаңды нығытыу мәсьәләһе. «Һуңғы һартаймы?» тигән материалда ул Рәсәйҙең милли сәйәсәтенә байҡау яһай. Үҙәктә милли йөмһүриәттәр федерацияһын бүленмәҫ берҙәм империя итеп үҙгәртеп ҡороуҙы теләгән көстәр барлығын билдәләй. Был көстәр яңы яулап алынған суверенитетты юҡҡа сығарырға тырыша. Автор был көстәргә ҡаршы торорлоҡ берҙәмлек булмауын ике туғандаш халыҡтарҙың – башҡорттар һәм татарҙарҙың милли ойошмалары араһындағы ҡаршылыҡ менән аңлата. Бының сәбәбе – төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тирәһендә килеп тыуған мәсьәлә. Билдәле булыуынса, төрлө тарихи факторҙарға бәйле рәүештә, тарихи Башҡортостандың был өлөшөндә йәшәгән башҡорт халҡының теле татар теле йоғонтоһон ныҡ кисерә. Һөҙөмтәлә был башҡорт халҡының бер өлөшөнөң милли үҙаңының юйылыуына һәм татар милләтенә ҡушылыуына килтерә. Бының төп сәбәбе тип автор мәҙәни һәм географик

*[8]М. Хужин, "Сирләй милләт, сирләй тәбиғәт". Ағиҙел, 1993, №10, 171-се б.*
*[9]Шунда уҡ, 168-се б.*
*[10]Шунда уҡ.*
*[11]Шунда уҡ.*
*[12]Шунда уҡ.*
*[13]Шунда уҡ.*

факторҙарҙы атай. «Ҡазан йоғонтоһо көслө булған Көнбайыш Башҡортостанда, әлбиттә, уларҙың (башҡорттарҙың) аң-белемгә ынтылғандары ла ошо тарафҡа юлланыр булған бит. Татар мөхитендә үҙ кеше булыр өсөн ундайҙарҙың артабан милләтен татарға үҙгәртеүе бик тәбиғи»[14]. Автор уйынса, башҡорт милләтен дә юғалыуҙан мәҙәниәт кенә йолоп ҡала аласаҡ. Уны үҫтереү өсөн мәктәптәргә туған телде ҡайтарырға, милли традицияларҙы, әхлаҡи ҡанундарҙы тергеҙергә кәрәк. Быларҙы милли ойошмалар ғына эшләй алмай, хөкүмәт ярҙамы мотлаҡ.

М. Хужин ҡәләменә ҡатмарлы мәсьәләләрҙән ситләшмәү хас. Шуға бәйле, йөмһүриәтебеҙҙең зыялыларын да ул тәнҡит утына ала. «Йәмғиәт көҙгөһө» (Заман һәм матбуғат тураһында бер нисә һүҙ) тигән мәҡәләһендә («Ағиҙел», 1995, №8) «Республикала һөйләшеүгә саҡырырҙай фән эшмәкәрҙәре, вазифалы иптәштәр байтаҡ бит – әйтһендәр үҙ фекерҙәрен. Уларҙы уҡып, башҡалар ҙа уйланыр, дөрөҫ һығымталар яһар. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, республика матбуғаты көнүҙәк, проблемалы һөйләшеүҙәргә теләр-теләмәҫ кенә тотона, урында ла темалар өҫтән-мөҫтән генә яҡтыртыла, иң кәрәкле фекерҙәр әйтеп еткерелмәй. Был да аңлашыла: «милләтсе» мөһөрө тағылыуҙан ҡурҡалар»[15], – ти ул. Бының сәбәбен ул түбәндәгесә аңлата: «Ни хәл итәһең, беҙҙең шау-шыулы йәмғиәтебеҙҙә патриотизм тойғоһон шундай тар аңлаған кешеләр байтаҡ, хатта бик күп шул. Совет ҡоролошо шуға өйрәтте бит. КПСС программаһы яҡын киләсәктә СССР-ҙа «милләттәрҙе берләштереү», тимәк, урыҫҡа әйләндереү маҡсатын ҡуйғайны»[16]. Был идеяны пропагандалауҙан килеп тыуған вайымһыҙлыҡ йөмһүриәтебеҙҙең һәм башҡорт халҡының үҙенең киләсәген һорау аҫтына ҡуя. Мәҡәләһендә автор йөмһүриәттең төп матбуғат сараларын ғәҙел тәнҡитләй. Матбуғат ауыр һәм сетерекле мәсьәләләрҙе күтәреп сығып, уларҙы дөрөҫ сисергә ярҙам итергә бурыслы, ти ул. «Башҡорт милләтенең артабанғы тормошо, үҙ дәүләтен булдырыуы (Башҡортостан үҙ бурысын өлөшләтә генә үтәй, бөгөн башҡорт иле кимәленән бик түбән тора), һис шикһеҙ, башҡорт матбуғатының эшмәкәрлеге менән бәйле. Көслө интеллигенцияһы, аҡыл эйәләре булмаған милләт оҙаҡ йәшәй алмай, көслөләр тарафынан йотола. Беҙ ҙә бөгөн шундай хәлдә. Ваҡыт та беҙҙең тирмәнгә һыу ҡоймай, ассимиляция тәрәнәйә, йәш быуын милләткә хеҙмәт итеүҙән ситләшә бара»,[17] – ти автор.

Йөмһүриәтебеҙ матбуғатында иң әүҙем яҡтыртылған темаларҙың береһе – хужалыҡ итеү мәсьәләләре. «Башҡортостан» гәзите ауыл хужалығы (уның уҡыусылары башлыса районларҙа йәшәй) менән күберәк бәйле булһа, «Советская Башкирия» күберәк иҡтисад тураһында яҙа. «Бәхәсләшмәйем, – ти журналист, – кәрәкле темалар, бигерәк тә уларҙа ниндәйҙер яңылыҡ йәки тос фекер булһа – айырыуса. Әммә ҡайһылыр колхоз йәки совхозда көнөнә нисәлер литр һөт һауыу йәки яландарға тиреҫ сығарыу, ҡар тотоу хаҡында хәбәрҙәр биреү, репортаж, мәҡәләләр яҙғылауға гәзит уҡыусы мохтажмы икән? Партия комитеттары хакимлыҡ иткән дәүерҙә фермаларға бесән ташыуға саҡлы яҙырға мәжбүр итеп, халыҡты туйҙырып бөттөк инде»[18]. Үҙ эшмәкәрлегенән бер миҫал килтереп, М. Хужин былай ти: «Ауыл районларының береһендә миңә: «Ҡасан шул ферма, баҫыу хаҡында яҙыуҙан туҡтарһығыҙ икән?» – тигән һорау-талап та ҡуйғайнылар. Уңайһыҙ булһа ла: «Фермаһыҙ йәшәп булмай шул», – тиеү менән сикләнергә тура килде»[19]. Һүҙен

---

[14]*М. Хужин. Һуңғы һартаймы? Ағиҙел, 1994, №7, 136-сы б.*

[15]*М. Хужин. Йәмғиәт көҙгөһө (Заман һәм матбуғат тураһында бер нисә һүҙ). Ағиҙел, 1995, №8,106-сы б.*

[16]*Шунда уҡ.*

[17]*Шунда уҡ, 107-се б.*

[18]*Шунда уҡ.*

[19]*Шунда уҡ.*

дауам итеп, ул былай ти: «Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ферма һәм баҫыу тематикаһы күптән сәйнәлгән, туйҙырған. Унда ниндәйҙер яңылыҡ табыуы ла ауыр. Бөтәһе лә билдәле, тапалған һуҡмаҡ кеүек, теҙ ҙә теҙ генә. Бәлки, ошо яғы менән йәлеп итәлер ул журналистарҙы, баш ватып мәшәҡәтләнергә түгел бит: фермала малды көнөнә нисә тапҡыр һәм нимә ашаталар, кем күпме һөт һауа, алдынғы малсылар, эш шарттары… Ике ерҙәге икең дүрт булғандай, ябай ҙа, аңлайышлы ла. Әммә уҡымлы түгел. Бындай йөкмәткеле мәҡәләләр район гәзитендә лә тулып ята һәм, минеңсә, республика гәзиттәре, уларҙы ҡабатлап, кем әйтмешләй, «абруйын ғына төшөрә»[20]. Үҙ мәҡәләһендә публицист зыялыларҙы һәм журналистарҙы халыҡ һәм йөмһүриәт алдында торған мөһимерәк һәм хәл иткес мәсьәләләрҙе күтәреп сығырға саҡыра. «Яңы заман өсөн яңы тематика кәрәк, һәм улар аҙым һайын осрап тора бит»,[21] – ти ул. «Ни өсөн журналистар эҙләнмәй һуң?» – тигән һорау ҡуйып, уға яуап рәүешендә автор былай ти: «Реформалар тураһында көн һайын тылҡыған киң мәғлүмәт саралары үҙҙәре реформаға мохтаж»[22]. Автор фекеренсә, баҙар иҡтисады ҡанундарына ярашлы, улар «бойондороҡһоҙ» булырға тейеш ине. «Башҡортостанда иһә бойондороҡһоҙ матбуғат юҡ тиерлек. Әле сығып килгән гәзиттәр йә рәсми структураларға, йә «тар түңәрәктәргә» хеҙмәт итә»[23]. Әммә шул уҡ баҙар иҡтисады, бер яҡтан, «бойондороҡһоҙ» матбуғатҡа юл аса, икенсе яҡтан, уға кәртә лә тыуҙыра. Автор әйтеүенсә, миллионлы тираждар менән сыҡҡан Үҙәк матбуғаты, бәлки, рекламалар иҫәбенә йәшәр ҙә, тик башҡорттоҡо ни хәлдә ҡалыр һуң? Уға реклама биреүселәр һанаулы ғына бит. М. Хужин бында ҡатмарлы һәм хәл ителмәгән мәсьәлә ятыуын билдәләй.

Публицист «болғансыҡ 90-сы йылдарҙа» илдә килеп тыуған башҡа төрлө проблемаларҙы ла күтәреп сыҡты. «Ағиҙел» журналының 1995 йылғы 11-се һанында баҫылған «Хурлыҡлы тамға» тигән мәҡәләһендә автор енәйәтселектең артыуы тураһында: «Кеше ғүмере хәҙер серәкәй-себендеке менән тиңләшә башланы, эсеп кәйеф-сафа ҡорған урындарҙа әҙәм йәндәренең нисек ҡыйылыуы тураһында һөйләргә лә түгел, Рәсәй Федерацияһында милиционер үлтерелмәгән аҙна, моғайын, булмай ҙа торғандыр»,[24] – ти. Килеп тыуған хәл һәр шәхескә янай. Ул турала М. Хужин былай тип яҙа: «Илде шундай хәлгә килтереп еткерҙеләр: төндә урамға сығыу, кеҫәлә күпләп аҡса йөрөтөү һәм тағы әллә күпме күренештәр ғүмер өсөн хәүефлегә әүерелде»[25]. Илдә иң күбеһен «милеккә ҡаршы енәйәт» биләй. Сама менән алғанда, ул 40 проценттан ашып китә ине ул саҡта. Илдә төрлө юлдар менән капитал туплап, артабан тиҙ генә «эҙ һепергән» бәндәләр хаҡында радио һәм телевидение, ваҡытлы матбуғат аҙ тылҡыманы. Автор әйтмешләй, «бәлки, кемдер быны ла, күсеү осоронда була торған хәл, тип демократия елкәһенә ауҙарып ҡалдырырға теләр»[26]. Рәсәйҙә, билдәле режиссер Станислав Говорухиндың фекере буйынса, енәйәтселекте өс аҙна эсендә «ауыҙлыҡларға» мөмкин. «Бәхәсләшмәйем, – ти автор, – Иосиф Виссарионович кеүегерәк кеше власть башына килһә, бер аҙнала ла «тәртип булдырыуы» ихтимал. Тик ул тәртип ниндәй хаҡҡа төшөр икән йәмғиәткә? «Автоматтар телендә», «төрмә телендә» булырмы ул аңлашыу?»[27]

[20] *Шунда уҡ.*
[21] *Шунда уҡ.*
[22] *Шунда уҡ.*
[23] *Шунда уҡ, 108-се б.*
[24] *М. Хужин. Хурлыҡлы тамға. Ағиҙел, 1995, №11, 130-сы б.*
[25] *Шунда уҡ.*
[26] *Шунда уҡ.*
[27] *Шунда уҡ, 132-се б.*

Автор фекеренсә, «тәртип урынлаштырыуҙың башҡа юлдары ла бар. Мәҫәлән, цивилизациялылары. Иң тәүҙә, экономист-баҙарсылар фекеренсә, төп маҡсаттарҙы әйтеп бирергә кәрәк: социализм төҙөйбөҙмө беҙ, әллә капитализммы? Шунан сығып халыҡтан фатиха алырға һәм, ул хуплай икән, эшкә тотонорға»[28]. Был эш бөтә Рәсәй күләмендә алып барылырға тейешлеген белгертеп, автор былай ти: «Әммә Кремлдәге ағайҙар был турала – ләм-мим. Әгәр парламент һәм хөкүмәт капитализм яғына хәрәкәт итә икән, хосуси милекселекте үҫтергән, нығытҡан закондар, пропаганда эше кәрәк түгелме ни? Ғөмүмән, милек өлкәһендә аныҡ сәйәсәт үткәрелергә тейеш, минеңсә»[29].

Ҡанунсылыҡты үтәүҙә ижтимағи аңдың үҫеш дәрәжәһе ҙур роль уйнай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, «милек» төшөнсәһе Рәсәй ерлегендә бөтөнләй бүтән мәғәнәлә йөрөй, дөрөҫөрәге, ихтирам менән файҙаланмай[30]. Быны күп быуатлы тарихи сәбәптәре бар. Шуға күрә уны үҙгәртеү – ауыр ғына мәсьәлә, әммә башҡа юл юҡ. Йәмғиәт тормошон һәм иҡтисадты яңы үҫеш юлына күсергәндә уны урап уҙып булмаясаҡ. Автор, быны аңлап, түбәндәгене яҙа: «Әлбиттә, демократик ҡоролоштоң нигеҙен хосуси милекселек тәшкил итә. Был институт ни тиклем камилыраҡ икән, демократия ла шул тиклем үҫешкән була, сөнки хосуси милексе – йәмғиәт терәге, ул дәүләттең тотороҡло традицияларын һаҡлай һ.б. Ниндәйҙер вазифа биләйме, әллә власть башында ултырамы – хосуси милексегә барыбер – ул закон сиктәрендә генә эш итә һәм вазифаһынан китеү менән генә капитал сығанағын юғалтмай. Был – ысынлап та Рәсәй әле көсәнә-көсәнә талпынған үҫеш юлы, тик милекселәр синыфы ғына һаман аяҡҡа баҫып китә алмай: рэкет ҡамасаулай»[31].

Шул уҡ мәҡәләһенең «Иҫереккә ил кәрәкмәй» тигән бүлегендә публицист эскелек проблемаһына мөрәжәғәт итә. «Енәйәтселек статистикаһында шәхескә ҡаршы енәйәт икенсе урында тора. Ҡайҙа бында кеше хоҡуҡтары тураһында ләстит һатыу… Рәсми статистика хәбәр итеүенсә, илдә эскелек «йәшәргәндән-йәшәрә» бара. Ата-әсәһе эскесе лә булһа, бындай алмаштан ни көтмәк кәрәк: ил һаҡлаусы ла, ғалим да, профессиональ эшсе лә сыҡмай унан, ә бына төрмә контингентын арттырыуы ихтимал»[32], – ти автор. Һүҙен дауам итеп, ул: «Эскелек тамыр йәйгән йәмғиәттең абруйы самалы, был уның интеллектуаль кимәленең түбәнлеге хаҡында һөйләгән күрһәткес булыуын да онотторға ярамай»,[33] – ти.

Мәҡәләнең «Донъяны профессионалдар ҡотҡарыр» тигән бүлегендә автор үҙ тәҡдимен килтерә: «Тарихтан мәғлүм булыуынса, Икенсе Бөтә донъя һуғышын башлар алдынан Гитлер үҙ идеологияһын үткәрер өсөн пропаганда министерствоһы булдыра. Был ведомствоның нисек уңышлы эш итеүен һөйләп тораһы түгел, немецтарҙың башын ныҡ әйләндерә ул. Ниңә Гитлер өлгөһөн үҙебеҙҙең ерлектә ҡулланмаҫҡа? Иҡтисадта ыңғай тәжрибәне таратыу эскелеккә ҡаршы көрәштә яҡшы һөҙөмтәләр бирер ине ул»[34]. Автор был эштә боронғо традицияларҙың һәм диндең яҡшы яҡтарынан да файҙаланырға саҡыра: «Йәшел йылан» ҡолдарына ҡаршы көрәштә, һис шикһеҙ, ислам тәғлимәтен ҡулланыу, уның эскелеккә мөнәсәбәтен халыҡҡа еткереү, моғайын, мосолмандар араһында был насар сирҙең таралыуын сикләргә булышлыҡ итәсәк. Шуны ла онотторға ярамай»[35].

[28] *Шунда уҡ.*
[29] *Шунда уҡ.*
[30] *Шунда уҡ.*
[31] *Шунда уҡ, 131-се б.*
[32] *Шунда уҡ, 133-сө б.*
[33] *Шунда уҡ.*
[34] *Шунда уҡ, 135-се б.*
[35] *Шунда уҡ, 134-се б.*

XXI быуатҡа аяҡ баҫҡас та М. Хужин илдә һәм йөмһүриәтебеҙҙә тыуып торған мөһим мәсьәләләргә арналған ҡыйыу сығыштарын дауам итә. Публицистика жанры буйынса ул өс тапҡыр журналдың лауреаты булды. 2007 йылдың сентябрендә «Ағиҙел» журналының публицистика бүлеге мөхәррире булып эшләй башлағас, уның ижады айырыуса активлаша. 2008 йылда М. Хужиндың «Дәүер төҫө» тигән китабы баҫылып сыҡты. Ике бүлектән торған был китапта авторҙың төрлө мәсьәләләргә арналған төплө анализдары, фәһемле фекерҙәре тупланған. Унда Башҡортостандағы проблемаларҙың Рәсәй һәм бөтөн донъя проблемалары менән бәйләнеше сағыла. «Мәкерме әллә наҙанлыҡмы?» тигән материалда автор Рәсәйҙә уҙғарылған аграр сәйәсәткә күҙ һала. Уның фекеренсә, «баҙар мөнәсәбәттәре»нә күсеү – бик ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы процесс. Ошо йылдарҙа ауыл хужалығы продукцияһын етештереү ҡырҡа кәмей. «Баҙар мөнәсәбәттәре»нең халыҡтың киләсәгенә янаған тағы ла иң ҡурҡыныслы яғы – йөмһүриәтебеҙҙең иң ҙур байлығы ерҙең «яңы нуворииштар» – алыпһатарҙар ҡулына күсеү ихтималлығы. Рәсәй империяһының һәм унан һуңғы дәүерҙең аграр сәйәсәтен байҡап, публицист әлеге замандағы этапты элекке сәйәсәттең органик дауамы рәүешендә ҡарай. Автор яҙғанса, «Ер – крәҫтиәндәргә!» тигән хәйләкәр сәйәсәт нигеҙендә Рәсәй империяһын ҡолатҡан большевиктар һәм уларҙың вариҫтары – коммунистар халыҡты алдай. Пролетар режим ерҙе крәҫтиәндәргә таратып бирергә уйламаған да, киреһенсә, «социалләштереү» тигән ялтырауыҡлы төшөнсә уйлап табып, хужалары ҡулынан бөтөнләйгә тартып алған һәм дәүләттеке тип иғлан иткән. «Башҡорттар өсөн социалләштереү эҙемтәләре тағы ла хәтәрерәк: хатта батша хөкүмәте тартып алырға йөрьәт итмәгән аҫабалыҡ институты большевиктарҙың бер декреты менән селпәрәмә килтерелә һәм башҡорт халҡы өс быуат дауамында иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбандар биреп һаҡлап ҡалған ата-бабалар аманаты юҡҡа сығарыла»[36], – ти ул. Китаптың икенсе бүлегендәге «Быуат хөкөмөндә» тигән материалында М. Хужин бик мөһим һәм сетерекле мәсьәлә күтәрә – аҫабалыҡ институтын тергеҙеү. Уның актуаллеген журналист логик яҡтан дәлилләй. Автор фекеренсә, советтар хакимиәте йылдарында «социалләштереү» сәйәсәте нигеҙендә ергә хужа булыу граждандар мөнәсәбәттәрендә бер ниндәй ҙә роль уйнамаһа ла, бөгөн, баҙар иҡтисады үҙ сүрәтенә көндән-көн ныҒыраҡ инә барған шарттарҙа, хәл иткес әһәмиәткә эйә була бара. Ер һәм уға хужа булыу-булмау институты артабан халыҡтар үҫешендә мөһим шарттарҙың береһенә әүерелмәксе, һәм быны һис кенә лә ваҡ мәсьәлә итеп ҡарау ярамай. Үҙ фекерен дөйөмләштереп, публицист былай ти: «Революцияға тиклем йәшәп килгән институттарҙы тергеҙеү әле башланып ҡына тора, ләкин киләсәктә йәмғиәттә төрлө кәйефтәрҙең тәрәнәйә барыуына ҡарап, йорт-биналар кеүек күсмәҫ милекте элекке хужаларына ҡайтарып биреү яҡлылар күбәйә бармаҫ, тип бер кем дә гарантия бирә алмай. Хосуси милекселекте тергеҙеү процесы үҙе үк башҡорттар алдына аҫабалыҡ институтын ҡайтарып алыу хоҡуғын ҡуя, һәм быңдай мөмкинлекте һис кенә лә ҡулдан ысҡындырырға ярамай… Бөгөн Рәсәй властары «мәҙәни автономия» төшөнсәһе менән мауыҡҡанда, Ватанды мәңгегә башҡорттоҡо итеп нығытып ҡалыу фарыз»[37].

Ошо быуаттың 10-йылдарында публицист төрлө мәсьәләләргә ҡағылған уй-фекерҙәре менән «Башҡортостан» гәзитендә лә сығыш яһай. 2010 йылда Бөтә

---

[36] *М.Хужин. Мәкерме, әллә наҙанлыҡмы? // Дәүер төҫө, "Китап" нәшр. Өфө, 2008 й., 85-се б.*

[37] *Шунда уҡ, 140-сы б.*

Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу айҡанлы, гәзит биттәрендә уның «Иҫке ауыҙҙан – яңы хәбәр», «Беҙгә бында йәшәргә», «Башҡортлоҡтан мәхрүм ителгәндәр» тип аталған берәр полосалыҡ мәҡәләләре донъя күрҙе. Билдәле булыуынса, төрлө тарихи сәбәптәр арҡаһында башҡорт халҡының ҙур ғына өлөшөнөң милли үҙаңы ҡаҡшаған. Халыҡ иҫәбен алыу алдынан М. Хужин, уҡыусыларға милли үҙбилдәләнеүгә (самоидентификацияға) ярҙам итеү маҡсатынан, бер нисә мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. «Ағиҙел»дең 2010 йылғы 8-се һанында был кампанияның әһәмиәтен аңлатыу өсөн донъялағы башҡа илдәрҙә уның нисек ойошторолоуы тураһында «Сит илдәрҙә нисек?» тигән мәҡәлә баҫтырҙы. 2011 йылда «Ағиҙел» журналында уның бер-бер артлы экология, демография, милли үҙаң, сәйәсәт, иҡтисад һәм башҡа мәсьәләләргә арналған «Тубыҡланған килеш», «Эскерһеҙлек һәм мәкер», «Климат ниңә көйһөҙләнә?», «Әхлаҡһыҙлыҡ баҫа» тигән материалдары донъя күрҙе. Публицисты, халыҡтың, республиканың киләсәге менән бергә, Бөтә Рәсәй һәм глобаль проблемалар ҙа борсой. Уның мәҡәләләре бик ваҡытлы һәм актуаль булыуҙары менән айырылып тора. М. Хужин әле лә публицистика ла әүҙем эшләүен дауам итә. Көнүҙәк проблемаларҙы асып һалып, публицист йәмғиәт аңының үҫеүенә булышлыҡ итә. Күп кенә материалдарында зыялыларҙы һәм журналистарҙы халыҡ һәм йөмһүриәт алдында торған мөһим һәм хәл иткес мәсьәләләрҙе күтәреп сығырға саҡыра: «Яңы заман өсөн яңы тематика кәрәк, һәм улар аҙым һайын осрап тора бит»[38], – ти ул. Бер нисә яҙыусы рәтендә ул башҡорт публицистикаһының йәнләнеүенә һәм тернәкләнеүенә яҡшы ғына өлөш индерҙе.

Әммә, Ризван Хажиев фекеренсә, әҙәбиәт ғилемендә һәм әҙәби тәнҡиттә әҙәбиәттең ошо ҡыйыу төрөнә иғтибар аҙ йәки бөтөнләй юҡ. Һуңғы йылдарҙа ғына был өлкәлә ыңғай тенденция күҙәтелә башланы. Сөнки «публицистика жанр булыуҙан ғына артыҡ, ул әҙәбиәттең проза һәм лирика менән йәнәш тороусы, уға ғына хас булған формаға эйә булыусы бер төрө»[39].

Нәфис публицистиканың әһәмиәтен һәм урынын билдәләр өсөн, урыҫ публицистикаһының тарихын өйрәнеүсе В. Ученова һүҙҙәренә мөрәжәғәт итеү мөһим. «Академик Д.С. Лихачевтың йыш ҡына һыҙыҡ өҫтөнә алыуынса, нәҡ публицистика – урыҫ һүҙ сәнғәтенең кәүҙәһен һәм йәнен тәшкил итә»[40], – ти ул. Ошо һүҙҙәрҙе хаҡлы рәүештә башҡорт нәфис публицистикаһына ҡарата ла әйтергә мөмкин. Уны башҡорт публицистикаһының тарихы ла иҫбатлай. Был жанрҙың төп мәғәнәһе һәм маҡсаты – йәмғиәттең йәки уның айырым ҡатламдарының күңеленә үтеп инеп һәм уларҙың аңын яулап, кәрәкле ҡараш булдырыу һәм уларҙы билдәле рәүештә ғәмәл итеүгә ылыҡтырыу. Бының төп шарты – публицистың үҙенең киң эрудициялы һәм һүҙ байлығына, аналитик аңға эйә булыуы. Былар барыһы ла публицист Мәхмүт Хужинға хас һәм уның ижадында асыҡ сағыла.

**Салауат ХӨСӘЙЕНОВ,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**ғилми хеҙмәткәре.**

---

[38]*М.Хужин. Йәмғиәт көҙгөһө (Заман һәм матбуғат тураһында бер нисә һүҙ) Ағиҙел, 1995, №8, 107-се б.*

[39]*Шунда уҡ.*

[40]*В.Ученова. От вековых корней. М., "Советская Россия", 1985, 6-сы б.*

# КИЛӘСӘКТЕ ЯҠШЫҒА ЮРАЙЫҠ!



Һуңғы йылдарҙа республиканың ҡайһы ғына төбәген алма, айырым ғаиләләр, хатта бәғзе ырыу-аралар үҙ нәҫелдәрен барлау менән шөғөлләнә. Был бик ҡыуаныслы хәл. Район һәм ҡалалар ҙа үҙ «шәжәрә»ләрен төҙөй. Был йәһәттән Күгәрсен районы аҡһаҡалдарынан алып, ғалим һәм башҡа шәхестәре лә бынан 15 йыл элек күләмле район йылъяҙмаһын яҙғандар ине. Бәхәс юҡ, ул китапты яҙыуға күп көс һалынған. Бөгөн шул китапты яҙыуҙа ҡатнашҡан авторҙарға бөтә район халҡы исеменән йәнә оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Һабантуйҙа ҡайһы бер яҡташтар: «Беҙ йәшәгән осорҙо ла яҙып була инде. Арабыҙҙа күпме һәйбәт кешеләр бар! Беҙ донъянан киткәс, яҙҙың ни ҙә, яҙманың ни...», – тип торҙолар. Был һүҙҙәрҙә лә хаҡлыҡ бар бит. Тарихты артыҡ аҡтармай ғына был турала Күгәрсен районының хакимиәт башлығы **Фәрит Мырҙагилде улы МУСИН** менән әңгәмә ҡорорға булдыҡ.

*– Хөрмәтле Фәрит Мырҙагилде улы, Һеҙ хәҙер алты йыл ҙур районъа етәкселек итәһегеҙ. Район халҡы тормошон нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?*




– Район башлығы булып киткәнсе миңә байтаҡ ҡына тормош мәктәбе үтергә тура килде. Мәктәп уҡытыусыһы, хужалыҡтың ҙур ғына комсомол ойошмаһы етәксеһе, совхоздың «иген фабригы» һаналған бүлексәһенең управляющийы, ун йылдан артыҡ райондың дүрттән бер өлөшөн тәшкил иткән ҙур коллектив хужалыҡ директоры – былар бөтәһе лә минең етәксе булып формалашыуыма үҙ өлөшөн индергәндер. Бигерәк тә комсомол беҙҙең быуын йәштәрен физик һәм мораль яҡтан үҫтереүгә оло өлөш индерҙе, тип әйтә алам.

Тормош гел аҡтан йә ҡаранан ғына тормай. Бала саҡтан ябай кешеләр менән бергә ҡайнашып йәшәгәнгәләр, ауыл халҡының тормош хәле миңә яҡшы таныш. Шуға инанғанмын: кем тырыш, хеҙмәт ярата, шул хәлле йәшәй. Был бигерәк тә ауыл халҡы тормошонда ап-асыҡ күренә. Егәрлеләнең өйө лә бейегерәк, ҡапҡаһы ла күркәм, үҙе лә ныҡлы баҫып йөрөй.

Шуны билдәләп үтер инем: һуңғы йылдарҙағы һанһыҙ үҙгәртеп ҡороуҙар бигерәк тә ябай халыҡ алдына ҙур һынауҙар ҡуйҙы. Әммә нисек кенә булмаһын, халыҡ тормошонда яҡшы яҡҡа үҙгәреш һиҙелә. Өмөттән өҙөлмәй кешеләр. Ауылдарҙың күркәмләнә барыуын

күреү шатландыра, социаль объекттарҙың һаны ғына түгел, сифаты ла бермәбер арта.

Халыҡта нишләптер тирә-йүнде ҡара күҙлек аша байҡау киң таралыу алған. Йәнәһе, беҙҙә бөтәһе лә насар. Ә бит юлдары ла, күперҙәре лә һалына, газ, телефон да үткәрелә, ФАП, мәктәбе лә ҡалҡып сыға. Хужалыҡтар ҙа аяҡҡа баҫа башланы. Быларҙы күрмәү ҙә, баһаламау ҙа мөмкин түгел.

Шуныһы характерлы: үҙ тормош хәлен яҡшыртырға теләүселәргә мөмкинлектәр йылдан-йыл киңәйә бара. Күңелде ҡырғаны шул: әле байтаҡ ҡына яҡшы һөнәрле кешеләребеҙ ситкә йөрөп эшләй. Был кире күренеш. Үҙ төйәгендә, әлбиттә, улар күберәк файҙа килтерер ине.

*– Һеҙҙең эш стилегеҙ?.. Кешеләрҙе ниндәй сифаттары яғынан баһалайһығыҙ?*

– Беренсе талап – иртә тороу. Башланасаҡ көнгә бурыстар билдәләп ҡуйыу. Ошо принциптарҙан бер ҡасан да тайпылмайым. Бер осраҡ минең аңыма ныҡ һеңеп ҡалған. Совхоз бүлексәһе управляющийы булып эшләп йөрөгәнемдә, иртәнге 6-ларҙа фермала, ғәҙәтем буйынса, ҡураларҙы ҡарап йөрөгәндә ул саҡтағы КПСС район комитетының I секретары Исмәғил Ғәбитов килеп төштө: 40 саҡрым ара үтеп. Тимәк, ул иртән сәғәт 5-тә үк торған булып сыға. Эш алға барһын тип йөрөүсе кешеләр бына шулай эшләй икән дә. Ферма малсыларына ошо осраҡты ҡат-ҡат иҫтәренә төшөрә инем. Беләһегеҙме, ошо миҫал кешеләргә тәьҫир итмәй ҡалманы.

Ығы-зығыны яратмайым. Беҙҙә, ғөмүмән, кабинеттар буйлап, танау аҫтынан көйләп, ҡағыҙ ташыуҙар бөтөрөлдө тип әйтә алам. Миңә ҡалһа, кемдең кем икәнлеге уның атлап йөрөүенән билдәле. Кеше үҙенә тапшырылған эшкә яуаплы ҡарарға тейеш. Компетентлыҡ тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Икешәр-өсәр дипломлы белгестәр күбәйә барһа ла, «белемлеләр»ҙең сифаты түбәнәйә. Еңелдән-еңелгә ынтылыусыларҙы өнәмәйем. Ауыл хужалығы һөнәрҙәрен үҙләштереүселәрҙең аҙая барыуы һағайта. Был беҙҙең киләсәккә кире йоғонто яһаясаҡ.

*– Ҡатмарлы ваҡытта йәшәйбеҙ... Күгәрсендәрҙең киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?*

– Эйе, килешәм. Еңел заманда йәшәмәйбеҙ. Ә ҡасан һуң ваҡыт, донъя көтөү еңел булған?! Ат, үгеҙ егеп ер һөрөп-сәскән заманала еңел булдымы икән? Атай-әсәйҙәребеҙ шул ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн көрәшмәнеме, аҙ тир түкмәнеме ни?

Заман башҡа – заң башҡа. Коллектив хужалыҡтарҙың тарҡалыуынан күптәр баҙап ҡалды. Хужалыҡ тарҡалды, ә уның урынына алмаш юҡ. Бар кеше лә фермер йә шәхси эшҡыуар булып китә алмай бит инде. Шуға күрә лә «ваҡыт ҡатмарлы – донъя ауыр» тип йөрөүселәр барлыҡҡа килде лә инде. Мин ваҡытты үтә лә ауыр тип түгел, ә буталсыҡ тип атар инем. Был осраҡта һәр кем үҙ урынын тиҙ генә таба алмай шул.

Әммә... тенденция хәҙер ыңғай яҡҡа бара. Хөкүмәт тарафынан күрелгән саралар хәлде бер аҙ еңеләйтә төшә. Йәтим ҡалғандарға торлаҡ биреү, күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙам, йорт төҙөү өсөн ер биләмәләре бүлеү һ.б. саралар халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыуға булышлыҡ итә.

Һорауҙың икенсе өлөшөнә килгәндә, шуны әйтер инем. Һис шикһеҙ

киләсәкте яҡшыға юрарға нигеҙ бар. Заманса йорттарҙың ҡалҡып сығыуы ғына нимә тураһында һөйләй?! Ә йорт һайын тиерлек шәхси еңел машиналар, башҡа техника, йорт йыһаздары ни турала һөйләй һуң? Тимәк, тормош алға табан тәгәрәй. Шуны әйтер инем: йорт төҙөйөм тигән кешегә беҙҙең районда ағас, таш, ҡом, балсыҡ аҙмы ни?! Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа өмә яһап, күршеләр йыйылышып ике-өс көндә өй, кәртә-ҡура һала торғайны. Шуны әле тергеҙеп булмаймы ни? Ауылдарҙа көстәре ташып торған ир-егеттәр юҡ түгел. Нисек кенә булмаһын, районда социаль инфраструктура күтәрелеш юлында.

Беҙҙең киләсәгебеҙ үҙ ҡулыбыҙҙа. Ҡабатлап әйтәм: нисек кенә ауыр булмаһын, районда төҙөлөш эштәре туҡтағаны юҡ. Төҙөйбөҙ икән, тимәк, киләсәккә ышанабыҙ.

*– Һеҙҙең биографияғыҙ күптәргә өлгө булырлыҡ...*

– Күгәрсен ере ырыҫлы ер. Беренсе сиратта ошо төбәктә тыуып үҫеүем менән бәхетлемен. Ата-әсәм миңә ғүмер бүләк иткән, тәбиғәт миңә көс-ҡеүәт биргән, туғандарым өлгөһөндә үҫеп кеше булғанмын. Мин – совет осоро кешеһе. Ул заман кешеләренә тәүге сиратта ил өсөн файҙалы кеше булып, намыҫлы хеҙмәт итеү, ил алдындағы бурысты үтәү хас һыҙат ине. Мин дә ошоларҙы теүәл үтәргә тырыштым.

Унынсы класты тамамлағас, физкультура педагогия училищеһында уҡытыусы һөнәрен алдым. Әрмегә тиклем уҡытыусы булып эшләп өлгөрҙөм. Ауыл балаларын спортҡа ылыҡтырырға тырыштым. Йәштәр менән эшләүгә әүәҫлекте төҫмөрләп микән, комсомол секретары вазифаһын йөкмәттеләр. Ихлас эшләнем, кешеләр, бигерәк тә йәштәр менән аралашыуға ошонда өйрәндем.

Артабан етәкселек итеүҙең байтаҡ баҫҡыстарын үтергә тура килде. Шуны әйтәйем: байтаҡ тәҡдимдәр (хатта сит райондарҙа) булды етәксе урындарға, әммә тыуған районымды ҡалдырып китә алманым. Ауыл хужалығы институтын тамамлап, экономист һөнәре алдым.

«Кеше үҙ бәхетен үҙе сүкей» тип өйрәтә ине элек ололар. Совет кешеләре өсөн был иң хас күренеш булды. Мин дә шуларҙың береһе.

*– Нәҫел-нәсәбегеҙ, ғаиләгеҙ хаҡында ла әйтеп үтһәгеҙ ине.*

– Бәләкәй генә Түбәнге Һаҙ тигән ауылда ишле ғаиләлә тыуып үҫкәнмен. Атай-әсәй, оло туғандарым көн оҙайы колхоз эшендә булыр ине. Атайым – һуғыш ветераны, 112-се атлы кавалерия дивизияһы кавалерисы. Әйткәндәй, беҙҙең төбәктән 9 кеше ошо дивизияла хеҙмәт иткән.

Атайымдың эшләмәгән эше ҡалманы: малсы, ферма мөдире, урмансы, бригадир, колхоз председателе... Өйҙә уны һирәк күрә инек. Миңә ҡалһа, ир кеше гел эштә йөрөргә тейештер, тигән төшөнсә була торғайны миндә. Нәҫел-нәсәб ағасын ентекләп барлағаным булманы, ауылыбыҙҙың яртыһы тиерлек Мусин фамилияһын йөрөтә. Араларында Социалистик Хеҙмәт Геройы ла, хәрби начальниктар ҙа, хеҙмәт батырҙары ла, өлгөлө ғаиләләр ҙә бихисап.

Үҙемдең ғаиләгә килгәндә, тормош юлдашым банк хеҙмәткәре, ике бала (бер ул, бер ҡыҙ) тәрбиәләп үҫтерҙек. 4 ейән-ейәнсәргә олатай булынды ла инде. Ғаилә башлығына тейешле «өй һалдым, малай үҫтерҙем, ағас ултырттым...» Балалар ҙа беҙҙе шатландырып, ғаилә ҡороп йәшәйҙәр.

*– Әйтеүҙәренсә, һеҙ районда һәр кемде беләһегеҙ. Райондан ситтә лә һеҙ үҙ кеше. Быға нисек өлгәшәһегеҙ?*

– Халыҡта «күп йөрөгән – күп белгән» тигән әйтем бар. Был шулайҙыр ҙа. Беренсенән, мин кешеләр менән аралашырға әүәҫмен. Физкультура уҡытыусыһы булып эшләгәндә район ярыштарында күп йөрөргә тура килде. Комсомол комитеты етәксеһе булараҡ гел йәштәр менән аралаштым.

Хакимиәт башлығы булыу менән «кәнсәләр бюрократия»ны бөтөрҙөм. Һорауҙар менән килеүселәрҙе тотҡарлыҡһыҙ ҡабул итә башланым. Башлыҡ вазифаһына ултырған көндөң иртәгәһенә бәләкәй ауылдарға сығып киттем. 10 өйҙән генә торған Йылайыр районы менән сиктәш Тирмән ауылына барып юлыҡтым. Район хужаһы тигәс ышанмай торҙолар. Бында бер ҡасан да райондың беренсе етәксеһе килгәне булмаған икән. Бынан 6 йыл элек цивилизацияның әҫәре лә булмаған ауылда бөгөн һәр өйҙә телефон, урам төнөн яҡтыртыла, шоссе юл, зыярат тимер рәшәткә менән уратылған, урамда таксофон тора. Әле 5 ғаилә өй һала.

«Кешеләргә бер йылы һүҙ етә», тип йырлайҙар икән, бында дөрөҫлөк юҡ түгел. Үҙемдең ҡул аҫтында эшләүселәрҙе лә халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә булыуын талап итәм. Әгәр ҙә мине күгәрсендәр, хатта ситтә йәшәүселәр ҙә «үҙ кеше» тип һанайҙар икән, мин быға ихлас шатмын.

Күгәрсен ере – бәрәкәтле ер. Беҙҙең төбәктән тиҫтәләрсә ғалимдар, сәнғәт һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар, сәнәғәт белгестәре сыҡҡан. Улар барыһы ла республикала, бөтә илдә илһамлы хеҙмәт итеп районыбыҙҙың данын арттыра. Улар менән даими бәйләнештә булырға тырышабыҙ.

*– Һеҙҙең хобби хаҡында ла белеп үтеү урынлы булыр.*

– Училищела уҡығанда, йәштәр менән эшләгәндә спорт менән ихлас мауыҡтым. Бокс, саңғы, көрәш, спорт уйындарынан разрядтарым да булғыланы. Хәҙер иртәнге гимнастика менән ҡәнәғәтләнергә ҡала. Күңел күтәренкелегенә лә даими иғтибар бүләм – форсат тейгәндә ҡулыма баян алам. Ҙур күләмле әҙәби әҫәрҙәр уҡырға ваҡыт тарыраҡ, ваҡытлы матбуғат, гәзит-журналдарҙы даими күҙәтеп барам. Ауыл хужалығы техника яңылыҡтары менән дә таныша барам. Ял мәлдәре йылдан-йыл тарая барыу сәбәпле, әйтеп үтелгәндәр менән сикләнергә тура килә.

*– Ихлас яуаптарығыҙ, йәнле әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт, Фәрит Мырҙагилде улы. Һеҙгә шәхси тормошоғоҙҙа, яуаплы вазифағыҙҙа яңы уңыштар, тыуған районығыҙҙың киләсәге өсөн эшмәкәрлегеҙҙә яңы үрҙәр яулауығыҙҙы теләйбеҙ.*

– Рәхмәт. Нисек кенә ауыр булмаһын, бер урында тапанмайбыҙ. Социаль объекттар, торлаҡ төҙөү планлы алып барыла. Төҙөкләндереү, юлдарға асфальт түшәү ҙә ситтә ҡалмай. Район ҡунаҡтары беҙҙәге тәбиғәткә һоҡланып, районды хатта «Икенсе Швейцария» тип атай икән, быға ғорурланаһы ғына ҡала. Туризмды үҫтереү өҫтөндә даими эш алып барабыҙ.

Ыңғай үҙгәрештәр – эшкә яңы һулыш.

**Әңгәмәне Хәбир ДАУЫТОВ менән**
**Вәли БАЙМОРАТОВ ойошторҙо.**



Ҡарлуғас
ИШЕМҒОЛОВА

## *Ҡыраҙай йән*

*Мин, моҙайын, мәңге шулай,*
*Ҡыраҙай бер йән булып,*
*Алыҫ утрауҙа йәшәрмен,*
*Үҙ-үҙемә ҙәм булып.*

*Күгем уйылып төшһә лә —*
*Ҡабат уны ялҙайым.*
*Күңел ыуалып бөтһә лә —*
*Яраларын ялайым.*

*Кеше менән бергә атлау*
*Шулай сәйер бирелә.*
*Әйтерһең дә, гөл-сәскәмдең*
*Керпектәре һибелә...*

*Хистәремә сәсәй-сәсәй*
*Оло юлдан атлайым:*
*Утрауыма китеп барам —*
*Унан инде ҡайтмайым.*

---

*Ҡарлуғас Ишемғолова (1985) Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында тыуған. БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетының журналистика бүлеген тамамлай. Әлеге ваҡытта «Башҡортостан» гәзитендә эшләй.*

*Ҡарҙар яуа*
*Йәнә ҡарҙар яуа...*
*Ҡарҙар йәнгә дауа.*
*Рух ныҡлығы улар.*
*Йәнгә ҡарҙар яуа.*

*Юлдар, юлдар, тимә —*
*Юлға ҡарҙар яуа.*
*Асмандарым, тимә —*
*Өҫкә болот ауа.*

*Шул юлдарға сығып*
*Бер аҙашһам икән,*
*Буранына инеп*
*Бер юғалһам икән.*

*Эҙләмәһәң ине...*
*Тынлыҡ тапһаң ине,*
*Ҡарҙар күмгән юлды*
*Бер онотһаң ине.*

*Шул тынлығың өсөн*
*Юлға сығыр инем,*
*Үҙ ҡулдарым менән*
*Юлды күмер инем.*

*Таш бәғерле, тимә —*
*Уттар йоттом ғына.*
*Тик тормоштан һаман*
*Бер һүҙ оттом ғына.*

*Шаярмайҙар бер үк*
*Йән-яҙмыштар менән,*
*Һәр кем тыуа ергә*
*Үҙ табышы менән.*

*Юғалтыуҙар ашты,*
*Ҡалһын ҡотом ғына.*
*Тереклегем һүнһә,*
*Янһын рухым ғына.*

*Йәнгә ҡарҙар яуа...*



Әлфидә
ҠАНСУРИНА

## *Шағир-иҫәр*

*«Шағир-иҫәр» — кемдер әйткән шулай,*
*(Ғәйеп ташлаусыһы сер булһын!)*
*Әгәр инде иҫәр булһа шағир,*
*Торған ерҙә ерем убылһын.*
*Уйылманы... бәлки, шулай зарур,*
*Тыйып буламы ни йөрәкте?!*
*Нахаҡ һүҙҙе ҡай саҡ тыңламаҫҡа,*
*Бәлки, иҫәрлек тә кәрәктер?*

## *Ҡороп ҡуйсы...*

*Ҡороп ҡуйсы ҡормаларҙы,*
*Бөгөн ҡояш ҡамасау.*
*Әлегә барлыҡ теләгем —*
*Был яҡтылыҡтан ҡасыу...*
*Кәйефтәрҙең төшкән саҒы,*
*Болоҡһоған күңелем.*
*Күҙ йәшен ҡояш күрмәһен,*
*Мин бит илаҡ түгелмен.*
*Бәлки, ҡояш ғәйеп итмәҫ, —*
*Ҡороп ҡуйсы шулай ҙа.*
*Дошман күреп һөйөнмәһен:*
*«Еңелеүҙән илайҙыр»...*
*Ҡороп ҡуйсы ҡормаларҙы...*

---

*Ҡансурина Әлфидә (1992), М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты студентҡаһы.*

## Бурандарҙа тыуған һөйөү

*Беҙҙең һөйөү бурандарҙа тыуҙы.*
*Аҡ биләүгә генә ураныҡ.*
*Күҙҙәр генә әллә тейҙе микән,*
*Һалҡын елдән мәллә ҡыураны?*
*Ҡарҙар яуа... Уй-хистәрем минең,*
*Өйрөлмәләр булып өйрөлә.*
*Яҙмыштарҙың ебен бутай-бутай,*
*Бурандарға инеп өҙөлә.*
*Уйҙар әгәр ярһыу, сапсан икән,*
*Аҡыл йүгән булһын хистәргә!*
*Һине эҙләп инәм аҡ ҡыштарға.*
*Таба алмаһам, миңә нишләргә?*

## Бала инек

*Беҙ ул саҡта бала инек әле,*
*Һартай буйҙарында үҙәндә —*
*Мөйөлдарҙың ҡотороп бешкән мәле,*
*Кемуҙарҙан емеш өҙгәндә,*
*Һындырғанда һинең ботаҡтарҙы,*
*Мөйөлҡайым, ниҙәр кисерҙең?*
*Рәнйейһеңме, иҫләп шул саҡтарҙы,*
*Әллә күптән беҙҙе кисерҙең?*
*Әле килеп шул саҡ һынған мөйөл*
*Һыҙланыуы баҫты үҙемде.*
*Ҡаш өҫтөнә ҡулдарымды ҡуйып,*
*Эҙләйем мин йомарт үҙәнде.*
*Барыһы ла шул саҡтарҙа ҡалған,*
*Емеш бирмәй инде мөйөлдар.*
*Бала саҡтар беҙҙе эҙләп һаман,*
*Илай төҫлө Һартай буйында.*
*Инде емеш бирмәҫ мөйөлдәр...*

## Әнейемдең йылы шәлдәре

*Сит-яҡтарҙа йөрөп, өшөгәндә*
*Тәнем генә түгел, йәндәрем.*
*Күңелдәрҙе нурлап, иҫкә төшә*
*Әнейемдең йылы шәлдәре.*
*Тормош булғас, төрлө хәлдәр була:*
*Шатлығы бар, ауыр мәлдәре.*
*Көс өҫтәрҙәй шул саҡ иңдәремдә —*
*Әнейемдең йылы шәлдәре.*

*Самауырың ҡайнайҙыр өҫтәлдә,*
*Һүнмәгәндер өмөт шәмдәре...*
*Һин көт беҙҙе, әней, беҙ ҡайтырбыҙ,*
*Иңгә һалып мамыҡ шәлдәрең ...*

## Көҙгө елдәр

*Көҙгө елдәр, ниңә иҫәһегеҙ,*
*Ҡурҡаҡ күңелдәргә шом һалып?*
*Тыныслыҡҡа инде бер күнеккәс,*
*Мин тыңлайым һеҙҙе тын ҡалып.*
*Көҙгө елдәр, ниңә ҡапҡа шаҡып,*
*Йән өрөргә һүнгән өмөткә?*
*Килер кеше күптән килер ине,*
*Ишек ҡаҡмаҫ инде мин көткән...*

***

*Көслө булып өйрәндем дә һымаҡ —*
*Элеккеләй илаҡ түгелмен.*
*Әле ҡасан ғына күҙ йәштәрем*
*Ерле-юҡҡа әҙме түгелде?*
*Яуыз һүҙҙәр, яуыз күҙҙәр хәҙер*
*Тоҙ һалмайҙар ҡатҡан күңелгә.*
*Таш атҡанға инде таш атыуға*
*Өйрәндерә, ахыры, күнегәм...*
*Тик шулай ҙа ҡай саҡ көтмәгәнең,*
*Көтмәгәндә һуҙһа ярҙам-ҡул.*
*Эй, йөрәгем, зинһар, баҙап ҡалма,*
*Рәхимлерәк, рәхмәтлерәк бул!*



Зимфира
ӘБУШАХМАНОВА

## Ҡайтыу

*Ҡайттым, әсәй, ризыҡ яҙғас,*
*Йылдар аша юлдар гиҙеп,*
*Һарыларға һабышыуҙан*
*Һағыныуҙан күңел биҙеп.*

*Ябыҡ тора ғәзиз ҡапҡам*
*Бау тартырға көс ҡалмаған.*
*Күңел яҙам тән һөйәлтеп,*
*Йән күтәртер, хәл йыймаһам.*

*Йән һөйәлтер түпһаларҙың*
*Бағанаһы ауып бара.*
*Дауалармын, тиеп ҡайтҡан,*
*Яраларым күңел яра.*

*Ғазап сигеп, юлдар гиҙеп,*
*Арығанмын, талсыҡҡанмын.*
*Һуғарылмаҫ китек барын*
*Белә тороп ашыҡҡанмын.*

*Зимфира Әбушахманова (1981) Әбйәлил районы Буранғол ауылынан. БДУ-ның журналистика бүлеген тамамлай. «Йәшлек» гәзите үткәргән Рәйес Түләк исемендәге шиғыр бәйгеһе (2009) лауреаты. Әлеге ваҡытта Төмән өлкәһе Сургут ҡалаһында йәшәй.*

*Сөйҙә торған көлдәгеңдең*
*Еңдәренә һағыш һөртәм.*
*Шул көлдәккә һеңеп ҡалған*
*Танһыҡ еҫкә күңел төртәм.*

*Китәм, әсәй, талған килеш*
*Һыуһындарым ҡанмайынса,*
*Ғәзиз ҡапҡама һөйәлеп*
*Хәл дә ала алмайынса.*

***

*Ауыр түгел юл аҙабы,*
*Оҙатмаһа йән ғазабы.*
*Меңәр саҡрым баш йөҙәткән*
*Уйҙарымдың юҡ яуабы.*

*Ҡайтыуҙарҙа йөрәкһеҙ юҡ,*
*Ашҡыныуҙы һағыш баҫҡан.*
*Күңел ебен урап-урап*
*Юлдар менән уй тоташҡан.*

*Ҡайтыуҙарҙың төрлөһө бар:*
*Моңһоу мәле, көләс сағы.*
*Ғүмер булғас, уйҙарҙың да,*
*Юлдарҙың да юҡ аҙағы.*

## Ике һеңлем

*Иңдәремдә ишле ғәйрәт:*
*Ике һеңлем — ҡуш ҡанатым.*
*Ҡаршылыҡтар аша үрләп,*
*Алға сапҡан парлы атым.*

*Осоштарҙа йән арымаҫ,*
*Пар ҡанаттар аҫылғанға,*
*Һәлмәк төҫлө донъя йөгө,*
*Алмаш-тилмәш тартылғанға.*

*Берәһе уң, берәһе һул —*
*Айырылмаҫ ике ҡулым.*
*Икегеҙ ҙә йән киҫәге,*
*Берҙәй күрәм уңын, һулын.*

*Күңелемә һырлап сиккән*
*Ике һеңлем — парлы йөрәк.*
*Туғанлыҡтың тартыу көсө*
*Һырланыуҙан бөйөгөрәк.*

*Йәнебеҙ бер, тәнебеҙ бер,*
*Өс ҡыҙ туған — беҙ өс таған.*
*Бетеү итеп йәнгә тағам.*

*Бүленмәһен парлы атым,*
*Өҙөлмәһен пар ҡанатым.*
*Күңелемде бөтөн итер*
*Һеҙҙең йәндә ҡалған яртым.*

## Бәхет

*Бәхеттәрҙең өҫкө ҡаты —*
*Әсәй йәйгән йомшаҡ урын,*
*Буй етмәҫлек булып ҡалды,*
*Ынтылһам да, етмәй ҡулым.*

*Әсәй тигән иң бөйөк һүҙ*
*Тылсым менән туҡылған да,*
*Сер һаҡлаған, асылмаған,*
*Янибыҙҙа һин булғанда.*

*Күрер күҙгә күренмәгән,*
*Иғтибарға эленмәгән,*
*Урынымдың бөйөклөгө,*
*Хис-тойғолар бейеклеге.*

*Инеп, тотоп, ҡарап булмаҫ*
*Буй етмәҫлек хыял иле.*
*Әсәй менән булған ваҡыт*
*Ғүмерҙәрҙең алтын мәле.*

## Балам

*Күңелемә имсе-томсо*
*Көс-көҙрәтең сикһеҙ, балам.*
*Бүҫкәртергә хәсрәтемде,*
*Ҡулдарыма һине алам.*

*Тәнем, йәнем күҙәнәге*
*Йәшәйешем йәме — балам.*
*Иңдәремә булмышыңды*
*Фәрештәләр итеп таҕам.*

*Берҙән-берем, гәүһәр ташым,*
*Затлыларҙан-затлы балам.*
*Бәхеттәргә ҡамашыуҙан*
*Күҙем түгел, үҙем талам.*

*Күҙем туймаҫ, үҙем туймаҫ*
*Тәмлеләрҙән-тәмле балам.*
*Тормош әсеһен шәрбәтләп*
*Өлөшөмә төшкән ҡалъям.*

*Йән һуҕарҕан бер остоҕом*
*Йәнемдән дә артыҡ — балам,*
*Һиңә әүрәп арбалыуҙан*
*Һаҕышымды һыуҕа һалам.*

*Яҡтылыҡтың сыҕанаҕы*
*Ай-ҡояштан нурлы, балам.*
*Ҡараңҕыла сыра итеп*
*Яратҡандыр һине Аллам.*

## Бураҕолом

*Күңел төбө-тамырынан*
*Ереккән ер — Бураҕолом.*
*Башмаҕосҡан ҡуйынында*
*Ҡыҙыл аҕа — оҙон толом.*

*Мәңгелеккә әсирлеккә*
*Мин эләккән һинең ҡолоң,*
*Сыҕа алмай шул ҡоллоҡтан*
*Таҕы ҡайтам, Бураҕолом.*

*Ялан аяҡ Ҡыҙыл кискән,*
*Моң һеңдереп буйҕа еткән,*
*Исемеңде һәйкәл итеп*
*Йәнгә уя һинән киткән.*

*Буранъолом, Буранъолом,*
*Тиеп ҡайта ҡыҙың, улың.*
*Ҡүпме быуынды һыйҙырған*
*Мең йәшәгән оло олон.*

*Берәү килә, берәү китә*
*Тик Буранъол мәңгеләшкән.*
*Кендек ҡырҡҡан изге ергә*
*Ер йөҙөндә юҡ тиңләшкән.*

*Килгән-киткән моң һуғарған*
*Моңло урын — Буранъолом.*
*Күңелемдә моң ҡоромаҫ,*
*Һиңә ҡабат төшһә юлым.*

## Ҡояшым

*Күңел көмбәҙендә һүнмәҫ ҡояш —*
*Берҙән-берем, тыуған илгенәм.*
*Нурҙарыңды һүреп, рух байытып,*
*Баш ҡалҡытып өҫкә үреләм.*

*Нур көлтәһе булып балҡый халҡым,*
*Ҡара болоттарҙы таратып.*
*Йырҙарыма ҡушып нур өләшәм,*
*Ялҡын һибәм көлтә тағатып.*

*Диуарҙарҙы тишер ялҡындарға*
*Кәртә түгел меңәр саҡрымдар.*
*Сит ерҙәрҙә йылылыҡҡа сорнап,*
*Нур көлтәһе һипкән халҡым бар.*

Ер йөҙөндә шундай шәхестәр була: фани донъянан киткәс тә тереләрҙең тормоштарын нурландырыуын дауам итә — үҙҙәре тураһындағы якты хәтирәләре, әйтеп йәки яҙып ҡалдырған һүҙҙәре менән. Учалы районының Ғәҙелша ауылында тыуып-үҫкән һәм бар ғүмерен халыҡ мәғарифы эшенә арнаған Әсғәт Нуретдиновты тап шундай шәхестәр рәтенә индерергә була. Ғүмеренең балалыҡ осоро ауыр һуғыш йылдарына тура килеп, уның барлыҡ михнәттәрен үҙ башынан кисергән Әсғәт Нуретдинов, уҡытыусылыҡ эшенән тыш, ижад менән шөғөлләнде — һуңғы көндәренә тиклем шиғыр яҙыуҙан туҡтаманы.

Ул ихлас, халыҡ тормошондағы һәр ҡыуаныслы ваҡиғаға һөйөнөп, кире яҡтарына көйөнөп йәшәүсе кеше ине. 1991 йылда, Учалы яҙыусылар ойошмаһы асылыу менән, уның бер дәфтәр тулы шиғырҙарын беҙҙең хөкөмгә тапшырыуы хәтерҙә. Уларҙың иң яҡшыларын туплап, «Өлкәр» альманахының тәүге һанында шәлкемен дә баҫтырғайныҡ. Ләкин артабан беҙҙең ижади бәйләнеш өҙөлдө. Тормош мәшәҡәттәре, тынғыһыҙ мөғәллимлек эше үҙенекен иткәндер, моғайын. Әммә шуныһы ҡыуаныслы: Әсғәт ағай заманыбыҙҙың һәр бер күренешенә, һәр үҙгәрешкә битараф ҡалмайынса, уларҙы шиғриләштерә барған. Был шиғырҙарҙа халҡыбыҙ яҙмышы өсөн тәрән борсолоу, ил, тел өсөн һыҙланыу ярылып ята, милли рух бик көслө. Хәйер, уларын Әсғәт Нуретдиновтың “Ағиҙел” журналына тәҡдим ителгән шәлкемен уҡығандар үҙҙәре лә тоймай ҡалмаҫ.

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**



## *Әсғәт НУРЕТДИНОВ*

### *Әсә күңеле*

*Гонаһтарың, ҡылыҡтарың өсөн*
*Борсоғанда намыҫ ғазабы,*
*Ярлыҡау йә яҡлау өмөт итеп,*
*Әсәң күҙҙәренә ҡара һин:*

*Иң йылыһы — әсә ҡарашы,*
*Иң хәтәре — әсә ҡарашы.*

*Дан һәм шөһрәт төшһә өлөшөңә,*
*Маҡтау тейһә тартҡан йөгөңә,*
*Лайыҡмынмы данға, зурлауға, тип*
*Күҙеңде һал әсәң йөҙөнә:*

*Йә яҡты нур балҡыр күҙендә,*
*Йәки хәүеф булыр йөҙөндә.*

Тормошоңдоң ауыр бер мәлендә
Мохтаж булһаң кәңәш һүҙенә,
Дөрөҫ йәшәйемме донъяла, тип
Ҡолаҡ һал һин әсәң һүҙенә:

Иң ғәҙеле — әсә һүҙҙәре,
Иң наҙлыһы — әсә күҙҙәре.

Аяныслы яҙмыш һине бөкһә,
Өмөтөңдө өҙмә йәшәүҙән —
Үҙ ғүмерен ҡуйып һәләкәткә,
Әсәң ҡурсыр һине әжәлдән:

Иң шәфҡәтле — әсә күңеле,
Иң ҡәҙерле — әсә ғүмере.

## Ҡара ҡайын

Ҡара ҡайын үҫә юл ситендә,
Ҡара һөрөм тәнен ҡаплаған.
Ни булған һуң уға? Һағыштымы,
Ил күтәргән ҡара ҡайғынымы
Һомғол зифа һыны һаҡлаған?

Йәшел шәле ҡупшы, йөҙө моңһоу,
Тыштан көлә, эстән — ут йота.
Был башыңа ниндәй афәт килде,
Бәғереңде ниндәй ғазап телде?
Ғәжәпһенеп шуға баш ватам.

Тәү күреүем һине, ҡара ҡайын.
Ҡараным да ҡапыл шаҡ ҡаттым.
Баштарыңдан утлы дауыл үтеп,
Һин дә, минең олатай, өләсәй кеүек,
Әллә балаларың юғалттың?

Улар ҙа бит күпме йылдар буйы
Өҙөлөп көттө һөйгән улдарын.
Ҡара ҡағыҙ ҡулға алһалар ҙа,
Һуңғы ышаныстан яҙһалар ҙа,
Һүрелтмәне изге үйҙарын.

Хәбәр килә: ике оло улың
Һәләк булды яуҙа, ил һаҡлап.
Өҙөлгәндәй була бәғер ите,
Ҡара хәбәр йөрәктәрҙе өтә,
Ҡайғы-хәсрәт баҫа һәр яҡлап.

Командирҙан йәнә ҡағыҙ килә:
«Кесе улың ғәйеп хәбәрһеҙ».
Мөмкинме һуң ышанырға быға?
Үлгәндәр ҙә ҡайсаҡ ҡайтып төшә,
Күп һөйләйҙәр ундай хәлдәрҙе.

*Бәлки, ул терелер, үлмәгәндер?*
*Үлгәнен бит һис кем күрмәгән!*
*Мәйетен бит бер кем күрмәгән дә*
*Ҡара ергә бер кем күммәгән —*
*Шуғалыр ҙа өмөт һүнмәгән.*

*Йылдар үтә торҙо. Минең ҡарттар*
*Сабый хөкөмөндә ҡалдылар.*
*Үткән ғүмерҙәрен ҡат-ҡат урап,*
*Күргән төшөн күрешеүгә юрап,*
*Уға ҙур мәғәнә һалдылар.*

*«Әкрәмемде бөгөн төштә күрҙем —*
*Көлә-көлә килеп күреште...»*
*Әллә бәпкәм ҡайтып киләме, тип,*
*Алыҫ юлдан асығып киләлер, тип,*
*Өләсәйем усаҡ терелтте.*

*«Белмәйем шул, — тине олатайым, —*
*Бәлки, үҙе беҙҙе көтәлер.*
*Беҙҙең ғүмер инде күп ҡалманы,*
*Көткән тиклем көтә алмабыҙ,*
*«Күрешергә» ваҡыт етәлер».*

*Күп илауҙан әсә күҙһеҙ ҡалды,*
*Атай башын баҫты сал ҡылған.*
*Әсә йөрәгендә тетрәтерлек,*
*Хатта таш йөрәкте иретерлек*
*Әрнеү, һағыш тулы йыр тыуған:*

*«Әллә утта янып көл булдыңмы?*
*Бер гонаһһыҙ ғәзиз йән инең.*
*Ҡәбереңде күреп зыярат ҡылһам,*
*Төңөлөр ҙә ине күңелем.*

*Әллә үле кәүҙәң һыу төбөндә*
*Балыҡтарға аҙыҡ булдымы?*
*Әллә, әсир төшөп, ғүмеркәйең*
*Ғазап-хәсрәт эсеп уҙҙымы?*

*Һыу һөлөгө кеүек улҡайымды*
*Насип булырмы бер күрергә?*
*Донъялыҡта күрешеп, бәхилләшеп,*
*Яҙһа ине тыныс китергә...”*

*Көтә-көтә улын, донъя ҡуйҙы*
*Бер-бер артлы олатай, өләсәй.*
*Өмөттәрен гүргә китте алып,*
*Һағыштарын беҙгә ҡалдырып...*
*Шуға һаман әрнеп йән әсей.*

*Тәүге тапҡыр ҡара ҡайын күргәс,*
*Шундай уйҙар миндә тыуҙылар.*
*Зиһенемде йәшендәй балҡытып,*
*Йөрәгемде дауылдай ҡуҙғытып,*
*Хәтирәләр баштан уҙҙылар.*

## Күбек ялайым

*Әсәй иртән һөт айырта,*
*Һемәктән аға ҡаймаҡ.*
*Күбек яларға яратам:*
*Ҡулымда агас ҡалаҡ.*

*Әсәйемдең сепараты*
*Көйлө — майланған кеүек.*
*Ҡаймаҡты һәйбәт айырта,*
*Күнәккә тула күбек.*

*Кинәнеп күбек ялайым,*
*Тик тарта күҙҙе ҡаймаҡ.*
*Ҡаймаҡтың да күбеге бар —*
*Эләгә һирәк-һаяҡ...*

*Олоғайгас, бына мин дә*
*Һыҙ ҡаймағын айырам.*
*Уйҙар диңгеҙен айҡайым,*
*Һыҙ дарғяһын аҡтарам.*

*Тик ниңәлер эш ырамай,*
*Табыштарым кес кенә.*
*Ҡаймаҡҡа тип ҡалаҡ һонам,*
*Эләгә күбек кенә.*

*Сепаратым үтә көйһөҙ,*
*Әйләнә дағыр-доғор;*
*Ҡаймаҡ һемәгенән аға*
*Һөт кенә шабыр-шобор.*

*Ҡалағым һыртын тейҙерәм,*
*Ҡалаҡҡа яғылмай ҙа.*
*Күпме бешмә, ундай ҡаймаҡ*
*Май булып яҙылмай ҙа.*

*Ҡат-ҡат үткәреп ҡарайым,*
*Ҡаймағы наҡыҫ ҡына.*
*Күп өлөшө һөткә китә —*
*Буласаҡ ҡатыҡ ҡына...*

*Хәҙер миндә булһа икән*
*Әсәйем сепараты!*
*Һыгыр инем һүҙҙең майын*
*Һыуҙарын сығарғансы!..*

## Үлгән һыйыр

*Үлгән һыйыр һөтлө була, тиҙәр,*
*Саф дөрөҫлөк ошо һүҙҙәрҙә.*
*Ҡәҙере юҡ уның тере саҡта,*
*Иҫкә төшә, кергәс гүрҙәргә.*

*Ысын талант — ҡуҡыр түрәләрҙең*
*Буш йөрәген телер хәнйәр ул;*
*Күҙенә төшөр аҡ ул нәфселенең,*
*Көнсөл күңелен игәр игәү ул.*

*Тере саҡта баһаланмай талант,*
*Үлгәс, әрнеп йөрәк һыҙлана.*
*Үлгән һыйырҙарҙы маҡтағанда*
*Халыҡ йөрәгенән ҡан тама.*

## Бәйҙән ысҡынған эт

*Ажғырып та тора бәйҙәге эт,*
*Өҙмәк була тимер сылбырҙы.*
*Холоҡһоҙ хужа бер саҡ ысҡындырҙы*
*Эте муйынындағы сынйырҙы.*

*Ҡоторған эт, йыртҡыстан да яман*
*Ярһып, әҙәмдәргә ташланды;*
*Берәүҙәрҙең алды алҡымынан,*
*Икенсеһен талап ташланы.*

*...Уҫал, ауыр, ытырғаныс заман*
*Әҙәм башын тамам шаңҡытты.*
*Сынйырынан ысҡынған эт һымаҡ,*
*Бәйһеҙ хаҡтар талай халыҡты.*

## Ырымбурға сәләм әйт

*Яйыкта яҙын боҙ китә,*
*Ярҙа уйнай малайҙар.*
*Боҙ өҫтөндә усаҡ яғып,*
*Оҙатып ҡул болғайҙар.*

*Боҙ-карап юллана төтәп,*
*Йә, хәйерле сәйәхәт!*
*Малайҙар ихлас һөрәнләй:*
*«Ырымбурға сәләм әйт!»*

*«Ырымбурға сәләм әйт!» — тип*
*Геү килә бала-саға...*
*Был һүҙҙә тарих сағыла,*
*Шиғырға керҙе шуға.*

*Бонапартҡа ҡаршы яуға*
*Ғәскәр йыя Ырымбур.*

*Аҡ батша ярҙам һораһас,*
*Атҡа атлана башҡорт.*

*Губернатор Перовский*
*Аҡмәсеткә юлланған.*
*Башын һалған күпме башҡорт,*
*Күпме сәләм юғалған.*

*Башҡорттарҙың көсө менән*
*Төҙөлгән Каруанһарай.*
*Күпме сәләмдәр осҡандыр*
*Каруанһарайға ҡарай.*

*Аҡтар, ҡыҙылдар ҡыйышты*
*Аямайынса йәнен.*
*Күпме сәләм аҙашҡандыр,*
*Табалмайса эйәһен...*

*Әле һаман ғәскәр тора*
*Ырымбур далаһында.*
*Сәбәп бар сәләм юлларға*
*Башҡорттоң балаһына.*

*Малайҙар сәләм оҙата,*
*Булһындар һау-сәләмәт...*
*Боҙ өҫтөндә усаҡ аға:*
*«Ырымбурға сәләм әйт!»*

## Сир

*Әллә ниңә булдым сирләшкә,*
*Тырышһам да һис сер бирмәҫкә.*
*Нимә өсөн Хоҙай ҡәһәре?*
*Гонаһлымынмы шул ҡәҙәре?*

*Уйлай торғас, шуға инандым:*
*Мин ҡорбаны икән замандың.*
*Минең тәндә илдең өйәнәге —*
*Сирле илдең сирле күҙәнәге.*

## Шиғриәтем

*Шиғриәтем — шиғри атым,*
*Йырлы күңел — ҡанатым,*
*Киләсәккә аманатым,*
*Йәштәргә васыятым.*

*Шиғриәтем — шиғри антым,*
*Үҙемә биргән антым:*
*Дөрөҫлөктө йырла һәр саҡ,*
*Сыҡмаһын яманатым.*

*Шиғриәтем — шиғри затым,*
*Һин тип күпме йән аттым;*
*Әйтер һүҙем әйтә алмай,*
*Бәғеремде ҡанаттым.*

*Шиғриәтем — серле йортом,*
*Сихри ишекте ҡаҡтым.*
*Парнасҡа менә алмайса,*
*Ҡайырылды ҡанатым.*

*Шиғриәтем — күңел күҙем,*
*Йөрәктән сыҡҡан һүҙем.*
*Халҡым уны ҡабул итһә,*
*Ҡояштай балҡыр йөҙөм.*
*Әгәр инде кире ҡаҡһа,*
*Хоҙайым бирһен түҙем.*

## Һүҙбәйләнеш

*Телмәрҙәрҙең нигеҙ ташы — һүҙҙә,*
*Һүҙбәйләнеш — уның ҡеүәте.*
*Бәйләнешкә керһә генә һүҙҙәр,*
*Көсө арта, арта ҡеүәте.*

*Яңы бәйләнешкә керһә һүҙҙәр,*
*Аҫылташтай балҡып китәләр;*
*Эйә булып яңы мәғәнәгә,*
*Тыңлаусыны әсир итәләр.*

*Кеше лә бит көслө бәйләнештә,*
*Яңғыҙ әҙәм — хәлһеҙ бер байғош.*
*Тау аҡтарыр көскә эйә кеше,*
*Берҙәмлектә — бейек осар ҡош.*

*Тик бер төҫтән йәйғор булмағандай,*
*Айырым һүҙ телмәр булалмаҫ;*
*Яңғыҙ байғош — бары ҡанатһыҙ ҡош,*
*Яңғыҙ яугир ғәскәр булалмаҫ.*

*Үҙ урынын тапһа телмәрҙә һүҙ,*
*Йөҙ ҡат арта уның баһаһы;*
*Әгәр инде таба алмай икән —*
*Бихисаптыр уның ыҙаһы.*

*Тормош сылбырында — аҫыл быуын,*
*Тапһа кеше әгәр үҙ эшен.*
*Шул сылбырҙа йөҙөк ҡашы булыр,*
*Бәйләнештә тапһа үҙ ишен.*

## Тырышҡан – мораҙына ирешкән

Сал Уралдың бүлкә-бүлкә армыттарын төйәк иткән, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында урынлашҡан Ҡыйғы районы тәбиғәте менән күптәрҙе әсир итмәй ҡалмай. Район үҙәге Үрге Ҡыйғы ауылын әйләнә-тирәләй ете-һигеҙ тау өйкөмө уратып алған. Улар ғорур ҡиәфәттәре менән быуаттар аша тирә-яҡ мөхиткә йәм өҫтәп, әҙәм балаһын көслө ғәрәсәттәрҙән, бәлә-ҡазанан һаҡлай, мөхиттең именлеген тәьмин итә. Ул ғына ла түгел, тауҙар итәгенән сылтырап ағып сыҡҡан көмөштәй инеш һыуҙары Ҡыйғы йылғаһын тулыландыра, артабан бергәләп Әй йылғаһына ҡушылып, уның менән моңдаш булып ағыуын дауам итә.

Был төбәктә ата-бабаларыбыҙ борон-борондан игенселек, малсылыҡ, умартасылыҡ менән көн иткән. Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында улар һуңғы малҡайҙарын, сәсеү орлоҡтарын тапшырып, күмәк хужалыҡҡа ереккән. Ләкин Горбачев-Ельциндың илде үҙгәртеп ҡороу сәйәсәте халыҡ хужалығын упҡынға этеп төшөрҙө. Б. Ельцин әйткәнсә, үҙаллылыҡты кем күпме йота алғандыр, уныһы беҙгә билдәһеҙ, әммә миллионерҙар менән миллиардерҙар кеҫә ҡалынайтып өлгөрҙө. Тотош илдә колхоз-совхоздар күҙ менән ҡаш араһында юҡҡа сыҡты.

Был баш китерлек эшкә, минеңсә, Рәсәй хөкүмәтен генә ғәйепләү дөрөҫ булмаҫтыр, сөнки ҡайһы бер хужалыҡ етәкселәре емереү эшенә ҡуш ҡуллап риза булды, иҡтисадты яҙмыш ҡарамағына ташлап ҡуйҙы, мөлкәтте ситтән килеп һатып алыусылар ҙа табылды. Күмәк хужалыҡтарҙың тарҡалыуына өлөшләтә ауыл эшсәндәре үҙҙәре лә ғәйепле, тип уйлайым. Улар яуаплылыҡ тойғоһон юғалтып, саботажлыҡ итеү юлына баҫты. Быға миҫалдар етерлек һәм бындай шарттарҙа етештереү сәйәсәте менән уңышлы шөғөлләнеү һис тә мөмкин түгел ине.

Әйткәндәй, бөгөнгө ауыр замандарҙа үҙгәртеп ҡороуҙар шауҡымына ҡушылмаған, мөлкәтте һатып-туҙҙырып аҡса табыу менән мауыҡмаған хужалыҡтар, етәкселәр ҙә юҡ түгел. Миҫалға «Әй» ауыл хужалығы кооперативын алайыҡ. Уның күп йыллыҡ тәжрибәһе күптәргә өлгө булырлыҡ. Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре Азат Нотфуллин хужалыҡҡа етәкселекте үҙ ҡулына алып яңылышманы. Бөгөн ул районда ғына түгел, бөтә республикала билдәле етәксе.

«Әй» кооперативы элекке колхоздың сәсеү майҙанын кәметмәне, киреһенсә, арттырыу юлдарын эҙләй. Техниканы, малсылыҡ биналарын һәм башҡа объекттарҙы туҙҙырыуға юл ҡуйманы, заманса ҡорамалдар, тоҡомло малдар һатып алынды, яңы эш алымдары индерелде. Хужалыҡ элиталы бойҙай орлоғо етештереп һата, сөнки ул «орлоҡсолоҡ хужалығы» статусын яуланы. Бөгөн унда эшһеҙ илке-һалҡы йөрөгән кешене күрмәҫһең. Ит-һөт етештереү дәүләттең «500 ферма» программаһына ярашлы матди ярҙамдан файҙаланды. 2012 хужалыҡ йылын «Әй» кооперативы 1 млн. 193 мең һум табыш алып тамамланы, хеҙмәткә түләүгә 8 млн. 800 мең һум аҡса бүлде. Йүкәлекүл ауылы биләмәһендә, Мәяҡтау итәгендә төҙөлгән пионер лагеры ла һатып туҙҙырыуға дусар ителмәне. Был осраҡта ла «Әй» кооперативының роле һиҙелеп торҙо.

Ҡыйғыла күмәк хужалыҡ итеү ысулын өҫтөн күреүсе тағы ла бер коллектив – «Красный Урал» кооперативы ла уңышлы эшләй. Тарихҡа байҡау яһап, шуны билдәләп үтер инем: был кооперативтың үҙәге Йыланлы ауылында элек-электән хеҙмәткә маһир, билдәле шәхестәр үҫеп сыҡҡан. Бына уларҙың бер нисәүһе: Социалистик Хеҙмәт Геройы Солтан Ғирфанов, Ленин орденлы сусҡа ҡараусы Мөғәллимә Әхтәмйәнова, элекке колхоз рәйесе, БАССР-ҙың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Абрар Сибәғәтуллин, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сажидә Мәжитова, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, шағир-драматург Рафаэль Сафин, техник фәндәр кандидаты, генерал-майор Рифғәт Вәлиевтарҙы күрһәтеп үтергә мөмкин. Уларҙың хеҙмәт батырлығы йәш быуынға күсәгилешлеге менән башҡаларҙан айырылып тора.

Бында ла үҙгәртеп ҡороуҙар шауҡымында хужалыҡты тарҡатыуға юл ҡуймаған етәксе Әнүр Шәңгәрәевтың роле ҙур. Бөгөнгө көндә ул 50 кешене даими эш урыны менән тәьмин иткән. «Ауыл хужалығы кампанияларында эшселәр һаны унан да күберәк була», – ти бухгалтер-экономист Гөлфирә Ғәлиева. Быйыл яҙғы баҫыу эштәрен йыланлылар 1000 гектарҙа атҡарып сыҡты. 2012 хужалыҡ йылын улар 2 миллион һумға яҡын табыш менән тамамланы.

Райондың Ҡолмәт ауылында «Төньяҡ-Көнсығыш» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең дә уңышлы эшләүен билдәләп үтке килә. Ул үҙгәртеп ҡороуҙар заманында тарҡалған «Правда» колхозы базаһында ойошторолдо. Ҡолмәттәр иген игә, һыйыр, йылҡы аҫрай, ҡымыҙ, һөт һата, дөйәләре менән пониҙары ла бар.

Таш ҡаялар араһында бормаланып талғын ғына ағып ятҡан Әй йылғаһы, ҡара-йәшел ылыҫ урмандары менән дан тота беҙҙең Ҡолмәт ауылы. Ә бына Йыланлы ауылы биләмәһенә ҡараған бейек тауҙар итәгендә ер аҫтынан урғылып сыҡҡан һыу фонтаны туристар иғтибарын йәлеп итә. Тырышҡан – мораҙына ирешкән, ти халыҡ. Тырыш кеше проблеманы хәл итер өсөн юлын, яйын таба, ә ялҡауҙар эшләмәҫкә һылтау эҙләй.

**Марсель САБИРЙӘНОВ.**
**Ҡыйғы районы.**

**PS.** *Ошо материалды әҙерләгәндә Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән Ҡыйғы район Совет депутаты, «Әй» ауыл хужалығы кооперативы рәйесе Азат Самат улы Нотфуллиндың «Башҡортостан Республикаһында фиҙакәр хеҙмәте өсөн» хеҙмәт отличиеһы билдәһе менән бүләкләнеүе мәғлүм булды. Хеҙмәт ҡаһарманының ҡыуанысын редакция ла уртаҡлаша.*

---

## Мөнәжәттәребеҙҙе башҡорт көйөнә әйтәйек

Етмеш йылдан ашыу дәүләт атеизмы, диндәрҙе ҡыҫырыҡлау дәүеренән һуң, дин тотоу ирекле асылды. Хәҙер аҙна һайын тиерлек теге йәки был ауылда мәсеттәр асыла, матбуғат баҫмаларыбыҙҙа вәғәздәр, дини темаларға мәҡәләләр баҫылып, радиола, телевидениела дини тапшырыуҙар сығып тора. Был, әлбиттә, ҡыуандыра. Ошо айҡанлы беҙ Аллаһ Раббыбыҙға шөкөр итәбеҙ. Бына, мәҫәлән, күптән түгел генә “Ашҡаҙар” радиоһының Интернет сайтындағы “Ашҡаҙарҙа – премьера” рубрикаһында Ләйсән Шәриппованың “Мөнәжәте”н тыңланыҡ. Бер яҡтан, йәштәребеҙҙең дини темаларға мөрәжәғәт итеүе – ҡыуаныслы хәл. Әммә уйландырған яҡтары ла юҡ түгел. Мөнәжәттең һүҙҙәре – шағирә Дилә Булгакованыҡы. Әсәнең балаға әйткән өгөт-нәсихәте рәүешендә яҙылған. Бик матур, тәрән мәғәнәле һүҙҙәр. Быға һүҙ юҡ.

Ләкин мөнәжәттең көйөнә килгәндә, авторға ла, битараф булмағандарға ла әйтер һүҙем бар.

Мөнәжәт – иманға өндәүҙең, дин тәғлимәтен аңлатыуҙың бер ысулы. Боронғо замандарҙа уҡ ата-бабаларыбыҙ был ысулды ҡулланыр булған. Ләкин, минеңсә, бөгөнгө көндә иманға өндәү фәнни нигеҙҙә алып барылһа ғына уның һөҙөмтәһе буласаҡ һәм беҙ йәмғиәттәге кире күренештәрҙең кәмеүен, кешеләрҙең әхлаҡ дәрәжәһенең артыуын күрәсәкбеҙ.

Фәндә генетик, этник  хәтер тигән төшөнсә бар. Һәр халыҡтың генетик кодына ата-бабалар яҡын күргән нәмәләрҙе яратыу, шуға тартылыу һалынған. Башҡорт, ҡалала йәшәһә лә, ат, ҡымыҙ ярата, ҡурай моңон тәьҫирләнеп тыңлай.  “Йән тартмаһа, ҡан тарта” тигән мәҡәл дә тап ошо хаҡта һөйләй.

Тимәк, Ләйсән Шарипованың мөнәжәте “Шәреҡ музыкаһы”на түгел, ә ҡурай моңо йәки ҡумыҙ, думбыра көйөнә ҡушылып йә иһә музыкаһыҙ ғына башҡорт көйөнә әйтелһә, уның башҡорт кешеһенә йоғонтоһо ла, тәрбиәүи көсө лә күпкә артыр ине. Мөнәжәттәребеҙҙе башҡорт көйөнә әйтәйек, ҡәрҙәштәр!

**Рамаҙан АМУРЗАҠОВ,**
**“Мәксүдә”  мәсете имам-хатибы.**
**Ҡариҙел районы, Магинск ауылы.**

---

# Шағир рухы мәңге хәтерҙә

*... Урман буйында һыҙғырған йырҙарымды*
*Хәҙер һеҙҙең менән йырлаймын.*
*Йырлаймын да*
*Шунда шашып китеп,*
*Ҡурайымды һуҙып уйнаймын.*
*Ҡурай – миңә атай бүләге ул,*
*Моңландырып беҙҙе йырлатҡан...*

Күңелгә һағыш һалған шиғри юлдарҙың авторы – Айыт ауылы егете, башҡорт халҡының ҡаһарман улы, данлыҡлы шағир Фәтих Кәрим.

Мифтахетдин Аҡмулла ижадын һәм тормошон өйрәнеүселәргә иң ҡәҙерле исемдәрҙең береһе.

Айыт ауылы Аҡмулланың тыуған төйәге Туҡһанбайҙан 6-7 саҡрымда ғына. Хәҙер Бишбүләк районы биләмәһендә.

Фәтих Кәрим ауылына бер ҡайтҡанда, 1928 йылда,  ул Туҡһанбай ауылына бара. Шағир Мифтахетдин Аҡмулланың тәржемәи хәле менән таныша.

Мулла Шәйхетдин Динмөхәмәтовтан байтаҡ мәғлүмәттәр яҙып ала һәм Ҡазанда «Безнең юл» (хәҙер «Ҡазан утлары») журналында (1928, № 6-7) баҫтырып сығара. Мәҡәлә – бөгөнгө көндә лә иң ҡәҙерле ҡомартҡыларҙың береһе. Архивтарҙан табылған тарихи документтарға таянып әйтә алабыҙ: Фәтих Кәрим Аҡмулланың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеүселәргә дөрөҫ йүнәлеш күрһәткән. Беҙ уға рәхмәтлебеҙ.

Айыт ауылы халҡы данлыҡлы улын онотмай: төрлө саралар үткәрә. Урта мәктәптә ойошторолған Фәтих Кәрим уҡыуҙары йылдың-йыл оло шиғри байрамға әүрелә. Быйылғыһына Бишбүләк, Бәләбәй, Йәрмәкәй, Миәкә, Туймазы райондары мәктәптәренән уҡыусылар, уҡытыусылар – барлығы 150-нән артыҡ кеше ҡатнашты.

Оло йыйындың тәүге өлөшөндә Мифтахетдин Аҡмулла музейы хеҙмәткәрҙәре

Фәтих Кәримдең «Беҙҙең юл» журналында баҫылып сыҡҡан мәҡәләһе тураһында ғилми доклад уҡыны, фекер алышыуҙар ойошторҙо.

Икенсе бүлектә Фәтих Кәримдең шиғырҙары башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә яңғыраны. Мәктәп уҡыусылары үҙҙәренең шағирға бағышланған шиғырҙарын да уҡыны. Фәтих Кәрим әҫәрҙәренә эшләнгән рәсемдәрҙән күргәҙмә ойошторолдо. Фәтих Кәрим уҡыуҙарын ойоштороусылар һәм жюри ағзалары: Айыт урта мәктәбе директоры Илмир Шафиҡов, Бишбүләк районы мәғариф идаралығы методисы Илсинә Хисмәтова, Фәтих Кәрим музейы директоры Рәйсә Хафизова, Айыт урта мәктәбе уҡытыусыһы Ләйсән Көҫәпҡолова, Фәтих Кәримдең ике туған ҡустыһы, отставкалағы милиция полковнигы Илдар Вахитов конкурстарҙа ҡатнашҡан һәр кемгә иғтибарлы булды, еңеүселәргә иҫтәлекле бүләктәр, Почет грамоталары тапшырҙы.

Быңдай осрашыуҙар выждан, халыҡтар араһында туғанлыҡ хистәрен уятыу, патриотизм кеүек изге сифаттарҙы өҫкә күтәрә һәм кешеләр күңелендә мәңгелеккә уйылып ҡала.

**Фәнис ЯНЫШЕВ**.

---

## Яугилделәр ҙә яу ҡайтарған

1812 йылғы Ватан һуғышына 14 мең 840 башҡорт яугиры оҙатылыуы тарихта бәхәсһеҙ дәлилләнгән. Әммә ҡайһы ауылдан нисә кеше яуға китеүе, уларҙың ниндәй наградаларға лайыҡ булыуы ошоғаса теүәл генә билдәле түгел. 1816 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ҡарап ҡына, кемдәрҙең һуғыштан иҫән-һау ҡайтҡанын белеп була.

Ни өсөн тарихта Ҡаһым түрә Мырҙашев тураһында мәғлүмәттәр күберәк һаҡланған, ә бына яҡташтарыбыҙ ( хәҙерге Ғафури, Ишембай райондары), 7-се кантон казактары – тарихсы Салауат Ҡолбахтин асыҡлауынса, улар «үҙҙәре теләп илде һаҡларға теләк белдерә» – хаҡында мәғлүмәт бик аҙ?

Архивта ултырып, райондаштар хаҡында бер аҙ мәғлүмәттәр таптым. Беҙҙең кантон казактары менән 1811 йылдың майында ауылдашыбыҙ, Яугилде ауылында йәшәгән 24 йәшлек поход старшинаһы Таһир Ғәбитов хәҙерге Ишембай районы Ишәй ауылына поручик Йомағолов тарафынан төрлө дәрәжәләге һәм ябай казактарҙан төҙөлгән 1000 кешелек резерв төркөмгә барып ҡушыла. Минеңсә, улар, Ҡаһым түрә полкы менән бер команда булып, Рәсәйҙең көнбайыш тарафтарына юлға сыҡҡан. Шул төркөмдөң көнбайышҡа тиклем юлын асыҡлап булды, ә бына Таһир Ғәбитов полкы, уның менән нисә ауылдашыбыҙ китеүе тураһында мәғлүмәттәр бик наҡыҫ. Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың китаптарында ла улар юҡ дәрәжәһендә. 1834 йылдың 10 апрелендә тамамланған иҫәпкә алыу (ревизские сказки) һәм 1838 йылғы яҙмаларҙан күренеүенсә, 1812 – 1815 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан, унан иҫән-һау ҡайтҡан, шул ваҡыттарҙа ауылда йәшәгән ике ауылдашыбыҙ хаҡында ғына хәбәр ителә. Улар – данлыҡлы 12-се башҡорт полкы яугирҙары, батырлыҡтары өсөн «1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн» һәм «1812 йылғы һуғыш иҫтәлеге» көмөш миҙалдары менән наградланған, урядник дәрәжәһе алған казактар Кинйәбулат Көҫәпҡолов һәм Ҡанмырҙа Ҡәйепҡолов. Улар 1812 йылдың февралендә 7-се кантонда ойошторолған 12-се һәм 13-се полктар менән яуға киткән булһа кәрәк.

Дөйөм алғанда, ил һағына ауылдан нисә кеше китте икән? Үҙ теләктәре менән киткәндәрҙе өйҙәр иҫәбе буйынса фаразлағанда, француз яуына ете башҡорт казагы киткән булырға тейеш. Ә февралдә төҙөлгән полктарға ауылыбыҙҙан тағы нисә казак алынды икән ? Тәүге китеүселәрҙән 2-се полк төҙөлөүен асыҡлау ҡыйын булманы. Таһир старшина, ауылда һуғышҡа алыныр йәштәге бер туған ағаһы, бер энеһе булһа ла, (башҡалары кесерәк йәштә булған), уларҙы үҙе менән алмай. Күршеһе Иҫәнғужа мулланың улы 19 йәшлек Булат Иҫәнғужинды үҙенә адъютант итеп ала.

Резерв төркөм 1811 йылдың майында Рәсәй империяһының көнбайышына ҡарай оҙон юлға сыға һәм 1812 йылды Курск губернаһында ҡаршылап, артабан Луцк ҡалаһына табан йүнәлә. Шул ерҙә генерал П. И. Багратион 1-се һәм 2- се башҡорт полктарына хәрби смотр үткәрә. Полктар мартта империяның көнбайыш сигенә барып етә һәм Олеск исемле белорус ауылы янында урынлаша. Улар полковник Ивайловскийҙың 1-се бригадаһы составына индерелә. Бригада 2-се көнбайыш армияның 5-се атлы дивизияһына буйһона. Ә инде июндә 2-се полк генерал Тормасовтың 3-сө армияһы ҡарамағына күсерелеп, Почекай кордоны начальнигы хорунжий Миловановҡа буйһондорола. Улар Австрияның 20 – 30 мең кешенән торған ғәскәренең һуғышҡа әҙерләнеүе тураһында мөһим мәғлүмәт йыя. Һуңыраҡ Наполеон ғәскәрҙәре яғында 8 австриялы, 4 мадьяр, 4 поляк полктары һуғышҡанлығы асыҡлана.

16 июлдә 2-се полк майор Курбатов төркөмө менән Кобрин ҡалаһы янында француздар менән тәүге тапҡыр бәрелешә. 8 октябрҙә поляк генералы Кнопка отрядтарын ҡыйратҡанда башҡорттар күп кенә юғалтыуҙарға дусар ителә. Шул уҡ йылдың ноябрендә полк генерал-майор Булатов корпусында Чичагов армияһы составында көрәшә. Батыр казактарҙың береһе Ихсан Әүбәкеров полк яҫауылы дәрәжәһенә лайыҡ була. Таһир менән бергә ут-һыуҙарҙы кисеп, Булат Иҫәнғужин да 22 йәшендә яҫауыл дәрәжәһенә эйә булып, Яугилдегә әйләнеп ҡайталар.

Шулай итеп, ауылыбыҙға дүрт яугир ҡайта, ә күпмеһе һуғышта ҡорбан булыуын, уларҙың исемдәрен, наградаларын әлегә асыҡлап булманы. Яҫауыл дәрәжәһен айырыуса батырлыҡтар күрһәткән казактарға ғына биреүҙәре билдәле. Тимәк, Таһир Ғәбитов менән Булат Иҫәнғужиндың наградалары олораҡ та, күберәк тә булған, тик 1816 йылғы иҫәптә улар хаҡында хәбәр ителмәгән. 1834 йылғы иҫәп алыуҙарҙан уларҙың ғүмеркәйҙәре ҡыҫҡа булыуы асыҡланды. Һуғыштан һаулыҡтары насарайып ҡайтыпмы, Таһир Ғәбитов – 34, Булат Иҫәнғужин 37 йәшендә генә, икешәр малай ҡалдырып, яҡты донъя менән хушлашҡан.

**Кәрим БУЛАТ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

---

# Диалектһыҙ әҫәр – нағышһыҙ келәм

Яҙыусы теле – халыҡтың һөйләү теле, урындағы диалект менән тығыҙ бәйләнештә. Шулай булһа, был әҫәрҙе тағы ла уҡымлыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ итә. Фәҡәт халыҡ ижады менән йәнле һөйләү телен яҡшы белгәндә, уларҙы ижад процесында дөрөҫ файҙаланғанда ғына һәйбәт әҫәрҙәр яҙырға мөмкин. Гөлнур Яҡупова – башҡорт прозаһының традицияларын тоғро дауам итеп, халҡыбыҙ рухиәтен уҡыусыға йәнле һөйләү теле аша, көньяҡ диалекттың урта һөйләшен файҙаланып еткереүсе шағирә, прозаик.

Әҙибәнең күләмле проза әҫәре – «Ҡатындар» трилогияһы китап булып донъя күрҙе. Әҙәбиәт һөйөүселәр был ваҡиғаны шатланып ҡабул итте: мауыҡтырғыс сюжет,

телмәр маһирлығы, тарих, мөхәббәт күперҙәре, тотош донъя менән бәйле тәрән фәлсәфә менән һуғарылған был романдар. Автор был әҫәрендә лә үҙенә тоғро ҡала: башҡорт теленең лексик байлығын, уның фразеологик берәмектәрен һәм мәҡәлдәрен уңышлы файҙалана, туған телебеҙҙең һүрәтләү, тасуирлау саралары менән оҫта эш итә. Бынан тыш, ул әҫәрҙә профессиональ һәм көнкүреш терминдарын, иҫкергән һәм тарихи һүҙҙәрҙе, бик күп топонимик атамаларҙы – ер-һыу исемдәрен осратабыҙ. Шуныһы ла мөһим: әҙибә ғәрәп, фарсы, рус һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе лә киң һәм оҫта ҡуллана.

Трилогия менән танышҡан саҡта төп героиня Нурияның, игеҙәктәр Камил менән Камиланың, әсәһе-өләсәләренең, дуҫтары-ауылдаштарының телмәрендә урта һөйләшкә (бигерәк тә еҙем һөйләшсәһенә ҡағылышлы) актив ҡулланылған бик күп диалект һүҙҙәрҙе осратырға мөмкин. Уларҙы өс төркөмгә бүлеп ҡарайыҡ.

1. Вариант диалектизмдар – семантик яҡтан айырылмаған, әммә әҙәби телдәге һүҙҙәрҙән өн үҙенсәлеге, морфологик ҡоролошо йәки ялғауҙарҙағы өндәре яғынан айырылған өндәр инә: ысвикла – сөгөлдөр, анта – унда, мынта – бында, тиеп – тип, щуңа – шуға, ҡайҙы саҡ – ҡай саҡ, инте – инде, көпә-көптөҙ – көпә-көндөҙ, дүрәк – иҫәр (дурак), мина – бына, типтер – тиептер, апҡайта – алып ҡайта, әйбәт – һәйбәт, ҡыҙый – ҡыҙыҡай, малатса – молодцы, сәртләүек – сәтләүек, үрҙәк – өйрәк, барник – парник, йәмкә – йәмғә, көтөи – көсөк, ҡайҙы – саҡ-саҡта – ҡай саҡ.

2. Лексик диалектизмдар – башҡорт әҙәби теленең һүҙҙәре менән сағыштырғанда, бөтөнләй башҡа сығанаҡлы һүҙҙәр: мөстән - урам буйында күп йөрөргә яратыусы кеше; ивет ә-күпселек һөрауҙарҙа, диалогтар аҙағында раҫлау өсөн ҡулланыла; кәбәркә-келәт; бәс-темпераментлыҡ: аптырау, ҡыуаныу, ярһып әйтеү – ҡыҫҡаһы, эмоцияларҙы белдерә; әтпәкәһе-сере: мыҙыҡараҡ – яйыраҡ, һүлпәнерәк; силсәүит - ауыл биләмәһе башлығы (сельсовет); бәләсник – бәлә һалырға яратыусы кеше; буйтым – күп; шарҡылдай – юҡтан ғына ҡыҙыҡ табып көлөргә яратыусы кеше; елгүтән – елдәй еңел ҡуҙғалып уйламайыраҡ һөйләүсе.

3. Семантик диалектизмдар – әҙәби телдә бер мәғәнәлә, һөйләштәрҙә икенсе мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәр: итә – уйлай, елле – шәп, апа – апай, абый – ағай, баҡа – тәлмәрйен, тая һалдым – ҡаса һалдым, йәме – ярайны, йүнләп – яҡшылап, сүмес – ижау, ҡойо – ҡоҙоҡ, инәй – әсәй.

«Әлегә һәр төбәк укыусыһына ла аңлашылып торған диалекттарҙы мин диалогтарҙа ҡулланам, әҙәби телгә көсләп таҡмайым, әммә шул диалект биҙәктәре онотолоп төшөп ҡалып бөтһә, телмәребеҙ ярлы, төҫө уңған, барсаһыҙ балаҫҡа оҡшап ҡаласаҡ, туранан-тура руссанан тәржемә ителгән һымаҡ һөйләмдәр менән эш итеүсе яҙыусылар әҙме ни?!» – ти Гөлнур Яҡупова. Ысынлап та, әҫәр менән танышҡан саҡта әҙибә геройҙарҙың телмәренә һүҙ аралаш ҡына ҡыҫтырып ебәрмәй, ә ошо диалогтар араһында беҙ ерле һөйләштең телмәренә ҡағылышлы һүҙҙәрҙе әйткән саҡта уға билдәләмә рәүешендә лә асыҡлыҡ индереп китә.

Заман менән бер ҡатар барған телебеҙ үҫеүен дауам итһә – халҡыбыҙҙың һөйләү теле лә үҫер, тағы ла ныҡыраҡ байыр, халыҡ телендә уҡыусы күңеленә яҡын булған әҫәрҙәр ҙә яҙылыр. Милләт, тел үлмәй, юғалмай икән, халыҡ теле, йәнле һөйләү теле лә йәшәй, сөнки халыҡ телмәре – әҙәби телде байытыусы сығанаҡ. Ә халыҡтың йәнле телмәре менән аралашмаған әҙәби тел үҙенең үҫеш һәләтлеген, сағыу буяуҙарын, моңон юғалта. Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар»ы башҡорт әҙәби теленең «ҡатып» ҡалмауына, артабанғы үҫешенә, һутын, утын, йәнлелеген юғатмауына баһалап бөткөһөҙ өлөш индерҙе, тип уйлайым.

**Рәзинә ҒӘЙНЕТДИНОВА,**
**Красноусол башҡорт**
**гимназияһы китапханасыһы.**

***

Редакция Ғәббәсова Юза Исхаҡ ҡыҙынан хат алды. Унда автор БДУ профессоры Зәйтүнә Шәрипованың журналыбыҙҙың 2012 йылдың 10-сы һанында баҫылған «Мәғрифәт усағының нуры» исемле мәҡәләһе менән ентекле танышыуын, Стәрлебаш мәҙрәсәһенең данлыҡлы мөҙәристәре Мөхәмәтхарис һәм Мөхәмәтшакир Туҡаевтарҙың эшмәкәрлеге шаҡтай тулы яҡтыртылыуы менән ҡәнәғәтлеген белдерә. Үҙ сиратында ул Мөхәмәтшакир Туҡаев ҡыҙҙарының совет осорондағы яҙмышына ҡағылышлы кесе туғандарының береһе (Ләйлә Солтанова) матбуғатҡа еткергән ҡайһы бер мәғлүмәттәргә аныҡлыҡ индермәксе. Мәҫәлән, Әминә Шакир ҡыҙы, ирен ҡулға алғандан һуң, бер нисә көндән иреккә сығарыла һәм артабан үҙ яҙмышы менән йәшәй, тип яҙа Ю. Ғәббәсова.

Хөкөм эштәре теркәлгән архив документтарынан күренеүенсә, (ә уларға ышанмаҫҡа мөмкинме?!) Мөхәмәтшакир Туҡаевтың ҡыҙҙары Хөршиҙә лә, Әминә лә мәрхәмәтһеҙ 58-се статьяның 12 пункты буйынса хөкөм ителеп, һөргөнгә ебәрелгәндәр. *(Муллашева Амина Шакировна, 1902 г.р., место рождения: с. Стерлибашево, Стерлибашевский р-н, БАССР, башкирка, б/п, неграмотная, домохозяйка, арестована 25.07.38 г., сослана по ст 58-12 на 2 года, реабилитирована 18.09.89 г. «Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан», том. 3.– Уфа, 2001, с.571.)*

Беҙҙеңсә, Ләйлә Солтанованың оҙаҡ ваҡыт өләсәһе, инәйҙәре менән күҙәтеү һәм шул арҡала ҡурҡыу атмосфераһында көн итеүҙәре хаҡындағы хәтирәләре ышандыра. Бындай аяуһыҙ сәйәси тотҡонлоҡтан имен ҡайтҡан меңдәрсә кешенең хәтирәләрен һаҡлай тарих. Был юҫыҡта йәмәғәтселеккә яҡшы мәғлүм Һәҙиә Дәүләтшина, Мөхәмәтша Буранғолов, Суфиян Сабитов (Әбүс) һәм башҡа шәхестәрҙең лагерҙан һуңғы көнитмештәрен иҫкә төшөрөү ҙә етә.

Документта аныҡ күрһәтелгән: Әминә Шакир ҡыҙы Муллашева рәсми рәүештә дәүләт органдары тарафынан тик 1989 йылда аҡлана, тимәк, күҙәтеү-фәлән тулыһынса туҡталылып, шунда ғына уға гражданлыҡ хоҡуҡтары ҡайтарыла.

Ә бына М.Туҡаевтың төпсөк ҡыҙы Хәлимәнең яҙмышы ундай һынауға дусар булмай. Был хаҡта журналда баҫылған «лагерҙан ҡайтҡас» тигән мәғлүмәт, бәхеткә күрә, дөрөҫлөккә тап килмәй. Хәлимә, эйе, хат авторының ҡыҙы Юза Ғәббәсова менән Көйөргәҙе районында, 1953 йылдан вафатына тиклем Стәрлетамаҡ ҡалаһында туғандары менән аралашып, һәүетемсә ғүмер кисергән.

Юза Ғәббәсова үҙенең хатында йәнә Дәүләтшиндар нәҫеле хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр яҙып ебәргән. Уныңса, Үзбәкстанда төпләнгән Дәүләтшиндар нәҡ Мөхәмәтхарис Биктимеровтың улы Ғөбәйҙулланан таралған ейән-ейәнсәрҙәр булып сыға. Ошо нәҫелдән таралһалар, улар Туҡаевтар булырға тейеш (ни өсөн Дәүләтшин фамилияһында йөрөйҙәр? Был да эҙләнеүҙәр, асыҡлыҡ талап итә).

Хат авторына шәхсән хәтирәләре, айырыуса олатаһы Мөхәмәтшакир Туҡаевтың Петербургтан ҡайтҡас вафатына тиклемге биографик факттарҙы барлап, белгәненсә уртаҡлашыуын теләр инек.

Ғөмүмән, данлы шәхестәребеҙ хаҡында «Ағиҙел» баҫҡан материалдарҙың күптәрҙе битараф ҡалдырмауы – яҡшы күренеш.

**«Ағиҙел» редакцияһы.**

## «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2013 ЙЫЛҒЫ ЛАУРЕАТТАРЫ



**Тимер**
**ЙОСОПОВ –**
*«Эй, ғүмерҙәр!..»*
*шиғырҙар шәлкеме*
*өсөн (№5)*



**Ғәлим**
**ХИСАМОВ –**
*«Өн һәм һан»*
*роман-фаразы өсөн*
*(№8-9)*



**Нурия**
**КИЛМӨХӘМӘТОВА –**
*«Минең ҡәҙерлеләрем...»*
*иҫтәлектәре өсөн*
*(№10-11)*



**Гөлназ**
**ҠОТОЕВА –**
*«Күңел биҙмәй*
*яҡты яҙҙарҙан...»*
*шиғырҙар шәлкеме*
*өсөн (№3)*



**Зәки ӘЛИБАЕВ –**
*«Камиллыҡҡа*
*табан» (№8),*
*«Ҡырҡтытау*
*йәшмәләренең*
*балҡышы» тәнҡит*
*мәҡәләһе өсөн*
*(№12)*

# «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2013 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ


*Баш мөхәррир һүҙе*

**Әминев Әмир.** Туҡһанға аяҡ баҫҡанда... ....................................................1

● СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Миңә Париждан алып ҡайт... Хикәйә. ..................3

**Алдырханова Әлнисә.** Ҡойон. Повесть. ..................................................12

**Алсынбаев Нияз.** Ил сигендә йәшәгән ҡарттың аты юғалды... Хикәйә. ........1

**Бикмөхәмәтова Сәүиә.** Сәфәртуй яланы. Хикәйә. ......................................1

**Ғиләжев Мансаф.** Ҡәнзәфәр таштары. Роман. ..........................................5-6

**Ғиниәтуллин Талха.** Колчак алтыны. Повесть. ..........................................9

**Даянова Тәскирә.** Фәрештәм минең. Хикәйә. ..........................................1

**Ильясов Спартак.** Сөкәк. Хикәйә. .3

**Кәримова Рәйсә.** Етем. Хикәйә. ......6

**Камил Фазлый.** Ел осорған ауыл. Сатирик повесть. ...........................8

**Ҡадирова Зифа.** Һағынырһың – мин булмам. Повесть. ..........................2 – 4

**Ноғманов Иҙрис.** Сыбай ҡашҡа. Повесть-ҡисса. ..............................10

**Нурғәлиев Ишғәли.** Ҡарабаш турғай. Яҙмышнамә. ......................................7

**Сабитова Рәйлә.** Артыҡбикә. Повесть-монолог. .................................................4-5

**Хисамов Ғәлим.** Өн һәм һан. Роман-фараз. ................................................8-9

**Хужин Мәхмут.** Яттар мөһөрө. Хикәйә. ....................................................1

**Һөйөндөков Хәлил.** Ҡыҙғансыҡ. Хикәйә. ....................................................2

**Әминев Әмир.** Һуңлаған бүләк. Повесть. ..................................................10

**Әхмәтйәнова Мәүлиҙә.** Аяҡһыҙ ҡартҡа аҡ эшләпә. Хикәйә. ......................12

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай.** Эстафета. Хикәйә. ....................................................3

● ШИҒРИӘТ

**Бикбаев Рауил.** Граждандарҙы ҡабул итеү көнө. Поэма. ...............................8

**Бикбаев Рауил.** Минең быуын. Шиғырҙар. ..........................................12

**Ғафуров Марсель.** Әсәй. Шиғырҙар. ............................................5

**Ғаязов Әлфис.** Сәсрәтке хәсрәте. Поэма. ....................................................9

**Ғөбәйҙуллина Фәрзәнә.** Төркиәлә шиғриәт байрамдары. .............................5

**Ғәлимова Римма.** Бәхет төҫө. Шиғырҙар. ............................................7

**Ғәләүетдинов Сәрүәр.** Ҡайнай тормош. Шиғырҙар. ................................8

**Дәүләтбирҙина Тәнзилә.** Комарово ижад йортонда. Шиғырҙар. ...........11

**Зөфәр Вәлит.** Йәнгә өндәшеү. Шиғырҙар. ............................................6

**Закиров Мөхәммәт.** Балыҡ. Шиғырҙар. ............................................9

**Илбаев Мөхәммәт.** Яу һалдатына хат. Шиғырҙар. ............................................8

**Йосопов Тимер.** Эй, ғүмерҙәр!.. Шиғырҙар. ............................................5

**Күзбәков Фәнил.** Өҫтә – күк, аҫта – даръя... Шиғырҙар. ............................1

**Ҡарамышева Таңһылыу.** Ҡарыһүҙ серҙәре. Дастан. ...................................3

**Ҡотоева Гөлназ.** «Күңел биҙмәй яҡты яҙҙарҙан...» Шиғырҙар. ......................3

**Мөҙәрисова Хәлисә.** Кем булһаң да. Шиғырҙар. ............................................4

**Мифтахов Риф.** Беҙ – һуғыш балалары. Шиғырҙар. ....................................1

**Мәхмүт Һибәт.** Сағыу балҡыш йәки актер. Шиғырҙар. .............................12

**Рамай Ҡаһир.** Урмансылар. Шиғырҙар. ............................................4

**Рауил Шаммас.** «Көнөм нурһыҙ, йырһыҙ булмаҫ...» Шиғырҙар. ................2

**Рәмил Йәнбәк.** Төнгө уйҙар. Шиғырҙар. ............................................6

**Суфияров Фәрит.** Тыуған ерҙә. Шиғырҙар. ..........................................10

**Тамара Искәндәриә.** Шишмәләр тынған мәлдә... Ш и ғ ы р ҙ а р . ......................1
**Таһирова Әнисә.** Шиғриәттә мин ябай бер йырсы... Ш и ғ ы р ҙ а р . .....................3
**Фәтих Сайфран.** «Күрәҙәлек итеп булмай...» Ш и ғ ы р ҙ а р . ......................11
**Хисамова Миңлегөл.** «Ҡайһылай ҙа баҙыҡ был көҙҙәрем...» Ш и ғ ы р ҙ а р . .9
**Хәлиҙә Миһрани.** Ябай шағирә. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................5
**Хәлфетдинова Гөлнара.** Уттан бер сатҡымын. Ш и ғ ы р ҙ а р . ....................10
**Әминева Нәжибә.** Онотторалар. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................2
**Әүхәтов Ҡаһим.** Ошо ерҙән донъя башлана. Ш и ғ ы р ҙ а р . .........................6
**Әхмәҙин Әфтәх.** Иғландар. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................11
**Әхмәҙиев Риф.** Урал алды ҡайындары. Ш и ғ ы р ҙ а р . ....................................2
**Юнысова Гөлфиә.** Бер һүҙҙән. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................10
**Юлдашбаев Азамат.** «Саҡрымдарҙы һыйпап табан менән...» Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................7
**Яҡупова Гөлнур.** «...Һәм иңрәп йырланым, моң-зарлы ҡурайҙай». Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................7
**Яҡупов Сәлмән.** Мисәт. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................12

● ШИШМӘЛӘР

**Ишемғолова Ҡарлуғас.** Ҡырағай йән. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................12
**Ҡансурина Әлфидә.** Шағир-иҫәр. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................12
**Таңсулпан Рәсүл.** Өй икмәге. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................8
**Әбушахманова Зимфира.** Ҡайтыу. Шиғырҙар. ..............................................12
**Әхмәтов Фәрит.** Хоҙай ҡушҡан. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................8

● ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Нуретдинов Әсғәт.** Әсә күңеле. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................12

● ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Һүҙ һәм нур үлсәме. .......................................................8
**Гәрәева Гөлфирә.** Яңы фекерҙәр, төплө күҙәтеүҙәр емеше. .......................4
**Гәрәева Гөлфирә.** Һөйгән йәр, Тыуған ер һәм Йыһан... *(Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһына ҡарата).* .....9
**Иҡсанов Мөнир.** Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә сонет жанры. ...................1
**Ҡарлуғас Ғөбәйҙуллина, Айгөл Алтынбаева, Илһөйәр Сәлихова, Айнур Фәхретдинов.** Әҙәбиәткә – йәштәр күҙлегенән. .......................................5
**Нәҙерғолов Миңлеғәле.** Тәүарихтарҙың стиль һыҙаттары. .............................9
**Поварисов Суфиян.** Тел тигән диңгеҙ бар... *(Марат Зәйнуллиндың һайланма мәҡәләләре сығыу айҡанлы).* .....................1
**Тайсина Миңлегөл.** Башҡорт шиғриәтендә әйтеш. .........................................12
**Хужәхмәтов Айнур.** Эш күрһәткән улын ил онотмай. ....................................4
**Әлибаев Зәки.** Камиллыҡҡа табан. ...8
**Әлибаев Зәки.** Ҡырҡтытау йәшмәләренең балҡышы. ....................................12

● ПУБЛИЦИСТИКА

**Бикбаев Рауил.** Өфө-1, Өфө-2. Ш и ғ ы р . ....................................................8
**Гәрәев Рим.** Һөнәрҙе тыуған ерендә тапты. ........................................................3
**Ҡотлоғәлләмова Рима.** Акрил проекты: мул тормошмо, әллә өҫтәмә мәшәҡәттәрме? ..................................................7
**Мәжитов Нияз.** Яйыҡтар – башҡорт халҡының иң боронғо ата-бабалары. ..8
**Наоми Вульф.** Матурлыҡ хаҡында миф. ............................................................8
**Хөсәйенов Салауат.** Егәрле публицист *(Мәхмүт Хужин ижады хаҡында).* ..........................................................................12
**Хужин Мәхмүт.** Ваҡытты эйәрләгән һыбайлы.................................................... 7
**Шәрәфетдинов Дамир.** Һаҡсыллыҡ тыйыуҙан башлана. .................................9

**Шаһманов Тәлғәт.** Көнгәккә сығыу. Тарихи-документаль очерк. ..1

● БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

*Академик Ғайса Хөсәйеновка – 85 йәш*

**Абдрафиҡова Гөлнара.** Поэтик оҫталыҡ, таһыллыҡ өлгөһө. ..........................4
**Хөсәйенова Гөлнур.** Ғ.Б. Хөсәйенов һәм башҡорт фольклористикаһы. ......4
**Күзбәков Фәнил.** Башҡорт әҙәбиәте һәм әҙәбиәт ғилеме хаҡында әңгәмә. ..4
**Хәбиров Әнғәм.** Башҡорт та ул, россиян да *(Ирек Кинйәбулатовка – 75 йәш).* .........................................................................7
**Таһирова Әнисә.** Муза ситкә тибәрмәне һине... Шиғыр. .............................7
**Шәрипова Зәйтүнә.** Ғүмер үә ғилем баҫҡыстары *(Академик Зиннур Нурғалинга – 85 йәш).* ........................................10
**Юнысова Фирҙәүес.** Фән азаматы Ил азаматтары тураһында. ..........................4

*Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевка – 75 йәш*

**Рәми Ғарипов, Ғәзим Шафиҡов, Роберт Минуллин, Әхиәр Хәкимов, Виталий Смирнов, Валерий Тургай, Валерий Ганичев. Миңниса Баһуманова. Ғайса Хөсәйенов.** Рауил Бикбаевтың ижады хаҡында фекерҙәр. ......12
**Мостай Кәрим, Тимер Йософов, Ирек Кинйәбулатов, Факиһа Туғыҙбаева, Зөфәр Вәлит, Александр Филиппов.** Шиғырҙар. ........................12

● БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Аҡкужина Фәүриә.** Даны һәм эше ҡалды *(Булат Ғафаровтың тыуыуына – 75 йыл).* ........................................................8
**Аллаярова Рәмилә.** Зәңгәр һағыш *(Ғәзим Аллаяровтың тыуыуына – 100 йыл).* ............................................................1
**Вахитов Әнүр.** Башҡортостандың беренсе халыҡ яҙыусыһы *(Зәйнәб Биишеваның тыуыуына – 105 йыл).* ....................1
**Гәрәева Фәниә.** Йылмайыуы мәңге күңелдә... *(Әмир Гәрәевтың тыуыуына – 85 йыл).* ........................................................2
**Ғиләжев Хәким.** Һәйкәл ҡуйыр инем. Шиғырҙар. ...........................................3
**Зәйнуллин Марат.** Төрки һәм башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусы *(Н. К. Дмитриевтың тыуыуына – 115 йыл).* ............................................................8
**Күзбәков Фәнил.** Яугир шағир, ҡоласлы прозаик, алыштырғыһыҙ мөхәррир *(Хәким Ғиләжевтың тыуыуына – 90 йыл).* ............................................................3
**Күзбәков Фәнил.** Мөхәмәтша Буранғолов драматургияһында милли фәлсәфә *(М. Буранғоловтың тыуыуына 125 йыл тулыуға ҡарата).* .............................12
**Ҡотоева Гөлназ.** Аяныслы ғүмер *(Дауыт Юлтыйҙың тыуыуына – 120 йыл).* ............................................................4
**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Йылдарҙа ҡалған йырҙар *(Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуыуына – 95 йыл.)* ..........................................9
**Лоҡманов Ғаян.** Шатлыҡ. Хикәйә. .6
**Мәхмүтов Әхмәт.** Ҡыҫҡа жанр оҫтаһы *(Шакир Насировтың тыуыуына – 100 йыл).* ....................................................3
**Мәхмүтов Әхмәт.** Тәүге роман авторы *(Ғәйнан Хәйриҙең тыуыуына – 110 йыл).* ............................................................6
**Мәхмүтов Әхмәт.** Юмор һәм сатира оҫтаһы *(Зөлфәр Хисматуллиндың тыуыуына – 90 йыл).* .....................................7
**Мостай Кәрим, Рафаэль Сафин, Әхиәр Хәким.** Шағир хаҡында замандаштары *(Муса Ғәлиҙең тыуыуына – 90 йыл).* ..........................................................10
**Нәҙерғолов Миңлеғәли.** Тәүгеләрҙең береһе *(прозаик Закир Һаҙиҙың тыуыуына – 150 йыл).* ..........................................3
**Поварисов Суфиян.** Йософ һәм Зөләйха мөхәббәте *(Ҡол Ғәлиҙең «Киссаи Йософ» поэмаһы донъя күреүгә – 800 йыл).* ............................................................8
**Рәмил Йәнбәк.** Юғары рухлы әҙип *(Әнүәр Бикчәнтәевтың тыуыуына – 100 йыл).* ..........................................................10
**Хажиев Ризван.** Индәрендә ине ил хәстәре *(Партия һәм дәүләттең күренекле эшмәкәре Фәйзрахман Загафурановтың тыуыуына – 100 йыл).* Очерк. ..10

**Чанышева Фәниә.** Бергә йәшәлгән йылдар... *(Ғилемдар Рамазановтың тыуыуына – 90 йыл).* .......................................6
**Әлибаев Зәки.** Тыуған ергә тоғролоҡ *(Ғаян Лоҡмановтың тыуыуына – 90 йыл).* ...........................................................6
**Әминев Әмир.** Дуҫымды юҡһыныу *(Юрий Андриановтың тыуыуына – 60 йыл).* ............................................................2

● КӨНДӘЛЕКТӘР

**Бикбаев Рауил.** Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер... .......................................1–4

● ЗАМАН ҮӘ ЗАМАНДАШТАР

**Барлыбаев Хәлил.** Яҙмыш – һикәлтәле юл. ........................................................6–7
**Иҙелбаев Мирас.** Төрки донъяһының рухи Мәккәһе. ..........................................7
**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Китапҡа бағышланған ғүмер. ................................6
**Сәхәүетдинов Венер.** Мәғрифәтсе. Һүрәтләмәләр. ..........................................1

● РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Абдрафиҡов Хөрмәтулла.** Ҡырмыҫҡалы районының ҡайһы бер ауылдары тарихынан. ...........................................9
**Сафин Фидаил.** Аҡ һынлы алыптар нисек балыҡсы булып киткән? ............2

● РУХИ ХАЗИНАЛАР

**Ғиззәтуллина Рәшиҙә**. Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә. .......................................................8

● РЕСПУБЛИКАНЫҢ ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫ

**Ғәйнуллина Таңһылыу.** Бармағыңа аң килһә, һөнәреңә дан килер. ............2

● ТЕРЕ ХӘТЕР

**Килмөхәмәтова Нурия.** «Минең ҡәҙерлеләрем...» Иҫтәлектәр. ......10-11
**Күскилдин Дамир.** Икеләтә «ышанысһыҙ» батша армияһы офицеры һәм большевик. ........................................2
**Ҡасҡынова Гөлнур.** «Түгелеп илап ҡалдым...» ..................................................5

● ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Иҙрисов Булат.** Атамаларға тарих һыйынған. .................................................2

● ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Мағжан Йомабайулы.** Алыҫтағы бауырыма. Шиғырҙар. ..........................4
**Маҡатаев Муҡағәле.** Ай-һай, ғүмер! Шиғырҙар. ..........................................9
**Абдурашитова Аминат.** Хыял-фарман. Шиғырҙар. ................................11
**Ахмедов Магомед.** Мәғрур тауҙарҙан бағып донъяға... .....................................11
**Ахмедов Магомед**. Сик. Шиғырҙар. ......................................11
**Арбен Кардаш.** «Тәгәрмәстәр юлға хужа булған...» Шиғырҙар. ............11
**Кюребекова Сувайнат.** «Белгәндәрҙең ҡараштары һүнгән...» Шиғырҙар. ..........................................11
**Ҡолонсаҡова Бикә.** «Йәшерен генә һөйҙөм һине...» Шиғырҙар. ..........11
**Мусаева Айлин.** «Таланған һәм язаланған ватан...» Шиғырҙар. ...........11
**Залму Батирова.** «Ҡайҙан һиндә боҙҙай был һалҡынлыҡ?!»; **Әнүәр Аджиев.** «Ҡар»; **Умараги Салихова.** «Бирмә, Аллаһ, ҡарҙай һалҡын уйҙы...»; **Әнүәрбәк Ҡултаев.** «Үткән ғүмер». Шиғырҙар. ..........................................11
**Шахмарданов Шахвалед**. Һалдат әсәһе. Новелла. .......................................11
**Сәлихов Әхәт.** «Ни күрһәм дә – Алаш өсөн күргәнем, Миңә бәхет – халҡым өсөн үлгәнем!» ..........................................4

● САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Вафин Мөнир.** Пародиялар. ........4
**Нәҙерғолова Рәйлә.** Юморескалар. .............................................................9
**Соколов Леонид**. Ҡыҫҡа хикәйәләр. .............................................................7

● СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Шишкин Евгений.** Ғәйепләме ни мин? Драма. ..........................................5

● ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Наил Ғәйетбай.** Өҙөк-йолҡоҡ хәтирәләр. ..........................................11-12

● ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Ғатауллина Сәлиә.** Һин китәһең, мин ҡалам... Хикәйә. .....................................7

● ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Вахитов Ришат.** Яҙҙар етһә... Шиғырҙар. ..............................................7
**Венер Фәттәх.** Тәҙрә төбөндә ярангөл. Шиғырҙар. 9
**Кәримов Мәүлит.** Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ! Шиғырҙар. ..........................7
**Мөғлифә Үтәшева.** Хыялдарым минең; **Гөлкәй Исмәғилова.** Изге ер; **Зөһрә Сафина.** Аҡ нур. Шиғырҙар. ...3
**Нуретдинов Әхмәт.** Китмәйем. Шиғырҙар. ..............................................7
**Чанышева Асия**. Именлектәр һиңә, Илем! Шиғырҙар. ................................9

● ДОНЪЯ ӘҘӘБИӘТЕ ҮРНӘКТӘРЕ

**Ҡарасауғлан.** Мин гүзәлгә гүзәл тимәм. Шиғырҙар. ...................................8
**Сәлихов Әхәт.** Ҡарасауғлан – төрөктәрҙең Ҡарас сәсәне. ................................8

● ИМАН НУРЫ

**Бикәнәсова Рәмзиә.** Иман иле – Мәккә бишегенә асып индем донъя ишеген... ...............................................................9

ЕВРАЗИЯСЫЛЫҠ:
һаҡларға һәм яҡларға!
*Рәсәй яҙыусылар берлегенең күсмә пленумында*
**Бикбаев Рауил.** Камиллыҡ ҡатарына кергән яҡшы! ...........................................11
**Тойғонов Риф.** Иңдәрҙә – тарихи бурыс. .............................................................11

*«Агиҙел»гә – 90 йыл*

**Кинйәбулатов Ирек.** Һулар һауа, эсәр һыу һымаҡ. Шиғыр. ...........................3
Нәфис әҙәбиәт: Хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
**Күзбәков Фәнил.** «Әҙәп», «әҙәбиәт» – бер тамырҙан *(Мәрйәм Бураҡаева, Ғәлим Хисамов менән әңгәмә).* .............................1
**Күзбәков Фәнил.** Талант талаптан ҡурҡамы? *(Әмир Әминев һәм Зәки Әлибаев менән әңгәмә).* ....................................2
**Күзбәков Фәнил.** Алдынғы әҙәбиәт – йәмғиәттәге ҡараштар сағылышы. .....3
**Ибраһимова Һөйөклө.** Ҡағыҙға туймаç ине атайым... ....................................1

*«Агиҙел» ҡунағы*

**Күзбәков Фәнил.** Яңы осорҙа уҡыу-уҡытыу, милли тәрбиә, нәфис әҙәбиәт *(Мәрйәм Бураҡаева менән әңгәмә).* ........11
**Хәбир Дауытов, Вәли Байморатов**. Киләсәкте яҡшыға юрайыҡ! *(Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Ф. М. Мусин менән әңгәмә).* ...................................12

*2013 – Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы*

**Хужин Мәхмүт.** Миһырбанһыҙлыҡ. ...........................................................................4

*Бөйөк Еңеүгә – 68 йыл!*

**Вахитов Фәрит.** Снайпер. ....................5
**Мағазов Азат.** Кешелек үҙен үҙе һаҡлаһын! ........................................................5
**Сабирйәнов Марсель.** Бирешмәнек. ........................................................................5
**Хисмәтова Гөлсөм.** «Батырҙарҙың да батыры». .....................................................5

● «АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

1, 4, 5, 8, 9, 10, 12

● ЖУРНАЛДЫҢ 2013 ЙЫЛҒЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

12

● «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2013 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

12

● ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9, 10, 11, 12

## Халыҡ шағирын хөрмәтләү

Ф. Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле залында Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Тимер Йосоповтың 75 йәшенә арналған кисәлә халыҡ шағирын республика етәкселеге исеменән Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, шағирә Й. Ильясова, Мәғариф министры Ә. Ғаязов, Мәҙәниәт министры урынбаҫары Р. Алтынбаев, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Р. Тойғонов, З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте директоры И. Йәндәүләтов, ҡәләмдәштәре И. Кинйәбулатов, Ә. Әминев, Ф. Күзбәков, Әхмәр Үтәбай, Р. Камал, БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Л. Сәмситова, яҡташтары ихлас ҡотланы. Программа ҡотлауҙар, билдәле артистарҙың, студенттарҙың йыр-бейеүҙәре менән аралашып барҙы.

## Моряктар ҙа ҡотланы

Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала И. Кинйәбулатов ижадына арналған әҙәби-музыкаль кисә үтте. Унда шағирҙың ҡәләмдәштәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, сәхнә оҫталары, студенттар ҡатнашты.

Яҙыусылар идараһы рәйесе Р. Тойғонов шағирҙың ижады, уның барлыҡ әҙәби сараларҙа әүҙем ҡатнашыуы һәм тормоштоң уртаһында ҡайнап йәшәүе хаҡында һөйләһә, халыҡ шағиры Ҡ. Аралбай И. Кинйәбулатов шиғриәтенең төп үҙенсәлектәренә туҡталды.

Башҡортостан Хөкүмәте вәкиле Р. Вахитова, Өфө хакимиәтенең бүлек етәксеһе, шағирә Зөлфиә Ханнанова, Башҡортостан Диңгеҙселәр йыйылышы рәйесе Юлай Моратов, уның башҡарма комитеты рәйесе А. Кареев, матбуғат сәркәтибе Р. Иҡсанов, БДУ профессоры Т. Килмөхәмәтов, БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Луиза Сәмситова, «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррире Н. Сәлимов, «Ҡыҙыл таң» гәзитенең баш мөхәррире Ф. Фәтхетдинов, Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы урынбаҫары И. Ғәлиәхмәтова, Өфөләге «Ҡырмыҫҡалы яҡташтар ойошмаһы» рәйесе Ф. Ҡоҙаҡаев, «Китап» нәшриәтенең баш мөхәррире З. Ҡарабаева һәм башҡалар шағирҙы ихлас тәбрикләне.

Әхмәт Сөләймәнов, Рәшит Шәкүр, Әнисә Таһирова, Таңсулпан Ғарипова, Гөлфиә Юнысова, Мирас Иҙелбаев, Гөлнур Яҡупова, Тамара Искәндәриә, Зөһрә Ҡотлогилдина, Зарина Бағышаева, Гөлназ Хәсәнова һәм башҡалар ихлас һүҙҙәрен әйтте.

Сәхнә оҫталары С. Ильясова, Г. Ишҡыуатова, Ф. Нәзирова, С. Ҡучаева шағир әҫәрҙәрендә яҙылған йырҙар башҡарҙы. Кисәне китапхананың милли әҙәбиәт һәм Тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире А. Буранғолова алып барҙы.

* * *

Милли әҙәбиәт музейы төрлө сараларҙы, нигеҙҙә, Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында уҙғара. Бында С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатовтың төрлө вуздар студенттары менән осрашыуы үтте.

Милли әҙәбиәт музейы директоры Г. Сабитова кисәне асып, шағирҙың ижады, уҡыусыларҙың уның менән осрашыуҙарға теләп килеүен һөйләне. Мәғарифты үҫтереү институты доценты Ф. Саңъяров яҡташының поэзияһына байҡау яһаны.

Йәшерәк быуын ҡәләмдәштәре – Г. Ситдиҡова, Т. Дәүләтбирҙина, Л. Ҡәйепова, БДУ студенты Г. Хәсәнова И. Кинйәбулатов шиғриәте хаҡында фекерҙәре менән уртаҡлашты, уға арнауҙарын уҡыны.

Мәләүездән килгән «Аманат» фольклор ансамбле етәксеһе Г. Ҡаразбаева һәм шағирҙың моряк дуҫы Ф. Яманаев кисәгә айырыуса йәм өҫтәп ебәрҙе.

Ирек Кинйәбулатов бөгөнгө шиғриәт хаҡында һөйләп, төрлө осорҙа яҙылған шиғырҙарын уҡыны, автографтар таратты.

## Йәнырыҫта байрам

Ишембай районының Йәнырыҫ ауылы мәҙәниәт һарайында Ҡыяуыҡ ауылында тыуып үҫкән шағирә, «Аҡбуҙат» журналының баш мөхәррире Тамара Искәндәриәнең ижад кисәһе үтте.

Шағирәнең байрамына С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатов, БДУ профессоры, яҙыусы Тимерғәле Килмөхәмәтов, шағирҙар Хисмәтулла Юлдашев, Гүзәл Ғәлиева, Башҡортостандың халыҡ артисы, бейеүсе Зөлфиә Ҡудашева, йырсы Искәндәр Ғәзизов саҡырылғайны. Өфө ҡунаҡтары, шағирәнең яҡташтары, ошо мәктәп уҡытыусылары һәм студенттары ҡатнашлығында ижад кисәһе тулҡынландырғыс та, фәһемле лә булды.

Район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Айбулат Ҡотошов, Йәнырыҫ ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Камил Зәйнуллин, уҡытыусылар Мәрйәм Усманова, Зилә Гужова, Зәкәриә һәм Ғәлиә Шаһиәхмәтовтар, Әсмә Яппарова, ауыл мәҙәниәт йорто хужабикәһе Сабира Ғайсина, класташтары Искәндәриәнең ижадын ҙурлап йылы һүҙҙәрен еткерҙе.

## Нисә йәштәһең, комиссар?

Әнүәр Бикчәнтәевтың исеме нисәмә быуын әҙәбиәт һөйөүселәргә яҡшы таныш. Яҙыусылар йортонда фронтовик әҙиптең тыуыуына 100 йыл тулыу ихлас билдәләнде: идара рәйесе Р. Тойғонов, уның урынбаҫары Ф. Ғөбәйҙуллина, БДПУ-нан профессор Р. Әмиров, доцент Г. Нәбиуллина, күренекле шағирҙар М. Кәримов, Ф. Чанышева, И. Кинйәбулатов, драматург Н. Ғәйетбай, прозаиктар М. Садиҡова, С. Шәрипов иҫтәлектәре менән уртаҡлашһа, сараны Р. Минәхмәтов йыр һәм флейта моңо менән биҙәне.

## Сәрмәндә, Ағиҙел ярында

Белорет районының Сермән ауыл китапханаһында (директоры Зилә Фәхрисламова) фронтовик-яҙыусы Зөлфәр Хисмәтуллиндың (1923 – 1983) 90 йыллыҡ юбилейы уҙҙы. Күргәҙмәләр эшләне, концерт күрһәтелде, иҫтәлектәр тыңланды. Китапханасылар, уҡытыусылар, хеҙмәт ветерандары, Өфө вәкилдәре – Яҙыусылар идараһы рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, шағир Радик Хәкимйән, БДУ профессоры, яҙыусы Мирас Иҙелбаев, прозаиктар Сабир Шәрипов, Айгиз Баймөхәмәтов, мәрхүм сатирик-фельетонистың ҡыҙҙары һәм ҡәрҙәштәре илһамлы сығыш яһаны.

## Талант ғүмере – ике

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының орган залында 36 йәшендә генә яҡты донъяны ҡалдырған шағир, билдәле журналист, ҡурайсы һәм көрәшсе Ғәли Ильясовтың яҙмышына арналған (тыуыуына 75 йыл) хәтер кисәһе уҙҙы. Сараның сценарий авторы ла, алып барыусыһы ла – Башҡортостандың атҡаҙанған артискаһы, шағирҙың ҡыҙы – Сәйҙә Ильясова. Шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Фәнил Күзбәков, Мәрйәм Күсмәева, прозаик Хәбир Дауытов, билдәле артистар, замандаштары, туғандары үҙ хәтирәләре менән уртаҡлашты. Шағирҙың ҡатыны Шәрифә апай кисәне ойоштороусыларға оло рәхмәтен белдерҙе.